# Ағиҙел

Өфө,
май
2012

5(1069)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Ҡамилә ДӘҮЛӘТОВА
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары),*
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире),*
Ноғман МУСИН,
Риф ТОЙҒОНОВ,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире),*

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип),*
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире),*
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир),*
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),*
Гүзәлиә Тутаева, Рүзилә Саптарова *(корректорҙар),*
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Хәзиева *(компьютерҙа йыйыусылар),*
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе),*
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар).*

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 2.05. 2012. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70x100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 580 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0069.12.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel-rb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**©«Ағиҙел», 2012 (5,1069)**

# БЫЛ ҺАНДА:

ШИҒРИӘТ

**Рауил Бикбаев.** Үҙем генә беләм. Ш и ғ ы р ҙ а р. ..............................5
**Рауил Шаммас**. Аҡыл, тиһең... Ш и ғ ы р ҙ а р. ................................14
**Әлфиә Әсәҙуллина.** Хәтер күпере. П о э м а. ..................................22

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Әмир Әминев.** Йондоҙ сәскә. П о в е с т ь. .......................................46
**Спартак Ильясов.** Тәҡдир. Х и к ә й ә. ............................................78
**Риф Мифтахов.** "Утын ҡырҡтым өс ағас..."
Х и к ә й ә - х ә т и р ә. ..........................................................................92

*Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ойошторолоуға – 80 йыл*

**Миңлеғәли Нәҙерғолов.** Үткәндәрҙе байҡап, киләсәкте уйлап. ....95
**Фәнүзә Нәҙершина.** Ҡаһарманлыҡ йылъяҙмаһы. .......................100
**Гөлнур Хөсәйенова.** Башҡорт халыҡ ижадында
ҡатын-ҡыҙ матурлығы. ..................................................................106
**Фәнирә Ғайсина.** Халыҡ хәтерендә – Хыҙыр-Ильяс. ....................109
**Гөлнар Юлдыбаева.** Ырымбур башҡорттарының
рухи хазиналары. ..........................................................................115

*Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуыуына – 80 йыл*

**Гөлнара Хәлфетдинова.** Тереһыу. Ш и ғ ы р ...............................122
Ф о т о - х ә т е р ................................................................................123

ШИШМӘЛӘР

**Сәлмән Яҡупов.** Һыҙланыу. Ш и ғ ы р ҙ а р. ................................124
**Кәрим Булат.** Аҫыл минуттар. Ш и ғ ы р ҙ а р. .............................127
**Фәнир Малбаев.** Тальян моңо. Ш и ғ ы р ҙ а р. ............................129

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Әнғәм Хәбиров.** Донъя – нағыш, ә күңелдә – һағыш...
*(Мәүлит Ямалетдиндың һуңғы йылдарҙағы шиғриәтенә бер ҡараш).* ..........................................................................................131

ИМАН НУРЫ

**Шәһәр Шәриф.** Ғасыр сәғәҙәт йәки Бәхетле быуат. .....................141

ЗАМАН ҮӘ ЗАМАНДАШТАР

**Хәбир Дауытов.** Туҡһанда ла һалдат. О ч е р к. ..........................169

ПУБЛИЦИСТИКА

**Хәлил Хамматов.** Салауат батыр – халыҡ хәтерендә. ..................176

МУЗЕЙҘАР – МӘҘӘНИӘТЕБЕҘ КӨҘГӨҺӨ

**Фәнис Янышев.** Милләттең ҡаһарман улы. ................................185

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

## В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПОЭЗИЯ

**Р. Бикбаев, Равиль Шаммас, А. Асадуллина.** *Стихи.*

ПРОЗА

**С. Ильясов**. Судьбина. *Рассказ.*
**А. Аминев.** Упавшая звезда. *Повесть.*
**Р. Мифтахов.** «Порубил я три дерева...» *Рассказ-воспоминание.*

*80 лет со дня образования Института истории, языка и литературы*

**М. Надергулов.** Оглянись назад и думай о будущем.
**Ф. Надршина.** Летопись героизма.
**Г. Хусаинова.** Женская красота в башкирском народном творчестве.
**Ф. Гайсина.** Хызыр-Ильяс в памяти народной.
**Г. Юлдыбаева.** Духовные сокровища оренбургских башкир.

*80 лет со дня рождения народного поэта Башкортостана Р.Гарипова.*

**Г. Хальфитдинова**. Живая вода. *Стихотворение.*
Фото-летопись.

РОДНИКИ

**С. Якупов, Карим Булат, Ф. Малбаев.** *Стихи.*

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**А.Хабиров**. С тоской на сердце
*(о поэзии последних лет Маулита Ямалетдинова).*

СВЕТ ВЕРЫ

**Шахар Шариф.** Благодатный век.

СОВРЕМЕННОСТЬ И СОВРЕМЕННИКИ

**Х.Даутов.** И в девяносто — солдат!

ПУБЛИЦИСТИКА

**Х. Хамматов.** Народная молва о Салавате.

МУЗЕИ — ЗЕРКАЛО КУЛЬТУРЫ

**Ф. Янышев.** Славный сын народа.

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА...

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәскә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



Рауил
БИКБАЕВ

# ҮҘЕМ ГЕНӘ БЕЛӘМ

## *Шәһит билбауы*

*Әллә зомби, әллә сая йәндәр*
*Шартлатҡанда шәһит билбауын,*
*Ғәйепһеҙгә ҡупме ғүмер өҙөлә,*
*Тик туҡтатмай мөртәт был яуын.*

*Ҡупме гонаһһыҙҙар һәләк була,*
*Ҡырып һала усле был ҡомар.*
*Эй дәһшәтле илдәр!*
*Үҙегеҙгә*
*Итмәйһегеҙ ниңә иғтибар?*

*Ярыш бара,*
*Ҡем ҡулында куберәк*
*Хәтәрҙәрҙән хәтәр ҡоралдар.*
*Был емерткес дәһшәт Ер шарына*
*Шәһит билбауындай уралған.*

*Шәһит билбауындай уралғанын*
*Ваҡыттыр бит ҡуптән төшөнөү.*
*Шартлатҡысҡа алдан кем баҫһа ла,*
*Һәләк булыр бөтә кешелек.*

---

*Рауил Бикбаев (1938) — Башҡортостандың халыҡ шағиры, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай депутаты, комитет рәйесе.*

## *Йәннәттә шағир йәне*

**I**

*Аһ, Внуково!*
*Һиндә тағы*
*Тилмереп көн үтә бит.*
*Көтә беҙҙе балҡар дуҫтар,*
*Ҡайсын ағай көтә бит.*

*Ҡотормаһын юлды бикләп,*
*Был дауылдар зыҡ ҡубып.*
*Зарыҡтырҙы ла,*
*Ниһайәт, —*
*Осорҙо Внуково!*

*Ҡыуанғандыр Ҡайсын рухы:*
*— Көтһәгеҙ ҙә, остоғоҙ!*
*Үрһәтмәһен беҙгә, дуҫтар,*
*Ул үргәндең остоғон.*

*Нисәмә йылдар ҡайтырға*
*Көткән Ҡайсын Ҡулиев.*
*Иле бар ҙа — картала юҡ,*
*Ҡайтыр ине — юлы юҡ.*

*Уҙғандар хәтергә килһә,*
*Шөкөр, имен ил үҫе.*
*Шағирҙың тыуған йыллығы*
*Ҡунаҡтар йыйған бөгөн.*

**II**

*Был байрамда шатлыҡ менән*
*Һағыш бергә эркелә.*
*Ҡайсын ағай!*
*Ғазаптарың*
*Күҙ алдарыма килә.*

*Йәлләдтәр ҙә йәлләр икән —*
*Яза таба белгәндәр:*
*Халҡыңды һөргөнгә һөрөп,*
*Һиңә ирек биргәндәр.*

*Балҡарҙар көн күрмәгәндә*
*Ҡарайһың нисек көнгә?*

*Ирektән баш тартып,*
*Шағир*
*Үҙен һөргән һөргөнгә.*

*Ҡайсын ағай!*
*Ят яҡтарҙа*
*Әйтер һүҙең сыныҡты.*
*Көн килде,*
*Киң донъяларға*
*Һин балҡып килеп сыҡтың.*

***III***

*Ҡәҙерләргә һин өйрәттең*
*Һәр иртәне, һәр кисте.*
*Уйлаған уйың — аҡыллы,*
*Йөрәгең — ихлас хисле.*
*Яралы таш һыҙланыуы*
*Бәғерҙәреңде киҫте.*
*Үҙең дә, һүҙең дә булды*
*Хәстәрле, зирәк, ябай.*
*Әлдә бөгөнгө хурлыҡты*
*Күрмәнең, Ҡайсын ағай.*

*Уҡ ҡына түгел, туп атҡас,*
*Ватан-йортҡа ут ҡапҡас,*
*Нисә йыл таштар яралы,*
*Яралы тотош Кавказ.*

***IV***

*Шағирҙың тыуҡһан йыллығы*
*Ғүмерҙә ҡалыр иҫтә.*
*Ҡайсындай аҫыл шәхестәр*
*Милләткә ғүмер өҫтәр.*

*Ҡайсындар барҙа — балҡар бар,*
*Ҡайсын бар — балҡар барҙа.*
*Үткем килде сабый Ҡайсын*
*Йүгергән һуҡмаҡтарҙан.*

*Тик унда үткәрмәнеләр,*
*Чегемға юлдар бикле.*
*Унда енәйәт-фажиғә,*
*Хәбәрҙәр килә шикле.*

### V

*Заманында Мостай ағай*
*Был яҡтарға баш эйгән.*
*Бүлешкәндән ут, дуҫлыҡ, йыр*
*Тик арта ғына, тигән.*

*Бөгөн яуыздар тормошто*
*Ҡара упҡынға тарта.*
*Дуҫлыҡ ҡаҡшай. Йыр өҙөлә.*
*Илде ялмап, ут арта.*

*Әлдә бөгөнгө хурлыҡты*
*Күрмәнең, Ҡайсын ағай.*
*Йәннәттәлер йәнең,*
*Унда*
*Тынғылар таба алмай,*
*Яналыр.*
*Ожмахтай илде*
*Тамуҡ итмәк йәлләдтәр.*
*Шундай саҡта шағир йәне*
*Нисек ҡалһын йәннәттә?*

*Ҡалһа ла,*
*Хайран ожмахтың*
*Тапмайҙыр тәмен, йәмен.*
*Тамуҡ ғазабын күрәлер*
*Йәннәттә шағир йәне.*

***

Ельциндың 80 йыллығына
Екатеринбургта һәйкәл астылар

*Ватанды юҡ итеүсегә*
*Һәйкәлдәр асҡан саҡта,*
*Намыҫ тип лаф ороусылар*
*Намыҫтан ҡасҡан саҡта,*

*Ялған өҫкә ҡалҡҡан саҡта,*
*Дөрөҫлөк аҫта саҡта,*
*Теләнсе тоҡсайын Рәсәй*
*Иңенә аҫҡан саҡта,*

*Тулышҡанда хафа, асыу,*
*Халыҡ сарсап, ил сатнап,*

*Тотонмаҫ тимә кешеләр,*
*Түҙем бөтөп, бысаҡҡа.*

***

*Төньяҡ океан боҙҙары кәрәкмәй,*
*Бейәләй хәтле генә боҙ ҙа етә*
*Тайып йығылыр, шаңғыр, һыныр өсөн.*

*Ҡылмаһаң да тауҙай гонаһтарҙы,*
*Ҡайсаҡ етә кескәй генә хата,*
*Яҙмыш ярылыр, йорт ҡыйралыр өсөн.*

***

*Ирек — тик хыял!*
*Юлдарым*
*Уңдан, һулдан ҡамалған.*
*Төшөп ҡара рельстарҙан,*
*Сығып ҡара каналдан.*

*Ҡамап алған ҡағиҙәләр,*
*Барыбер юлымды быуып.*
*Гиҙһәң ине даръяларҙы*
*Һис юғында тик бер көнгә*
*Ишкәкһеҙ кәмә булып.*

***

*Үҙемде мин бәхетлерәк тоям,*
*Кеше бәхетенә шатланһам.*
*Һоҡланғанда кеше һаулығына,*
*Үҙемдең дә һаулыҡ артҡандай.*

***

*Ҡайғырма һин, ҡайғым арта, тиеп,*
*Күрер ҡайғылар ҙа кәмей бара.*
*Бер һүҙ әйттем.*
*Тағы бер һүҙ яҙҙым.*
*Әйтер һүҙҙәр, яҙыр юлдар кәмей,*
*Иң һуңғы һүҙ*
*Әйтер саҡта ғына өҙөлөп ҡала.*

***

*Донъялағы иң урманлы илдә*
*Урмандарға инер юл ҡалмай.*
*Янғындарҙа бөйөк Рәсәй сәсәй,*
*Башҡорт урмандарын ут ялмай.*

*Үҙ еренә халыҡ хужа түгел,*
*Ҡанундарҙан кәртә ҡорғандар.*
*Бер ҡарауһыҙ ҡалып,*
*Ғәрлегенән*
*Яна микән әллә урмандар?*

***

*Йылдың иң йәмле миҙгеле*
*Башлана йәмһеҙлектән:*
*Ҡешеләр ҡыш буйы ғәмһеҙ*
*Тау-тау сүп-сарҙы түккән.*

*Эй наҙлы ел, эй яҙғы ел,*
*Тетә бысраҡ ҡарҙарҙы.*
*Ҡарҙар иреғәс, ҡаланың*
*Асыла сүп-сарҙары.*

*Ярай был алама эште*
*Миҙгел тора йәшереп.*
*Ҡышын ҡарҙар күмеп китә.*
*Йәйен ҡаплай йәшеллек.*

*Эй наҙлы ел!*
*Яҙ һулышын*
*Донъяға бөркөр мәлдә,*
*Өйөрөлтөп сүп-сарҙарҙы,*
*Ҡешеләрҙең биттәренә*
*Бәрәһең,*
*Белһен бәндә!*

***

*Үрелеп өҙәм һуңғы сейәләрҙе,*
*Баҡсам йәйҙең һуңғы мәленә.*
*Сейә һуты һеңә устарыма,*
*Ҡояш нуры һарыла йәнемә.*

*Быйылғы йәй*
*Йән бигерәк ғәзиз булды,*
*Алҡымымдан әжәл алғас та...*
*Татып өлгөр, типме, һуңғы тәмде,*
*Һуңғы тәлгәш баҙлай ағаста.*

*Насип итһә, яҙҙар яңынан балҡыр,*
*Ҡүпереп сәскә атыр сейәләр.*
*Һиңә илтер юлым ғына урау,*
*Һиңә илтер юлдар сейәлгән...*

***

*Күңелем тулышҡан һағышҡа,*
*Һағыныуҙар өҙә үҙәгемде.*
*Һағышымды бүлешергә ҡурҡам,*
*Кешеләргә әйтмәй түҙәм инде.*

*Бүлешер ҙә инем һағышымды*
*Һинең менән, йәнем, һинең менән.*
*Тик һин үҙең — мөлдөрәмә һағыш,*
*Хәлдәреңде үҙем генә беләм.*

***

*Хәтеремә яңынан ябырылды,*
*Ялғанды ла безгә һарылды*
*Һыныҡтары һуңғы йәйғорҙарҙың,*
*Һулыштары һуңғы дауылдың.*

*Тыйылғандар сыҡты азатлыҡҡа,*
*Ырғытты ла өҙөп тышауын.*
*Ҡыйралғандар терелеп бөтөн булды,*
*Беленмәй ҙә йөйө, ҡоршауы.*

*Бәхетлерәк беҙҙән булмаҫ ине,*
*Йөрәгемде хәүеф телмәһә,*
*Ваҡытлыса ғына ҡоршалғандың*
*Яңынан ҡыйралырын белмәһәм.*

***

*Белә-белгәндәрҙән ҡабатланыр,*
*Ни ҡалһа ла, ҡылыҡ һаҡланыр:*
*Тапланыр ҙа бәндә аҡланыр,*
*Эреләнгән булып ваҡланыр.*

***

*Һиңә көндәш булыр тыуһа тыуыр,*
*Һиңә тиңдәш булыр тыумаған.*
*Һин битеңде йыуған шишмәләрҙең*
*Һыуы менән битен йыумаған.*

***

*Һандуғас үҙ телен онотҡанмы*
*Ҡышҡа китеп әллә ҡайҙарға?*
*Моңо сыға әле бик ҡыйыуһыҙ —*
*Өйрәнәме яңынан һайрарға?*

***

*Ысыҡ — төндөң күҙ йәштәре,*
*Таңда һөртөп өлгөрмәй.*

***

*Был донъяға, был бинаға*
*Индек төрлө ишектәрҙән.*
*Тик сыҡҡанда сығып китә*
*Бер ишектән һәммә бәндә.*

***

*Шиғыр — сихыр.*
*Ҡотолормон, тимә,*
*Арбауынан, ғазап-наҙынан.*
*Тиҙерәк баҫылһын тип яҙылмай ул,*
*Йөрәк баҫылһын тип яҙыла.*

***

*Әрәм булған*
*Ниндәй кәрәкле һүҙ!*
*Яҙылмаған ҡат-ҡат һайлап, һынап.*
*Урыны уның был шиғырҙа түгел,*
*Тора ҡоро ерҙә баҫма һымаҡ.*

*Был донъяла барыһы ҡотло түгел,*
*Ябырыла хата-бәләләре.*
*Бигерәк арта бәлә,*
*Урынһыҙға*
*Урын биләгәндә бәндәләре.*

***

*Илһам ҡошом хәҙер шундай хәлдә —*
*Көтмәгәндә ҡанат ҡаҡмаҫлыҡ.*
*Уй ҙа, аҡыл да бар,*
*Етмәй бары*
*Бер ҡатлы хис менән ахмаҡлыҡ.*

## *Аптыраҡ!*

*Был донъялар — аптыраҡ!*
*Бөгөн барыһы һатыла.*
*Миллион-миллион долларҙарға,*
*Миллион-миллион евроларға*
*Һатыла бит хоккейсылар,*
*Футболсылар һатыла.*

*Уҡытыусының ҡәҙере юҡ,*
*Ер һөргәндең ҡәҙере юҡ.*
*Сәкән тотҡан — ҡәҙерлерәк,*
*Туп типкән ҡыйбатыраҡ.*
*Тренерҙар һатып алына —*
*Тағы ла ҡыйбатыраҡҡа,*
*Был донъялар — аптыраҡ!*

*Ғүмергә кеше кешене*
*Һатҡан, һата, һатасаҡмы?*
*Ире ҡатынын һатасаҡмы?*
*Ҡатыны ирен һатасаҡмы?*
*Кеше һатыу баҙарында*
*Хаҡтар һаман артасаҡмы?*
*Яуап көтмә, ҡат-ҡат һорап,*
*Был донъялар — аптыраҡ!*

*Борон ҡол һатҡандар, имеш,*
*Бөтмәгән бит ул дәүер.*
*Бөтә дәүерҙәр бер төрлө —*
*Ҡол итеү, иҙеү, йәбер.*

*Аҡтарып сыҡ сал тарихын,*
*Байҡап сыҡ бар донъяһын:*
*Башҡа формациялар юҡ,*
*Йәшәй тик бер формация —*
*Ҡоллоҡ формацияһы!*

*Кеше һатыу баҙарында*
*Айырмалар шул ғына:*
*Элек ҡолдар баш күтәргән,*
*Хәҙер ҡолдар ҡол ғына.*
*Өнһөҙ, телһеҙ тик тора,*
*Был донъялар — аптыраҡ!*



**Рауил**
**ШАММАС**

## *Аҡыл, тиһең...*

*«Иң аҡыллы миндер ул», — тип уйлаһаң,*
*Тура әйтәм: һин бик аҡылһыҙ.*
*Шул фекерҙе аҡ ҡағыҙға яҙ ҙа,*
*Йөҙөң һыта биреп, ҡабат һыҙ.*

*Шул һыҙыуың менән һин аҡыллы.*
*Һатып алып булмай аҡылды.*
*«Аҡыллымын!» — тиеп күкрәк һуғып,*
*Күпме заттар ерҙә абынды.*

*Кемдең кемдән аҡыллыраҡ хәлен,*
*Әйҙә, заман үҙе һынаһын.*
*Кеше барыбер белеп бөтә алмай*
*Замананың аҡылғынаһын.*

## *Төҙәткәнгә барам...*

*Бер тарафҡа барам — ваталар.*
*Икенсеһенә киләм — төҙәтәләр.*
*Өсөнсөһөнә боролам —*
*Ватып төҙәткәнде*
*Мыйыҡ бора биреп күҙәтәләр.*

---

*Рауил Шаммас (1930) Стәрлебаш районы Хәлекәй ауылынан. Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлай. Мәктәптә, район, «Ҡыҙыл таң» гәзиттәре редакцияларында, «Китап» нәшриәтендә, Яҙыусылар союзында эшләне.*

*Тормош, тиһең...*
*Тормош шулай, тиһең...*
*Ҡайһыһын һуң миңә димләйһең?*
*Төҙәтеүе ауыр,*
*Ватыу матур түгел,*
*Күҙәтеүсе булып кил, тиһең.*

*Төҙәткәнгә барам!*
*Ауыр булһын!*
*Тирем түгел, хатта ҡан тамһын!*
*Килер быуын, бөтә нәҫел-ырыуым:*
*«Ул төҙөнө», – тиеп маҡтаһын.*

*Йәшәлде инде, күрҙек,*
*Күп ваттылар.*
*Өйҙө түгел, илде ваттылар!*
*Күҙәткәнде һәм ватҡанды түгел,*
*Төҙәтеүсене сығарып аттылар.*

*Төҙәтеүҙән ҡурҡмам,*
*Ауырлыҡтар*
*Яғаларҙан алһын.*
*Маңлай тирем генә түгел,*
*Йөрәк ҡаным тамһын.*

*Йылы, яҡты өйөм,*
*Аҡ сәскәле ерем, мөхәббәтле илем*
*Төҙөк килеш ҡалһын.*
*Тыуыр таңым исемемде*
*Ал төҫөнә манһын.*
*Илем-ерем төҙөк килеш ҡалһын,*
*Килерҙәргә ҡалһын.*

## Байрам көнөндәге уйланыу

*Һәр бер байрам йәнгә бер йәм өҫтәй –*
*Рәхәтләнеп, сиселеп ҡалаһың.*
*Оноттора һәммә ваҡлыҡтарҙы,*
*Наҙ алдата әҙәм балаһын.*

*Әммә ғүмер кисеү байрам түгел,*
*Һин эш аты – гел йөк тартаһың.*
*Һинән башҡа кем һуң тартыр ине*
*«Йәшәү» тигән тормош арбаһын?*

*Ат йылында тыуған миңә инде*
*Арба тартыу — оло мәртәбә:*
*«Ҡисәгеһе үткән, бөгөнгө — бар.*
*Һәйбәтерәк булһын иртәгә», —*

*Шул уй ҡыуа һине көнө-төнө.*
*Йәнең риза, бара бирәһең.*
*Үҙ яҙмышың, үҙ тауышың — һөйөн,*
*Башҡа күрмәҫ һинең күрәһең.*

*«Йәһәтерәк!» — тиһең, үҙ-үҙенде*
*Ашыҡтыра уйың-күңелең.*
*Барған һайын йөгөң байый бара,*
*Ауырлығы арта йөгөндөң.*

*«Йәһәтерәк! Булһын бөгөнгөнән*
*Һәйбәтерәк, — тиһең, — иртәгәм».*
*Йөгөм ауыр, тиеп, һикәлтәлә*
*Тибә генә күрмә тәртәгә.*

*Ауҙара ғына күрмә тик йөгөңдө,*
*Тигеҙ һөйрә тормош арбаһын.*
*Ҡапсыҡтағы бәхет орлоҡтары*
*Ярты юлда түгелеп ҡалмаһын.*

*Йөгөңдәге аҫыл бөртөктәрең*
*Ужым булып шытып сыҡһындар.*
*Был арбала әле һин белмәгән*
*Әллә күпме серле тылсым бар.*

*Ҡар яуһа ла, дауыл ҡоторһа ла,*
*Ҡояш ҡыҙҙырһа ла — бар ҙа бар.*
*Һинеке генә түгел, был донъяла*
*Шулай елә күпме арбалар.*

*Ә байрамдар?*
*Барыһын онотоп тороп,*
*Туҡтап ялдар итеп алыуҙыр.*
*Күңелең наҙлап, рухи аһәң биргән,*
*Йәнде йәмләр шифа-дарыуҙыр.*

## Уйҙар уйлап...

*Күкрәктәрен киреп, өҙә баҫып,*
*Ир-уҙаман атлай урам буйлап.*
*Ташҡа ултырып, уның аҙымдарын*
*Бер аҡһаҡал күҙләй, уйҙар уйлап.*

*«Минең дә бит булды шундай сағым.*
*Эй, аға ла икән ғүмер-ағым.*
*Окоп төптәренә һеңеп ҡалды,*
*Ер һуғарып ҡалды ҡайнар ҡаным.*

*Ниңә Хоҙай тигеҙ бирмәй икән*
*Был әҙәми заттың яҙмыштарын...*
*Минең дә бит булды шундай сағым.*
*Һай, ҡатмарлы ғүмер ағыштары...*

*Илем тиеп, ғәзиз ерем тиеп,*
*Йәп-йәш көйгә керҙем ут эсенә.*
*Иҫән ҡайттым. Әммә ҡартлығымда*
*Донъя һаман миңә ут эсерә.*

*Өҙә баҫыр саҡты шунда бирҙем.*
*Тороп ҡалды һыңар аяғым да.*
*Азат илем, тыуған ерем тиеп*
*Ҡайтып керҙем ҡултыҡ таяғымда.*

*Ҡүпме окопташтар — аҫыл заттар,*
*Йәп-йәш ирҙәр керҙе һалҡын гүргә.*
*Балаҡайҙар — ошо уҙамандар*
*Атлаһын, тип, ерҙә алға, үргә.*

*Нисек атлай, ана, ир-уҙаман,*
*Өҙә баҫып атлай, ер һелкетеп, —*
*Эшҡыуар ул — тырышып аҡса таҫлай,*
*Рәхәтлеккә сумып, донъя көтөп.*

*Шулар өсөн микән ҡандар түктек?!*
*Улар ултыра бөгөн тәхеттәрҙә.*
*Шул балалар микән төрөнгәндәр*
*Беҙ күрәһе оло бәхеттәргә.*

*Һәммәһенә бөгөн улар хужа, —*
*Аҡһаҡалым ҡала тик көнләшеп. —*
*Атлаһа ла моронон күккә сөйөп,*
*Ярай әле, үтә иҫәнләшеп.*

*Эй, замандар килде... Заманалар...»*
*Ир-уҙаман китте урам буйлап.*
*Ә аҡһаҡал тороп, өйөнә атлай,*
*Аҡһай-аҡһай, ауыр уйҙар уйлап.*

## Һеҙгә бирҙем күҙҙәремде

*Эй, яҡтылыҡ!
Минән китәһең дә,
Күҙ нурҙарым һүнә — ҡурҡыныс.
Йөрәгемдән килә шул саҡ ауаз:
«Хафаланма артыҡ,
Бул тыныс.*

*Күҙ нурҙарың китә.
Күңел күҙең
Һүнмәгән бит, улай борсолма.
Күңел күҙең аша кешеләргә
Яҡты өләшеп, нурлы йәшәүеңде
Тоташтыр һин ғүмер осоңа».*

*Ысын даһа, күңел күҙем бар ҙа.
Ул һүнмәгән — бара нур сәсеп.
Йәшәргә лә әле
Ерҙәштәрҙең
Һәммәһенә яҡты өләшеп.*

*Күңел күҙем менән асам әле
Киләсәктең затлы ишеген...
«Күңел күҙең әгәр һуҡыр булһа,
Маңлай күҙе ботаҡ тишеге», —*

*Халыҡ әйткән,
Ата-бабам әйткән.
Барам әле, барам көрәшеп.
Күңел күҙе һуҡыр булған заттар
Ҡарап ҡалһын, әйҙә, көнләшеп.*

*Күҙ нурҙары китә.
Ни итәһең.
Бәхетлемен ошо килеш тә.
Ат йылында тыуған был абзағыҙ
Һаман эштә әле, гел эштә.*

*Күҙҙәремде һеҙгә бирҙем, дуҫтар.
Яҡты булһын, тиеп, алдығыҙ.
Бары ла һеҙгә.
Күңел нурҙарымды
Шиғри һүҙем итеп алығыҙ.
Хыял иткән аҫыл киләсәккә
Сәләмемде алып барығыҙ!*

## *Юғалтҡастын...*

*Юғалтҡанды табып булмай –*
*Кеше белә.*
*Ә ниңә һуң үҙ-үҙенән*
*Кеше көлә?*

*Юғалтҡансы юғалтырҙы*
*Ник һаҡламай?*
*Бар сағында йәшәү энәһен*
*Ник һапламай?*

*Үҙ ғүмерен йыртыҡ хәлгә*
*Ҡалдырғансы,*
*Артындағы күперҙәрҙе*
*Яндырғансы,*

*Йыртыҡ ямар энәләрҙе*
*Һәм ептәрҙе,*
*Күперҙәрҙе тотоп торор*
*Терәүҙәрҙе*
*Ник һанламай?*

*Эше уҙғас, ауыҙ бешкәс,*
*Өрөп ҡаба.*
*Табылмаҫҡа юғалғанды*
*Кем һуң таба?*

*Тәбиғәт бит беҙгә биргән*
*Һәммәһен дә:*
*Буйын-һынын, ҡул-аяғын,*
*Күҙен-ҡашын,*
*Тибер йөрәген, тойор хисен,*
*Уйлар башын.*

*Шулар барҙа ник уйламай*
*Кеше заты?*
*Тау түбәндә, барын ватып,*
*Тулай аты.*

*Бар байлығын бар сағында*
*Ник һаҡламай?*
*Аҡыл әйткән аҡ һүҙҙәрҙе*
*Ник һанламай?*

*Күбеһенән мәхрүм ҡалғас,*
*Эш үҙғастын,*
*Йә тегеһен, йә быныһын*
*Юғалтҡастын*
*Иҫкә төшә. Ах, һуң төшә!*
*Энә-еп юҡ*
*Ямар өсөн йыртыҡтарҙы,*
*Тишектәрҙе,*
*Ҡаҙаҡ та юҡ төҙәтергә*
*Емерелгән ишектәрҙе.*

*Аңлы аңлар: иҫәнлектәр*
*Хаҡында һүҙ,*
*Хыял ғына булып ҡала*
*Күҙһеҙгә күҙ.*

*Юғалғанды табып булмай,*
*Түҙ, йәнем, түҙ.*

## Үлсәп атламаным

*Аҙымымды үлсәп атламаным.*
*Атлап йөрөр саҡта йүгерҙем.*
*Булды, булды,*
*Абынған да булды,*
*Аҡ таштарға абынып йығылдым.*

*Тағы торҙом.*
*Таштар артта ҡалды.*
*Ал офоғом алға әйҙәне,*
*Хыял иткән барлыҡ көтөрҙәрҙе*
*Ал сәскәгә илтеп бәйләне.*

*Өлкәндәргә хәйер бирә килдем,*
*Сабыйҙарға кәнфит тараттым.*
*Был донъяның аҫыл биҙәктәрен*
*Онотолоп, үлеп яраттым.*

*Абынғаныма ла үкенмәйем,*
*Донъя шулай күпкә өйрәтте.*
*Яманлыҡты тапап үтер итте,*
*Яҡшылыҡтың ҡуҙын көйрәтте.*

*Үҙем өсөн генә йәшәмәнем,*
*Ерҙәштәрем тиеп йәшәнем.*
*Был күҙҙәрем: «Һеҙҙе яраттым», — тип*
*Һуңғы нурынаса йәшләнде.*

*Ауыр һүҙҙәрҙе лә күп ишеттем,*
*Төкөрәм мин ғәйбәт һүҙенә.*
*Ысын йәшәнем, тип әйтер өсөн*
*Тыуғанмын да донъя йөҙөнә.*

*Хәҙер бына инде аҙымымды*
*Үлсәп кенә һымаҡ атлайым.*
*Ҡартлыҡ килде, яңы таштар булыр,*
*Абына күрмә, тиеп алдайым.*

*Ысын йәшәүҙең асылы нығыраҡ тойола,*
*Аҙымдарың ҡалғас үлсәүле.*
*Уйҙарың да ауырая бара,*
*Ҡулға алғас таяҡ-мисәүҙе.*

*Аҙымдарҙы үлсәп атламаным.*
*Әле бына үлсәп булашам.*
*Шуға һөйөнәм: шөкөр, әйләнә бит,*
*Әйләнә бит донъя-ҡуласам.*

## ***Иң татлыһы***

*Эй, эселде был донъяла,*
*Эселде инде барыһы:*
*Эсемлектең затлылары,*
*Шәрбәтлеһе, баллыһы.*

*Шараптары, «хараптары»,*
*Йомшағы ла ҡатыһы...*
*«Ә шулай ҙа иң татлыһы*
*Булды, — тиһең, — ҡайһыһы?»*

*Иң-иңеме?*
*Ауылымдың*
*Шишмә һыуы, билләһи.*
*Уның тәменә тиңдәр юҡтыр,*
*Ул тәм изге, илаһи.*



**Әлфиә**
**ӘСӘҘУЛЛИНА**

# ХӘТЕР КҮПЕРЕ

**ПОЭМА**

*Ҡартатайым Вәлиәхмәт Нурислам улы Әсәҙуллин 1912 йылда Ауырғазы районы Үтәймулла ауылында тыуған. Бөйөк Ватан һуғышына тиклем ауыл Советы рәйесе булып эшләгән.*

*Армияға уны аты менән бергә алғандар. Генерал Миңлеғәли Шайморатов етәкселегендәге 112-се Башҡорт атлы дивизияһының 275-се уҡсылар полкы составында яуға ингән. 1942 йылдың 5 декабрендә Сталинград яуында – Дондағы Ростов өсөн барған ҡаты алыштарҙа батырҙарса һәләк булған.*

*Тәбиғәттең шау сәскәле мәле,*
*Күңелдәргә шифа — тормош йәме,*
*Бал туғылған кеүек татлы һауа,*
*Зәңгәр күктән нур, йылылыҡ яуа,*
*Шундай илаһи яҙ.*
*Әҙәм менән*
*Тик изгелек йәнәш йөрөгәндәй.*
*Күңелдәрҙе ялғап, мәрхәмәттән*
*Яҡты йәйғор күпер түшәлгәндәй.*
*Ихласлыҡтан,*
*булмыш алсаҡлығы*

*Әлфиә Әсәҙуллина (1959) Ауырғазы районының Үтәймулла ауылынан. З. Биишева исемендәге «Китап» нәшриәтенең балалар әҙәбиәте редакцияһында эшләй. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәре. Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

*Күҙ нурҙары булып сәселгәндәй,*
*Бәлә-ҡаза, хәүеф-хәтәр күрмәй,*
*Шатлыҡ менән генә йәшәлгәндәй.*
*Күңел күтәренке, кәйефтәр шәп,*
*Йөрәк инде осар ҡоштай һымаҡ.*
*Тирә-йүнгә рәхим-шәфҡәт сәсеп,*
*Йүгергәндәй сихри шишмә йырлап.*
*Йәшәп кенә туймаҫ был донъяла*
*Булһа ожмах — булыр ошо төҫлө.*
*Күңелдәрҙе имләп, донъя иңләп,*
*Йөрәктәрҙе яулай йәшәү көсө.*
*Шундай яғымлы яҙ,*
*Еңеүле яҙ,*
*Ҡояш нуры булып йәнгә һеңә.*
*Еңеүле яҙ бүләк иткән ғүмер —*
*Киләсәкте —*
*уға,*
*һиңә,*
*миңә.*

***

*Самолет бортына ултыртты*
*егерме туристы*
*һәм осто.*
*Ҡырым.*
*Ҡара диңгеҙ*
*Тартып тора тиңһеҙ.*
*Күрмәгән ерҙәргә уй тартып,*
*Күңелдә ашҡыныу уятып.*

*Һуғыш үткән ергә юлым төштө,*
*Тетрәндергес хистәр кисерәм.*
*Вәлиәхмәт ҡартатайымды*
*һәм*
*Өләсәйемде иҫкә төшөрәм.*
*Тарих булып ҡалған үткәндәрҙә*
*Ата-бабам ғүмере —*
*шәжәрәм.*
*Мин бар булһын,*
*мин йәшәһен өсөн*
*Үҙ ғүмере менән түләгән.*

*Ҡартатай ҡарасман булған,*
*Шуға ҡушамат алған*
*Ул "Ҡара Вәли" тигән,*
*Уңғанлығын ил белгән.*
*Халҡымды зар илатып*

*Дошман килгәс ер баҫып.*
*Ҡартатай ҙа яуға сапҡан*
*Ат менеп, ҡылыс аҫып.*
*Сталинград янындағы*
*Ҡан ҡойошло һуғышта*
*Ҡартатайым һәләк булған*
*Мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ ике — ҡышта.*

*Сталинград...*
*Севастополь...*
*Тарихта —*
*Герой-ҡала.*
*Ҡаялай ҡалҡып, дошманды*
*Салҡатан иткән ҡала.*
*Севастополгә юл төштө,*
*Йөрәккәйем ярһыулы.*
*Самолет саҡрымдар еңә —*
*Уйҙарымда —*
*яу ҡыры.*

***

*Симферополь —*
*аэропортлы ҡала,*
*Беҙҙең сәфәр ары йүнәлә.*
*Автобуста тирә-йүнгә бағам;*
*Оҡшашлыҡ күп тыуған ерҙәргә.*
*Тауҙар тынған урман ҡосағында,*
*Аҡландар ҙа ҡуя осрап.*
*Тау ҡыялап елгән юлдарҙа ла*
*Ҡабыҙылған төҫлө шәмсыраҡ.*
*Магнолия сәскә атҡан икән,*
*Мин белмәгән тағы әллә ни;*
*Хуш еҫтәрҙең ҡатнаш гөлләмәһен*
*Һулай-һулай башың әйләнер.*

***

*Севастополь...*
*Һаумы!*
*Тик картанан күреп кенә белгән*
*аҡ ҡала.*
*Тарих уҡып белдем: һине һаҡлап,*
*Күпме моряк, һалдат баш һалған.*
*Тәү ҡарашҡа бер ни булмағандай,*
*Яраларың инде уңалғандай,*
*Ҡешеләр ҙә етеш тормош көтөп,*
*Йәшәп,*
*эшләп,*
*иркен һулағандай.*

*Тиңһеҙ гүзәллектең ҡосағында*
*Фирүзәләй тулҡын бәүелтеп,*
*Ҡара диңгеҙ ята, офоҡ биләп,*
*Ҡарап торам бына иҫ китеп.*
*Ҡара диңгеҙ,*
*исемкәйең “ҡара”,*
*Үҙең бер ҙә ҡара түгелһең.*
*Үтә күренмәле зәңгәр һыуың*
*Булып китә ҡай саҡ күгелйем.*
*Тәүге тәьҫораттар, ят мөхиттең*
*Сағыу күренеше уй биләй.*
*Диңгеҙ һыйған тәрән сөңгөлдәргә,*
*Минең кисереште ул белмәй.*

*Һуғыш үткән ергә тәүгә килдем,*
*Йөрөмәйем эҙләп мәрәкә.*
*Севастополь...*
*Ҡанлы яра*
*әрнеүҙәре йәндә,*
*Һыҙланыуҙар ҡалды йөрәктә.*
*Ете ҡалҡыулыҡҡа һибелешеп,*
*Йорттар үҫкән, урам һуҙылған.*
*“Ҡара йылға” һыуы гәлсәрҙәй саф.*
*“Теге саҡта ҡыҙыл ҡан булған, —*
*тип һөйләй гид.—*
*Һауанан да,*
*диңгеҙ,*
*ҡоро ерҙән —*
*Һәр тарафтан ҡамай дошмандар.*
*Сат йәбешеп,*
*совет һалдаттары*
*Ҡәүҙә менән ерҙе ҡосҡандар”.*
*Аһ! Тыңлауы ла ауыр!*
*Ә һуғышта —*
*бомба!*
*Снаряд!*
*Ҡан!*
*Үлем...*
*Ер һиллеген һаҡлар,*
*Быуындарҙы быуындарға ялғар,*
*имләр өсөн*
*Өҙөлгән бит һанһыҙ күп ғүмер.*

*Беҙҙең өсөн йылға ҡандар аҡҡан.*
*Беҙҙең өсөн миллион йән ҡыйылған.*

*Ата-баба рухы күҙәткәндәй,*
*Һынап торғандай ҙа тойола.*
*Атҡан таңдар алһыулығы өсөн,*
*Тыныс булһын өсөн ил көн-төнө,*
*Ҡаты алыштарҙа ялҡын йотоп,*
*Ҡолға ҡалған улар ғүмере.*
*Йылдар ҡатламында ҡала бара*
*Һуғыш шаңдауҙары,тарихта.*
*Булмай уны йыл саңынан әрсеп,*
*Булмай инде унда барып та.*
*Тик йөрәктә йәшәй хәтирәләр,*
*Утлы усаҡ —*
*күңел уй-ғәме.*
*Юлым төшөп диңгеҙ ярҙарына*
*Уның яңырыуын белһәмме!?*

*Форсат сығып бында килгәнемә,*
*Шөкөр итәм күпте белгәнгә.*
*Тере хәтерҙәрҙә, иҫтәлектә*
*Йәшәй бары шәһит үлгәндәр.*

***

*Һуғыш барған һымаҡ күҙ алдында;*
*Үлемесле алыш — янымда.*

*Севастополь...*
*Һынһыҙ һөлдә кеүек,*
*Янған,*
*емерелгән*
*бина-хараба.*
*Һуғыш йөҙөн фашлап, туристарға,*
*Ҡалдырғандар һүтмәй, ҡарарға.*
*Быялаһыҙ, рамһыҙ тәҙрәләре*
*Шәһиттәрҙең баш һөйәгендәге*
*Күҙҙәр соҡоролай өңрәйгән.*
*Кешелекте ҡурсап һәләкәттән,*
*ул киҫәтә,*
*Өнһөҙ әйтә, гүйә,*
*Хәтирәләр һөйләй — ни күрһәм.*

***

*Сеү!*
*Ҡара янған диуар эргәһендә*
*ниндәй ауаз сыға,*
*Кемдер ярҙам һорай,*
*бик ауырмы уға?*
*Радар һымаҡ, ҡолаҡ ауаз аулай.*
*Зиһен аңлай, барлай...*

“Туҡта!
Ниндәй тауыш?!
Үҙе ғәзиз,
таныш.
Аңым аңҡы-тиңке,
Ғажизмын бер килке...
Таныш тауыш
Ҡан тамыры буйлап
Булмышымды биләй,
Аң-зиһенде яулай,
Уны рухым аңлай.
Был бит юҡҡа түгел!
Иләҫ-миләҫ күңел,
Йөрәк лебер-лебер,
Күҙҙәр йәшкә мөлдөр...
Туҡта!
Ҡартатайым!
Һинең тауышыңды
Ишетмәһәм дә бер,
Айырам,
аңлайым”.
Был “алтынсы
тойғо” һиҙеүеме,
Йөрәктеңме
танып тибеүе?
Ҡартатайым тауышы
яңғырамай.
Аңға һеңә бары,
рухым аңлай.
“Нихәл, ҡыҙым,
Ейәнсәрем минең,
Юлдар үтеп оҙон,
Килереңде һиҙеп,
Белгәйнем.
Мин бит илдә
Тыныс булһын өсөн
Алтмыш туғыҙ йыл элек үлгәйнем.
Дошман башын ҡыйып,
Юлдар ярҙым,
Тик еңеүгә өмөт бағлап барҙым...”

Осрашыуға күпме
Хыялланып,
Өнһөҙ ҡалдым,
Тыным быуылды...

“Ҡартатайым!..
Нисек аңлатайым

*Әрнең тулы*
*хыял-уйымды.*
*Ҡартатайым,*
*хәҙер ҡҙем*
*Өләсәй ҙә булдым.*
*Ейәнсәргә быйыл*
*Бер йәш тулды.*
*Буденовка кейеп төшкән фотоң*
*Тора һәр саҡ өйҙөң түрендә,*
*Шунда ҡарап һине таныным да*
*Йөрөттөм гел генә күңелдә.*
*Утыҙ йәштә генә*
*Баш һалғанһың,*
*Ҡартатайым,*
*Һуғышҡа йәш китеп.*
*Минең атай тик ун йәштә булған,*
*Ул-ҡыҙҙарың барыһы биш бөртөк".*

*Күҙҙәремдән йәштәр тәгәрәй,*
*Ҡартатайым рухы эргәлә.*
*"Атлаһаң — барырһың,*
*Туҡтаһаң — ҡалырһың,*
*Ейәнсәрем-ҡыҙым,*
*Үтер юлың оҙон,*
*Бар, атла, бар,*
*Һине көтә юлдар".*

*Уйҙарым ауыр,*
*Аяҡтар — ҡамыр.*
*Әмәлем дә юҡ*
*Хатта тын алыр.*

*Бында хәтирәләр быуып ала,*
*Үҙең һуғыш тынын тойоп ҡара...*

*Һуғыш барған һымаҡ*
*күҙ алдында;*
*Үлемесле алыш — янымда.*

*Панорама...*
*Диорама...*
*Йөрәктәге тәрән яра;*
*Әйтерһең дә, әле һуғыш бара.*
*Тра-та-та-та, тра-та-та,*
*Пулемет ата-ата,*
*Бомба күктән яуа,*
*Дер һелкенә һауа,*

*Снаряд ярыла,*
*Ауа һалдат,*
*Ғәзиз ерҙе устарына ҡармап*
*Шыуышып та ҡарай,*
*Тик ҡуҙғала алмай,*
*Күҙҙәргә ҡан һауа,*
*Тынды ҡура һауа,*
*Урғыла ҡан, ана,*
*Янда — утлы даръя.*
*Һүнеп барған аңда*
*Һуңғы тапҡыр балҡый,*
*Тыуған ер,*
*йорт,*
*атай-әсәй,*
*Улы,*
*ҡыҙы,*
*ҡатын...*
*Һауа етмәй уға,*
*Тартыша ла... тына.*

*Шартлауҙарҙан ҡолаҡ тона.*

*“Ҡартатай!*
*Әллә был һинме?!” —*
*Ҡысҡырам, өн сыҡмай.*
*Хистәр ташҡынына убылдым да*
*Көскә генә ҡалдым тонсоҡмай.*
*Ағас,*
*таштар янған,*
*Тимер ирегән утлы өйөрмәлә,*
*Һалдат еңгән,*
*Һалдат аҡылы,*
*ҡулы,*
*Ут ҡоршауын*
*Үҙ ғүмерен биреп*
*өҙгән.*

*Һуғыш барған һымаҡ күҙ алдында;*
*Үлемесле алыш — янымда.*

*Анау автоматтың уты*
*Көйҙөрөп алды йөрәгемде...*

*Йә, мин хәҙер кем инде?!*
*Ҡапшайым тәнемде,*
*Алмағанмы йәнде?!*
*Шыбыр тиргә баттым.*

*Тирә-йүнем —*
*ялҡын,*
*ялҡын...*
*Аңҡы-тиңке аңым.*

*...Яйлап ҡына ҡайттым донъялыҡҡа.*
*Бына — туристар,*
*Бына — гид.*
*Ул һаман да тынмай*
*Һөйләй бит.*
*Теремен, шөкөр,*
*Именмен бит!*

*Гид ҙур һандар әйтә:*
*Фәләнсә һалдат,*
*Төгәнсә ҡорал, снаряд...*

*Барып етмәй аңға...*
*Ҡартатайым тағы янда!*
*Арҡанан да ҡаҡмай, йыуатмай,*
*Үҙе һаман ҡурсай һәм һаҡлай*
*Кеүек тойола миңә...*

*Ҡартатайым!*
*Нисек тип атайым,*
*Зиһенемә һыймай хис-тойғом;*
*Берсә минең тын илағым килә,*
*Берсә килә шашҡым-ҡоторғом.*

*Күңелемә һис тынғылыҡ бирмәй*
*Өйкәп тора күптән бер һорау:*
*“Ҡартатайым*
*Һәләк булған Донда,*
*Ә рухы бында ҡаңғыра?”*
*Уйҙарымды уҡый,*
*хисте аңлай,*
*Ҡартатайым рухы —*
*әүлиә.*
*Зиһенемә уның әйткәндәре*
*Һеңә генә бара әле лә:*
*“Кәүҙә күмелһә лә,*
*Шәһиттәрҙең рухтары иңләй*
*Ҡанға батырылған ерҙәрҙе.*
*Кесаҙнала ҡайтып тыуған нигеҙҙәге өйгә лә,*
*Ултырамын ағас сөйҙә лә,*
*Күренмәйем бары күҙҙәргә.*
*Тереләрҙе ҡурсалағым килә*

*Уйланмай ҡылынған ҡылыҡтан,*
*Башбаштаҡ, хаяһыҙ холоҡтан,*
*Ут сәсер көбәктәр төбәшеп,*
*Ҡойҙортоп ҡан-һыу һәм күҙ йәше*
*Тоҡаныр ҡуймаһын һуғыш тип,*
*Тыйып ҡысҡырһам да*
*Сыҡмай тауышым.*
*Ҡорал тотҡандарға*
*Етмәй көсөм,*
*ҡанмай үсем...”*
*Ҡартатай рухы янымда*
*Тыңлаған,*
*аңлаған сағында,*
*Тиҙерәк әйтәйем әйтерҙе,*
*Теркәп зиһендә хәтерҙе:*

*“Ҡартатайым,*
*Өләсәйем һине*
*Ҡырҡ бер йыл көттө,*
*көттө,*
*көттө...*
*Өҙмәй өмөттө.*
*Ейән-ейәнсәргә, йәғни беҙгә*
*Ғүмер йомғағын һүтте:*

*“Тотанаҡһыҙ замандарҙа*
*Донъя һәр саҡ боларҙы.*
*Бала саҡ һәм йәшлегебеҙ*
*Хәүефтәргә сорналды.*
*Уйлы булдыҡ,*
*Ғәмле булдыҡ,*
*Бала саҡты күрмәнек.*
*Ҡыҙылдарҙан, аҡтарҙан да*
*Боҫоп ҡалдыҡ бер мәлде.*
*Егет саҡтан,*
*Ҡара Вәли,*
*Һеҙҙең ҡартатайығыҙ,*
*Етеҙ,*
*таҫыл,*
*өлгөр булды,*
*Йәне ине тынғыһыҙ.*
*Мәҙрәсәлә белем эстәп,*
*Ете синыф бөтөрҙө.*
*Белемле меңде йыға, ти,*
*Күп нәмәгә өлгөрҙө.*
*Күҙ өҫтөндә ине ҡаш,*
*Уй-фекерле ине баш.*

Тәүгеләрҙән булып керҙе,
Колхозлашыу башланғас.
Атаһы, ике ағаһы тағы уға эйәрҙе:
Аттарын, кәрәк-ярағын —
Барыһын колхозға бирҙе.

Ҡыҙҙар йөрәген яндырыр
Ҡарасман Ҡара Вәли
Күңелен яулап алырлыҡ
Булырға кәрәк әле.
Эстән генә уфтандым,
Йөрәккәйем ут янды.
Минең уйымды белгәндәй,
Ул да миңә күҙ һалды.
Бер нисә осраштыҡ,
Бер-беребеҙгә һүҙ ҡуштыҡ,
Ҡулъяулыҡ, балдаҡ бирештек —
Шул булды беҙҙең дуҫлыҡ.
Яусы ебәреп һоратты,
Ҡайным —
          мулла никах уҡығас,
Шул кистә алды-ҡайтты.
Юҡлыҡ дәүере булһа ла,
Күңел киң булған өсөн,
Мунсалай ғына өйҙә лә
Һыялды күпме кеше.
Кейем ни юҫыҡ ҡына,
Ашарға ла самалы.
Өҙөп-йолҡоп, тартып-һуҙып
Йәшәлһә лә саҡ әле.
Кешеләрҙең күңелдәре
Туп-тулы мәрхәмәткә.
Хәйер һорап инеүсегә
Арта һыныҡ икмәк тә.
Йомартлыҡтан,
Шәфҡәтлектән
Йөрәктәр —
               мөлдөрәмә.
Күңелдәр йылыһы етә
Йорт-ерһеҙ етемдәргә.

***

Туған-ырыу, күрше-күлән,
Күҙ алышып, һөт-аҡ бүлеп,
Бер-береһенә йомош биреп,
Хәл-әхүәл белде кереп.

*Башҡа сыҡтыҡ.*
*Ҡайным-ҡәйнәм*
*Йорт-ҡураны хәстәрләште*
*Заманына күрә һәйбәт.*
*Һиҙелмәй ҙә йылдар үҙҙы,*
*Улдар-ҡыҙҙар тыуа торҙо.*
*Ҡартатайың рәйес булғас силсәүиттә,*
*Күп ваҡыты уҙа ине йорттан ситтә.*
*Халыҡ өсөн эшләне ул, янды-көйҙө.*
*Онотҡандай ине ҡай саҡ хатта беҙҙе.*
*Ә бер кисте шәмгә тик ут алған инек,*
*Пуля осто тәҙрәне ярып инеп.*
*Баш шаңҡыны һәммәбеҙҙең,*
*Ҡолаҡ тондо.*
*Ярай әле, барыбыҙ ҙа иҫән ҡалды.*
*Гең килешеп илаштылар балалар.*
*"Эй Хоҙайым, бәләләрҙән арала!" — тип теләнем,*
*Йөрәк кенәм ҡуҙғалып.*
*Ҡырҡ берҙә көткән ҡайғы,*
*Һыҙланыу.*
*Һынауҙарҙың ямандары көткәнде*
*Ҡайҙан ғына беләйек, ти, ул мәлде".*

*Ҡартатайым рухы рәхмәтлелер,*
*Күңелем тирбәлеше тойомлай.*
*Ейән-ейәнсәрҙәр хәтерендә*
*Тороп ҡалһын өсөн юйылмай,*
*Өләсәйем, һөйләп үткәндәрҙе,*
*Күҙҙе асҡан, рухты ныҡытҡан.*
*Ул һиҙгәндер ошо осрашыуҙы,*
*Һуғыш үткән ергә юлыҡһам.*

***

*Уйҙар байҡай йылдар теҙмәһендә*
*Асыҡ яра төҫлө хәтерҙе.*
*Ул һулҡылдай, һыҙлай*
*Йән әрнетеп,*
*Һөйләгәндәй һаман хаҡ һүҙҙе.*

*Һуғыш барған һымаҡ күҙ алдында;*
*Үлемесле алыш — янымда.*
*Севастополь ере баҫҡан һайын*
*Һаҙмыт-күтер әҙәм ҡанынан.*
*Һарҡып ҡына һуғыш шаңдауҙары*
*Уйға күсә, һеңә аңыма.*
*Булған булып ете ҡалҡыулыкты тигеҙләмәк*
*Диңгеҙ кимәлендә еткереп,*

*Эй шашынған дошман,*
*Эй ҡоторған ҡотһоҙ аждаһалай үкереп.*
*Ҡоро ерҙән,*
*һыуҙан,*
*һауанан да*
*Һөжүм барған,*
*барған утлы яу,*
*Таш онталған,*
*Металл һыуҙай аҡҡан.*
*Юҡ һис кемгә ҡотолоу,*
*Юҡ аяу.*
*Ҡеше түҙгән,*
*Тешен ҡыҫып, өҙгән*
*Дошман ҡорған утлы ҡулсаны.*
*Әле булһа баҫылмаған төҫлө*
*Һөрөм еҫе, янған ер саңы.*

*Тойоп торам:*
*Ҡартатайым рухы*
*Бер аҙым да минән һис ҡалмай.*
*Ул ҡабаттан барыһын кисерәлер төҫлө,*
*Һуғыш булған ерҙән уҙышлай.*

*Күңелемдән генә һөйләшәмен,*
*Рухтар беҙҙең һүҙһеҙ аңлаша.*
*Ысынбарлыҡ хәтер күперенә*
*Үй сылбыры аша тоташа.*

*“Өләсәйем һөйләгәндән беләм:*
*Һин Алкинда “һуғыш өйрәнеп”,*
*Башҡорт атлы дивизияһында*
*Ғәрәсәткә инеп киткәнһең.*

*Мин китаптан уҡып,*
*Кино ҡарап,*
*Йөрәгемде йомоп усыма*
*Ултырған бар.*
*Нисә миллион ҡорбан*
*Бирелгән именлек булһынға.*
*Тарихты ла ҡабат яҙмаҡталар,*
*Үҙ яйҙарын ҡарап, күҙәтеп.*
*Юҡ — был мөмкин*
*түгел!*
*Түгел!*
*Түгел!*
*Тарихты ла булмай үҙгәртеп.*
*Дошман тылында бит*
*Балалар ҙа,*

*Асыу, нәфрәт менән тулышып,*
*Атай-олатайҙар өлгөһөндә*
*Дауам иткән алыш-һуғышты.*
*Һанһыҙ башлы утлы аждаһаның*
*Һындырғанда арҡа һөйәген,*
*Өлөшө ҙур герой-пионерҙарҙың*
*Азат итеүҙә тыуған төйәген.*
*Тәрән тылда,*
*Ҡала, ауылдарҙа*
*Берҙәй көрәш барған ул саҡта,*
*Ҡартатайҙар ятҡан окоптарға*
*Өләсәйҙәр яҡҡан усаҡтар*
*Йылы биргән,*
*Һәммәһе лә аҙыҡ хәстәрләгән,*
*Ойоҡ-ойоҡбаштар бәйләгән.*
*Һанһыҙ ауырлыҡты*
*Еңеп түҙгән,*
*Еңеп ҡайтыуҙарын теләгән.*

*Ул саҡтағы ун бер йәшлек атай*
*Үгеҙ егеп көлтә ташыған*
*Ырҙын табағына.*
*Йоҡлап киткән,*
*Ауыр эштән арып, йонсоуҙан.*
*Көлтә тейәп ҡайтҡан үгеҙ-арба*
*Ихатаға кереп туҡтаған:*
*“Ҡара Вәли улы иген урлап*
*Алып ҡайтҡан!” — тип халыҡ уҡталған.*
*Ипләп ҡараһалар:*
*Бер ни белмәй малай йоҡлай*
*Көлтә өҫтөндә.*
*Ярғыланған аяҡ-ҡулҡайҙары,*
*Йыртыҡ кейем кейгән өҫтөнә.*

*Ул заманда бер ус ашлыҡ өсөн*
*Күпме башты тығып төрмәгә,*
*Халыҡ араһынан дошман эҙләп,*
*Ҡамсы болғап, тентеп йөрөмәгән*
*Кемдәр генә!*
*Ул саҡтағы ун бер йәшлек атай*
*Йоҡлағанға ҡалған ҡотолоп.*
*Өләсәйем ҡат-ҡат һөйләгәндә*
*Әрнеүҙәрен шунда ут йотоп,*
*Гел хәтерләй ине бөгөнгөләй,*
*Әйтә ине: “Булмай онотоп!”*

*Еңеү көтөп, эңер еткергәндәр —*
*Фронт өсөн эшләп бил яҙмай.*
*Еңеү көтөп*

*Иртән ҡояш ҡалҡҡан*
*Үҙ ваҡытын белеп, һуңламай.*
*«Еңеү» һүҙе йәнгә көс-дәрт өҫтәп,*
*Хәлһеҙ тәнгә ҡеүәт биргәнен*
*Өләсәйем гелән иҫләй ине,*
*Гел ҡабатлай ине доғалай.*
*“Ҡайнап торған*
*Тамуҡ-ут эсенән*
*Ҡайтһа ярар ине юғалмай”,—*
*тиеп теләүҙәрен,*
*Әрнеүҙәрен,*
*Кем үткәргән үҙе — шул аңлай.*

***

*Севастополь...*
*Һинең ереңдә мин*
*Һуғыш шаңдауҙарын ишетәм.*
*Ҡара диңгеҙ,*
*Тулҡындарын бәреп,*
*Тарих һөйләгәндәй хис итәм.*
*Диңгеҙ ярһыу.*
*Хәтирәләр уның*
*Хәтерен дә киткән болартып:*
*Иҫтәлектәр хәтәр,*
*Булмай уны*
*Тулҡын һырҙарылай*
*шымартып.*

*Фирүзәләй зәңгәр ҡара диңгеҙ*
*Тулҡындары ҡанлы ут йотҡан.*
*Дошман “эсминец”тар*
*Ҡотһоҙ үлем сәсеп,*
*“Торпедо”лар сәсеп*
*Ҡаныҡҡан.*
*Ҡоро ерҙең һәр бер мыҫҡалына*
*Ике ботлап тимер яуҙырып,*
*Эй, ашҡынған дошман үлеменә,*
*Ысын тамуҡ булған яу ҡыры.*
*Совет иле*
*Сикһеҙ киңлектәрен*
*Көнбайыштан иңләп-буйлатып,*
*Дошман килгән,*
*Ҡайҙа килгән —*
*белгән —*
*Хазиналы ергә*
*Мәкер менән ҡорған уй тартып.*
*Әсәләрҙең әсе нәфрәтенән*

*Вулкан булып тауҙар атылыр,*
*Ҡояш ҡолап төшөр, тетрәнеүҙән*
*Ҡысәренән ер ҙә ысҡыныр*
*Төҫлө ине ул саҡ.*
*Кеше йәне түҙһә*
*түҙә икән —*
*Был ғәжәп.*
*Кеше йәне йәшәү көсө таба,*
*Ҡисерһә лә тетрәп мең ғазап.*

***

*Ҡартатайым рухы*
*Сталинградтың*
*Эргәһендә барған һуғышҡа*
*Алып китә минең уйҙарымды*
*Мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ ике — ҡышҡа.*

*“Ҡавдивизия командиры*
*Шайморатов атлы ир*
*Күрше районлыҡы ине,*
*Бына, исмаһам, яугир!*
*Тауышы гөрөлдәп тора,*
*Ҡараштар — бөркөттөкө.*
*Ҡылысын болғап яу сапһа,*
*Дошмандарын өркөттө.*
*Полкыбыҙҙың командиры*
*Ине Таһир Ҡусимов.*
*Төйнәлгән йоҙроҡтайбыҙ,*
*Бал ҡортоноң күсе беҙ.*

*“Бөркөт” өм менән алындым*
*Алкиндағы “уйын” ға.*
*Дошманды дер ҡалтыратып,*
*Атылырға ҡойондай,*
*Ҡөнө-төнө өйрәттеләр*
*Йылғырлыҡ, таҫыллыҡҡа.*
*Димдә эшелонға тейәп,*
*Оҙаттылар фронтҡа.*
*Ҡырҡ икенең июлендә*
*Брянск фронтында*
*Оборона һуғыштары*
*Ҡойондорҙо утында.*
*Танкыларға ҡылыс болғап,*
*Төйөп аттың бөйөрөн,*
*Ҡыйратты Урал улдары*
*Фашистарҙың өйөрөн.*
*Ошондай ҡаһарманлыҡҡа*

*Хайран ҡалған дошмандар*
*“Ҡырағайҙар” тип башҡорттарға*
*Хатта исем ҡуштылар”.*

*Ярһыған арғымаҡтарҙың*
*Тояҡтары тупылдап,*
*Ер-Әсәнең күкрәгенән*
*Бәрҙе янған тупраҡ.*
*Иңрәп янған Ер-Әсәкәй*
*Ыңғырашты — күтәрҙе.*
*Бөркөттәй ир-егеттәрҙең*
*Ятып ҡалды күптәре.*
*Күпме өмөт, балҡый алмай,*
*Һүнеп-һүрелеп ҡалды.*
*Тыуасаҡ сабыйҙарҙың*
*Һулыштары туҡталды.*
*Илде гөл итер ҡулдарҙың*
*Сәрпәлеп иҙелгәне,*
*Һелкетеп баҫыр аяҡтың*
*Ҡан бөркөп өҙөлгәне;*
*Һоҡланып бағыр күҙҙәрҙең*
*Сәсрәп атылғаны,*
*Һүнгәне изгелек сәсер*
*Баштарҙың аҡылдары;*
*Үлемесле яралының*
*Һаташып төн сыҡҡаны,*
*Йәшәп туймаған йөрәктең*
*Һулҡылдап тонсоҡҡаны;*
*Йәшен уғылай аттарҙың*
*Тәкмәсләп йығылғаны,*
*Ҡолаҡ ярып, снарядтар*
*Һәм бомбалар ярылғаны;*
*Көндәр менән төн тоташып,*
*Иҫәптең юғалғаны;*
*Тыуған ерҙең һәр ҡарышы*
*Ҡан менән йыуылғаны—*
*Күҙ алдында һәммәһе лә*
*Ҡот осҡос кино һымаҡ*
*Ҡабатланды, дауам итте*
*Фронт юлдары йыраҡ.*

*Һанһыҙ башлы аждаһалай,*
*Ут бөркөп ауыҙынан,*
*Сталинградҡа яҫҡынып,*
*Шыуышты яуыз йылан.*
*Ағыуы сәселгән ерҙә*
*Ҡалдырманы тереклек.*

*Эсе тулы мәкер-золом,*
*Ҡылғаны — үлем, этлек.*

*“Дон далаларында — һуғыш,*
*Тотабыҙ оборона;*
*“Мессершмидт” тарҙың бомбаһы*
*Ярыла янда ғына.*
*Деев утары ҙур түгел —*
*Бер нисә генә йортло,*
*Ошо утарҙы дошмандар*
*Көн-төнөн утҡа тотто.*
*Ер менән тигеҙләнде ул,*
*Тик теҙләнмәне утар.*
*Саҡ ҡына биленде яҙһаң,*
*Дошман терелләй йотор.*
*Һәр яугир белә был хаҡта,*
*Эстән ҡабатлай антты,*
*Хужаһының уйын аңлап,*
*Эргәлә ята аты.*

*“По коням!”*
*Китте команда*
*Тәндәрҙе зымбырлатып.*
*Ашҡынып типте йөрәгем,*
*Айышһыҙ хисте татып.*
*Түш кесәмдә ғаиләмә*
*Ебәреләсәк хатым,*
*Йөрәккә көсәт биргәндәй,*
*Шунда уҡ партбилетым.*
*Урланған тыныслыҡ менән*
*Ҡыйралған илем өсөн,*
*Күкрәктә нәфрәтем ҡайнап,*
*Арта дошманға үсем.*
*Балаларымдың күҙ йәше,*
*Һағышы ҡатынымдың*
*Һыҙылып үтте зиһендән,*
*Атылып атҡа мендем.*
*Берҙәм “Ура-а-а!”*
*һәм йөҙләгән*
*Тояҡтар тупылдауы.*
*Ҡаршыла— яланды иңләп*
*Килгән фашистар яуы.*
*Күҙгә салынды Кусимов,*
*Толпары елә алдан.*
*Бышылдайым: “Бөркөт” кәйем,*
*Әйҙә,— тим, — һин дә ҡалма!”*

*Һонолоп сапҡан юртағым*
*Һыртына ята биреп*
*Елгәндә күрҙем: танкылар*
*Урмандан сыҡты килеп.*

*Дошман менән күҙгә-күҙ беҙ,*
*Дошман менән йөҙгә-йөҙ,*
*Ут ҡойонона атылып*
*Берәм-берәм инәбеҙ.*
*Ут баҕанаһы — уңда ла,*
*Ут баҕанаһы һулда.*
*Дошман баштарын ҡыйҙырып,*
*Ҡылыстар уйнай ҡулда.*
*Тирә-йүндә тамуҡ уты*
*Ҡайнай, йота, йән ҡыя.*
*Тотош ут даръяһы төҫлө*
*бар мөхит,*
*Бөтөн донъя.*
*Тәкмәсләп китә юртаҡтар,*
*Сыңъырап, кешнәй-кешнәй.*
*Бер фашисты дөмөктөрҙөм*
*Тағы сабып килешләй.*
*Шундай буталыш—*
*Баш шаңҡый:*
*Ҡайҙа дуҫ, ҡайҙа дошман?!*
*Ҡаскалы баштар ҡыйыла*
*Ҡулымдағы ҡылыстан.*
*Уйланып торор форсат юҡ —*
*Бында бары хәрәкәт.*
*Өлгөрһәң — һин үлтерәһең,*
*Өлгөрмәһәң — һәләкәт.*
*Танкылар ҙа яҡыная*
*Уттарын бөркә-бөркә,*
*Беҙҙең артиллеристар*
*Керешкәндәрме “эш” кә?*
*Минең тапҡырҙа бер “тигр”*
*Шырпы ҡабылай дөрләй.*
*Люкты асып, гитлерсылар*
*Һикерә, ана, ергә!*
*Йән аяулы.*
*Ана, улар ҡалмаҡсылар ҡотолоп!*
*“Ер көҫәп килгәнһегеҙ бит,*
*Ерҙе ҡосоп ятығыҙ!”*

*Берәм-берәм ҡыуып етеп,*
*“Татытҡанда” ҡылысты,*
*Һөрлөгөп китте “Бөркөт” өм,*

*Ә үҙем алға остом.*
*Ҡаҡ ергә “зыңҡ” итеп ҡалдым,*
*Күҙҙәрҙән ут сәселде.*
*Һөйәктәрем сәрпәлдеме,*
*Башым мәллә йәнселде?!*
*Тотош ауыртыу биләне*
*Хатта бөртөк сәсемде.*
*Осоп барған снарядтар*
*“А-а-а-т-а-а-й!” тип*
*Ҡысҡырғандай.*
*Балаларымдың тауышы*
*“Тор! Тор!” тип саҡырғандай.*
*Һөрөмлө, төтөнлө күктән*
*Ҡатыным күҙе ҡарай.*
*“Торорға, дошман ҡырырға,*
*Былай ятыу ярамай!”*
*Ҡалҡынырға теләгәйнем,*
*Ҡайҙа инде ҡуҙғалыу:*
*Бөтә тәнде ялмап алды*
*Утлы беҙҙәр ҡаҙалып.*
*Күкрәгемде өтөп алған*
*Ҡот осҡос һыҙланыуҙан*
*Аңым юйылып барғандай,*
*Ҡанға бутала туҙан.*
*Кино кадрҙары төҫлө*
*Аңда шыуыша тормош,*
*Үткәндәрем яу ҡырында*
*Ябырылғандай тотош:*
*“Тыуған яғым туғайҙары,*
*Урман, йылға-күлдәре,*
*Еңеп ҡайтып дошмандарҙы,*
*Һеҙҙе ҡабат күрмәмме?*
*Ҡолас киреп бесән сапҡан*
*Сәскәле болон-ҡырҙар,*
*Тыныс тормош тергеҙелгәс,*
*Инде минһеҙ булырҙар.*
*Атайым да, әсәйем дә,*
*Ҡатыным, балаларым,*
*Һеҙҙең янға ҡайта алмам,*
*Бик тәрән яраларым.*
*Дошман өңөндә тонсоҡҡас,*
*Илгә килгәс тыныслыҡ,*
*Донъя ҡабат тергеҙелер,*
*Тантана итер дуҫлыҡ.*
*Яҡындарым, ауыр булыр,*
*Түҙегеҙ, бирешмәгеҙ!*
*Фани донъяны яратып,*

*Минең өсөн йәшәгеҙ!*
*Именлек,*
*һиллек хаҡына*
*Ҡыйылған ғүмерҙәрҙе,*
*Онотмағыҙ яуҙа ауған*
*Аттарҙы һәм ирҙәрҙе".*
*Битемә ҡағылды томшоҡ*
*Йылы тынын борҡотоп,*

*Был бит — минең юртаҡҡайым,*
*Был бит — минең "Бөркөт"өм.*
*Шыуышҡандырмы янға*
*Ул да ятҡан көйөнә,*
*Күҙҙәрҙе генә йөрөтөп,*
*Баҡтым йәшле күҙенә.*
*Ул үҙен йәлләп иламай,*
*Ул мине йәлләп илай.*

*Икәүләшеп уфылдайбыҙ,*
*Икебеҙ ҙә — торалмай.*

*Башым — тубал, уйҙарым да*
*Туҡталып бара төҫлө.*
*Был мәлдә йәшәү биреште,*
*Был мәлдә үлем көслө.*
*Һүнеп барған күҙҙәремә,*
*Һүнеп барған аңыма*
*Яҡынлашып килгән "тигр"*
*Ғифриттәй салына.*
*Бил ҡайышында, һул яҡлап,*
*Гранаталар бәйләме,*
*"Чека"һын тартһаң береһенең,*
*Ут-ҡойонға әйләнер.*
*Һул ҡулымды һелкеткәйнем,*
*Бармаҡтар, шөкөр, имен.*
*"Хәҙер һинең иманыңды*
*Уҡытам, яуыз", — тимен.*
*"Тигр" яҡынлай,*
*Тиҙерәк өлгөрөп ҡалыр*
*кәрәк!*
*Һыҙланыу ҡатыш үс ҡайнап,*
*Даһырлап китте йөрәк.*
*Бына-бына өҫкә менә!*
*Бына-бына тапата!—*
*тигән саҡта*
*Гранатаның дүңгәләгенән тартам...*
*"Бөркөт"өм сырҡырап ҡуйҙы,*

*“Тигр” ҡарышлауыҡтарын*
*Аяҡтар ҡалды тойоп...*
*...Тамуҡ ҡаҙанын ҡайнатып,*
*Ҡабынды утлы ҡойон...”*

*Ҡартатайым рухы тынды...*
*Күҙ алдым әлйе-мөлйө.*
*Ҡайнар йәштәрем субырлап,*
*Йөрәкте әрнеү телде.*
*Йылдар саңы ҡапламаған,*
*Ваҡыт ағып, юймаған.*
*Шанлы йылдарҙың ауазы*
*Тарихтарҙа һаҡланған.*
*Миллионлаған шәһит йәне*
*Булған хас ҡаты ҡалҡан.*

*Алҡымымда төйөр тора,*
*Иремәй ҙә, бөтмәй ҙә.*
*Ҡартатайым рухы тынды*
*Хушлашҡанды көтмәй ҙә.*
*Алтмыш туғыҙ йыл буйына,*
*Һуғыш эҙенә баҫып,*
*Килеремде көткәндер ҙә*
*Табалғандыр тынyслыҡ.*
*Рухы еңеллек тойғандыр*
*Иркенләп һөйләшеүҙән.*
*Ә мин дер ҡалтырап торам*
*Йән тетрәп өшөүҙән.*

***

*Севастополь!*
*Ете ҡалҡыулыҡҡа*
*Һибелеп кенә үҫкән аҡ ҡала!*
*Белдем инде һинең үткәнеңде,*
*Үткәндәрең һинең,*
*Аһ, яман!*
*Шундайын да вәхшилекте күреп,*
*Утта янып,*
*Үлем кисереп,*
*Ярай, һинең һының тергеҙелгән,*
*Шат йылмая, ана, кешеләр.*

*Йылмайһындар!*
*Шул йылмайыу өсөн*
*Шәһит ғүмерҙәре ҡыйылған.*
*Фирүзәләй диңгеҙ уттар йотҡан,*
*Ҡып-ҡыҙыл ҡан булған саф йылға.*

*Йәшәһендәр генә,*
*Килер быуын онотмаһын*
*Шанлы үткәнде.*
*Һаҡлаһындар яҡлап ҡалынғанды,*
*Һаҡлаһындар ғына бар йәмде.*

***

*Юлдарым тыуған яғыма*
*Зәңгәр күктән һуҙыла.*
*Иллюминаторҙа тамсы*
*Бөрсөк-бөрсөк боҙ була.*
*Күҙҙәремдәге йәштәрем,*
*Йөрәктәге һыҙланыу*
*Тимер тәнле самолетта*
*Сағылалыр боҙланып.*
*"Ҡорос ҡош" та юлдар ҡыҫҡа,*
*Уйҙар ғына оҙайлы.*
*Ябырылып биләп алды*
*Тағы мине уй яуы.*

*"Ғүмер буйы аңлай алмам*
*Һуғыш көҫәүселәрҙе.*
*Бер-береһенә асыу һаҡлап,*
*Юҡҡа үсәүселәрҙе.*

*Тыныслыҡҡа тынғылыҡ юҡ.*
*Тыныслыҡмы тын ҡура?*
*Әлләме "ҡалын кеҫәләр"*
*Мәкерле "уйын" ҡора?!*
*Ата-баба яулағандың*
*Ҡиммәте мәлλә кәмей?!*
*Донъябыҙҙы баҫып бара*
*Наркомания, хәмер...*

*Тәмәкене борлаталар*
*Завод мөрйәһе төҫлө.*
*Кеше үҙенә туҡтауһыҙ*
*Ҡәбер ҡаҙыған төҫлө.*

*Шартлауҙар ҙа,*
*Шаңдау кеүек,*
*Әле бында, тегендә...*
*"Шартлау һуғыштары"*
*Тымып*
*Торғаны юҡ бөгөн дә.*

*Тыныслыҡ — әллә кемдәрҙең*
*Аламы төн йоҡоһон?*
*Донъя болғатып, ут сәсә*
*Кемдең яла-ҡотҡоһо?!*
*Был һорауҙарға яуап юҡ,*
*Кем бирһен инде уны?!*
*Әле тегендә йә бында*
*Бөркөлә һуғыш тыны.*
*Кемдәргә байлыҡ  яуалыр,*
*Кемдең ҡайнайҙыр үсе?*
*Донъябыҙ шулар яуынан*
*Дөрләп ҡабыныр төҫлө".*

*Уй-кисереш ташлап китмәй,*
*Хәтирәләр һағышлы.*
*Зиһенемдә оҙаҡ сыңлар*
*Үткәндәрҙең тауышы.*

***

*Бына  осам тыуған яҡҡа*
*Әйтелер сәләм менән,*
*Осам хәтирә-тарихты*
*Яҙасаҡ ҡәләм менән.*

*Ауыл матур. Уртаһында*
*Ҙур йортло тыуған нигеҙ,*
*Ҡартатайым ҡайтып күрһә,*
*Шатланыр ине сикһеҙ.*
*Тупырлашып тыуып торған*
*Ейән, бүлә, тыуасар,*
*Илен, ерен, телен һаҡлап,*
*Киләсәккә юл асыр.*
*Йылдар йыл да йыраҡайтһа*
*Утлы йылдар шаңдауын,*
*Йөрәк, зиһен хәтирәһе*
*Онотмаҫ быуын-быуын.*
*Тапшырыр алмашҡа килер*
*Баланың балаһына.*
*Мәңгелек дан, хөрмәт һаҡлар*
*Ата-баба рухына.*
*Хәтер күпере өҙөлмәҫ,*
*Быуындарға ялғаныр.*
*Ҡаһарманлыҡ өлгөһөнән*
*Йәш быуындар рухланыр.*



Әмир
ӘМИНЕВ

# ЙОНДОҘ СӘСКӘ

## ПОВЕСТЬ

Солан ишеген дөбөрләттеләр. Рәүеф тауышҡа тертләп уянды ла, күҙҙәрен ышҡып, тәүҙә өй эсен байҡаны, унан тәҙрәгә күҙ һалды: тышта дөм-ҡараңғы, етмәһә, ямғыр ҙа яуа, буғай. Яҡшы хужа этен дә сығармаҫ былдай төндә кем йөрөр икән? Тимәк, эше етди, тимәк, Рәүефтең ныҡ кәрәге төшкән. Дөбөрләтеү ҡабатланды: был юлы ишеккә йоҙроҡлап һуҡтылар. «Ҡалай түҙемһеҙ, – тип уйланы Рәүеф, – ут сыҡҡан тиерһең, килгән кеше, ғәҙәттә, йомшаҡ ҡына ҡаға торғайнысы».

– Асығыҙ! – Ҡырҡыу тауыш яңғыраны. Рәүеф салбарын кейеп, аяҡтарын ҡатаһына тыҡты ла ишеккә атланы.

– Кем?

– Полиция.

– Полиция, ти? Төн уртаһында нимә кәрәк булды данлыҡлы тәртип һаҡсыларына?

– Тәүҙә асығыҙ, шунан әйтербеҙ.

Рәүефтең хәтеренән йәшен тиҙлегендә полицияға бәйле булыуы ихтимал ваҡиғалар теҙелеп үтте: ҡайҙа, ҡасан тәртип боҙҙо икән, төн уртаһында артынан юллап килерлек булғас? Әллә күпме хәтерләргә тырышһа ла, үҙенә шик төшөрөрҙәй бер ниндәй ҙә «эш» таба алманы. Һуғышып йөрөмәне, урлашманы, кеше өҫтөнән шикәйәт яҙманы, ғүмер буйы закон ҡоло булып көн итте. Мәктәп балалары ғына берәй төрлө хәл ҡылмаһа?Улай булһа, иң беренсе нәүбәттә директорға барырҙар ине. Хәйер, килгәс-килгәс, сәбәбе барҙыр, төнө менән ел ҡыуып йөрөмәҫтәр, тимәк ҡайһылыр мәлдә күҙҙәренә салынған, ҡайҙалыр эҙ ҡалдырған.

Ҡатыны уянды. Рәүеф һымаҡ бик борсолманы, халатын кейҙе, бәләкәй караватта йоҡлаған ҡыҙы янына барып, өҫтөнә япты, ишек яғына ымлап:

– Кем? – тип һораны ла урынына барып ятты.

– Полиция.

---

*Әмир Әминев (1953) Ғафури районының Һабай ауылында тыуған. М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтын тамамлай. Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.*

– Полиция, ти? Сәғәт нисә?

Рәүеф кухняға инеп, утты яндырҙы, күҙҙәрен ҡыҫып стеналағы йомро сәғәткә ҡараны.

– Өс.

– Ас һуң, ниңә көттөрәһең кешене?

Рәүефтең солан  керәһен ысҡындырыуы булды,  ишек шар асылып та китте, әйтерһең, көслө ел тегене тыштан һурып  алды. Болдорҙа буйға типә-тиң, өҫтәренә йылтыр ҡап-ҡара плащ, баштарына киң тирәсле  ҡара эшләпә  кейгән 25 – 30 йәштәр тирәһендәге таҙа өс кеше баҫып тора. Йөҙҙәре бөтөнләй ят, төҫһөҙ, шыма, хәс тә  бешереп әрселгән  бәрәңге – ауыҙҙарын да, танау-күҙҙәрен дә һис шәйләрлек түгел. Былар әллә инопланетяндар  инде, тип уйланы Рәүеф, ҡурҡып.

– Юламанов, кейен, беҙҙең менән бараһың, – тине алда торғаны. Һүҙҙәре, мылтыҡтан атҡандағы кеүек, айырым-айырым һәм хәрбиҙәрсә ҡәтғи яңғыраны.

– Ҡайҙа барам? Һеҙ кемдәр? – Рәүефтең  тамағы кибеп, теле алҡымына тығылды, арҡаһы үҙәгенән һалҡын тулҡын йүгереп үтте. – Берәйһе менән бутамайһығыҙмы?

– Барғас күрерһең, ә беҙҙең кем булыу һиңә кәрәкмәй. – Алдараҡ торғаны, моғайын, башлыҡтарылыр, ҡыйыу атлап соланға кергәс, өй ишеген асып ебәрҙе. Ҡаршыһына  сығып килгән Сәғиҙәне тырма һабы һымаҡ оҙон ҡулы менән еңелсә генә ситкә һирпте лә өй  эсенә үтте. Икенсеһе уның артынан эйәрҙе, өсөнсөһө, солан ишеген асыҡ көйө ҡалдырып, болдорҙа һаҡта ҡалды. Алдан кергәне бала карауатын шәйләне лә, янына килеп, йоҡлап ятҡан ҡыҙыҡай өҫтөнә эйелде. Оҙон ҡулдарын артына ҡуйған килеш, ниңәлер уға оҙаҡ итеп текләп ҡарап торҙо. Бала, уның ауыр ҡарашын күтәрә алмай, йөҙөн сирылта, башын борғолай башлағас ҡына, көйәнтә кеүек бөгөлгән һынын турайтты. Оҙон плащынан, итектәренән иҙәнгә һыу аҡты. Шунан  был бөтә кәүҙәһе менән боролоп өй эсен байҡаны, хром итектәрен шығырҙатып кухняға үтте.

– Рәүеф, кемдәр һуң был  бәндәләр? Нимә кәрәк? Нимә эҙләйҙәр? Ниңә һорамай-нитмәй астың ишекте? – Ҡатынының кергән кеше ҡылығынан иҫе-аҡылы киткәйне.

– Нисек асмайһың? Үҙең, ас, тинең дә... Кем белгән?

– Ханым, тынысланығыҙ, Юламановҡа бер нисә һорауыбыҙ бар, артынан килдек. –  Бәрәңге кеүек шыма йөҙҙәге   төҫһөҙ ике күҙ Сәғиҙәнең баш осонан   ҡайҙалыр ситкә ҡараны. – Юламанов, һиңә кейенергә бер минут ваҡыт.

–  Һорауҙарығыҙҙы ошонда бирегеҙ, ниңә уны ҡайҙалыр алып китергә? – тине Сәғиҙә.

– Туҡта, ысынлап та, ҡайҙа алып китергә йыйынаһығыҙ? Мин бер ҡайҙа ла бармайым. Һеҙ кем? Давай, документтарығыҙҙы күрһәтегеҙ! Мин – уҡытыусы.

– Беҙгә һеҙҙең ҡайҙа эшләүегеҙ мәғлүм. Ниндәй документ күрһәтергә?

– Ордер на арест.

– Беҙ  үҙебеҙ – ордер. Ил именлеген һаҡлаусылар.

Шунда ғына башына барып еткәндәй булды был төнгө «ҡара ҡарға»ларҙың – эсенән  уларҙы шулай тип атағайны инде – кем булыуы. Эйе, былар менән һүҙ көрәштереүҙең мәғәнәһе юҡ. Ҡаршылашһаң, һыу эскеһеҙ итеп туҡмауҙары, хатта атып китеүҙәре бар. Ҡушҡандарын үтәү хәйерле. Ғәйебе булмағас, нимәһенә ҡурҡырға? Ҡайҙа кәрәк шунда алып барырҙар ҙа, һорау алғастары, ҡайтарырҙар әле.

Рәүеф залда утты тоҡандырайым да кейенәйем тип урынынан ҡуҙғалғайны ғына, арттараҡ  торған икенсе «ҡара ҡарға» йәһәт кенә урынынан ҡубып,  ҡаршыһына төшөп, кәрәкмәҫ, былай ҙа күренә бит, тине. Рәүеф кейенде, сәғәтен, кеҫә телефонын, паспортын алды. Оҙаҡ тотмаҫтар, тағы нимә алаһың, тип уйланы ла, мин әҙер тигәндәй, ишек төбөнә килеп баҫты.

– Ярай, Сәғиҙә, был – ниндәйҙер аңлашылмаусанлыҡ, тикшергәс, ҡайтарырҙар. Быларға, – ул «ҡара ҡарға»ларға ишараланы, – беҙҙең алда ғәфү үтенергә тура килер әле. Ҡулға алырлыҡ бер ниндәй ҙә ғәйебем юҡ. Иҫән-имен тороғоҙ.

– Плащыңды йә курткаңды кей, фуражка... – тине Сәғиҙәһе, – яуа бит.

Рәүеф плащын, фуражкаһын кейеп, болдорға сыҡты. Дөм- ҡараңғы, ямғыр һаман яуа. Ғәжәп, күп йорттарҙа ут бар, ихаталарҙа эттәр өрә, ишек-ҡапҡалар асылып-ябыла, ҡатын-ҡыҙ һыҡтағаны, ҡәтғи бойороҡтар ишетелә. Солан ҡыйыҡтарына эленгән лампаларҙан ихаталарға төшкән яҡтылыҡта оҙон плащлы, киң тирәсле эшләпәле кешеләр шәйләнә. Башта шаҡ ҡатып ҡарап торҙо Рәүеф был төнгө күренештәргә, «ҡара ҡарға»ларҙың береһе «атла» тип арҡаһынан эткәс кенә ҡуҙғалды. Тимәк, уның ғына артынан килмәгән конвой, ауылда унан башҡа ла «бер нисә һорау бирер» кешеләре бар. Был нимә, утыҙ етенсе йыл ҡабатланыуымы, әллә һуғыш сығып, дөйөм мобилизация үткәреүме? Улай тиһәң, радио, телевидение аша иғлан бирерҙәр, гәзиттәргә яҙырҙар ине. Ишетмәгән кешеләргә ауыл хакимиәте хәбәр итер ине. Бер ниндәй мәғлүмәт, бойороҡ, указ булманы, директор ҙа өндәшмәне. Ғәжәп һәм сәйер бөтәһе лә.

– Слушай, иптәш, бер нәмә лә аңламайым, нимә бара ул, ә? – Рәүеф ауылдағы төнгө мәхшәргә төшөнмәй, береһе – алдынан, икенсеһе – артынан, өсөнсөһө уң ҡулдан атлаған «ҡара ҡарға»ларҙың ҡайһыһынан булһа ла яуап алырына өмөтләнеп, шулай тип һорарға мәжбүр булды. – Һуғыш сыҡмағандыр бит?

Яуап бирмәнеләр. «Ҡара ҡарға»лар эшләпәле баштарын, кәүҙәләрен уҡлау йотҡандай тура тотоп, стройҙағы һалдаттар ише өндәшмәй генә атлауҙарын белде. Ҡараңғы, ә яңылышмайҙар, роботтар тиерһең. Үҙенән өс йорт аша ғына йәшәгән физкультура уҡытыусыһы Ғәлим ҡатынының сәрелдәгәне, биш йәшлек ҡыҙҙарының быуылып илауы ишетелде, ҡара плащлыларҙың уҡытыусыны елтерәтеүҙәре күренде. Ауыл уртаһында, мәҙәниәт һарайы, магазин, почта яғында йөк машиналарының яҡтылары баҙлай, эттәр өрә, асыулы һүгенәләр. Унда алданыраҡ килтергәндәрҙе машиналарға тейәйҙәр ҙә шикелле.

Машиналар эргәһенә килеп еттеләр. Кузовтарҙың арты асылған, менер өсөн ҡыҫҡа тимер баҫҡыстар ҡуйылған. Кешеләрҙе этә-төртә кузовҡа мендерәләр. Күптәрҙең ултырғыһы килмәй, «Ҡайҙа алып бараһығыҙ, һеҙ кемдәр, ни өсөн төн йөҙөндә эшләйһегеҙ ҡара эшегеҙҙе?» тип тартҡылаша. Ирҙәрен оҙата килгән ҡатын-ҡыҙ илаша. Сәғиҙәһенең оҙата сыҡмағаны дөрөҫ булды, ошо мәхшәрҙе күрмәүе хәйерле. Ә былай – киттеме-китте, ауылдан ул ғына булмаған бит (таң атҡас, беләсәк), ҡайтарырҙар, тип бер сама тынысланыр.

Рәүеф ҡаршылашмай ғына кузовҡа менде лә, һәрмәнә-һәрмәнә, ике яҡ борттағы таҡта эскәмйәләрҙең береһенә сүгәләне.

Күп тә үтмәй, алдағы машина ҡуҙғалды, башҡалары уға эйәрҙе. Ауылды сыҡтылар, район үҙәгенә барған оло юлға төштөләр. Байтаҡ килгәс, һулға боролдолар, тимәк, район үҙәгенә алып бармайҙар булып сыға? Боролоуға асфальт бөттө, баҫыу юлы башланды, артабан урман эсенән барҙылар. Уныһын инде брезент япмаға ағас ботаҡтары һуғылыуынан, юлдың саҡылт-соҡолтонан самаланы. Килә торғас, Рәүеф йүнәлеште тамам юғалтты. Таң һыҙылғанда ниндәйҙер ауылға (һәр хәлдә бер нисә йорт шәйләнде) туҡтап, яндарына йәнә ике ирҙе мендерҙеләр. Ултырырға урын булмағанлыҡтан, улар аяғөҫтө баҫып, бортҡа тотоноп барҙы. Байтаҡ килгәс, олорағы, түҙмәй, Рәүефтең эргәһенә ҡыҫылды.

Тамам яҡтырғас, машинаны, ниһайәт, туҡтаттылар. Ергә төшһәләр – киң генә йәшел туғайлыҡ. Йәм-йәшел үк түгел дә, шулай ҙа үлән бөтөнләйгә һарғайып өлгөрмәгән. Алыҫта ҡалын урман ҡарайып күренә, урман артында һөҙәк тау һырттары һуҙылып киткән, йылға ла шул тирәләлер – хәлһеҙ генә иҫкән ел дым бөркә. Оҙаҡ байҡап торҙо был сихри иркенлекте Рәүеф, ирektә булһа, былай уҡ

һағышланмаҫ та, матурлығы күренмәҫ тә ине, моғайын. Үҙенең әлеге хәле тәбиғәттең ошо ирәүәнлеге ҡаршыһында уғата ла меҫкен булып тойолдо, хатта, башҡаса бындай хозурлыҡты күрә алмамдыр, ахыры, тигән хыянатсыл уй ҙа килде башына...

Ҡыҫталышҡан ирҙәр ни, баҫҡыс терәгәнде лә көтмәй, ергә һикерешеп төштө лә машинаны уратып баҫты. Ҡайһылары, тартынып-нитеп тормай, оло ярауын да итте. «Нишләйһең, хәжәткә хөжәт юҡ. Ҡайҙа туҡтарға белгәндәр, хәшәрәттәр,– тип уйланы Рәүеф, – ҡола ялан уртаһы, ҡасыу мөмкин түгел, бар нәмә ус төбөндәгеләй күренеп тора – боҫор, йәшенер урын табырмын тимә». Рәүефтең шулай тип уйлауы булды, алдағы машинала барған бер егеттең алыҫта ҡарайып ултырған урман яғына йүгереүе күренде. Ҡыйыу кешеләр бар барыбер ҙә. Уларҙың машинаһындағы оло ғына бер ир, ай, ҡасһын ине, беҙҙе ҡулға алғандарын кәрәк ергә еткерһен ине, тине, икенсеһе, юҡ менән була, хәҙер атып йығалар, тип әсенде, өсөнсөһө ниңәлер мыҫҡыллы көлдө. Тотҡондарҙың береһен дә таныманы Рәүеф, ауылдаштарынан берәү ҙә юҡ: туҡтаған арала ҡайҙалыр төшөрөп ҡалдыра барғандар, улар урынына икенселәрҙе алғандармы икән?

Ләкин «ҡара ҡарға»лар йәһәт килде аңдарына: ике кеше, оҙон плащ итәктәрен елберҙәтеп, сажиндай эре-эре аҙымдар менән ҡасҡалаҡтың артынан төштө. Шәп йүгерәләр, ҡәһәрең, иң ҡыҙығы, стройҙағы һымаҡ бер тактта, эшләпәле баштарын бер иш тура тоталар, ҡул һелтәүҙәре лә бер иш. Ҡасҡын ни тиклем генә шәп йүгермәһен, йөҙ илле – ике йөҙ метр арауығында ҡыуып еттеләр. Этеп йыҡҡас та, егет тиҙ генә бирешергә теләмәне: йәһәт кенә ҡалҡынды ла тегеләр менән сат та сот һуғышып алып китте. Әйтәһе лә түгел, таҫыллы һуғышты, ҡалала берәй төрлө секция-фәләндә шөғөлләнгән спортсылыр – байтаҡ һелтәүҙәренән ялтанып өлгөрҙө, тибеп тә ебәрҙе. Ләкин көстәр тигеҙ түгел ине, берҙәм ябырылып, конвоирҙар быны ергә йыҡты, ҡулдарына бығау һалды. Шунан елкәһенән һөйрәп аяғына баҫтырҙылар, этә-төртә машинаға килтереп ырғыттылар. Дүрт йөк машинаһында килгән әллә күпме халыҡ шуны тамаша ҡылып торҙо, әммә береһе лә ҡыйыу егеткә ярҙамға барманы. Уйлап ҡараһаң, һаҡсыларға ҡарағанда тотҡондар байтаҡҡа күберәк бит. Араларға теләмәгән хәлдә лә, тырым-тырағай ҡасырға мөмкин ине. Һәр ҡайһыһын берәмләп барыбер тотоп бөтә алмаҫтар ине. Бына шундай күңелһеҙ һығымта яһаны Рәүеф был ваҡиғанан һәм кешеләр араһында берҙәмлек булмауына, башҡаларҙың яҙмышына, тимәк, үҙҙәренекенә лә, битараф булыуына аптыраны. Хәйер, үҙе лә шул хисапта...

Машиналар асфальтҡа төштө, байтаҡ барғас, тағы баҫыу өҫтөнән, унан ташлы-ҡырсынлы юлдан бара башланылар. Туҡтап та алалар, туҡтаған арала кемделер алып ҡалалар, кемделер өҫтәп ултырталар. Тимәк, кемде ҡайҙа урынлаштырыу буйынса үҙҙәре генә белгән пландары бар. Кузовта ҡәнәғәтһеҙлек, һорау биреү, хатта талап итеү ваҡиғалары булып ала, берәү ҡысҡыра, икенсеһе йырлай, күмәкләп аяҡ дөбөрләтәләр, брезент япманы асырға маташалар. Әммә арттағы өс «ҡара ҡарға» уларға ҡыҫылмай ҙа, тыймай ҙа һәм яуап ишетерлек тә түгел – ауыҙҙарына һыу уртлаған кеүек, бер һүҙ өндәшмәйҙәр.

Рәүеф туҡтауһыҙ уйлана, мәсьәләнең айышын эҙләй: ҡулға алыу ниңә шулай ҡапыл, төндә башҡарылды һуң әле? Тарих ҡабатлана торған – утыҙ етенсе йыл ваҡиғаларына кире ҡайтабыҙ, тимәк. Ҡайҙа алып баралар? Дүрт машинаға лыҡа тултырылған халыҡ өсөн урын да кәрәк бит әле. Казарма, лагерь йәки төрмә. Ашатырға тейештәр, кәрәк булһа – медицина ярҙамы күрһәтергә, йыуындырырға. Улар мал түгел, малды ла ҡарайҙар. Күпме киләләр, йотом һыу биргәндәре лә юҡ...

Оҙон юл дауамында бер нисә тапҡыр кесә телефоны шылтыраны – Сәғиҙәһе. Әммә, кеше алдында һөйләшкеһе килмәй, кире ябып ҡуйғайны, йәнә шылтырағас, яуап бирергә булды – телефон бар көйө ниңә хәсрәтләндерергә? Былай ҙа ут йотоп ултыралыр. Уның хәл-әхүәлен, иҫән-һау икәнен белһә, бик бөтөрөнмәҫ.

– Эйе.

– Рәүеф, һин ҡайҙа? Ниңә трубканды алмайһың? Үҙең шылтыратһаң була бит. Кис төшөп килә, һин юҡ та юҡ. Тиҙ ҡайтарырҙар, тигән кеше... – Ҡатынының тауышы борсоулы. – Бер-бер хәл булдымы әллә?

– Машинала китеп барабыҙ.

– Ҡайҙа китеп бараһығыҙ? – Ҡатыны түҙемһеҙләнә, иламһырай башланы. – Кемдәр менән? Ауылдан һинән башҡа әллә күпме кешене алып киткәндәр бит. Директорҙы, Ғәлимде. Һин улар менәнме?

– Юҡ, мин улар менән түгел. Икенсе машинала ғына булмаһалар. Ҡайҙа алып барғандарын белмәйем. Әйтмәйҙәр. Сәғиҙә...

– Ханым, юҡҡа борсолаһығыҙ. Юламанов менән бер нәмә лә булманы. Бүтән шылтыратмауығыҙҙы һорайбыҙ.

Рәүеф телһеҙ ҡалды. Ғүмерҙә күрмәгән-ишетмәгән хәл: уның шәхси кесә телефоны номерынан кемдер Сәғиҙәһенә яуап бирә! Тимәк, әләктерә алалар тулҡынды. Ай, техниканың мөмкинлектәре, мобильнигы ла «ҡара ҡарға»лар ҡарамағында!

– Эйе, ярай, Сәғиҙә, мин иҫән-һау, бүтән шылтыратма, үҙем... Балалар ни хәлдә?

Ҡатыны уның һүҙҙәрен әллә ишетте, әллә ишетмәне, араға йәнә теге тауыш килеп ҡыҫылды:

– Һеҙгә лә шылтыратмаҫҡа кәңәш итәм, Юламанов.

Берәүҙәрҙе төшөрөп ҡалдыра, улар урынына икенселәрҙе тейәй-тейәй килә торғас, эңерҙә Рәүефкә лә сират етте. Оҙон эскәмйәнең осонда ултырған һаҡсы, ҡалҡынып, уның яурынына ҡулын һалды ла башын һелкте һәм, кузовтың артҡы яғын асып, теге тимер баҫҡысты аҫҡа төшөрҙө. Йоҡомһорап килгән Рәүеф, ойоған кәүҙәһен саҡ яҙып, ергә аяҡ терәне. Дүрт машина ла туҡтаған, ләкин береһенән дә бүтән кеше төшмәне, тимәк, бында яңғыҙын ғына ҡалдыралар булып сыға.

Баяғы һаҡсы уны тап үҙе һымаҡ ҡаранан кейенгән, бит-йөҙө, хәрәкәттәре менән үҙенең күсермәһе булған берәүгә тапшырҙы ла кире машинаға менеп ултырҙы. Баҫҡысты тартып алды, яңы һаҡсы шарт та шорт кузовты япты. Машиналар ары китте.

Ауыл мәктәбенә лә, клубҡа ла тартым, буйы 8-9, арҡырыһы 6-7 метр самаһындағы яңғыҙ бер йорт ҡаршыһында торалар ине. Йорт бейек, бетон нигеҙҙә ултыра, башы шифер менән ябылған, уныһы иҫке, йәшелләнеп бөткән. Ҡыйыҡ башында – ҡыҙыл флаг, ҡыйшайған тәпәш антенна, төбө төшкән сыйырсыҡ ояһы, унан хатта һалам, ҡош йөндәре һәлберәп тора. Урам яҡҡа өс тәҙрә ҡарай, өсөһө лә тимер рәшәткә менән көпләнгән, бер йыуанлыҡтағы төҙ ҡарағай бүрәнәләрҙән һалынған, хәҙер инде ямғыр, ҡояш ҡарайтҡан соланһыҙ йорт. Тирә-яғы баҡса – ҡарағат, крыжовник, ҡурай еләге ҡыуаҡтары күренә, бер нисә алма ла бар, ахыры. Һыу мискәләре, көрәк, һәнәк-тырма, сүп өйөмө шәйләнә. Эйе, бында торғандар, йәшәгәндәр, бәлки, әле лә йәшәйҙәрҙер.

Тегеләре һымаҡ бешкән бәрәңгеләй шыма, ауыҙы, танауы саҡ беленгән, баҙлауыҡ күҙле, ҡашһыҙ, һаҡал-мыйыҡһыҙ һаҡсы, уҡлауҙай төҙ һәм нәҙек кәүҙәһен һелкетмәй генә, эшләпәле башын йорт яғына ҡаҡты, йәнәһе, атла, килеп еттең. Рәүеф йортто йәнә бер күҙҙән үткәрҙе лә өҫтөнә ваҡ таш һибелгән тар

һуҡмаҡтан яй ғына атлап китте. Теге эҙенә баҫып тиерлек килә. Тубыҡ тәпәшлегендәге штакетник ҡағылған ҡапҡанан инделәр. Ишеккә тиклем егерме метр самаһы ара. Керҙеңме – бикләндең. Әллә мәңгелеккә, әллә бер нисә көнгә. Был – сик, был – бөжәк урынына көн итәсәк меҫкен донъяға күсерәсәк ара...

Рәүеф ҡапыл йәшел яланда ҡасҡан ҡыйыу егетте хәтеренә төшөрҙө. Ҡаса алманы, ләкин маташып ҡараны бит. Ниңә уға ла үҙен һынап ҡарамаҫҡа? Уны ике һаҡсы баҫтырып тотто, ә бында берәү генә. Нишләп ул, ҡайҙа ҡыуалар шунда китеп барған күндәм быҙау ише, үҙе теләп тигәндәй бикләнергә тейеш һуң әле? Ҡасыуы килеп сыҡмаған хәлдә лә, ошо йорттан да ары ебәрмәйәсәктәр, ебәрә алмаясаҡтар, сөнки машиналары ары китте.

Ҡапҡанан өйгә ҡәҙәр шулай уҡ тубыҡ тәпәшлеге штакетник ҡағылған кәртә. Тигеҙ итеп, ентекләп, бер аралыҡта ҡаҡҡандар. Рәүеф шуларҙы, уңышы йыйып алынған түтәлдәрҙе ҡараған булып тукталды, дөрөҫөрәге, иғтибарын ҡапыл ғына түтәл ситендә ут кеүек янып ултырған йондоҙ сәскә туҡтатты. Ул шул тиклем сағыу, шул тиклем күҙҙең яуын ала, хатта тере сәскә икәненә лә ышаныуы ҡыйын – ҡағыҙҙан ҡырҡып, буяп ултыртып ҡуйған һымаҡ. Ә бит көҙ, тышта хәҙер һыуыҡ, оҙаҡламай ҡар ҙа төшөр. Башҡа сәскәләр өшөп, ҡарайып һулыған, был һаман бирешмәй ултыра. Ғәжәп!..

Рәүефтең күҙе сәскәлә, үҙенең башын туҡтауһыҙ бер уй телә: хәҙерме, ишек төбөнә еткәсме? Ишеккә еткәс һуң була, майҙан тарая, һаҡсы аса ла эткеләп-төрткөләп индереп тә ебәрә. Тимәк, ошонда, хәҙер... Ул күҙ сите менән генә һаҡсыға ҡараны ла бер аҙым алға атланы һәм, шундуҡ артына килеп баҫыуына, тегене бар көсөнә яурыны менән төртөп ебәрҙе. Һаҡсы, әлбиттә, быны көтмәгәйне, әлеге штакетник аша түтәл өҫтөнә мәтәлләп барып төштө. Рәүеф йәһәт кенә боролдо ла, кескәй ҡапҡаны һикереп сығып, урман ауыҙы йүнәлешенә йомолдо. Теге аңына килгәнсе, ҡалҡынғансы мөмкин тиклем алыҫыраҡ китеп өлгөрөргә кәрәк! Тапалып, йыуғыс кеүек уралып-сырмалып ятҡан, урыны-урыны менән бил тиңенә еткән бейек үлән ҡамасаулай, етмәһә, аяҡ аҫтындағы ер ҙә тигеҙ түгел, күрәһең, һаҙлығыраҡ, шуға ла бәғзе урынды сиңерткә ише һикерәңләп үтергә тура килә. Һөрләгөп тә китә, ҡыйыш та баҫа, әммә бар көсөнә йүгереүен белә. Асыҡлыҡты йәһәтерәк үтеп, урман эсенә инеү кәрәк – ағастар араһында «ҡара ҡарға»нан күҙ яҙҙырыуы барыбер ҙә еңелерәк булыр.

Ләкин ни тиклем генә шәп йүгерһә лә – һәр хәлдә Рәүефтең үҙенә шулай тойолдо – баҫтырыусының ҡыуып етеп килгәнен бөтә тәне менән тойҙо. Үлән йығылғаны, кипкән ботаҡтарҙың шарт та шорт һыныу тауыштары яҡынайғандан-яҡыная барҙы. Урман ауыҙындағы вағыраҡ ағастарға еттем тигәндә генә: «Туҡта, атам!» – тигән ҡәтғи бойороҡ яңғыраны. Ҡолағы төбөндә шартлап ағас һындымы ни, тауышынан уҡ ҡолап китерлек. Башы бар – бешкән бәрәңге тип ҡара шунан һуң, ағастар араһына сумһа, эләктереүе ауырлашасағын самалай.

Нишләргә: туҡтарғамы, әллә ҡасыуҙы дауам итергәме? Туҡтаһа – ябыла, йүгерһә – арҡаһына пуля ҡаҙалып, ошо үләндәр араһында ятып ҡала. Урман иһә ҡул һуҙымында ғына. Тик шул мәл төпһәгәме, әллә үлән араһында ятҡан кипкән ботаҡҡамы эләгеп, һөрләгөп барып та төштө. Бәлки, «ҡара ҡарға» ҡыуып етеп, аяҡ салғандыр?

Уның аяҡ-ҡулын саҡ йыйып, йыуғыс кеүек ятҡан үлән араһында ҡыбырларлыҡ та хәле ҡалмағанда, һаҡсы, ҡолғалай һерәйеп, янында баҫып тора ине инде. Рәүеф салҡан әйләнде, битараф ҡына күктәге бер-береһен баҫтырышып ҡайҙалыр ашыҡҡан шомло ҡара болоттарға текәлде, шунан ҡарашын «ҡара ҡарға»-ға күсерҙе. Ул шулай уҡ шомло, башынан аяғына тиклем ҡаранан кейенгәнгәме, әллә аҫтан өҫкә ҡарағанғамы, – әлеге болоттарҙың бер ялпыһы һымаҡ күренде.

Һаҡсы уны, ниңәлер, ҡабаландырманы, иректә әҙ булһа ла ятып ҡалһын тигәндерме, әрләп бер һүҙ өндәшмәне – Рәүеф тынын тигеҙләп тамам тынысланғас, ҡулы менән ҡалҡынырға ишараланы ла, плащының аҫҡы һиҙәптәрен ысҡындырып, бил ҡайышынан бығау сисеп, бер дүңгәләгеп уның ҡулына, икенсеһен үҙенекенә кейҙереп, бикләп ҡуйҙы. Ғәжәп, хәле лә бөтмәгән, тын алыуы ла тип-тигеҙ, йөҙөндә, маңлайында тир әҫәре юҡ, әйтерһең, бөтөнләй йүгермәгән, уның янына осоп ҡына килеп төшкән! Хатта башындағы эшләпәһе ҡыйшаймаған! Был ниндәй бәндәләр? Теге егетте ҡыуып тотҡан икәүҙең йүгереүен шулай иҫе китеп ҡарап торғайны, хәҙер бының тәбиғи булмаған ҡылығына тағы ғәжәп итте Рәүеф.

Бейәләй ҙурлыҡ йоҙаҡты еңел генә асты «ҡара ҡарға». Ҡалын, ауыр ишектең уртаһын арҡырыға быуған яҫы тимерҙәгеһен дә асты ла, уны бер яҡҡа ырғытып, ишекте тартты. Үҙе алдан инеп, Рәүефте эскә һөйрәне. Бығауын систе, көн итеүең ошонда, тигәнде белгертеп, ҡарашы менән өй эсен байҡаны.

Өй эсе ярайһы уҡ иркен ине. Ишектән уң яҡлап – иҫке генә ике ағас ултырғыс, буяуы ҡупҡан йомро өҫтәл, ҡашығаяҡ кәштәһе; иҙән уртаһында – ҡалын таҡталарҙан ҡағылған оҙон өҫтәл, күптән ағартылмаған, йүшкә аҫты, плитә алды ҡоромға ҡарайған урыҫ мейесе. Стенаға эленгән йомро көҙгө, иҫке генә кейем элгес тә бар. Төптәрәк киң тимер карауат, диван. Ике тәҙрә төбөндә һулыған ике гөл ултыра, бөтә тәҙрәләр ҙә тыш яҡлап рәшәткәле. Тимәк, элек бында кемдәрҙер йәшәгән, улар бынан бер нәмә лә алмай күсеп киткән йә һөргәндәр ҙә йорттарын тотҡондар өсөн файҙаланғандар, әле лә файҙаланалар, тип фаразларға ҡала.

– Ниңә, ни өсөн? – тип һораны Рәүеф, өй эсен байҡағас. – Бер нисә һорау биреү өсөн мотлаҡ ошонда килтерергә кәрәк инеме ни?

Һаҡсы өндәшмәне.

– Был сәйәси һөргөн тип аталамы?

– Уныһы миңә ҡараңғы. Беҙҙең эш – һеҙҙе килтереп урынлаштырыу. Ҡалғанын белмәйем.

– Ә нимә ҡылдым һуң бында килтереп ябырлыҡ?

– Ярай, Юламанов, диван, карауат, өҫтәл бар, түшәк-фәләнде анау шкафтан табырһың. Ризыҡ, һыу, башҡа кәрәк-яраҡ индерерҙәр. Ҡашығаяҡ, ана, кәштәлә.

Һаҡсы Рәүефтең һорауына яуап бирмәне. Ҡабаланмай ғына сығып китте. Тыштан шарт та шорт тимер һайғауҙы терәүе, унан ишекте бикләүе ишетелде. Рәүеф, иҙән уртаһына баҫып, өй эсен йәнә бер күҙҙән үткәрҙе лә, ултырғысҡа сүгәләп, ҡурғаштай ауыр уйҙарға сумды.

Кисә төн уртаһынан башланып ошо өйгә бикләнеүенә тиклемге ваҡыт арауығындағы ваҡиғалар уға төштә генә булған кеүек. Уяу килеш күргән төштә. Сөнки уларҙың ысынбарлыҡ икәненә һис ышанырлыҡ түгел. Ҡайҙалыр ситтә, әйтәйек, Латин Америкаһының берәй илендә, хатта икенсе планетала булған кеүек барыһы ла. Нишләп улай ҡапыл ғына ҡулға алыуҙар башланды? Ауылда, уҡытыусылар араһында бер нәмә лә ишетелмәне, һүҙ-хәбәр, имеш-мимеш йөрөмәне. Ғәҙәттә, буласаҡ ниндәйҙер үҙгәреш алдынан халыҡ барыбер ҙә һиҙенә, һүҙ йөрөтә, фекер алыша торғайны. Илдә берәй төрлө переворот яһалып, власҡа хәрбиҙәр йәки оппозицияла торған көстәр килдеме? Юҡ, бөгөнгө системала бының булыуы мөмкин түгел. Хәрбиҙәр быны булдыра алмай, оппозицияның реаль көсө юҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, оппозиция ла юҡ. «Берҙәм ил» – власть фирҡәһе. Төрлө кимәлдәге етәкселектә күпселек ошо фирҡә вәкилдәре ултыра. Шулай булғас, үҙен шул урынға ултыртҡан, ҡаҙна ҡаҙанынан ашатҡан үҙәк етәкселәренә ҡаршы нисек баш күтәрһендәр? Йәмғиәттә, һәр хәлдә ауыл ерендә,

колхоздарҙы бөтөрөү, әммә уның урынына бер нәмә лә төҙөмәү, ерҙәрҙе шикле бәндәләргә һатыу, участка больницаһын, медпункттарҙы, мәктәптәрҙе ябыу һымаҡ яңы Президент үткәргән сәйәсәт менән ҡәнәғәтһеҙлек бар, әммә асыҡтан-асыҡ уға ҡаршы сығыр көстәр юҡ. Забастовкалар, демонстрациялар, стачкалар үткәреү өсөн беҙҙең ил Европа илдәре, АҠШ кеүек демократик булып етлекмәгән. Ул кимәлгә барып етеү өсөн беҙгә Бөйөк Ҡытай стенаһына йәйәү барған кеүек ара үтәһе бар. Яңы етәксе көн һайын тиерлек телевизорҙан, хоҡуҡи, демократик йәмғиәт төҙөйбөҙ, илдә һүҙ ирке, фекер ирке буласаҡ, тип хәбәр һөйләй, халыҡтан ләстит йыйыр өсөн Интернетта үҙ блогын асҡан, йәнәһе, һәр кем үҙ фекерен, илдә барған теге йәки был сәйәси, ижтимағи, криминаль ваҡиғаға, урындағы власть вәкилдәре эшмәкәрлегенә ҡарата мөнәсәбәтен яҙа ала. Әйтерһең дә, шул юл менән илдәге тәртипһеҙлеккә, чиновниктарҙың башбаштаҡлығына, криминалға сик ҡуйып, ҡайһы бер төпкөлдәрендә феодаль, хатта һаман да тәүтормош йолалары йәшәгән илдә тиҙ генә демократик йәмғиәт төҙөп була. Уның өсөн йөҙәр йылдар кәрәк. Йөҙ йылдан демократия урынлашһын өсөн дә бөгөндән актив эш башларға тейештәр. Бер аҡыллы кеше әйтмешләй, Рәсәйҙе аҡыл менән һис аңларлыҡ түгел.

Ил менән, ярар, уныһы – ҡараңғы, ә Рәүефтең үҙенең яҙмышы менән конкрет кем шаярҙы икән һуң? Ул етәксе түгел, баш ҡаланан йыраҡ ятҡан бер ауыл мәктәбенең ябай уҡытыусыһы. Уның һүҙ-хәбәренән, ҡырыныраҡ әйтелһә лә, ил именлегенә бер ниндәй зыян килмәй. Сөнки уның, уның ише ябай кешеләрҙең «эше» себендең тәҙрә быялаһын ватып тышҡа сығырға маташыуына бәрәбәр. Илдә ябай кешенең бер нәмәгә хоҡуғы юҡ, ул – көтөүҙәге берәмек, һоро масса...

Әллә уның менән берәй тикшереү үткәрергә ниәтләнәләрме? Ғалимдар лаборатория шарттарында сысҡан, ҡуян, башҡа мал менән төрлө тәжрибәләр яһай бит, шуның ише, уны ла һынау объекты рәүешендә файҙаланмаҡсылармы? Йөрөйһөң инде шунан зомби йә маңҡорт һымаҡ. Йөрөһәң ярай ҙа, бөтөнләй аяғыңды һуҙмаһаң...

Тамам ҡараңғы төшкәс кенә ауыр уйҙарынан әҙерәк арына алды Рәүеф, дөрөҫөрәге, ҡапыл алдына килеп баҫҡан мең һорауҙың береһенә лә яуап таба алмаҫын аңлап, ҡул һелтәне лә урынынан ҡалҡынды. Асыҡҡайны, һыуһағайны. «Ҡара ҡарға»ның ишекте йоҙаҡлап китеүен белһә лә, тәүҙә уны этеп ҡараны, унан тәҙрә алдына барып баҫты. Рамдар икешәр ҡатлы, быялалары ябай түгел, ҡалын, бәлки, ватылмай торғанылыр ҙа әле. Тимер рәшәткәләр бармаҡ йыуанлығы арматуранан йәбештерелеп, тыш яҡтан стеналарға ҡаҙаҡланған. Ватып сығып ҡасыу хаҡында хыял да итмә...

Эстәге йыһаз-әйберҙәрҙе ҡарай-барлай торғас, ҡапыл үҙенең донъяһы иҫенә төштө лә, күңеле һыҙылып ҡуйҙы, шунан Сәғиҙәһенә шылтыратып ҡарарға булды. Номерына баҫып, телефонын ҡолағына килтергәйне, ҡатынының түгел, йәнә баяғы ирҙең ҡалын, ҡырҡыу тауышы ишетелде:

– Юламанов, мин һиңә шылтыратмаҫҡа ҡушҡайным бит. Тағы ла йыйһаң, телефоныңды кереп аласаҡмын. Аңлашылдымы?

– Мин һис юғы иҫәнлегемде ғаиләгә белдерергә тейешмендер бит? Нишләп тыяһығыҙ, ни хаҡығыҙ бар? Улар мине ҡайҙа алып киткәндәрен дә белмәй... Улайһа, үҙегеҙ хәбәр итегеҙ...

Бәйләнеш өҙөлдө. Тораҡ мәктәп директорының номерын йыйғайны, шул уҡ яуапты алды. Шымсылыҡ итер өсөн ҡалдырғандар, тимәк, телефонын да, юғиһә, тартып алырҙар ине. Хәрбиҙәрҙең йәки дәүләт именлеге органдарының техникаһы башҡаса һәм юғары кимәлдә, әлбиттә... Бер йөрөй, бер ултыра торғас, асығыуы йәнә эсен борғолай башланы. Ҡашығаяҡ, көрөшкә, үтмәҫ бысаҡ,

сынаяҡ урынлаштырылған кухня шкафынан быяла банкыға һалынған тары ярмаһы, әҙерәк он, кибеп бөткән ике баш һуған, лавр япрағы, тоҙ тапты. Иҙәндәге алюмин бидон төбөндә һыу ҙа бар икән. Һыу, күренеп тора, әллә ҡасанғы, буйраҡланып бөткән. Нишләһен, эсте инде, яман сарсағайны. Өҫтәл аҫтында ултырған электр плитәһен алды ла, проводын ҡараштырып, розеткаға тыҡты. Спираль тиҙ арала йылынып, ҡып-ҡыҙыл булды. Иҫке генә алюмин кәстрүлгә әҙерәк һыу ҡойоп, тары ярмаһын төшөрҙө...

Ҡапҡылап алғас, сисенеп тә тормай, түшәк-фәлән дә йәймәй, диванға бөгәрләнеп ятты һәм шундуҡ йоҡлап та китте. Арыуы еңде. Төн уртаһында өшөп уянды. Уянғас, ҡайҙа ятҡанын аңғармай бер булды. Ут яндырыуҙан ниңәлер ҡурҡты. Һаҡсы әйткән шкафтан түшәкте барып алырға иренде. Өшөй-өшөй ятты ла тағы йоҡлап китте. Алама төштәр күрҙе, баҫлығып йонсоно, ҡысҡырҙы, һөрәнләне, Сәғиҙәһен ярҙамға саҡырҙы. Һуң ғына уянды. Ҡырылмаһа-ҡырҡ уянғас, тәне лә, йәне лә ял итмәне, киреһенсә, башы ауыртып килеп торҙо.

«Ҡара ҡарға» килде. Сепрәк сумкала – аҙыҡ-түлек. Алюмин бидонды алып сығып, ҡайҙандыр һыу тултырып индерҙе. «Һыуҙы ҡайҙан алдың, яҡын-тирәлә юҡ таһа?» – тигәнгә яуап бирмәне, «Бер электр бағанаһы күренмәй, ә ут бар», – тип аптырауына ла яурындарын ғына һикертте. Өс көнгә бер шулай ризыҡ индеререн, көнөнә өс мәртәбә – иртән, төш, кис – бәҙрәфкә сығарасағын әйтте. Уның һағында кистәрен ихатала йөрөп кереү мөмкинлеге лә бар икән. Быныһы – тотҡондоң теләгенә ҡарап. Ә бына ҡасанға тиклем тотасаҡтарын, ниндәй ғәйеп таҡҡандарын һәм ни өсөн тап ошонда килтергәндәрен ныҡыһа, шулай уҡ, «белмәйем» тигәнде аңғартып, яурынын ғына йыйырҙы.

Ҡалдырылған ризыҡ – ике буханка ҡара икмәк, көнбағыш майы, тоҙ, ит банкыһы, ҡарабойҙай, дөгө ярмаһы. Тимәк, үҙе бешерергә, үҙенең тамағын үҙе хәстәрләргә тейеш була Рәүеф...

Һаҡсының тағы бер ингәнендә Рәүеф: «Әйт, нимәгә бында ултыртып ҡуйҙылар мине, суд йә тәфтишсе инмәйме ни, һорау алмайҙармы, кемгә мөрәжәғәт итергә һуң?» – тип йәнә төпсөнгәс, теге, талап-үтенестәрегеҙҙе яҙып бирегеҙ, етәкселеккә тапшырырмын, тип бер көн ҡағыҙ, ручка бирҙе. Рәүеф, оҙаҡҡа һуҙмай, ҡулға алыныуының сәбәбен, ниндәй ғәйеп таҡҡандарын, ҡасанға тиклем ултырасағын әйтеүҙәрен талап итеп, асыулы хат яҙҙы. Паспорт мәғлүмәттәрен, ҡайҙа һәм кем булып эшләүен, «минең турала шунан һорай алаһығыҙ» тип мәктәп директорының исем-шәрифен, телефонын, тулы адресын яҙҙы, үҙенең ҡайҙалығын ғаиләһенә хәбәр итеүҙәрен, кесә телефонын тыңламауҙарын, өйө менән бәйләнешкә инергә ҡамасауламауҙарын һораны. Икенсе бит ҡағыҙға мотлаҡ кәрәк булған көнкүреш әйберҙәр, кейем-һалым исемлеген теҙҙе. Тотоуҙары оҙаҡҡа һуҙылһа, көндәр һалҡынаясаҡ, өйөнән йоҡа кейенеп килгән...

Яҙғандарын тотторор сығарғандың бишенсе көнөнә резина итек, ҡалын табанлы ботинка (быларын һорамағайны), иске кейем-һалым, фуфайка, бүрек, буйлы-буйлы арестант пинжәге менән ыштаны, башҡа ваҡ-төйәк, ашанты индерҙеләр, ә яҙмышына ҡағылған бер һорау-талапҡа ла яуап юҡ. Миңә беренсе нәүбәттә шулары кәрәк тәһә, тип һорағайны, һаҡсы, улары минең вазифаға кермәй, мин үтенесегеҙҙе етәкселеккә тапшырҙым, тиеү менән сикләнде. Шулай булырын Рәүеф самалай ине инде, ләкин, был тиклем дә оҙаҡҡа һуҙырҙар, тип уйламағайны. Айға яҡын, бәлки, унан да оҙағыраҡтыр, ваҡыт үтте, яуап һаман юҡ. Булмаҫ та, ахыры...

Шулай итеп, аҫҡа үлмәҫлек кенә туйынып, көнөнә өс мәртәбә бәҙрәфкә сығып килеп, кистәрен ярты сәғәт самаһы ихатала йөрөп, бер ятып, бер тороп, өй эсендә мөйөштән-мөйөшкә атлап, рәшәткәле тәҙрә төбөндә йондоҙ сәскәгә ҡарап зарығып үтә көндәре Рәүефтең.

Бер көн ҡолағына машина геүләүе салынды. Быға тиклем дә ишетә ине, әммә улар өйҙән йыраҡтан үтте шикелле, тоноҡораҡ ине тауыштары. Ә был юлы апасыҡ ишетелде. Минең арттан килмәнеләрме икән, тип йүгереп тигәндәй барып тәҙрәгә ҡапланды. Өс «ЗИЛ» машинаһы урман ауыҙына килеп туҡтаны. Туҡтауын-туҡтаны, әммә кабинанан да, кузовтан да төшөүсе оҙаҡ булманы, ниңәлер. Әйтерһең дә, кемде ҡалдырырға белмәй, аптырашып ултыралар. Ниһайәт, иң арттағы машинаның кабинаһынан «ҡара ҡарға» төштө лә, кузовтың артҡы бортын асып, эстән һонолған тимер баҫҡысты алып терәп ҡуйҙы. Өҫтән, Рәүефте тамам ғәжәпкә һалып, йәш кенә ҡатын килеп төштө! Әллә Сәғиҙәһеме? Буйһыны, хатта пальтоһы, ябынған яулығына тиклем уныҡына оҡшаған. Юҡ, ул түгел, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы.

Ҡайһы аралалыр йәнә бер «ҡара ҡарға» пәйҙә булды – әллә машинанан төштө, әллә машина артынан килеп сыҡты, Рәүеф шәйләмәй ҡалды – ҡатындың терһәгенән тотоп өй яғына әйҙәне. Үҙен ҡайҙа килтереп төшөргәндәрен хәтерендә ҡалдырырға теләгәндәй, ҡатын алан-йолан ҡарана, сырмалсыҡ үләнгә эләгеп бер нисә мәртәбә саҡ һөрлөгөп йығылып китмәне, һуңғы сиктә һаҡсының беләгенә аҫылынып өлгөрҙө. Ҡулында төйөнсөгө лә бар. Өйгә килеп еткәс, һаҡсы шарт та шорт йоҙаҡты асты. Өй эсенә тәүҙә ҡатынды үткәрҙе, унан үҙе килеп инде.

– Юламанов, яңғыҙыңа күңелһеҙ булмаһын өсөн һиңә иптәш ебәргәндәр, – тине «ҡара ҡарға», – ҡатын-ҡыҙһыҙ ҡыйындыр ҙа.

Шыма йөҙөндә бер мускулы ла һелкенмәне, хатта күҙе лә йомолманы, үҙенең һөмһөҙ шаяртыуынан уңайһыҙланыу ҙа кисермәне һаҡсы. Рәүеф уның ике-өс көн аша янына кереп йөрөгән бәндәме, әллә бөтөнләй икенсеме икәнен дә айыра алманы. Сөнки улар барыһы ла игеҙәк һымаҡ бер иш ине.

– Һаумыһығыҙ, – тине йәш ҡатын шым ғына, оялып-тартынып, һаҡсы сығып ишекте бикләгәс. Иҫәнләшеүҙән бигерәк, үҙе килеп инеүҙән тыуған көсөргәнешле тынлыҡты өҙөргә теләп тауыш бирҙе шикелле.

Рәүеф алдында мөләйем йөҙлө, ҡырлас танаулы, ситтәре ҡалмыҡтарҙыҡы ише ике яҡҡа тартылған ҡыҫығыраҡ күҙле, ҡыҫҡа сәсле, тулы кәүҙәле йәш ҡатын баҫып тора ине. Аяғында – ҡыҫҡа ҡуныслы зәңгәр резина итек, өҫтөндә – өй менән мунса, лапаҫ араһында йөрөй торған көҙгө пальто. Әйтерһең дә, көтөүҙән ҡайтмаған мөстән башмағын эҙләп ауыл осондағы әрәмәлеккә сыҡҡан. Ә бына йөҙҡиәфәте бер ҙә ҡайғылы түгел һымаҡ – хәлен тулыһынса һаман аңлап етмәйҙер, ахыры.

– Арыубыҙ әле, – тип иҫәнлекте алды Рәүеф, көттөрөп кенә. – Зинданда ултырғас, арыу тип әйтеп булһа. Әйҙә, үтегеҙ, үт.

– Һеҙ бында күптәнме? – Ҡатын һаман ишек төбөндә тороуын белде. Әйтерһең, йомошҡа ғына кергән дә хәҙер сығып китә.

– Байтаҡ инде. 23 августа килтергәйнеләр. Бөгөн нисәһе?

– Ун туғыҙынсы сентябрь.

– Тимәк, айға яҡын.

– Шунан бирле яңғыҙмы?

– Эйе.

– Ҡыйындыр бит?

– Рәхәт түгел. Нишләйһең, килтереп япҡастары, ултыраһың инде.

– Оҙаҡ тоторҙармы икән?

– Белмәйем. Сығармайҙар, һөйләшмәйҙәр, допрос-фәләнгә саҡырғандары юҡ. Ғәйеп тә таҡмайҙар. Тулы изоляция. Ашау байҙан, үлем Хоҙайҙан, – ҡыҫҡаһы, оноттолар. Нишләп алдылар һуң үҙеңде? Кемдең юлын ҡырҡтың, ниндәй түрәгә ҡаршы һүҙ әйттең?

– Минме инде түрә-ҡараға ҡаршы һүҙ әйтә торған кеше? Уйлайым-уйлайым да, бер ниндәй ҙә сәбәп таба алмайым. Берәйһе менән бутап ҡына килтермәһәләр.

– Ҡайһы ауылдан?

Ҡатын ауылының исемен атаны. Ул ауыл Рәүефтәрҙекенән 25 саҡрым арыраҡ. Булғаны бар. Мәктәптәре спортта, бигерәк тә йүгереүҙә, саңғыла уҙышыуҙа, йылдың-йылы районда беренселекте бирмәй, республика буйынса үткәрелгән ярыштарҙа ла алдынғылар иҫәбендә. Уҡыу-уҡытыу эштәре яҡшы ҡуйылған – һәр сығарылыштан кластарының яртыһы самаһы юғары уҡыу йорттарына керә. Ауылдарынан Салауат тигән шағир, Һиҙиәтов тигән йырсы сыҡҡан, бер фән кандидаты ла бар.

– Ниңә улай йыялар һуң халыҡты? Өс ҙур машина башы лыҡа тулы кеше. Килә-килә, берәү-икәүҙе төшөрөп ҡалдыралар, улар урынына икенселәрҙе ултырталар, йәнә туҡтайҙар ҙа тағы төшөрәләр, тағы алалар. Һәр ерҙә уларҙы көтөп, ҡаршы алып торған ҡара кейемле кешеләре лә бар. Ул ҡәҙәре халыҡты ҡайҙа таратып бөтмәк кәрәк? – Ҡатын ихлас ғәжәпләнде.

«Бына быныһы – етди һорау, һөйләшеүҙең төп темаһы»,– тип уйланы Рәүеф, уның кем, ҡайҙа эшләүен самаларға тырышып. Уҡытыусы түгел, берәй ойошма, әйтәйек, ауыл хакимиәте тирәһендә эшләгән кешегә лә оҡшамаған. Сауҙа тирәһенәндер, тиһәң, үтә бер ҡатлы күренә. Әллә шулай булып ҡылана ғынамы?

– Ил ҙур, ҡайҙа тығырға белерҙәр. Барыһын да алдан хәстәрләгәндәрҙер – мәктәп һалмайынса бала йыймайҙар.

– Ниндәй мәктәп? – Ҡатын аңламаны.

– Образлы әйтәм. Хөкүмәт уйламайынса бер нәмә лә эшләмәй. Ауылдан, ҡаланан берәмләп йыйып, йыйғанды ҡайҙалыр таратып, ябып йөрөү өсөн алдан уҡ ошо йорт ише урындар әҙерләгәндәрҙер, тим.

– Ауылдан, ҡаланан йыя башлаһалар, ай-яй, яман күп килеп сыға түгелме һуң? – Ҡатын йәнә ғәжәпләнде.

– Күп инде. Илде зинданға әйләндерәләр.

Шуны әйтеүе булды, башына ҡылт итеп бер уй килде: әгәр үтә ябай тип хисаплаған был мөләйем ҡатын уның янына махсус индерелгән шымсы булып сыҡһа? Машиналар өй эргәһенә килеп туҡтағас, уны таба алмай ана нисек оҙаҡ мәшәҡәтләнделәр. Был – бер. Икенсенән, ниңә һаман һорау алырға саҡырмайҙар йәки тәфтишсе инмәй? Тимәк, унан кәрәкле мәғлүмәт һурыу өсөн ошо ҡатынды көткәндәр. Бына килде, алдында баҫып тора. Юҡ-бар менән ҡыҙыҡһынған, һораған булып, тегеләргә мәғлүмәт йыясаҡ... Һаҡ ҡыланырға кәрәк, артығын ләпелдәү ярамаҫ.

Танышыу-һөйләшеүҙең аяғөҫтә өлөшө ошоноң менән тамамланды. Ҡатын пальтоһын, яулығын систе, төйөнсөгөн ултырғысҡа ҡуйып, эсенән күлдәкме, халатмы, унан бәләкәй көҙгө, төҙәнеү-биҙәнеү әйберҙәре сығара башланы. Ҡатын-ҡыҙ ҡайҙа ла ҡатын-ҡыҙ булып ҡала инде, тип көләмһерәне эстән генә Рәүеф, һыуға батып барғанда ла сәсен төҙәтер, иренен буяр. Шул уҡ ваҡытта күңеленә инеп оялаған шиге арта төштө: шпион! Кәрәк-ярағын нисек алып өлгөргән? Тимәк, алдан әҙерләнгән, белгән ҡайҙа барырын, тимәк, махсус задание үтәү өсөн ебәрелгән разведчик! Ана, Рәүеф йоҡа ғына плащынан, фуражкаһынан башҡа бер ниндәй кейем дә йыйып өлгөрә алманы. Уныһын да Сәғиҙәһе иҫкәртте, юҡһа, күлдәксән сығып китә ине.

Ҡатын сепрәк-сапрағын ултырғыс башына тәҫләп элде, биҙәнеү-яһаныу әйберҙәрен көҙгө алдына теҙеп ҡуйҙы, шунан, итектәрен сисергәме-юҡмы тигәндәй, аяҡтарына ҡарап торҙо-торҙо ла тилберләнеп эҙләнергә кереште. Ҡата-фәлән

ҡарай, тип фекер йөрөттө Рәүеф. Эҙләй торғас, кәрәген тапты бит: диван аҫтынан баштары ҡалтағайға әйләнгән иҫке тапочкалар тартып сығарҙы ла, ҡаҡҡылап-һуҡҡылап, аяҡтарына кейеп тә ҡуйҙы!

– Йә, ағай, танышайыҡ! – тине шунан, күңелле генә итеп. Көлгәндә бит остарында соҡорҙар хасил булды, тигеҙ аҡ тештәре ялтыраны. Килешә ине көлөү ҡатынға! Хәс тә йәш тай инде, өйрәтелмәгән, ҡулға эйәләштерелмәгән тайса! Уның етеҙ хәрәкәттәрен күҙәткән Рәүефтә ҡапыл ирлек теләге уянды, ҡаны ҡыҙҙы. Ҡатын, уның ҡыҙышыуын һиҙгәндәй, эйелеп йәнә аяҡтарына ҡараны, ҡулдары менән күлдәген һыпырып, теүәл буй-һынын белендерҙе, сәстәрен төҙәткеләне. – Былай ҡайғырып ултырыу килешмәҫ, ҡасан сығарырҙары билдәле түгел, тиһегеҙ, шулай булғас, – ҡатын кәрәкле һүҙен таба алмай берауыҡ тотлоғоп торҙо, – донъя күтәргә кәрәк. Ағай, исемегеҙ кем була?

– Рәүеф.

– Рәүеф, ти? – Ҡатындың күҙҙәре маңлайына һикерҙе, үҙе артҡа ҡайҡайып китте лә тотлоғоп-сәсәп көлөргә тотондо. Төрмәлә түгел, әйтерһең, ҡунаҡта ултыра. – Ә мин – Рәүфә.

Хәҙер Рәүеф көлөргә кереште, исемдәренең тап килеүенә аптырауҙан бигерәк, ҡатындың шулай кинәнеп көлә белеүенә һоҡланды. Гел баш баҫып, хәсрәтләнеп йөрөү ялҡытып та киткәйне, тамам өмөтһөҙлөккә бирелеп, башты әллә элмәккә тығырға ла ҡуйырғамы, тигән мәлдәре лә булманы түгел, шуға күңеле яңырып, кинәнеп көлдө лә ҡуйҙы.

– Рәүеф плюс Рәүфә тигеҙ була мөхәббәт! Мәктәптә мине шулай тип үсектерә торғайнылар.

– Унда ла Рәүеф бар инеме ни?

– Бар ине шул параллель класта. Тәнәфестә янға килә лә текәлеп ҡарап тик тора торғайны.

– Ә һин иғтибар итмәнең инде?

– Юҡ. Ул маңҡаға нисек иғтибар итәһең? Етмәһә, бәләкәй кәүҙәле, ҡолаҡтары дегәнәк япрағы һымаҡ ҡарпайып тора. Янымдан төрткөләп, әрләп ҡыуа торғайным. Ҡыуһам, күҙ йәше менән илай.

– Меҫкен аҙаш. Һинең мыҫҡыллауҙарға нисек түҙгән, тиң? Мин уның урынында булһам, атылыр ҙа үлер инем. Хәҙер ҡайҙа инде ул маңҡа?

Ҡатын, үкенес белдереп, ҡулын һелкте, йөҙөнә һүрәнлек ятты, нимәлер әйтергә уҡталғайны ла, өлгөрмәне – ишеккә һуҡтылар.

– Иптәшкә өсөнсө кешене лә килтерҙеләр, – тине Рәүфә моңһоу ғына. Үҙе һағайып ишеккә текәлде. – Күңелле буласаҡ.

Әммә ҡағыу ҡабатланманы. Күп тә үтмәй, ете-һигеҙ йәштәр самаһындағы ике малайҙың алмаш-тилмәш тәҙрәнән үрелеп ҡарағаны, унан, шарҡылдап көлә-көлә, йорттан ситкә китеңкерәп, маймыл һымаҡ ҡылана-һикерә урман яғына йүгергәне күренде. Бала-саға йөрөгәс, яҡында ауыл барҙыр, тигән һығымта яһаны Рәүеф. Ололарҙың килеп сығыуы ла ихтимал. Тимәк, бөтөнләй ҙә яңғыҙ түгелдәр, ул ҡәҙәре лә алыҫҡа алып китмәгәндәрҙер. Хәйер, бикле ултырғас, уларҙың булыу-булмауының, йөрөү-йөрөмәүенең файҙаһы юҡ, барыбер асып сығара алмайҙар. Тирә-яҡта тормош бар, кеше йөрөп ята, тип кенә үҙ-үҙеңде тынысландырмаһаң...

Ә бына Рәүфәнең килеүе яҡшы булды. Ул инде, иптәш булыуҙан тыш, эс бошорғос яңғыҙлыҡтан ҡотҡарҙы, һөйләшеп-аралашырға мөмкин, ашарҙарына бешереп-төшөрөр ҙә әле, юҡһа, был эштән тамам ялҡҡайны.

– Йә, Рәүеф ағай, булмаһа, өй йыйыштырып алайыҡ. Һинең, күпме йәшәп, бер нәмә лә эшләмәгәнең күренеп тора. Иҙән бысраҡ, бөтә ерҙә саң.

Рәүефкә уңайһыҙ булып китте. Әлбиттә, бер-ике тапҡыр һепереп сығарҙы иҙәнде, әммә йыуманы, һыуҙы сарыф иткеһе килмәне, саңды ла һөрткөләне, йыйыштырған да булғайны. Былай ул тиклем дә эт ояһы кеүек түгел дә, ярай инде, теләгәс, әйҙә...

– Иң беренсе нимә кәрәк? – Рәүфә тирә-яғын байҡаны. – Һыу, тас, сепрәк. Бармы? Һыу ҡайҙа?

– Бидонда.

– Бидонда. Аңлашылды. Әйҙәгеҙ, Рәүеф ағай, һеҙ карауат, өҫтәл, ултырғыстарҙы күсереп тороғоҙ, мин йәһәт кенә иҙәнде йыуып сығарайым. Шунан урындарына кире ултырта барырһығыҙ. Шулай тиҙерәк булыр.

– Һин ифрат егәрле икәнһең дә! Әллә шулай ҡыланаһың ғынамы? Әйтерһең, төрмәгә килмәгәнһең, ә өйөңдә ҡунаҡ ҡаршыларға әҙерләнәһең. Бында әллә бер көн, әллә ике көн тоталар. Һин килгәс, эштәре тиҙерәк тә китер, тип уйлайым – ҡатын-ҡыҙҙы оҙаҡлатмаҫтар бит инде.

– Ҡылансыҡҡа оҡшағанмынмы әллә? – Шыңғырҙатып көлдө ҡатын. – Ҡасып китһәң дә сәсеп кит, ти. Саң-туҙан эсендә ултырайыҡмы ни? Давай, давай!

Бәхәсләшеп тороуҙан мәғәнә юҡ ине. Рәүеф ҡалҡынды ла, ҡатын әйткәнсә, өҫтәл-ултырғыстарҙы, карауатты, диванды иҙән уртаһына күсерҙе. Рәүфә бер ыңғайҙан тәҙрә төптәрен, өҫтәл-ултырғыстарҙы, шкафты һөрттө, унан электр сәйнүгендә һыу ҡайнатты ла кухнялағы ҡашығаяҡты йыуыуға тотоноп китте.

Бер килке Рәүеф, онотолоп китеп, үҙен өйөндә һымаҡ һиҙә башлай, аңына килгәс, Рәүфәне Сәғиҙәһе менән сағыштыра. Ләкин был оҙаҡҡа бармай, ҡатынын һағыныу һағышы йөрәген бороп ала, йөрөй торғас, теге хыянатсыл шиге йәнә килеп йәбешә: инеү менән тигәндәй дәртләнеп эшкә тотонғас, – уның эсбауырына инеп ышанысын яуларға кәрәк тәһә – был сибәркәй, ысынлап та, уның янына махсус индерелгән шымсылыр. Бында килеп эләккән кеше башын юғалтып ҡайғырыр ине, ә был, өй йыуырға өмәгә килгән күрше кеүек, һепереләп эшләп алды ла китте.

– Бына, исмаһам, кеше йәшәгән өйгә оҡшап ҡалды. Бысраҡты, саң-туҙанды яратмайым. Өйҙә тәртип, таҙалыҡ булырға тейеш. Саҡ ҡына ял итәйек тә ашау яғын хәстәрләрбеҙ. Һеҙ нисектер, Рәүеф ағай, мин асыҡтым – кисә кистән бирле бер нәмә ҡапмағанмын.

– Минең дә йүнләп ашағаным юҡ инде. Тамаҡ ҡайғыһымы?! Ҡоро-һары менән мөрхәтһенәм шунда.

Рәүфә дөгө бутҡаһы ҡуйҙы, сәй ҡайнатты. Һөтһөҙ генә сәйләп, ҡапҡылап алдылар.

Оҙон-оҙаҡҡа һуҙылып кис етте. Ҡояш теләр-теләмәҫ кенә алыҫтағы ҡара урман аҫтына сумды. Гөжләп ике «ЗИЛ» уҙҙы, әммә туҡтаманылар – уларҙың икәүһен генә ҡалдырырға булдылар, ахыры; ҡайҙалыр олоп-олоп эт өрҙө, кеше тауышы ишетелеп ҡалды, мылтыҡ гөрһөлдәне, күктә бер-бер артлы йондоҙҙар атылды. Берауыҡ һүҙ-хәбәр тынып ҡалған арала Рәүеф тәҙрә аша тышҡа текләп торҙо, «ҡара ҡарға»ның һәр көндәгесә, дөрөҫөрәге, кистәгесә, өйҙө уратып ҡабаланмай ғына йөрөүен күҙәтте. Ул һәр ваҡыттағыса уҡлауҙай төҙ, теүәл, бер артыҡ хәрәкәт яһамаҫ һәм, әлбиттә, гел уяу. Рәүеф йәнә өйөнә шылтыратып ҡараны, йәнә теге ҡалын тауыш «Мин иҫкәрттем бит, башҡа шылтыратма, юҡһа, телефоныңды тартып алырға мәжбүр буласаҡмын» тип бәйләнештә өҙҙө.

Ошо мәлдә Сәғиҙәһе нишләй икән? Көтөүҙән мал-тыуарҙы ҡаршылайҙыр йәки һыйырын һауып ултыралыр, һауыр ҙа башмаҡты эҙләп сығыр. Табып алып ҡайтҡас, балалары менән киске аш ашар, шунан уларҙы йоҡларға әҙерләр. Улары, атай ниңә һаман ҡайтмай, тип ныҡышыр. Бигерәк тә малайы күңелһеҙләнәлер.

Сәғизәһе тынысландырған, ҡайта, оҙаҡламай ҡайта, күстәнәс йә берәй бүләк алып ҡайта, тип алдаған булалыр. Ай, эт талағырҙары, ҡайҙан ғына килеп ҡапты ҡулдарына? Алданыраҡ һиҙгән булһа, сит ауылдағы берәй туған-тыумасаһына йә дуҫ-ишенә барып ятыр ине. Йығылырымды белһәм, һалам түшәп ҡуйыр инем, тигән һымаҡ, ҡайҙан ғына беләһең инде «ҡара ҡарға»ларҙың төнөн килеп баҫыуҙарын? Хәйер, ул төн тапмаһалар, иртәгәһенә, иртәнән һуңына барыбер эләктерерҙәр ине – гел генә йәшенеп йәки ҡасып йөрөп булмай. Кеше энә түгел, ҡара исемлектәренә теркәлгәнһең икән, ер аҫтына инһәң дә соҡоп сығарасаҡтар.

Утты тоҡандырҙылар. Рәүеф шкафтан түшәк, одеал, мендәр сығарҙы. Ҡарайһайлай торғас, тотонолған, ярайһы уҡ керләнгән простынялар, пододеяльниктар араһынан сағыштырмаса таҙаларын табып, ҡатын быға тиклем Рәүеф йоҡлап йөрөгән сеткалы тимер карауатҡа – үҙенә, Рәүефкә диванға урын йәйҙе, керләнгәндәрен, йыуырға тип, ситкә өйөп ҡуйҙы.

– Рәүеф ағай, телевизор бар, радио көләпәһе, ҡарайһыңмы, тыңлайһыңмы һуң?

– Маташтырып ҡараным, икеһе лә эшләмәй.

– Тимәк, насар маташтырғанһың, – тине ҡатын, – бына иртәгә ныҡлабыраҡ маташтыр, бында ятыу оҙаҡҡа китһә, телевизор ҡарамай, радио тыңламай ултырайыҡмы ни? Донъянан артта ҡалып, тамам ҡырағайға әйләнәбеҙ ҙә баһа.

Рәүеф, ысынлап та, иртәгә ныҡлап ҡарарға кәрәк, тигән уйға килде. Был бисәне ниңә элегерәк килтермәнеләр икән, тигән уй ҙа төштө башына, ҡара, килеп керҙе лә донъя көтөп алды ла киттесе. Ай, үткер үҙе, үткер. Шунан күңелен йәнә баяғы шиксел уй ҡаға: ысынлап шпион булһа? Унан һурған бар мәғлүмәтте, ни ҡыланғанын, һөйләшкән бар хәбәрҙе «ҡара ҡарға»ларға ошаҡлап-еткереп торасаҡ. Ошаҡлай-ошаҡлай ҙа, ҡотола алмаҫлыҡ итеп Рәүефте муйынынан батырып,үҙе сығып китә...

Көнө буйы машинала һелкенеп килеп, етмәһә иҙән, ҡашығаяҡ йыуып, өйҙө йыйыштырып, саң һөртөп тамам арыған Рәүфә, ятайым әле, Рәүеф ағай, тине, кис ныҡлап төшөп тә өлгөрмәгән бер мәл. Бәй, ят, тип яуапланы Рәүеф, ҡатынды йәлләп. Теге аяғын, өҫтөн сисеп, төнгө кейемен кейҙе лә юрған аҫтына сумды. Һәммәһе лә ябай, ҡәҙимге килеп сыҡты, әйтерһең, үҙ өйөндә. Ә Рәүеф оҙаҡ йоҡлай алмай этләнде, уйланып тик ятты. Бер нисә мәртәбә тороп, ҡыҙыл сәскәгә ҡарап торҙо – ул баҙлауыҡ кеүек яна ине. Арып серемгә киткәндә таң һыҙыла башлағайны.

Бер көндө улар араһында ошондай етди һөйләшеү булды. Ул турала хәбәр көн дә, хатта көндәр буйы бара, әммә нисектер өҙөк-йыртыҡ, өҙөлөп-ялғанып тигәндәй. Ә был юлы...

– Рәүеф ағай, былайтып күпме ятырбыҙ икән?

– Беҙҙең ғәйепте, йәнәһе, иҫбат итеп бөтөнләйгә япҡансы, иҫбат итә алмаһалар, сығарғансы инде.

– Улайһа, ниңә килмәйҙәр йә саҡырмайҙар һуң? Минең килеүгә лә әллә нисә көн үтте.

– Кем белә инде? Закон үҙҙәренең ҡулында, нимә теләйҙәр, шуны эшләйҙәр. Мин һаҡсыға әллә күпме әйтеп ҡараным, талаптарымды яҙып та бирҙем. Яуап һаман юҡ.

– Бәй, нимәлер ҡылырға кәрәк тә инде. Нисек өнһөҙ-тауышһыҙ ултырабыҙ?

– Кәрәк тә бит, тик нимә? Ишек ике йоҙаҡҡа бикле, тәҙрәләрҙә – рәшәткә, стеналарҙы емерерлек, түбәне алырлыҡ түгел. Етмәһә, ҡулда бер ҡорал юҡ.

– Ә баҙ?

Рәүеф телһеҙ ҡалды. Был турала уйламағайны түгел, ҡат-ҡат уйлағайны, тик ғәмәлгә ашыра алмаҫлыҡ әмәл тип ҡарағайны. Телһеҙ ҡалыуы шунан – фекерҙәренең тап килеүе. Ҡара һин уны, барыбер ҙә уйлап йөрөгән!

– Һабы һыныҡ көрәк менән бер үҙем нисек ҡаҙа алырмын икән?

– Көрәк тә бармы ни?

– Әйтәм бит, һыныҡ көрәк. Баҫҙа ята.

– Төшөп ҡараныңмы?

– Ҡараным.

– Көрәк тә булғас... Унан килеп, һин яңғыҙ түгел, хәҙер беҙ икәү. Һиңә ул нигеҙҙе күптән соҡорға кәрәк ине. Мине көтөп ултырҙыңмы? – Рәүфә йәнә көлдө. – Тупрағын ситкә алып булһа ла торормон.

– Башларбыҙ ҙа, тотоп та сығарырҙар.

– Сығарһалар, сығырбыҙ. Рәүеф ағай, һеҙ хәс тә теге әкиәттәге һымаҡ һөйләйһегеҙ. Ҡартайған ата-әсәһе, балаларына, сәсеү етте, әйҙәгеҙ, ашлыҡ сәсәйек, тигәс, оло ҡыҙы көҙгә кейәүгә сығасағы, малайы армияға алынасағы, кесе ҡыҙы уҡырға китәсәге тураһында белдергән. Йәнәһе, уларға кәрәкмәй, көҙгә береһе лә өйҙә ҡалмай. Әммә оло ҡыҙ кейәүгә сыға алмаған, малайҙы армияға саҡырмағандар, кесе ҡыҙ уҡырға инмәгән, һөҙөмтәлә өсәһе лә өйҙә ҡалған, ти... Шул әкиәтте уҡығанығыҙ бармы?

Нишләп белмәһен, белә ул әкиәтте Рәүеф. Һүҙ ҙә юҡ, был юлы Рәүфә хаҡлы: ҡул ҡаушырып, ишекте асыуҙарын көтөп ултырыуҙан фәтүә юҡ, нимәлер ҡылырға кәрәк.

– Үҙең әйтмешләй, «ҡара ҡарға»лар кергәндә ишек асыла бит, бәҙрәфкә лә, һауа һуларға ла сығаралар – ҡаса алыр инең?

– Юҡ.

– Нишләп?

– Һаҡсылар беҙҙең һымаҡ түгел, икенсе тоҡом кешеләре. Үҙең иғтибарлап ҡара: оҙондар, көслөләр, йөҙҙәрендә тамсы нур юҡ. Эргәләге һаҡсынан берәй төрлө күҙ яҙҙырған хәлдә лә, улар күҙәтеү вышкаһынан күрәсәк тә арттан төшәсәк. Ә мин уларҙың нисек шәп йүгергәнен беләм. Вышканан башҡа ла беҙ белмәгән берәй төрлө дозорҙары барҙыр әле. Кеҫә телефонын тыңлағас, үҙең аңла инде. Килтергәндә бер егет ҡасты – тоттолар, ошонда керер алдынан мин дә ҡасып ҡараным – килеп сыҡманы.

Рәүеф ике ваҡиғаны ла ентекләп һөйләп бирҙе.

– Нисек ҡыйыулығың етте улай, Рәүеф ағай? – тип ғәжәпләнде, хатта һоҡланғандай итте уның ҡылығына Рәүфә.

– Бикләнге килмәгәндән инде. Ысҡына алырмын, тип уйлағайным да, булманы. Бәлки, яҡшығалыр ҙа: ҡасырһың, өйөңә ҡайтып етә алмай ҡара урманда аҙашып үлерһең. Бәлки, һине осратыуға булғандыр...

«Рубин» – илдең тәүге төҫлө телевизоры. Артҡы ҡапҡасын асып тотҡолап, һелкеткеләп, тикшереп ҡарағайны, бер сымы ысҡынған булып сыҡты. Тоташтырһа – эшләй, әммә төҫһеҙ һәм һикертеп-һикертеп күрһәтә. Борғослауҙан фәтүә булманы. Рәүфә, ярай, артабан булаштырма, юҡһа сәпсим боҙоп ҡуйырһың, тигәс, туҡтаны – кистәрен шуға булһа ла текәлеп ултырырҙар. Ике тәҙрә араһында элеүле торған радионы алғайны, өнһөҙ – динамигын аҡтарып алғандар. Берәй ергә ырғытып ҡуймағандармы тип, эҙләргә тотондо. Йөрөй торғас, шкаф артына тығылған ҙур бер плакатҡа юлыҡты. Унда рәссам йыһанды гиҙгән кешене төшөрөп ҡуйған. Йәнәһе, совет кешеһе күккә оса, йыһанды үҙләштерә. Бәхетле йылмайған һындың тирә-яғында йондоҙҙар, ҡояш, зәңгәрһыу-аҡ болоттар йөҙә,

ракеталар оса. Әйтергә лә түгел – ирек, хөрриәт. Плакатҡа «Вперед – к коммунизму!» тип яҙып ҡуйылған. Был йортта кешеләр ирекле йәшәгәндә, ошо плакаттың стенала эленеп тороуы тәбиғи ҙә булғандыр, өйҙө зинданға әйләндергәс, көлкөнө килтерә, хатта күңелдә нәфрәт ҡуҙғата. Шуға ла берәйһе алып, шкаф артына тығып ҡуйғандыр ҙа.

Бында төртөлөп, тегендә төртөлөп, нимә эҙләгәнен үҙе лә белмәй бер килке йөрөгәс, тәҙрә янына барып баҫты. Тәҙрә – уларҙы тере донъя менән тоташтырыусы, тышҡа ҡарап үҙҙәренең әлегә иҫән икәнен дәлилләүсе берҙән-бер ҡаралты. Шул ваҡыт тәҙрә быялаһына ҡайҙандыр ҙур ҡара себен – быға тиклем күренмәгәйнесе – килеп бәрелде, шаҡ итеп ҡалды, әйтерһең, таш бәрҙеләр. Бәрелде лә, шаңҡыптыр, тупһаға әйләнеп төшөп ятты. Бер аҙ хәл йыйғас, ҡыймылдап, яңынан өҫкә атылды ла тәртипһеҙ рәүештә осорға тотондо. Юҡ инде, килеп ҡаптың минең ише, ярыҡ-фәлән юҡ тәҙрәлә ireккә сығырға, һуңғы көндәреңә тиклем шулай эҙләнергә тура киләсәк. Хәйер, һиңә бында еңелерәктер ҙә, сөнки тышта көҙ, оҙаҡламай һыуыҡтар бәрәсәк, ҡар яуасаҡ.

Себен бер тәҙрәнән икенсеһенә осто, әйтерһең дә, унда ҡотолоу тишеге әҙерләп ҡуйғандар. Әммә алданды мәхлүк: унда ла һис ниндәй ярыҡ юҡ. Тәҙрә рамдары яңаҡҡа лыпын индереп ҡуйылған, быяла ла рамға һауа ла кермәҫлек итеп йымлап ултыртылған. Элек, үҙ өйөндә, оялмай-нитмәй аш өҫтәленә, ризыҡтәғәмгә ҡунып йонсотҡан себен, әле килеп, Рәүефкә нисектер йәл тойолдо. Үҙе тотҡонлоҡта ултырғанға шулайҙыр – ул да системаның хоҡуҡтары ныҡ сикләнгән меҫкен себене бит...

...Бер төндә шөкәтһеҙ дөбөрләтеүгә уянды Рәүеф. Өйҙәрен, әйтерһең, ҡайҙалыр һөйрәтә башланылар. Ҡурҡып ҡына күҙен асты ла, башын ҡалҡытып, сәйер тауышҡа ҡолаҡ һалды. Дөйөм геү араһында кеше һөйләшкәне, ат бышҡырғаны, бер-береһенә бәрелгән тимер сыңлауы, «ҡара ҡарға»ларҙыҡы ише ҡырҡа бойороҡтар ишетелгәндәй. Был һис малай-шалай йөрөүе түгел, шау-геү алыҫтан, урман эсенән килә һәм яҡынайған һайын көсәйә бара. «Нимә был?» тип баш ватты Рәүеф, тауыштың айышына һис төшөнә алмай, шунан түҙмәне, тороп, урам яғы тәҙрәһенә барҙы. Йорттарынан ике йөҙ – өс йөҙ метрҙағы урман ауыҙынан колонна-колонна булып теҙелешеп-эйәртенешеп халыҡ ташҡыны үтеп бара! Ҡараңғы булғас, уларҙың кем икәнен һис танырлыҡ түгел, шулай ҙа ай яҡтыһында йәйәүле ғәскәр атлағанын самаларға була. Штыктар ялтлап китә, аксельбанттар, погондар шәйләнә, бейек фуражкалар күренә. Был ни ғәләмәт, тип иҫе китте Рәүефтең, үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмай. Форма-амуницияларына ҡарағанда, 1812 йылғы ғәскәр бит! Кино төшөрәләрме, әллә берәй төрлө учение барамы? Әллә күпме пехота үткәс, ауыр пушкалар тартҡан мисәүле аттар, улар артынан ябыҡ повозкалар, ҙур-ҙур төйөнсөктәр, тоҡтар, һандыҡ һымаҡ нәмәләр тейәлгән арбалар үтте. Юҡ, кино төшөрөү түгел был, учениеға ла оҡшамаған, ысын һуғыш бара – дошман шәйләмәһен өсөн төнөн хәрәкәт итеүҙәре йәки позиция алыштырыуҙары. Регуляр ғәскәр артынан, саҡ ҡына ҡалыбыраҡ, арҡаларына уҡ-һаҙаҡ аҫҡан, һөңгө тотҡан, баштарына ҡолаҡсын бүректәр кейгән кешеләр төркөмө ағыла башланы. Эйе, былар – беҙҙекеләр. Ҡана, тәҙрәне ҡағайым, һөрәнләйем, бәлки, ишетерҙәр ҙә килерҙәр, ишекте асырҙар, мин дә улар менән китер инем, тип өмөтләнде, әммә барыбер ишетмәйәсәктәрен, ишеткән хәлдә лә ғәскәр сафынан айырылып сыға алмаясаҡтарын самалап (унан Рәүфә лә йоҡлай), был ярһыу ниәтен көскә ауыҙлыҡланы... Әллә күҙенә күренәме милләттәштәре, әллә Ер шары кирегә әйләнеп, ваҡыт бөгөнгөнән үткәнгә боролдомо?

Оҙаҡламай ғәскәр урман эсенә инеп бөттө, әйтерһең дә, ғибрәт дәү йылан ер ярығына төшөп юғалды. Рәүеф, кино кадрҙары һымаҡ күҙ алдынан үткән күренештән һис тыныслана алмай, оҙаҡ баҫып торҙо ҡараңғылыҡҡа текәлеп. Яҡтыра башланы, күҙенә йоҡо эленмәһә лә, урынына барып ятырға мәжбүр булды.

– Төнөн урман ауыҙынан ҙур ғәскәр үтеп китте. – Иртәнге сәй эскәндәрендә Рәүеф шулай тине, тулҡынланып. Әйтергәме-юҡмы, тип байтаҡ икеләнде әле өндәшер алдынан. Шуға ла хәбәрен сәйгә тиклем һуҙҙы.

– Ғәскәр, ти? Ниндәй ғәскәр? – Рәүфә аптырап уға текәлде. – Кешеләрме ни?

– Ғәскәр булғас, кешеләр инде. 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыусылар. Башҡорттар ҙа бар ине.

– Рәүеф ағай, һин нимә? – Ҡатын сәй эсеүенән туҡтаны ла сынаяғын өҫтәлгә ултыртты. – 1812 йылғы ғәскәр икәнен ҡайҙан белдең?

– Кейемдәренән, ҡоралдарынан.

– Ул саҡтағы ғәскәр әле нисек йөрөһөн, ти, ул? 200 йыл ваҡыт үткән. Төшөңә кергәндер.

– Мин төш менән өндө айырмайыммы ни? Аҡылым теүәл әле. – Рәүеф үпкәләгәндәй итте.

– Һин нимәнелер бутайһың, Рәүеф ағай, барыбер. Ултыра торғас, аҡылыңа зыян килмәнеме? Алла һаҡлаһын.

– Ҡуйсәле. Бына һиңә ҡараған ошо күҙҙәрем менән күрҙем. – Рәүефтең асыуы килә башланы. – Беҙҙе ҡалдырып киткән йүнәлештән килделәр ҙә урман эсенә инеп юғалдылар. Күп ғәскәр – полк, дивизия ғына барҙыр, күберәк булмаһа... Мин үҙем да иҫ-аҡыл китеп, ышанмай ҡарап торҙом.

– Ә ниңә мине уятманың? Икәүләп ҡарар инек. – Рәүфә йөҙөндәге ғәжәпләнеү ышанмауға әүерелде. Шуға ла хәбәрҙе шаяртыуға борорға тырышты. – Ҡысҡырып берәйһен саҡырыр инек тә, ишекте астырып, улар менән китеп ҡотолор инек был төрмәнән.

– Йоҡлаһын, тинем шул... Хәйер, мауығып ҡарап онотҡанмын.

– Бер өй эсендәге кешене нисек оноторға була? Ҡыҙыҡ һин. 200 йыл элек йәшәгән кешеләр бөгөн нисек йөрөй алһын? Хәҙер уларҙың һөйәктәре лә сереп бөткәндер инде.

– Ышанмаһаң ышанмайһың инде. Ә мин күрҙем. – Рәүеф урынынан тороп уҡ китте.

– Ярай, Рәүеф ағай, юҡҡа бәхәсләшмәйек. Һин күргәнһең, мин – юҡ. Башҡорт тотоп ҡарамайынса ышанмай. Ул ғәскәр, моғайын, кире ҡайтыр, шунда мине мотлаҡ уят, йәме?

Был хәлдән һуң бер нисә көн үткәс, Рәүеф, бәлки, ысынлап та, күҙемә күренгәндер ул ғәскәр, мираж булғандыр, тип шикләнә башланы. Сөнки быны булыуы мөмкин түгел: 1812 йылғы Ватан һуғышы XXI быуат башына нисек әйләнеп ҡайта алһын?

Төштән һуң, кискә ҡәҙәр, «ҡара ҡарға»ның ныҡлы күҙәтеүе аҫтында баҡсаны сүптән таҙарттылар, уны өйөп яндырғас, ер ҡаҙҙылар. Был эш Рәүефкә лә, Рәүфәгә лә танһыҡ ине, шуға ла кинәнеп эшләнеләр, әйтерһең дә, үҙҙәренең баҡсаһы. Баҡсаның исеме генә ҡалып бара, ташландыҡ хәлгә еткән. Күрәһең, байтаҡтан бирле кеше ҡулы теймәгән, тейгән хәлдә лә хужаларса ҡыланмағандар. Шунда Рәүеф Рәүфәгә бикләнеүенең тәүге көндәрендә үк иғтибар иткән һәм тәҙрәнән гел ҡарап-күҙәтеп торған йондоҙ сәскәне күрһәтте. Өшөмәһен өсөн төбөнә ҡалын итеп кипкән япраҡ һалдылар. Быға Рәүефтән бигерәк Рәүфә ҡыуанды. Ғөмүмән, ул шаярҙы, көлдө, Рәүефкә тупраҡ киҫәге, кипкән ағас ботаҡтары бәрҙе, унан

оҙаҡ итеп һынсыл ҡарап торҙо, йүгереп китте. Хәс тә ҡолонсаҡ, әсәһе эргәһендә булғанға, йәшел үләнгә, иркенлеккә ҡыуанған ҡолонсаҡ! Рәүеф тап бөгөн, баҡсала эшләгән арала, уның быға тиклем күрмәгән-шәйләмәгән кешелек сифаттарын асты, һоҡланды, оҡшатты.

Кистән һәр ҡайһыһы үҙ урынына ятты. Ләкин бының бөгөн әҙәп һаҡлау өсөн генә икәнен икеһе лә аңлай ине. Рәүфә, хәйерле төн, матур төштәр теләп, бөгәсә йәнә кеше-фәлән күрһәң, Рәүеф ағай, үҙең генә ҡарама, мине лә уят, тип шыңғырҙатып көлдө лә, мут йылмайып, юрғаны аҫтына сумды...

Һәр ҡайһыһы борғоланып, әйләнеп-тулғанып, уфтанып оҙаҡ ятты. Төн уртаһы еткәс, Рәүеф түҙмәне – күпме түҙергә мөмкин, тимерҙән яһалмаған, тере кеше ләһә – ҡомарына хужа була алмай, ҡалҡынды ла карауатҡа ынтылды. Йөрәге күкрәген бүҫеп сығып бара, тәне пружиналай ҡыҫылып, шартлап ысҡыныр хәлгә еткән, әйтерһең дә, быға тиклем ҡатын-ҡыҙҙы бер ҙә татымаған үҫмер сағы.

Рәүфә уның уй-ниәтен аңлап, үҙе лә көтөп ятҡан, ахыры: Рәүеф дивандан ҡалҡыныу менән, юрғанын төпкә һирпте лә ҡулдарын һуҙҙы – ирендәр ҡушылды, тәндәр ҡауышты, тын алыуҙары туҡталды, гүйә...

Һабантуйҙа сапҡан аттар шикелле арып-талғас, бер килке өндәшә лә алмай яттылар. Ярһыуҙары яйлап үҙ ярҙарына ҡайтып, хәл йыйғас, Рәүфә стенаға боролдо, һыҡтағаны ишетелде.

– Бәй, аҙашбикә, ни булды? – тине Рәүеф, ҡулын уның яурынбашына һалып. «Аҙаш» тип беренсегә әйтте. Яҡын күреп әйтте. Ҡатын өндәшмәне, шулай ҙа һыҡтауынан туҡтаны.

– Гонаһ ҡылдыҡ бит, – тине, байтаҡ һүҙһеҙ ятҡас.

– Үкенәһеңме әллә? Үкенмә. Беҙ ир менән ҡатын араһында була торған тәбиғи эште башҡарҙыҡ.

– Ҡалай эгоист икәнһең дә. Тәбиғи эш, имеш... Тәбиғи эш – һыйыр һауыу, балалар, өй ҡарау, бесән сабыу. Ә был... бер-береһен яратҡан кешеләр араһында ғына...

– Бер-беребеҙҙе яратабыҙ, тип иҫәпләйек, улайһа. Ҡасандан бирле бергә, бер ҡыйыҡ аҫтындабыҙ, йоҡлап йөрөгән урындарыбыҙ йәнәш. Күпме түҙергә була? Аҡылдан яҙа яҙҙым бит. Ғәфү ит. – Рәүеф бушанды, уға еңел һәм рәхәт. Әммә үҙендә ғәйеп тә һиҙҙе:катын янына үҙе барҙы һәм көслэгән һымағыраҡ килеп сыҡты – ир теләгенә ҡатын ҡаршылашып тора аламы? – Ярай, улай йөрәгеңә яҡын алма, һин ҡатын кеше... Ҡыйын булмағандыр бит...

Рәүфә уның яғына әйләнде, муйынынан һығып ҡосаҡланы.

– Кәнтәй теләмәһә, арлан киләме? – тине, йәнә һыҡтап, унан тәрән көрһөндө лә Рәүефтең ирендәренән, күҙҙәренән үпте. – Ир менән күпме йәшәп, бындай ҙа рәхәтлекте кисергәнем юҡ ине. Үләм икән тип торам. Килтереп япмаһалар, ғүмер буйы бының ниндәй ләззәт икәнен белмәҫ инем.

Ошо ҡайнар төндән һуң ике төн йәнә айырым йоҡланылар. Рәүеф, ҡатынды рәнйетермен, тип тә уйланы, Сәғиҙәһе алдында ғәйеп тойғоһо кисереүе лә бар ине. Тормош шундай шарт алдына килтереп ҡуйғас, нишләйем, малай түгелмен, тип үҙенең ҡылығын аҡланы ла. Өсөнсө төнөнә, түҙмәй, йәнә карауатҡа тартылды... Бынан ары, ирле-ҡатынлы кеүек, кистән үк бергә яттылар. Яҡынлыҡтары тәүге тапҡырҙағы ише ҡойон, дауыл, ғәрәсәт үк булмаһа ла, һаман да ләззәтле байрам ине.

– Балағыҙ юҡмы ни?

Ҡатындың көүҙә төҙөлөшө, ҡыҙҙарҙыҡы кеүек тығыҙ тәне бала тапмағанына ишаралаһа ла, ҡыҙыҡ өсөн генә һораны бер төндө Рәүеф.

– Юҡ шул.

– Нисә йыл йәшәйһегеҙ һуң?
– Өс. Дүртенсегә китте.
– Бишәр, унар йыл балаға уҙмағандар ҙа була. Көтөргә, өмөтләнергә...
– Ундайҙар ҙа осранымы? – Тимер зыңы яңғырап китте ҡатын тауышында. Рәүеф, ирекһеҙҙән, көнләшә лә башланы был, тип уйланы. Ҡатын-ҡыҙ ирен һәр саҡ үҙенең шәхси милке иткеһе килә, хатта зинданда ла.
– Булды, тимәйем бит. Уҡып, ишетеп беләм. Кеше араһында йәшәйем дәһә. Ана, беҙҙең ауылдағы йәш уҡытыусыларҙың һигеҙ йыл балалары булманы. Ниндәй генә санаторий, курортҡа йөрөмәне ҡатыны, больницаға ла ятып ҡараны, әбей-һәбей име тиһеңме. Туғыҙынсы йыл тигәндә генә сабыйҙары тыуҙы. Ә минән ҡалһаң, нишләрһең?
– Һинеке, тим инде. Үҙеңсе? Ҡатыныңа ни әйтерһең?
– Мин бит ауырға ҡалмайым.
– Ауылыңа бала күтәреп барһам йәки ҡатының һин ҡайтҡансы бала табып торһа?
Башына килтереп һуҡтылармы ни! Шаҡ итеп ҡалды. Сөнки был турала Рәүеф, ғөмүмән, уйламай ине: башҡа бисәләр йөрөй, ә һинеке – юҡ. Ирҙәр, ғәҙәттә, шулай уйлай. Эйе, ул да, күҙ ҙә йоммай, Рәүфә кеүек, бәй, бала ни – һинән инде, тип яуаплаясаҡ. Туғыҙ ай эсендә булһа, ышанырһың, унан да оҙаҡҡа китһә... Вәт, мәҙәк була инде! Рәүфәнең һорауына яуап бирә алманы Рәүеф, һүҙ тапманы. Шунлыҡтан асыуы килде лә хәбәрҙе тиҙерәк икенсе юҫыҡҡа төшөрҙө, дөрөҫөрәге, ҡатындың үҙенә ябырылды:
– Һин минең янға махсус ябылған шымсы түгелме ул?
– Аңламаным. – Ҡатын ихлас аптыраны. – Нисек махсус ябылған?
– Ултырған кешенән кәрәк мәғлүмәт алыу, ҡылған енәйәтте фашлау өсөн енәйәтселәр янына икенсе кешене, йәғни «утка» ултырталар. Ул тегенең эс-бауырына керә, ышанысын яулай ҙа ҡылған эшен быға һөйләй.
– Һин әллә шундай ҙур енәйәтсеме? – Рәүфәнең күҙҙәре ҙур асылып, йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе. – Ә мине ниңә шпион тип уйлайһың? Әйттем бит, төн йөҙөндә өйөмдән инеп алдылар ҙа һинең янына ҡалдырып киттеләр.
Рәүеф үҙенең шиге нигеҙһеҙ булыуын аңланы. Рәүфә алдамай, эсе таҙа, күңеле балаларҙыҡы һымаҡ керһеҙ. Ай, уйламайыраҡ әйтте, ахыры.
– Юҡ, мин былай ғына, һине һынар өсөн генә... – Ғәйепле йылмайҙы Рәүеф. Күпмелер ваҡытҡа ҡатындың аптырау ҡатыш үпкәле йөҙө үҙгәрмәне, һалҡын көйө ҡалды. Рәүеф ҡосаҡлап күкрәгенә ҡыҫҡас ҡына, йомшарғандай итте.
– Уйнап һөйләһәң дә, уйлап һөйлә, Рәүеф ағай... Рәнйеүем бар. Ошаҡ йөрөтөү, кенә ҡыуыу, кеше артында һөйләү ғәҙәтем юҡ. Шундай яратышҡандан һуң да быңдай уй нисек башыңа килгәндер?
– Әйттем бит, юрамал ғына, тип. Ярай, ғәфү ит.
Ҡатын өндәшмәне. Ир кешенең шулай аҡланыуына ышандымы, әллә барыбер ҙә шиге ҡалдымы – Рәүеф быны аңлай алманы. Шиге ҡалған хәлдә, бер уйлаһаң, йәтеш тә, сөнки ул биргән һорауҙы Рәүфә иҫенән сығармаясаҡ, тимәк, Рәүеф һалған ҡармаҡҡа эләккән көйө йөрөйәсәк. Тәүге мәлдә ниндәйҙер уңайһыҙлыҡ кисерһә лә, бер аҙҙан был уйынан арынды, хатта, дөрөҫ эшләнем, тигән ышаныс килде. Ҡатындың кәйефен кире ҡайтарыу өсөн, тел осонда ғына йөрөгән икенсе һорауын бирҙе:
– Ә теге параллель класстағы минең маңҡа аҙаш артабан ҡайҙа булды һуң?
– Үәт, бер нәмәне лә онотмайһың, ә, һин үҙең шпион түгелме икән әле? – Рәүфә йылмайғандай итте. – Ҡайҙа булһын, һыйыр ҡойроғона йәбешкән дегәнәк һымаҡ бер аҙым да арттан ҡалмай йөрөгәс, кейәүгә сығырға мәжбүр булдым мин уға.

Саҡ йығылып китмәне Рәүеф. Рәүфәнең хәбәре буйынса, бер нәмәгә лә эшкинмәгән бүкән тип күҙ алдына килтергәйне ирен. Ошо сибәр ҡатынды ризалата алғас, улай уҡ бешмәгән түгел, тимәк. Ныҡышлығы, әрһеҙлеге, түҙемлеге менән еңгәндер.

– Да-а-а, – Рәүеф тышҡа баҡты. Интриганың шулай ябай ғына тамамланыуы ғәжәпләндерҙе уны, хатта ниңә һорағанына үкенеп тә ҡуйҙы. Ҡыҙыҡһынмаған булһа, сер һаҡланыр, был татлы йәш ҡатынды ҡосоп ятҡан бәхетле ир кем икән, тигән көнсөл уй телгеләр ине күңелен. Хәҙер бөтәһе лә асылды, сер ҡалманы. Хәйер, төптән уйлап ҡараһаң, уға телгеләнергә урын да юҡ: был ҡатын менән ваҡытлыса ғына бергә. Рәүеф – үҙенең Сәғиҙәһенә, Рәүфә Рәүефенә ҡайтҡас, бер-береһен мәңгегә онотасаҡтар. Барыһы ла йылы хәтирә генә булып ҡаласаҡ. Шулай булыуы хәйерлелер ҙә...

Ашау байҙан, үлем Хоҙайҙан, тигән һымаҡ, ашауҙары, ысынлап та, буштан булып, хөкүмәткә бер тинлек тә хеҙмәт күрһәтмәй ятһа ла, бынан ҡасыу уйы бер минутҡа ла Рәүефтең башынан сыҡманы. Ишекте асып, дүрт яғың ҡибла, тип әйтеүҙәрен көтөү мәғәнәһеҙлек ине хәҙер. Күпме ваҡыт үтте, береһенең бер кергәне юҡ, ниңә килтереп япҡандарының сәбәбен аңлатыусы, ғәйеп тағыусы ла юҡ. Билдәһеҙлек – иң ауыр яза. Әллә тамам оноттолар, әллә тәүҙә шулайтып рухтарын һындырырға самалайҙар, белмәҫһең. Телефоны һүнде, яҙған талаптарына һаман яуап бирмәйҙәр. Тимәк, үҙенә, үҙҙәренә бер сараһын табырға кәрәк. Тик нисек, ни рәүешле? Берҙән-бер юл – баҙҙы ҡаҙыу. Ул фекер Рәүефтең башына тәүге көндәрҙә үк ингәйне-инеүен, тик һаман тотона алмай ҙа ҡуя. Йорттоң ҡайһы мөйөшөнән ҡаҙырға? Ишек яғынан ярамай – аңлашыла, баҡсаға ҡараған ике стена ла – вышка күҙәтеүе аҫтында. Бер яҡ ҡына ҡала. Бура ултырған бетон нигеҙ ер өҫтөнән ярты метр самаһы бейеклектә, ер аҫтында ла шул самалыр, күберәк булмаһа. Ана шул бетон аҫтынан үтеп, һаҡсы йөрөгән маршруттан ун – ун биш метр уҙып ергә ҡалҡырға тура киләсәк. Шунан да кәм ярамай, сөнки вышканан күренәсәк, унан килеп, «ҡара ҡарға» йөрөп ята. Уйылып төшмәһен өсөн алға хәрәкәт иткән һайын таяуҙар менән терәтеп барырға тура килер әле, өҫтәүенә.

Рәүфә тәүҙә Рәүефте оҙаҡ уйлауҙа ғәйепләгәйне, ошо хаҡта яңынан һүҙ ҡуҙғатҡайны, ҡурҡты ла киттесе. Бәй, үҙең әйттең дәһә, тигәс, берауыҡ өндәшмәй торҙо, унан, булашма, күңелем һиҙә: оҙаҡ тотмаҫтар, йонсоуың ғына булыр, тине. Рәүеф, үҙ сиратында, йәнә, был мине сығармаҫҡа самалай, һаман мәғлүмәт һауа, шпионлыҡ итә, тип уйларға мәжбүр булды.

– Көтөп ултырыу үлемгә тиң. Бөтөнләй сығармаһалар?

– Быға тиклем нишләп ултырҙың һуң? Мин килгәйнем, ҡаҙам да ҡаҙам... Ҡаҙ!

– Бәй, һине көттөм, – Рәүеф шаяртырға маташты.

– Улай булмай ул. Ҡасан да иҫтәренә төшөрөрҙәр. Мин, тикшерәләрҙер, справка-фәлән йыяларҙыр, кәрәкле кешеләрҙән һорашаларҙыр, белешәләрҙер, тип уйлайымсы. Кеше – энә түгел. Тейешле мәғлүмәт йыйғас, ултыртып ҡуйырлыҡ бер ниндәй ҙә енәйәт юҡлығын күрерҙәр ҙә бер көн, ишекте асып, сығығыҙ, ғәйебегеҙ юҡ икән, яңылыш япҡанбыҙ, тип әйтерҙәр...

– Ҡалай бер ҡатлы икәнһең дә. Беҙҙең менән бер кем дә шөғөлләнмәй, шөғөлләнһәләр, ғәйеп тағырҙар ҙа күптән судҡа оҙатырҙар ине. Нисә аҙна, какуй аҙна, ай, бер нисә ай ваҡыт үтте, һаҡсынан башҡа берәйһе индеме? Юҡ. Йә яңылыш, йәғни берәйһе менән бутанылар, йә райондан төшөрөлгән разнарядка буйынса ултырттылар. Так что, урыҫ әйтмешләй, спасение утопающих – дело рук самих утопающих.

– Әллә инде, Рәүеф ағай. Кешенең исем-фамилияһы, пропискаһы, йәшәгән ере, эше, күршеләре бар, ауылы, районы һәр ҡайҙа теркәлгән. Шулай булғас, ул нисек юғалырға тейеш? Мине ирем, һине ҡатының,– исмаһам, улар барыбер эҙләйҙер бит?

– Эҙләйҙер эҙләмәйсә. Тик беҙҙең бында икәнде улар ҡайҙан белһен? Ул мәғлүмәт бер ҡайҙа ла юҡ, бер кем дә әйтмәйәсәк уларға. Бындай учреждениеларҙың барыһы ла, хәрби частар кеүек, номер-һандар менән йөрөтөлә, ә уны юғары етәкселектәге бер нисә кешенән башҡа бер кем дә белмәй.

Рәүфә өндәшмәне, тәҙрә аша ҡайҙалыр текәлгән килеш шымтайҙы. Бер килке Рәүеф, был туңбашҡа нимә тип аңлатамдыр инде, аңлайһы кеше түгел, тип уйланы.

– Утыҙ етенсе йылда миллион-миллион кешене әлегеләй төндә алып китеп япҡандар. Япҡандар ҙа, йүнләп тикшереп тә тормай, атҡандар. Уларҙы 60-сы йылдарҙа ғына аҡланылар. Береһенең дә ғәйебе юҡ. Беҙҙең менән дә шул тарих ҡабатланыуы бар.

– Атырҙар микән ни шулай? – тип һораны Рәүфә, ҡурҡып.

– Бик ихтимал. Шуға, давай, мин ҡаҙайым, һин тәҙрәнән ҡарап ултыр – «ҡара ҡарға» күренеү менән хәбәр бирерһең. Ул ингәнсе миңә баҙҙан сығып, ҡапҡасын ябып өлгөрөргә кәрәк.

Баҙ стенаһы бер ҡат кирбес менән уратылғайны, тупраҡ убылып ҡойолоп тормаһын, тигәндәрҙер. Йылыны ла һаҡлай. Кирбес стенанан бетон нигеҙгә тиклем метр ярымлап барҙыр. Тимәк, нигеҙгә барып етеү өсөн генә лә кирбес стенаның бер өлөшөн аҡтарырға, унан ерҙе соҡорға тура киләсәк. Нигеҙҙең ер аҫты өлөшөнөң күпме икәнен белеп булмай, бәлки, ярты метрҙыр, күберәк тә булыуы ихтимал. Өй ҙур бит. Һабы яртылаш һыныҡ көрәк менән кирбескә төрткөләү бер һөҙөмтә лә бирмәне. Унан Рәүеф кирбес стенаны үҙенә тартып ҡараны, һелкенмәгәс, этәрҙе – ҡуҙғалырға уйламаны ла. Цементты йәлләмәгәндәр. Емереү өсөн кувалда, кирбесен берәмләп аҡтарып алам тиһәң, лом-фәлән кәрәк. Ә ул ҡоралды ҡайҙан алаһың? Ихатаға сыҡҡанда һиҙҙермәй берәй нәмә генә тотоп кермәһәң. Әммә унда бер нәмә лә таба алманы Рәүеф. Ағас бар, тимерҙе һиңә кем әҙерләп ҡуйһын? Тапҡан хәлдә лә, «ҡара ҡарға»нан йәшереп индерә алмаҫ ине. Шуға ла ул ярҙамға Рәүфәне саҡырҙы. Икәүләп тартҡайнылар, стенаның бер өлөшө емерелеп төштө, саҡ өҫтәренә ишелмәне.

Тупраҡ ныҡ баҫылған, етмәһә, дымлы, көрәк саҡ-саҡ керә. Әҙләп кенә соҡоған тупрағын Рәүеф, йыйылып китеп, йөрөгәндә ҡамасауламаһын өсөн, баҙҙың икенсе мөйөшөнә ырғыта барҙы. Иртәнге сәйҙе эсә лә төшә, Рәүфә төшкөһөнә ашарға саҡырғансы хәл ала-ала соҡоуын белә. Тирләй, устарының тиреһе ҡабарып-һыҙырылып төштө, биле, аяҡ быуындары талды.

Бер көн, ниһайәт, нигеҙҙең аҫтына төшөп етте. Һөҙөмтә төҫмөрләнһә лә, эшләүе ҡыйынлашты: ҡырҡҡа бөгөлөп, көрәк осона эләккән еүеш тупраҡты, хәҙер инде балсыҡты, боролоп артына ырғытыуы ифрат йәпһеҙ. Йайлап уныһына ла күнекте, һәм мөйөштәге тупраҡ өйөмө ҙурая барҙы, ҙурая барҙы. Ә Рәүфә был эшенән уны һаман тыя, юҡ менән булаһың, берәй ҡасан сығарырҙар әле, ана, машиналары йөрөп тора, берәйһе туҡтар ҙа алып китер, тип өгөтләй. Ләкин башлаған эшен Рәүеф туҡтата алмай инде. Кистәрен, сәй эсеп алғас, Рәүфәнең шул туралағы хәбәрен йә уйынға һабыштыра, йә сәйәси тотҡондарҙың әлеге ише ябай ағас йорт түгел, нигеҙенән ҡыйығына тиклем таштан һалынған ҡәлғәнән ҡасҡандарына тарихтан миҫалдар килтерә. Бындай һөйләшеүҙәрҙән һуң Рәүфә уйға ҡала, күңелһеҙлеккә бирелә, илап та ала, юҡтан ғына мәрәкә табып

көлә лә... Шулай көн артынан көн үтә тора. Өй эргәһенән элеккесә ауыр машиналар уҙа, төнөн уратып һаҡсы йөрөй, һирәкләп булһа ла урмандан сыҡҡан йәки урманға ингән кешеләрҙе күреп ҡалалар.

Бер мәл «ҡара ҡарға» өс көн ашарҙарына индермәне. Астан ҡырҡылдырырға булдылар, ахыры, тип аптыраштылар тәүҙә, унан ҡурҡыуға ҡалдылар. Индергән ризыҡты Рәүфә былай ҙа самалап тотона ине, шуға ла запастары етте әлеге өс көнгә, дүртенсе көнөнә һыуҙан башҡа бер нәмә лә ҡалманы. Һаҡсы бишенсе көнөнә генә пәйҙә булғас, Рәүеф түҙмәне, әйтте:

– Астан үлтерергә булдығыҙмы?

Һаҡсы өндәшмәне, дөрөҫөрәге, ишетмәмешкә һалышты, сепрәк сумканың эсендәге йомро өҫтәлгә бушатып, сығыу яғына боролғас:

– Мин – һаҡсы, нимә килтерәләр, шуны индерәм, – тине ҡырыҫ ҡына.

– Тимәк, онотмаһындар өсөн начальствоны иҫкәртеп торорға кәрәк. Беҙ мал түгел, улар һымаҡ уҡ кеше. Әгәр улар әҙәм икән...

Ишек төбөндә уны махсус көтөп торған Рәүеф артындағы ултырғысты алып һелтәп ебәрҙе. Әммә һаҡсы тоҡтондоң ниәтен алдан һиҙендеме, бесәй етеҙлеге менән ултырғыстан ялтанып өлгөрҙө лә ни аралалыр суҡмарҙай ҙур йоҙроғон тоҡтондоң эсенә килтереп тә төрттө. Төртөү ифрат ҡаты булды, Рәүеф һынған кеүек уртаға бөгөлдө, эсен тотоп иҙәнгә ҡоланы. Ҡолап барғанда оҙон ҡара плащтың салғыйҙары ярғанат ҡанатылай елферләп киң йәйелеүен, ултырғыстың иҙәнгә бәрелеп ватылыуын шәйләне. Рәүфә әсе итеп ҡысҡырып ебәрҙе, шарт итеп ишек ябылды, йоҙаҡ бикләнде...

Тупраҡты көрәктең осо менән генә алһа ла, эше яйлап барҙы. Мәктәптә балаларға йыш ҡына, белем алыу – энә менән ҡойо ҡаҙыу, тигән әйтемде ҡабатлай торғайнылар. Бында белем алыу юҡ, булғанын юғалтмаһаң бик һәйбәт, ә бына «энә менән ҡаҙыу» тигәне бик тә тура килә. Ай, ауыр бөксәнләп тә туңҡаңлап соҡоуы! Соҡорҙан сығарғаныңды баҙ өҫтөнә ырғытыуы ла ҙур этлек. Ҡабаланып йә онотолоп китеп уяулыҡты ла юғалтырға ярамай, үтә һаҡ булашырға кәрәк: «ҡара ҡарға» кергеләп тора, өй уратып та йөрөп ята. Рәүефтең күҙ ҡарашынан, үҙ-үҙен тотошонан, хатта һөйләшеүенән шикләнеүе бар, иҙәндә ятып ҡалған тупраҡ, сүп-сар, баҙ еҫе, тирле кейеме уны шулай уҡ хыянатсыл рәүештә «һата» ала.

Бер көн иртәнсәк эшен дауам итеү өсөн төшһә, нигеҙҙең бер нисә урындан, үрмәксе ауы шикелле, тирә-яҡҡа ярылыуын шәйләне. Кистән улай түгел ине, уныһын Рәүеф теүәл хәтерләй. Тимәк, нигеҙ бигүк ҡалын түгел. Йә иҫкерә, йә йорт ауырлығына түҙә алмай сүгә. Ҡаҙыуҙың касафаты ла булыуы ихтимал.

Ике көндән һуң йәнә ғәжәпкә ҡалды: соҡоп бетон аҫтына төшкәйне, тупраҡ еңел сыға башланы! Рәүефтең уйынса, ерҙе ҡалын бетон ҡатламы баҫып торғас, тупраҡ, киреһенсә, тығыҙ баҫылып ятырға, шунлыҡтан тағы ла ауырыраҡ соҡолорға тейеш ине. Бер яҡтан яҡшы, сөнки эше еңелләште, хәҙер икенсе ауырлыҡ килде: сығарған тупраҡты өҫкә, баҙ эсенә, ырғытыуы ҡыйынлашты. Ҡырҡҡа бөкләнеп аҫҡа эйелә, бөксәнләп, тубыҡланып көс-хәлгә көрәк осо менән аҡтара ла өс бөртөк дымлы тупраҡты алюмин сеүәтә менән һоҫоп өҫкә һирпә. Бына ҡайҙа ул балаларға әйткән «энә менән ҡойо ҡаҙыу!»

Бер кис нигеҙҙең өҫтән аҫҡа ҡарай ҡыҫҡа ғына ярығы иртәнсәккә күҙгә күренеп оҙонайҙы, киңәйҙе, – әйтерһең дә, ярыҡты төн эсендә кемдер нимә мәнәндер ҡайырған. Ҡаҙа килә, ул һаман киңәйә, оҙоная барҙы, нигеҙҙең башҡа урындары ла сатнаны.

Бер көн уның көрәге ниндәйҙер ҡаты нәмәгә төртөлдө. Рәүеф тәүҙә, йә

фундаменттан кителеп төшкән бетон, йә нигеҙ ҡорғанда ырғытылған таш киҫәгелер, тип уйланы. Аптырап, туҡтарға мәжбүр булды, икеләнде, шунан йәнә төрттө, был юлы нығыраҡ итеп. Теге әйбер әллә һынды, әллә ярылды – көрәге төпкә үк инеп китте. Эйелеп, баяғыны тартып сығарғайны – һөйәк. Кеше һөйәге! Ҡурҡышынан саҡ ҡысҡырып ебәрмәне. Сәстәре үрә тороп, арҡаһы буйлап һалҡын зымбыр үтеп китте. Ул көн эшен дауам итә алманы. Ҡурҡты.

Төнөн оҙаҡ йоҡлай алмай ятып, таң һыҙыла башлағас ҡына серемгә китеп бара ине, теге төндәгесә, урман яғынан ауыр гөрһөлдәү ишетте лә тороп тәҙрәгә ҡапланды. Урман ситенән йонсоу аттарға атланып, – күрәһең, төнө буйы киләләр – әллә күпме хәрбиҙәр төркөмө китеп бара, улар артынан мисәүле ат егелгән оҙон арба, арбаны оҙатып – йәнә бер төркөм һыбайлы. Арбала әллә тимерҙән, әллә нәҙек ағастан яһалған ситлек, ситлек эсендә кеше һыны шәйләнә. Ул арба хәрәкәте ыңғайына бәүелә, сайҡала. Аяҡ-ҡулы бығаулы, тимер бығауҙар сыңлап китә. Тотҡондоң кейем генәһе лә йыртыҡ-йортоҡ, тәнендә селтәр кеүек һәленеп тора...

Был ни хәл, әллә, теге төндәге кеүек, йәнә күҙемә күренәме, тип Рәүеф күҙҙәрен йомғолап, ҡул һырты менән һыпырғылап алды, әммә арыған һалдаттар, йонсоған аттар, ситлеккә бикләнгән кеше һыны юғалманы. Ышанды ла, ышанманы ла был күренешкә. Тәүге ваҡиғаны һөйләгәс үҙен көлкөгә ҡалдырған Рәүфәне уятырға ла ниәтләнде, уятһа, йә барыбер күрмәҫ, йә кешеләр юҡҡа сығыр, тип кире уйланы.

Бер мәл бойороҡҡа оҡшаш ҡырҡа тауыштар яңғыраны. Халыҡ тулҡыны яйланы, оҙаҡламай бөтөнләйгә туҡтаны. Арыған аттар, бышҡырып, баштарын эйҙе, һыбайлылар ергә төштө, барыһы ла арбалағы ситлек янына йыйылды. Арбаның алғы өлөшөндә барған берәү ситлектең ҡапҡасын асып эскә керҙе. Тотҡондоң аяғындағы бығауын систе һәм тегене эткеләп-төрткөләп ергә төшөрҙө. Оҙон кәүҙәле берәү, командирҙарылыр, күрәһең, нимәлер әйтте, эргәһендәгеләр меҫкендең өҫтөндәге һәләмә кейемен систереп, оҙонса бүкәнгәме һуҙып һалдылар. Ҡоралды һалдаттар уны уратып баҫты. Шунда Рәүеф тотҡон тирәләй һалдаттар ғына түгел, саҡ ҡына ситтәрәк әллә күпме ябай кешенең дә баҫып торғанын шәйләне. Улар, баштарын эйеп, тотҡонға баҡҡан. Ҡараштары нәфрәтле, йоҙроҡтар төйнәүле. Тирә-яҡ ауылдарҙан ҡыуып килтерелгән халыҡтыр, ахыры. Тағы баш күтәрһәгеҙ, һеҙҙең менән дә шулай буласаҡ, тип ғибрәт өсөн ҡаратып торалар, күрәһең. Бер нәмә лә ҡыла алмайҙар шул, бахырҙар. Ҡорал юҡ ҡулдарында... Һәм Рәүеф бында алып килгән саҡтарында ҡыйыу егеттең йәшел яланда ҡасырға маташыуын, «ҡара ҡарға»ларҙың уны ҡыуып етеп, ҡулдарына бығау һалып машинаға килтереп ырғытыуҙарын шулай күмәкләп ҡарап торғандарын хәтерләне...

«Салаватке – 150 кнутов, Юлаю – 100», – тип сәрелдәне оҙон... Бәй, Салауат батыр менән атаһы Юлайҙы һуҡтыралар түгелме һуң? Ҡәбәхәттәр, йыртҡыстар! Рәүеф шырпы һымаҡ ҡапыл янып-ярһып китте лә, үҙ-үҙен белештермәй, тәҙрәгә һуҡты. «Туҡтағыҙ, һеҙ нишләйһегеҙ, сволочтар! Ул бит Салауат!» Йән асыуына һөрәнләне, иланы, үкһене, тотҡондарҙың арҡаһына шыйылдап ҡамсы төшкән һайын үҙенә һуҡҡан һымаҡ үрһәләнде, тәҙрә тупһаһына менде, рамға йәбеште, быялаһын селпәрәмә һуғып төшөрҙө лә тимер рәшәткәне һелкетергә тотондо. Унан икенсе, өсөнсө тәҙрәгә ҡапланды, ситлеккә бикләнгән йыртҡыс ише, өй буйлап сапты, ишекте типте, унан, үҙенең һүҙҙәренә үҙе тонсоғоп, шартлар сиккә етеп иҙәнгә ҡоланы...

Тауышҡа ҡурҡып уянған Рәүфәнең «Ни булды ла ни булды?» тип үрһәләнеүен дә, тынысландырырға тырышып башын күкрәгенә ҡыҫыуын да, ашығып килеп

кергән һаҡсының эргәһенә килеп баҫыуын да шәйләмәне. Бөтә тәне ҡалтырана, йөҙөн тир ҡаплаған, ҡулы быялаға йыртылып ҡанаған, ара-тирә: «Салауат, Салауат! – тип өҙләкһеҙ ыңғырашыуын,– ғәфү ит, бер нисек тә ярҙам итә алмайым, үҙем зинданда ултырам», – тип күҙ йәштәрен түгә-түгә шыбырҙауын ғына белде. Уның тартышҡан, дерелдәгән, пружина ише бер көсөргәнгән, бер бушаған кәүҙәһен ҡосҡан Рәүфә уны «һаташа» тип, ә һаҡсы «ултыра торғас был бәндә, ниһайәт, аҡылынан яҙҙы» тип уйлай ине...

– Рәүеф ағай, концерт бара бит, ниңә ҡарамайһың? – тине Рәүфә бер кисте. Тауышы күңелсәк яңғыраны – кинәнеп тыңлайҙыр, ахыры. Рәүеф боролдо: экранды тултырып ул сәхнәлә тотошон да, тауышын да үҙ итмәгән, әммә телевизорҙан «төшмәгән» халыҡ артискаһы йырлап маташа ине. Тауышы бар, ә көйөмоңо юҡ.

– Ҡарайымсы, – тигән булды Рәүеф, ҡатынды рәнйетмәҫ өсөн генә.

– Ҡарамайһың шул. Концерт башланһа, телевизор алдынан китәһең дә бараһың.

– Әллә, йыры ла оҡшамай, телевидениеның ошоноң ише концерттарҙы үтә йыш биреүҙәрен дә өнәмәйем. Әйтерһең дә, тормошобоҙҙа бөтәһе лә ал да гөл, беҙҙең бер ниндәй проблемалар, етешһеҙлектәр юҡ, аяҡ һәлберәтеп шоу ҡарарға ғына ҡалды.

– Аңламаным. Концертһыҙ нисек була инде ул?

– Концерты ла кәрәк, ләкин үтә йыш түгел, аҡыллы, проблемалы тапшырыуҙар иҫәбенә булмаһын. Юҡһа, күр, кис һайын концерт, шау-шыу, уйын-көлкө, йыр ҙа бейеү. Халыҡты тамам йоҡлаталар бит, алдайҙар, киҫкен сәйәси, социаль, ижтимағи темаларҙан ситкә алып китәләр. Был беҙҙә генә түгел, Үҙәк телевидениеһы ла шулай. Ҡайһы каналды асма – Америка боевиктары, атыш, үлтереш, көсләү, Сталлоне ла, Ван Дам, терминатор, Задорнов, Петросян, кулинар училищеһы студенты. Ә беҙҙекеләр һуҡырҙарса шуны ҡабатлай.

– Ҡуй, Рәүеф ағай, концертһыҙ булмай барыбер ҙә. Сәйәсәте лә, башҡаһы ла кәрәкмәй, миңә – концертты ғына бир.

– Шулай икәнен күптән аңланым инде. Концерт башландымы, йәшник эсенә инерҙәй булып ултыраһың. Юҡ, шәхсән һине ғәйепләүҙән әйтмәйем, беҙҙең барыбыҙҙы ла шуға күнектерәләр.

– Һин уҫал барыбер ҙә, Рәүеф ағай, оҡшамай, тиһең дә...

– Илдә ябай кешенең эшен, эш хаҡын, көнкүрешен яҡшыртыу өсөн бик аҙ эшләнә, түрәләр үҙҙәрен генә ҡарай, урлаша, алдаша. – Шулай тине лә телен тешләне – артығын һөйләне. Тәҙрә янына килеп, тышҡа баҡты. Күпмелер ваҡытҡа юғалып торған ҙур ҡара себен ҡолағы төбөнән шыжлап осто ла шап итеп быялаға килеп ҡаҡлыҡты. Нык бәрелеүҙән шаңҡып, тәҙрә тупһаһына килеп төштө. Бер нисә минут ятҡас әйләнде һәм рам буйлап өҫкә үрмәләй башланы.

Рәүфә өндәшмәне, кинәнеп, йотлоғоп концерт ҡарауын белде.

Көн артынан көн үтте, улар аҙнаға, айға йыйылды. Буранлап ҡар яуҙы, унан иреп бөттө, унан йәнә яуҙы. Елләп алды, сыуаҡ көндәр торҙо. Сыуаҡ көндәрҙе суйындай ауыр болотло күңелһеҙ тәүлектәр алыштырҙы. Һауа торошона ҡарап тотҡондарҙың кәйефтәре үҙгәрҙе. Әрләшеп тә киттеләр, яраштылар ҙа, донъяларын онотоп яратыштылар ҙа. Рәүфә илап та алғылай. Һауа торошона ҡарап торлаҡтары бер һыуынды, бер йылынды. Йөрөргә сығарған саҡта, утын тиһәң хәтере ҡалыр, сереп ауған йәки ҡороған алмағастарҙы, кипкән ҡарағат, ҡурай еләге, крыжовник ботаҡтарын өйгәйнеләр бер нисә урынға, хәҙер шуларҙы

индереп яғалар мейескә. Йылыһы сыҡмай тиерлек; арҡа, ҡул йылытырлыҡ ҡына, өҫтәмә рәүештә юрған-маҙар индер, тигәйне лә Рәүеф, «ҡара ҡарға» ҡолағына ла элмәне. Һорай торғас, бер йөк машина утын ғәләмәте килтереп ауҙарҙылар ауҙарыуын, тик ағас сей, уны көн дә тигәндәй үҙҙәренә бысып, ярып индерергә тура килә. Индергәс, мейес башына һалалар киптерергә. Ҙур өйҙө йылытыр өсөн ҡаты һәм ҡоро утын кәрәк, тик уныһын ҡайҙан алаһың? Былай ҙа, һаҡсы күрмәгәндә – күрһә лә күрмәмешкә һалыша – ихатаны уратып тотолған штакетникты кәртәһенән һурғылап индерәләр. Штакетнигы ҡаты, күпселектә ҡайындан, йылыһы бар. Мейескә тәүҙә шуны һалалар бер-ике бөртөк, өҫтөнә – сей утынды. Быҫҡылдап-быҫҡылдап ята инде шунда, әҙ-мәҙ йылыһын сығарып.

Аҙна-ун көнгә бер мунсаға йөрөтәләр. Уныһы күҙәтеү вышкаһының артында, ваҡ ҡайынлыҡ араһында. Тәүҙә – Рәүефте, ике сәғәттән һуң – Рәүфәне. Ҡара мунса бәләкәй, таҡта солан менән, әммә һәр саҡ һыуы күп була, эҫе итеп яғалар. Кем яға, кем ҡарай – уныһын Рәүеф белмәй. Кергәндә лә, сыҡҡанда ла берәйһен күрермен-осратырмын тимә. Мөғжизә инде торғаны бер. Кейем, түшәктәрен дә һаҡсы алыштырып сыға билдәле-тәғәйен көндәрҙә, нишләп башҡа кеше, әйтәйек, берәй ҡатын-ҡыҙ шөғөлләнмәй был эштәр менән – шулай уҡ сер.

Гәзит-маҙар, таба алһаң, китаптар ҙа индер әле, уҡып ятайыҡ, ваҡыт үткәреп булмай ҙаһа, тип әйтеп ҡарағайны ла Рәүеф, тыңламаны һаҡсы. Нишләһен, аратирә радионы аса, һирәкләп телевизорға күҙ һала. Ләкин оҙаҡ ҡарай, тыңлай алмай, тиҙ ялҡа, сөнки хәбәр, мәғлүмәттәре мөһим түгел, бер үк һәм гел «ура», оптимистик рухта. Баҡһаң, тормоштары телевизорҙан күрһәткәнсә ал да гөл, бөтә нәмә хәл ителгән, мейес башына менеп аяҡ һелкеп ултыраһы ғына ҡалған...

Уҡыу йылы башланды, директорҙы, Ғәлимде, уны алып китһәләр ҙә, дәрестәр төҙөлгән расписание буйынса үтәлер. Улар юҡ тип кенә балаларҙы уҡыуҙан туҡтатмаҫтар. Ҡыҙыҡ, ауыл халҡы улар тураһында нимә һөйләй, улар юҡлығын уҡытыусылар балаларға нисек аңлата икән? Моғайын да, район мәғариф бүлегенә лә, администрацияға ла еткергәндәрҙер. Аптырашып ултыралармы, әллә юғарыраҡ инстанцияларға хәбәр итеп, эҙләү ойоштороҙоларҙы? Бәләһенән баш аяҡ тип, бер ҡайҙа йөрөмәүҙәре лә ихтимал. Беҙҙең халыҡ барыбер бер-береһенең яҙмышына битараф ҡарай бит...

...Кеше һөйәге сыҡҡан көндән һуң байтаҡ ваҡыт үткәс кенә төштө Рәүеф яңынан баҙға. Унда ла ҡурҡа-ҡурҡа ғына. Шәмен соҡорға мөмкин тиклем яҡынырaҡ килтереп ултыртты ла тубыҡланып шомло ҡараңғылыҡҡа текәлде. Көрәге соҡор төбөнә ташланған көйө ята, башҡа һөйәк күренмәй. Төштө лә бер килке һағайып торҙо. Соҡор өҫтө бушлығында яртылаш аҫылынып торған бетон нигеҙҙәге элекке ярыҡтар тағы оҙонайған, яңылары барлыҡҡа килгән һымаҡ. Рәүеф эйелеп көрәген алды, йәнә стенаның төрлө өлөштәренә ҡарап торҙо, унан еңелсә генә тупраҡҡа төрттө. Көрәк осо бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ еңел инеп китте. Был тынысландырҙы Рәүефте. Тимәк, һөйәк берәү генә булған һәм бында осраҡлы ғына килеп эләккән.

Ял иткәс ни, ул көн ифрат һөҙөмтәле эшләне Рәүеф: нигеҙҙең бер өлөшө, ике текә тау араһына һалынған күпер һымаҡ, соҡор тәңгәлендә аҫылынып ҡалды. Кисен, өҫкә сыҡҡанда, бетондағы ярыҡтар йәнә оҙонайған һәм киңәйгән, яңылары барлыҡҡа килгән кеүек тойолдо уға. Кем белә, бәлки, арығанға, көнө буйы тигәндәй ярым ҡараңғыла эшләгәнгә шулай күренгәндер? Бетонға ултырған иң аҫҡы имәндә ярыҡтар, ваҡ ҡына аҡ бәшмәк ҡаплаған еүеш урындар бар икән. Тәүге төшкәндә Рәүеф уларҙы күрмәгәйне...

– Мин ауырға ҡалдым шикелле, – тине бер кис Рәүфә. – Күңелем болғана, баш әйләнә.

Рәүеф терт итеп ҡалды. Әлбиттә, зина ҡылыуҙарының шуның менән тамамланырын самалай ине, ләкин былай тиҙ булыр тип һис көтмәгәйне. Ире менән өс йыл йәшәп ауырға ҡалмағанды, бынан һуң да ҡалмаç, тигәнерәк уйҙа ине. Баҡһаң, улай түгел, булмышы өйҙәге хәләленекен түгел, сит-ят Рәүефтең орлоҡтарын көткән булып сыға.

– Нисек... шикелле? Ҡалғаныңды-ҡалмағаныңды теүәл генә белмәйһеңме ни?

– Ҡайҙан беләйем? Быға тиклем ҡалып ҡарағанмы ни?

Шулай тиһә лә, тауышы һис ҡайғылы түгел, киреһенсә, шатлыҡлы ине Рәүфәнең. Сөнки өс йыл түлһеҙ йөрөгәндән һуң көтмәгәндә-уйламағанда балаға уҙыуы уның өсөн ҡыуаныс, хатта бәхет, күрәһең. Һуңғы көндәрҙә нисектер күңелләнеп, һүҙе күбәйеп, шаянланып, йөрөшө талғынланып киткәйне шул. Бына нимәгә булған икән ул үҙгәрештәр.

– Да-а-а! Шуны теләгәйнең бит, ҡабул булды, тимәк?

– Ниндәй ҡатындың әсә булғыһы килмәһен, Рәүеф ағай? Ә һин үҙең шат түгелме әллә?

– Шат, һинең өсөн шат. Тик нисек аңлатырһың икән һуң был хәлеңде иреңә?

– Ул турала мин бөтөнләй уйламайым әле, ҡасан сығарыуҙары хаҡында ғына уйлайым. Ултырыу оҙаҡҡа һуҙылһа нишләргә? Балаға тегеһе кәрәк буласаҡ, быныһы...

– Бәй, ауырлы ҡатынды нисек тотһондар? Әйтербеҙ. Врач килеп тикшерер ҙә сығарырға ҡушыр. Хаҡтары юҡ артабан да һине бында тоторға.

Бер яҡтан, әлбиттә, шатлыҡ – һинең балаң, икенсе яҡтан насар – сит ҡатындан. Хәйер, Рәүфә Рәүефкә һис сит ҡатын түгел хәҙер. Үҙ итә, ярата уны. Бергә ултырғандан ғына яралмаған ул тойғо, енси яҡынлыҡтан да тыуымаған, кеше булараҡ та оҡшай уға Рәүфә, хужабикә булараҡ та. Уның менән нисектер еңел, яҙмыштарына яҙған фажиғә лә ҡасан да булһа үтә торған ваҡиға итеп ҡабул ителә. Ул булмаһа, Рәүеф, моғайын, аҡылдан яҙыр йә үҙ-үҙенә ҡул һалыр ине. Әлбиттә, хаҡ ҡайғыра Рәүфә: артабанғы тормош-көнкүрештәре ниндәйерәк юҫыҡ алыр. Сөнки, һаман да тотһалар, проблемалар тыуа башлаясаҡ бит. Иртәме-һуңмы сығарырҙар, балаһын өйөндә табыр, иренә уныҡы икәнен иҫбатлай ҙа алыр. Ә Рәүеф үҙе Сәғиҙәһе алдына ниндәй йөҙ менән ҡайтыр һуң? Йәшерен мөхәббәт емеше тураһында ғүмер буйы өндәшмәй йөрөй алырмы? Өндәшһә, оло ғауға ҡубасаҡ. Ғауғала ғына туҡтаһа. Айырылышыуға ла барып етеүе ихтимал. Ул сағында үҙенең малайы менән ҡыҙын әлеге балаға алыштыра булып сыға. Ҡапыл үҙен ҡулға алырға килгән төндә «ҡара ҡарға»ның бәләкәй карауатта йоҡлаған ҡыҙына оҙаҡ итеп текәлеп тороуы иҫенә төштө. Ниңә шулай оҙаҡ ҡараны һуң ул? Бала ятҡанға түгел бит инде. Берәй уйы, ниәте, моғайын да, булғандыр. Йөрәкһеҙ, бөтөнләй эмоцияһыҙ, робот рәүешендәге ул кешенең ниндәйҙер хис-тойғоға бирелеүе ғәжәп...

Бер көндө, оҙаҡ ҡына яуған ямғырҙарҙан һуң, урман ауыҙына еңел машина килеп туҡтаны. Эсенән тәүҙә 7-8 йәштәрҙәге малай һикереп төштө, артынса ҡабаланмай ғына йәш сибәр ҡатын менән йыуантыҡ ир сыҡты. Фырт кейенгәндәр, өсөһөнөң дә аяҡтарында – резина итектәр, өҫтәрендә – кәпәс, курткалар, ҡатындың ҡулында – кәрзин. Тимәк, бәшмәк йыйып йөрөүҙәре. Малайға ни мәҙәк кәрәк, алан-йолан ҡаранды ла, шөкәтһеҙ өйҙө шәйләп, шунда йүгерҙе. Рәүфәнең шкафтан тапҡан сепрәк-сапраҡтан үҙенә нимәлер тегеп, Рәүефтең нигеҙҙе ҡаҙып сығып, тәҙрә төбөндә берсә тышты күҙәтеп, берсә һаман да теге ҙур ҡара себендең тәҙрә быялаһы өҫтөнән ярыҡ эҙләүен ҡарап ултырған сағы ине.

Малай, йыуғыс ише ятҡан үләнгә эләгә-йығыла, өй янына йүгереп килде лә тәҙрәнән эскә ҡарарға маташты, әммә, нигеҙ бейек булғанлыҡтан, ҡарай алманы, шунан ҡашағаға йәбешеп нигеҙгә менде һәм өлгөгә ҡапланды. Рәүеф уға ҡулдары менән ишаралап, ишеккә бар, атайыңа әйт, тигәнде аңлатырға тырышты. Тик, ғәжәп, малай уның хәрәкәттәрен дә, уның үҙен дә күрмәне шикелле – бер ниндәй реакцияһы булманы. Башын тегеләй-былай борғолап, бер усын маңлайына ҡуйған килеш өй эсен байҡауын белде. Шунан икенсе тәҙрәгә, унан өсөнсөһөнә күсеп ҡапланды. Рәүеф уның артынан йөрөп алдында ым-ишара яһауға, өндәшеүгә, хатта ҡысҡырыуға ҡарамаҫтан, малай бөтөнләй ҙә иғтибарһыҙ ҡалды. Дүртенсе тәҙрәнән һикереп төшкәндә, ахыры, яңылыш баҫып аяғын ауырттырҙы – аҡһай-туҡһай машиналары яғына һыпыртты. Атаһы янына барып, ҡулдары менән йортҡа ишаралап нимәлер ләпелдәне. Әммә атаһы малайының хәбәренә лә, яңғыҙ йортҡа ла битараф ҡалды, етмәһә, иламһыраған улы арыраҡ йөрөгән әсәһе янына киткәс, курткаһының түш кеҫәһенән ялпаҡ ялтыр һауыт сығарып, бер нисә йотом нимәлер эсте. Бер аҙҙан улы менән ҡатыны уның янына килде, нимәлер һөйләшеп алдылар ҙа машиналарына ултырып киттеп барҙылар. Был тирәлә бәшмәк таба алманылар, күрәһең. Машина күҙҙән юғалғас, түтәлдәге йондоҙ сәскәгә күҙ һалһа, уны малайҙың ергә һеңдерә яҙғансы тапап киткәнен күрҙе Рәүеф. Уның йөрәге әрнене – сәскә күтәрелә алмаһа, уның бынан сығыу өмөтө тамам һүнәсәк...

«Донъяла нимә бара ул, ниндәй ғәйебем бар икән һуң?» тигән уй Рәүефте бер минутҡа ла ташламаны. Ятһа ла, торһа ла. Бындай эш осраҡлы башҡарылмай, икенсе кеше менән бутауҙары мөмкин түгел, йә уны күрә алмаған берәй ауылдашы ошаҡлаған, йә үҙе түрә-ҡарағa ҡаршы һүҙ әйткән. Икенең бере. Кем ошаҡлауы ихтимал да кемгә ниндәй ауыр һүҙ әйтеүе бар һуң, улайһа? Директор менән дә, уҡытыусылар менән дә аралары арыу булды, ауылдаштарының, күрше-күләндең үс тотҡаны тойолманы, сәйәси темаларға лаҡап йә анекдот һөйләп йөрөгәне юҡ. Һөйләһә лә – гәзиттә уҡығанды, телевизорҙан ҡарағанды ғына. Уны кем һөйләмәй, хәҙер бөтәһе лә сәйәсмән, фекер алышыу юҫығындараҡ бара, ғәҙәттә, ундай гәпләшеүҙәр. Хәйер, теләһәң йәки ҡушһалар, йомортҡанан да йөй табып була инде...

Туҡта, Дәүләт Думаһына һайлауҙар алдынан район мәғариф бүлеге мөдире Хәбибуллин мәктәптәренә килеп осрашыу үткәргәйне бит. Шунда тыуған бәхәстә ҡатнашыуы сәбәп булманымы икән ҡулға алыуҙарына? «Күрһәтермен әле мин һиңә», – тип янап киткәйне ләһә. Моғайын, шуның ғына «күрһәтеүе»...

«Берҙәм ил» фирҡәһен Дәүләт Думаһына үткәреү буйынса эш ҡыҙа барған саҡта килгәйне мөдир уларҙың мәктәбенә. Тәүҙә район мәғариф бүлегенең эше, ниндәйҙер ҙур ҡаҙаныштары хаҡында оҙаҡ итеп һөйләне, башҡарылып бөтмәгән, әммә тиҙ арала мотлаҡ эшләнәсәк эштәр хаҡында шыма ғына әйтеп үтте, уларҙың мәктәбенә лә туҡталды. Маҡтаны, оло бурыстар ҡуйҙы, унан төп темаға – һайлауҙарға күсте. Ялҡтырғыс оҙон хәбәренең төп мәғәнәһе шул ине: тағы ла ҙур уңыштарға өлгәшеү өсөн һеҙгә, уҡытыусыларға, мотлаҡ «Берҙәм ил» фирҡәһе кандидаттарына тауыш биреү фарыз. Йәмғиәт үҫешендәге артабанғы еңеүле аҙымдарҙы тик улар ғына башҡарып сыға аласаҡ, йәнәһе.

Сағыштырмаса йәш булһа ла – педагогия институтының физик культура факультетын бөтөп район үҙәге мәктәбендә бер нисә йыл ғына эшләгән еренән тәүҙә директор, ике йылдан әлеге вазифаһына ултыртҡайны дуҫ-ише, ағай-энеһе – элекке партком секретары һымаҡ оҙон-оҙаҡ һөйләне, аҙаҡтағы әлеге өндәү-

өгөтө лә тупаҫ килеп сыҡты. Уҡытыусылар аудиторияһында бындай лозунг һымаҡ асыҡтан-асыҡ мөрәжәғәт, етмәһә, үҙен дә һөйһөнөп етмәгәс, сәйер, хатта тыңлаусыларҙы әҙәмгә һанамағансараҡ яңғыраны. Осһоҙло кәнфитте йылтыр ҡағыҙға төрөп бирә белмәне. Әҙәмгә һанамау уҡытыусыларҙың намыҫына тейҙе. Физкультура уҡытыусыһы Ғәлим, район буйынса ярыштарҙа мөдирҙең, физкультурник сағында, төп дәғүәсеһе булған һәм йыш ҡына, уҡыусылары тегенекенән яҡшы һөҙөмтә күрһәтеп тә, еңелгән, мөдир, судьялар менән әшнәлегенән файҙаланып, «еңгән». Шуға үс алырға теләптер, ахыры, бәхәсте Ғәлим башлап ебәрҙе.

– Хәбибуллин, һеҙ беҙгә ҡасан кәрәк булабыҙ, шул саҡта ғына киләһегеҙ. Килгән һайын тауҙай вәғәҙәләр бирәһегеҙ, ләкин береһен дә үтәмәйһегеҙ. Был юлы ла шулай буласаҡ. Мәктәптең утыҙ биш уҡытыусыһы һеҙҙеңсә тауыш бирәсәк, һәм һеҙ, еңеүҙе тәьмин иткән триумфатор булып, район администрацияһы тарафынан маҡталасаҡһығыҙ. Ә мәктәпкә бынан бер ниндәй ҙә файҙа булмаясаҡ. Күрше ауыл балаларын, исмаһам, ҡыш көндәре автобус менән йөрөтөргә кәрәк, тип нисә йыл әйтәбеҙ, һеҙ килгән һайын, ярар, ойошторорбоҙ, тиһегеҙ ҙә ауылдан сығыу менән онотаһығыҙ. Формалар, саңғы, спортзалға матылар, башҡа кәрәк-яраҡ һорайбыҙ. Улар һаман юҡ, сөнки районға бүленеп килгәне һеҙҙең элекке мәктәбегеҙҙән уҙмай. Иң мөһиме – мәктәпкә капиталь ремонт кәрәк, уныһын да әйтә киләбеҙ.

– Директор йөрөһөн, йөрөмәй бит, – тип яуапланы Хәбибуллин, иҫе лә китмәй.

– Как йөрөмәй? – Директор урынынан һикереп үк торҙо. – Кергән һайын «надоел» тип ҡыуып сығараһығыҙ. Заявкалар күптән һеҙҙә ята!

– Һайлауҙарҙан һуң хәл итербеҙ барыһын да. «Берҙәм ил» фирҡәһенә тауыш бирегеҙ ҙә...

– Тағы «итербеҙ». Тәүҙә – һеҙҙең эш, шунан ғына балаларҙыҡы. – Быныһы йәнә Ғәлим. – Әлбиттә, теләгәндә автобус та алып була, директор Өфөгә барып, мәғариф министрлығына керә ала, ныҡлап йөрөһә, капиталь ремонтҡа аҡсаһын да юлларға, спорт инвентарын, башҡаһын хәстәрләргә лә мөмкин. Әммә иң насары – һеҙҙең беҙҙе эш үгеҙе тип һанауығыҙҙа. Власть яратмай был көтөүҙе, унан ерәнә, сирҡана, уның проблемаларынан алыҫыраҡ йөрөргә тырыша. Ул үҙҙәренә кәрәкле сәйәсәттәрен үткәргәндә генә хәжәт. Халыҡ хәл итте, тип әйтер өсөн.

Шунда Рәүеф торҙо:

– Хәбибуллин, һеҙ беҙҙең мәктәпкә бына нисә тапҡыр киләһегеҙ – килгән һайын һоранып та ялбарып. Үҙ мәнфәғәтегеҙҙә. Ә былай аяҡ та баҫмаҫ инегеҙ. Сөнки әпәт һораналар, талап итәләр, шулай бит? Ҙурҙан ҡупҡанда, эш бит бында Ғәлим Мөхәмәткәримович күтәргән мәсьәләләрҙә лә түгел. Беҙ нығыраҡ булһаҡ, һеҙ гел генә ҡаршы төшмәһәгеҙ, ауыл хакимиәте ярҙам итһә, автобусты ла, ремонтҡа аҡсаһын да табып була. Бында эш демократик принциптар боҙолоуҙа, мәктәп коллективына баҫым яһауҙа, халыҡты һарыҡ итеп күреүҙә. Үҙәктән күрмәксе, республика, район, ҡала кимәлендә лә власть органдары, шул иҫәптән һеҙ ҙә, Хәбибуллин, ябай ер кешеһен сүп күреп ҡарауҙа. Һоро масса, пластилин – нисек теләйем, шулай әүәләйем, тип.

– Рәүеф Рәшитович, һеҙ ябай ғына мәсьәләне үтә ҡатмарлаштыраһығыҙ. Үҙәк өсөн мин яуап бирә алмайым, минең компетенцияла түгел, үҙем, күреп тораһығыҙ,– район мәктәптәре тип йән атып йөрөгән кеше. Ярай әле, һаулыҡ бар, спорт менән шөғөлләнеү ярҙам итә, юҡһа, һеҙҙең алда хәлем бөтөп йығылыр инем.

– Харап ҡына була күрмәгеҙ инде. – Ғәлим мыҫҡыллы көлдө. – Халыҡты зар илатырһығыҙ.

– Һеҙ, һәр ваҡыттағыса, бөгөн дә яуаптан ҡасаһығыҙ, Хәбибуллин. Етди йыйылышты шоуға әйләндереп, халыҡтың аңын томалайһығыҙ. Һеҙ власть фирҡәһенә тауыш бирергә өгөтләргә килгәнһегеҙ, тимәк, беҙ, ошонда ултырған уҡытыусылар, үҙебеҙ тауыш биреүҙән тыш, ауыл халҡын да шуға өгөтләргә тейеш булабыҙ, шулаймы?

– Рәүеф Рәшитович, сөнки уҡытыусы – ауыл интеллигенты, алдынғы ҡарашлы, сәйәси яҡтан аныҡ позицияһы булған идеология фронты һалдаты. Һәр командала лидер була, бына һеҙ ауылда лидер, капитан. Эйе, һеҙҙең айырым фекерегеҙ булыуы ихтимал, ләкин власть фирҡәһе үҙенә тауыш биреүҙе талап итә икән, һеҙ уға буйһонорға тейеш.

– Нисек буйһонорға? Мин бит фирҡә ағзаһы түгел. Шуға күрә ул мине һис мәжбүр итә алмай.

– Ағзаһы булмаһаң ни, һин ошо илдә йәшәйһең, фирҡә ил етәксеһе булараҡ ҡуша.

– Это мы уже проходили, Хәбибуллин. Буйһоноп күп йәшәнек һәм уның нимәгә килтергәнен бик яҡшы беләбеҙ. Ярай, теорияға бирелмәйек, ергә төшәйек. Бына беҙ, агитаторҙар, ауыл халҡын йыйып һеҙҙең фекерҙе алға һөрә башлаһаҡ, улар шундуҡ әлеге лә баяғы – күпер, балалар баҡсаһы, медпункт һораясаҡ, күрше ауылдар балаларын беҙҙең мәктәпкә йөрөтөр өсөн автобус талап итәсәк. Уларға «Берҙәм ил» дә, «ғәҙел»дәр ҙә, коммунистар ҙа, «алма»лар ҙа түгел, ә мин һанаған көн дә кәрәкле иң ябай уңайлыҡтар кәрәк. Улар сәйәсәттән алыҫ, ниндәй депутат һайланһа ла ярай, тик әлеге һораған уңайлыҡтарҙы эшләһен. Ә беҙ нимә тип яуапларбыҙ уларҙың һорауына? Хәбибуллин вәғәҙәләй, типме? Халыҡ буш вәғәҙәләрҙән туйҙы, «Берҙәм ил» рүлдә күпме ултыра, берәй нәмә үҙгәрҙеме? Егерме йыл элек нисек йәшәһәк, һаман да шул кимәлдә.

– Да, һеҙҙең дәғүәләргә ҡаршы тороу ҡыйын, Рәүеф Рәшитович, болғауыс инегеҙ, һаман да шулай икәнһегеҙ.

– Нисек бар – шулай инде, Хәбибуллин. Һеҙҙе лә үҙгәртеп булмай бит. Халыҡҡа, ниндәй әсе булһа ла, хаҡты әйтергә кәрәк, алдарға, күҙ буярға ярамай. Бер алда – икенсе ваҡыт ул һиңә ышанмаясаҡ. Шуға күрә халыҡты хәҙер «Берҙәм ил» өсөн өгөтләүҙән файҙа булмаҫ, сөнки власть, шул иҫәптән һеҙ ҙә, халыҡ алдында ышанысты юғалттығыҙ.

– Һайлауҙарҙан һуң хәл ҡырҡа үҙгәрәсәк, – тине Хәбибуллин.

– Үҙгәрмәйәсәк, уға нигеҙ юҡ, предпосылка. Барыһы ла сираттағы пиаркампания...

Бына шул рухта башланып, шул рухтараҡ барҙы һүҙ ул осрашыуҙа. Әлбиттә, бүтән мәсьәләләр ҙә күтәрелде, Ғәлим, мәктәп директоры, башҡа уҡытыусылар ҙа һөйләне, талап итте, туған телде уҡытыу, милләт, мәктәп, ауыл яҙмышы, уҡытыусыларҙы штаттан ҡыҫҡартыуҙар, ЕГЭ, хеҙмәт хаҡтарының наҡыҫлығы һымаҡ мәсьәләләр ҡалҡып сыҡты. Элекке физкультура уҡытыусыһы күпселек һорауҙарға яуап таба алманы: был һиңә туп һуғыу, йүгереү йәки һикереү түгел – асыҡлармын, һорармын, белешермен, тиеү менән сикләнде. Һуңынан хатта, мәсьәләләрҙең сиселеш-үтәлеше һеҙҙең, ауыл халҡының һайлауҙарҙа нисек тауыш биреүенән тора, тип әйтеүҙән дә тартынманы. Осрашыу тамамланғас, сәхнәнән төшөп, директор кабинетына йүнәлгәндә, Рәүефте үҙе артынан әйҙәп индерҙе лә «Күрһәтермен әле мин һиңә! тип ыҫылданы. «Бәй, мин генә түгел, барыһы ла шул уҡ хәбәрҙе һөйләне лә», – тип бер ҡатлыраҡ яуаплағайны ла, «Ә һин тәрәнерәк һөрәһең, һин башланың, тимәк, ойошторғанһың, тимәк, фирҡәбеҙгә ҡаршы» тип ҡаҙарынды... Бына шул «тәрәнерәк һөргән»е өсөн үс алғандыр ҙа Хәбибуллин Рәүефтән.

Власть фирҡәһе ауылдан барыбер үтмәне – һөҙөмтәлә район хакимиәте уларҙың биләмәһенә яуаплы итеп тәғәйенләгән мөдирҙе эшенән алды. Мәктәбенә физкультура уҡытыусыһы булып кире ҡайтырға мәжбүр булды элекке түрә. Үсләшеп, ярыштарҙа төрлө юлдар менән ҡамасаулап, быларҙы нисек тә артта ҡалдырырға тырышып йөрөй әле лә... Кем белә, Рәүефтең бында ябылыуында уның ҡыҫылышы ла юҡтыр, бәлки, – аптырағандан фараз итеүе инде...

Бетон нигеҙҙең үрмәксе ауы ише төрлө ерҙән ярылыуына ғәжәпләнә Рәүеф. Ул, өңгән, аҫҡа төшкән һайын, ҡуҙгә күренеп тармаҡлана һәм киңәйә бара. Соҡор ҡаҙған яҡлап ҡына түгел, дүрт яҡлап та. Өй хатта сүккән дә һымаҡ. Ә бер көн йәнә һөйәк килеп сыҡты. Уны өҫкә ырғытып, көрәген йәнә тәрткәйне, ап-аҡ баш һөйәгенә юлыҡты. Быны алырғамы-юҡмы, күтәрһәм аҫтан тағы килеп сыҡмаҫмы, тип шөрләп тора ине, йәнә бер һөйәк шәйләнде. Уныһы әллә тупраҡ аҫтынан табылды, әллә нигеҙ эсенән тәгәрәп төштө – Рәүеф аңғарманы. Юҡ, былай булмай, сығырға кәрәк, тип тубыкланған көйө боролдо ла, таянып, аяғына баҫты. Көрәген, сеүәтәһен баҙ эсенә ырғытты. Шул арала йөҙлөгөнә йәнә бер нисә һөйәк убылып төштө. Соҡорҙан өҫкә күтәрелгәндә терһәге менән ҡағылып шәмен ҡолатты, уныһы тәгәрәп аҫҡа төшөп китте лә һүнде. Уны алайым тип эйелгәйне, һәрмәнгән саҡта бармаҡтары утын ағастары ише өйөлөп ятҡан һөйәктәргә төртөлдө. Шәм ҡайғыһымы – ҡото алынып баҙға атылып сыҡты, баҙҙан – өйгә.

Тура килһә килә бит: баҙҙан сығып, ҡапҡасты япҡайны ғына, һаҡсының ишек йоҙағын асҡаны ишетелде. Тупраҡ тулған, мәте йәбешкән галошын, бысранған курткаһын йән-фарман сисеп баҙ эсенә быраҡтырҙы ла тәҙрә янына барып баҫа һалды. Бер ниндәй хилаф эш эшләмәй, зарығып тышҡа ҡарап тора, йәнәһе. Сепрәк сумка менән ашарға индергән «ҡара ҡарға» уның ҡурҡыуҙан саҡ-саҡ тын алып тороуын, йыраҡ булғанлыҡтан, шәйләмәне шикелле. Әммә ул кергән һайын нимәлер һораған Рәүеф был юлы ла өндәшмәй ҡала алманы, тулҡынланыуын нисек тә баҫырға тырышып: «Минең сәйәси талаптарға нишләп яуап юҡ? – тине. – Һаман да шулай ҡалһа, аслыҡ иғлан итәсәкмен».

Һаҡсы өндәшмәне. Боролоп та ҡараманы хатта. Рәүеф уның бер мәсьәләне лә хәл итмәҫен яҡшы белә, «Иң отошло һаҡланыу сараһы – һөжүм» тигән принциптан сығып, өндәшмәй торһа, берәй нәмә һиҙенеп үҙенә бәйләнеп ҡуймаһын, тип өндәште. Сумкаһындағы ҡойто ғына ашантыны йомро өҫтәлгә бушатты ла һаҡсы сығып китте.

Соҡор төбөндәге байтаҡ һөйәкте өҫкә, баҙ эсенә, ырғытып, артабан ҡаҙыу ниәте менән көрәген ергә төрткәйне, тоҡ бүҫелеп игене ҡойолған һымаҡ, соҡор төбөнән шауҙырлап һөйәктәр өҫкә ҡалҡып сыға башланы. Баш һөйәктәре, ҡабырғалар, аяҡ, ҡул суҡтары. Көтөлмәгән был ғәләмәттән Рәүеф шаңҡып ҡалды, кәүҙәһен дә ҡуҙғата алмаҫлыҡ хәлгә килде, аңһыҙҙан батҡаҡҡа йәки шыйыҡ тиҙәккә баҫҡандағы ише, әле бер аяғын, әле икенсеһен күтәрҙе. Аяҡтарын алыштырғанда мәтегә түгел, утын ярҡалары ише тәртипһеҙ рәүештә ыуалып-таралып ятҡан серек һөйәктәргә баҫты. Баҫҡан һайын, ташҡын һыу кәмәне өҫкә күтәргән һымаҡ, һөйәктәр өҫкә күтәрелә барҙы, күтәрелә барҙы. Шулар араһында күмелеп ҡалыу ҡурҡынысы тыуҙы, шуға ла туңҡанлап соҡорҙан баҙға күтәрелде. Артына боролғайны, соҡорҙоң һөйәктәр менән тулғанын шәйләне. Һөйәктәр үҙе соҡоған соҡорҙоң төбөнән түгел, ә бетон нигеҙҙең ярыҡтарынан сыға тиһә, нигеҙ үҙе шау һөйәктән тора һәм ул, шығырҙай-шығырҙай, яйлап төрлө урындан ярыла, ишелә, ватыла һәм һөйәккә әүерелә бара, имеш.

– Сәғиҙә! – тип һөрәнләп ебәрҙе Рәүеф, был күренештән ҡото алынып. Ҡурҡыуы шул тиклем ҙур ине, «Рәүфә» тимәне, ҡатынының исемен атаны. – Нигеҙ емерелә, нигеҙ! – Үҙе ултырған көйө асыҡҡа, баҙ ҡапҡасына, шыуыша.

– Сыҡ тиҙерәк! Иҙән һелкенә, стеналар ҡуҙғала башланы... Күмелеп ҡалаһың хәҙер, сыҡ, тим! – тип асырғанып һөрәнләй Рәүфә.

Ә Рәүеф ҡалҡына алмай хитлана. Аяҡ-ҡул быуындары ҡамырға әйләнгән дә ҡуйған. Шунан бар көсөн йыйып, көскә тубыҡланды – өйҙән баҫылып ятып ҡалғыһы килмәй ҙәһә – дүрт тағанлап, тәнтерәкләп баҙ ауыҙына саҡ килеп етте. Йәнә артына боролһа, ул соҡоған яҡтың ғына түгел, дүрт яҡтың да нигеҙе ҡуҙғала, ярыла, ишелә... Күҙгә күренеп өй аҫҡа сүгә, аҫҡы бүрәнәләр шомло шығырҙай. Рәүеф баҫҡыстың иң аҫҡы таҡтаһына түгел, ҡабаланып, иң өҫтәгеһенә баҫты, йәнәһе, тиҙерәк сыға, күтәреләйем тип ерҙән этәнеүе булды, баҫҡыс шыуып китеп, ул баҙ эсенә ҡолап төштө.

– Мен тиҙерәк! – тип һөрәнләне йәнә Рәүфә. – Хәҙер иҙән аҫтында ҡалаһың бит! – Ҡулын һондо.

Рәүеф ҡалҡынды ла йәнә баҫҡысҡа тотондо һәм Рәүфәнең ҡулына йәбешеп, ниһайәт, өҫкә сыға алды. Ул күтәрелгәнсе дүрт яҡ нигеҙ ҙә тамам емерелеп, һөйәктәр баҙҙы тултырғайны инде. Өҫкә ҡалҡа күрмәһендәр тип, баҙҙың ҡапҡасын яптылар ҙа икәүләшеп өҫтөнә баҫтылар.

Байтаҡ торҙолар шулай, әммә һөйәктәр ҡапҡасты төртмәне, өҫкә сығырға маташманы, иҙән шылыуы ла баҫылды, стеналар ҙа ишелеүҙән туҡтаны...

Ул төн йоҡлай алманылар. Мейес емерелеп төшөр тип, кистән яҡманылар – төнөн һыуыҡ булды. Йоҡламауҙары өшөүҙән генә түгел, ҡурҡыуҙан ине. Уфтанышып ауыр машиналар уҙҙы, ҡайҙалыр эт олоно...

Таң атҡас, йорттарының нигеҙе бөтөнләй емерелгәнен, бүрәнәләренең ерҙә лыпа ултырғанын шәйләнеләр – элекке бейек тәҙрәләр ныҡ түбән төшкәйне. Бәшмәк йыйған теге малай йәнә килһә, ерҙә баҫып торған көйө генә эсте байҡай аласаҡ. Емерелер, хәҙер емерелер, тип ҡурҡып, байтаҡ тик кенә ултырғайнылар ҙа, өй емерелмәне, стеналар таралманы, мөйөштәр ысҡынманы. Әммә хәүеф бар, ул бөтмәгән һәм уның тәүлектең теләһә ҡайһы мәлендә ҡабат ҡубыуы ихтимал.

Артабанғы көндәр шулай уҡ борсолоуҙарҙа үтте. Бер ултырҙылар, бер йөрөнөләр, аптырашып тәҙрә төбөндә баҫып торҙолар. Рәүфә иланы, ҡарынындағы бала өсөн борсолдо, йыш ҡына Рәүефкә асыуланды. Рәүеф тә бала өсөн борсолдо, Сәғиҙәһе, малайы, ҡыҙы менән хушлашып-бәхилләшеп бөттө, тормошоноң шулай үтә аяныслы осланасағына әсенде.

«Ҡара ҡарға» инмәне, ризыҡ та наҡыҫланды, бидондағы һыуҙары ла аҙайҙы. Өйҙә өсөнсө йән эйәһе булған ҙур ҡара себен мөйөштәге үрмәксе ауына эләкте, баҡсалағы йондоҙ сәскә һулыны, өйҙәре һыуынды – мейес башындағы сей утын оҙаҡҡа барманы.

Бер көндө, аптырағандан, Рәүеф ишекте эткәйне, бәй, асылды китте! Элекке һымаҡ шығырламаны ла хатта. Был ни хәл, нишләп бикле түгел һуң? Ғәжәпләнеүенең иге-сиге булманы. Нигеҙ таралып төшкәндә, ишек ҡайырылып китеп, йоҙаҡтары йолҡоноп сыҡҡанмы? Әллә һаҡсы бикләргә онотоп киткәнме? Рәүеф һағайып ҡына тышҡа сыҡты, тикшерҙе – йоҙаҡтар юҡ, ә ишек төҙөк, ҡайырылған-ҡыйшайған ере күренмәй. Ғәжәп һәм сәйер ине ишектең шулай бикһеҙ тороуы.

– Рәүфә, ишек асыҡ таһа! – Үҙ-үҙен белештермәй һөрәнләне Рәүеф.

– Асыҡмы? Булмаҫ! – Ишеккә арты менән диванда ултырып нимәлер ямаған ҡатын, эшен ташлап, йүгереп килеп тә етте. – Ә һаҡсы ҡайҙа?

– Күренмәй.
– Ҡасан асып китте икән һуң? Йоҙаҡ тауышы ишетелмәне ләһә?
– Кем белә инде? Ишетелмәне шул. Ә йоҙаҡтар юҡ.
– Улайһа, беҙ иректәме?
– Ҡабаланма. Тикшерәйек, ҡарайыҡ әле. Ҡапыл килеп сыҡһа, ирек булыр һиңә.

Тирә-яҡҡа ҡарана-ҡарана, һаҡ ҡына баҫып өйҙө уратып сыҡтылар. Бәҙрәфте тикшерҙеләр. Һаҡсы юҡ ине. Вышкалағы күҙәтеү пунктында ла, мунса тирәһендә лә күренмәне. Киткәндер, посты алғандарҙыр – үҙҙәренә инмәүенән, төндәрен өй уратып йөрөмәүенән уның юҡлығын шәйләгәйне инде Рәүеф. Ниңә элегерәк ишекте төртөп ҡарамаған – бына хикмәт. Юҡлығын һиҙенгәс үк асып ҡарарға тейеш булған да бит...

Төнөн йәнә ҡар яуған, тирә-йүн ап-аҡ, эҙ-маҙар юҡ. Ҡыйыҡ башындағы ҡыҙыл флаг теткеләнеп, селтәргә әйләнгән, бына-бына таяғынан ысҡынып таралырға етешкән. Өйҙәре, ысынлап та, ерҙә ултыра, бетон нигеҙ юҡ һәм аҫҡы ике-өс ниргә ҡайһы аралалыр серей ҙә башлаған. Йәнә ишек алдына килеп, тирә-яҡҡа, унан аптырашып бер-береһенә ҡараштылар. Үҙҙәренең азат икәнлектәренә һаман ышанмайҙар ине.

– Нишләйбеҙ, ҡайтабыҙмы? – тип һораны Рәүфә.
– Ҡайҙа ҡайтабыҙ?
– Бәй, өйгә инде, ауылға.
– Нисек ҡайтабыҙ, йәйәүләпме ни? Ҡайһы яҡтан килгәнеңде хәтерләйһеңме? Мин, мәҫәлән, иҫләмәйем.
– Мин дә – юҡ. Табырбыҙ. Сығып эҙләп ҡарамайынса табып булмай инде. Һаҡсы юҡ, тимәк, ҡарауыл алынған, бер нисә көн машиналар үткәне лә һиҙелмәне. Бынан тиҙерәк ысҡынырға кәрәк. Яңынан пәйҙә булмаҫтары элек.

Рәүеф Рәүфә менән килеште. Ысынлап та, һаҡ юҡ икән, нимә тип бында ултырырға тейештәр? Эйәртенешеп инделәр ҙә, булған ғына кейемдәрен кейеп, кире сыҡтылар.

– Урман ауыҙына барайыҡ, юл шунда бит, – тине Рәүфә.

Ләкин унда бер ниндәй ҙә юл юҡ ине. Ҡасандыр булған ул, үләне тапалып, батыбыраҡ ята, әммә ҡар өҫтөндә бер кемдең дә эҙе юҡ. Урман эсенә инделәр. Унда ҡар, ни ғәләмәттәндер, ҡалыныраҡ булып сыҡты – тубыҡтан. Барҙылар-барҙылар ҙа кире боролорға мәжбүр булдылар, сөнки былай ҡар гөрөп алыҫ китә алмаясаҡтар. Урман эсенән машинала ярты төн, ярты көн үткәнде йәйәүләп, етмәһә, юлһыҙ ерҙән ҡар кисеп күпме генә бара алалар инде?

– Кире керәбеҙ, – тине Рәүеф, Рәүфәгә ҡарамай ғына. – Юл юҡ, был йоҡа кейемдәр, резина итек, калуш кейеп, ишшу ас көйө нисек юлға сығаһың? Хәҙер өшөп туңабыҙ. Йә аҙашабыҙ. Һин ауырлы...
– Өйҙә ятып үлдең ни, урман эсендә аҙашып үлдең ни?..
– Урманда йыртҡыс тырнағына эләгеүең бар, ә бында карауатҡа һуҙылып яттың да... вәссәләм. Хәйер, үлергә ашыҡмайыҡ әле.
– Тәҙрәләге рәшәткәләрҙе алһаң ине, исмаһам...
– Торһон, алмайыҡ, беҙгә рәшәткәһеҙ һис ярамай.

Ир менән ҡатын өйгә инде...

---



Спартак
ИЛЬЯСОВ

# ТӘҠДИР

## ХИКӘЙӘ

Һуғыш ана бөтә, бына бөтә тигән йылда ла ҡан ҡойғос бәрелештәрҙә йә аяғын, йә ҡулын өҙҙөргән, тәрән тән яраһы алған яралыларҙы тейәгән «Мәскәү — Иркутск» оҙон поезы Өфөгә 1945 йылдың октябрь аҙаҡтарында килеп туҡтаны. Туҡтауһыҙ һыҙланыуҙан йоҡоһон һис ҡандыра алмаған Үлмәҫҡол поезд тәгәрмәстәренең бер төрлө теҙмә туҡылдауына, вагондың һәлмәк кенә бәүелеүенә иҙрәп ойоп киткәйне. Поезд туҡтағанда ҡапыл һелкенеүҙән, кешеләрҙең ҡысҡырып һөйләшеүенән иләүрәп уянып китте. Әле күҙен асмаҫ борон, әллә өнөндә, әллә төшөндә өҫтөнә менергә ажарланып килгән танкыға атыр өсөн, мылтығына үрелде. Ләкин, нишләптер, уның уң ҡулы мылтыҡ ҡайышын яңылыш һәрмәй ҙә ҡуя. Тартып һис ҡулына ала алмай. Ә немец танкыһы бына алдағы бруствеҙы үтте. Хәҙер килеп менә бит Үлмәҫҡолдоң окобына. Уның аңында һаман да шул һуңғы алыш — Берлинды алыр өсөн барған ҡанлы бәрелеш ине. Немец танкыһы уның окобы өҫтөнә килеп менде лә окоп тулы һалдаттар өҫтөндә өйөрөлә башланы. Үлмәҫҡол, уң ҡулбашына пуля тейеп, ҡулы йөрөмәгәнен әле һиҙмәй ине. Шуға ла ул ҡулына танкыға ҡаршы ата торған мылтығын ала алманы. Ә танк окоп өҫтөндә өйөрөлдө лә өйөрөлдө. Кәүҙәһе менән бергә хәрәкәт итә алмай һәленеп торған уң ҡул ситтәрәк ҡалды. Нисек булғандыр, әммә танкының «ҡарышлауығы» Үлмәҫҡол өҫтөндәге балсыҡтан һерәйеп сыҡҡан ҡулды эләктереп, уның кәүҙәһен ҡалҡыта биреп тәненән йолҡоп алды ла, өйөрөлөүенән туҡтап, өҙөлгән ҡулды тәгәрмәстәре араһына ҡыҫтырған килеш күрше окоптар өҫтөнә шылды.

Ҡанһырап балсыҡ аҫтында ятҡан Үлмәҫҡолдо осраҡлы рәүештә генә санитарҙар табып, ҡаҙып алдылар. Шул апрель айы аҙағынан лазареттан

*Спартак Ильясов (1941) Учалы районының Ҡорама ауылында тыуған. 1969 йылда К. А. Тимирязев исемендәге Мәскәү ауыл хужалығы академияһын тамамлай. Партком секретары, колхоз рәйесе, «Поляковка» — «Ирәндек» совхоздарында директор вазифаларында эшләй.*

лазаретҡа күсә торғас, ете ай үтте. Ҡулының өҙөлгән ерендәге һөйәктәрен сүпләп таҙарттылар, йыуҙылар, тектеләр. Ете ай эсендә яра яйлап сөрөшәйеп бөтәште тиерлек. Тик күгәреп-ҡыҙарып ҡалған тупыс ере ваҡыты-ваҡыты менән йә әсетеп, йә һулҡылдап һыҙлай.

Һыҙлауын тәне эсенә йотор өсөн, ул күҙен асманы. Әйтерһең дә, күҙен асһа, һыҙлау тәне эсенә кереп таралмай, кире һулҡылдап өҫкә килеп сыға. Шул тойғонан ҡурҡып ята бирҙе. Тышта, перронда, халыҡтың ҡысҡырышып һөйләшкән тауышына, поездың әсе итеп һыҙғырыуына ул күҙен асып, һул терһәгенә таянып тышҡа ҡараны. Тәҙрә аша аҡ халатлы шәфҡәт туташтарының носилкалар күтәреп йүгерешеүҙәрен, иң мөһиме, туҡтаған вокзалдың исемен абайланы. Ҡаршылағы оҙон, бейек йорт башына «Өфө — Уфа» тип яҙып ҡуйылғайны. «Өфө — Уфа», — тип үҙ-үҙенә ышанмай, ҡат-ҡат уҡыны ул яҙманы.

Санитар поезында һау кеше юҡ. Барыһы ла ғәрип. Ауыр яралылар. Күршекүләндән һорап та булмай. Сөнки вагон эсендәге һәр ятаҡта ыңғырашыу, һәр ятаҡта һыҙланыу ауазы... Берәүҙең дә ҡайҙа алып китеп барыуҙарында эше юҡ. «Өфө» яҙыуын уҡығас, Үлмәҫҡолдоң күңеленә үҙе лә әйтеп, аңлатып бирә алмаҫлыҡ тыуған ер, яҡынлыҡ хисе килде. Тыуған иленең, тыуған ерененң татлы еҫен тойҙо ул. Дүрт йыл да дүрт ай элек Сыбаркүл ҡаласығында ашыҡ-бошоҡ винтовка менән сәпкә аттырҙылар, ҡул гранатаһын, танкыны яндырыусы шыйыҡсалы шешә ташларға өйрәттеләр ҙә, төндә тимер мейестәре төтәп ятҡан «телячий» тип аталған вагондарға тейәп, көнбайышҡа, фронтҡа оҙаттылар. Иртәнге һигеҙ менән туғыҙ араһында үтте улар Өфө вокзалын. Сыбаркүлдән тейәлгән хәрби литрлы поезд Өфөлә туҡтаманы. Үлмәҫҡол, бәлки, мәңгелеккәлер, тип хушлашып, тәҙрә аша шул «Өфө — Уфа», «Уфа — Өфө» яҙыуын уҡып үткәйне. Был яҙыу үҙгәрешһеҙ тиерлек, тик тутығып, әҙерәк буяуҙары ҡойолған. Әммә ул һаман да тыуған илдең ауазын, кәкре, йәмшегерәк булһа ла, бөркөп тора. Дүрт йыл да дүрт ай үткән икән ул ваҡыттың үтеүенә лә... Поезд, һыҙланыуҙар, ыңғырашыуҙар тауышын баҫып, әсе итеп һыҙғыра-һыҙғыра, яйлап Өфөнө ҡалдыра. Тыуған илгә, тыуған ергә яҡынлашам, тип ашҡынып, Үлмәҫҡол тәҙрә аша һәр ауыл, ҡасаба исемдәрен уҡый-уҡый, һарғайған үләнле ялансыҡтарҙы, һары япраҡлы урманды, күптән инде күрелмәгән кәбәндәрҙе, күбәләрҙе, игенлектәрҙән әле әүенгә ташылмаған көлтә өйөмдәрен ҡарап бара. Поезд ҡыҙғандан-ҡыҙҙы. Үлмәҫҡолдоң иҫәбе буйынса, Мейәс ҡалаһына ул киске ун самаһына барып етәсәк. Тик Үлмәҫҡол белмәй: Мейәс ҡалаһында поезд туҡтармы-юҡмы? Әллә, Златоуста туҡтаһа, Мейәстә туҡтамаҫмы? Златоуста поездан төшөп ҡалһа, ауылға унан йыраҡ, 35 — 40 саҡрым төп Урал армыты аша төшөргә кәрәк. Төндә, билдәле, арбалы ат та, йәйәүле иптәш тә осрамаҫ. Хәйер, ул юлдаштарҙың булыуы иртәгә лә бик икеле. Ә бына Мейәс ҡалаһы уның ауылына ни бары 20 саҡрымдай ғына ерҙә. Өҫтәүенә, Мейәскә тирә-йүн ауылдарынан көн һайын кешеләр йөрөп тора. Элек, һуғышҡа тиклем, ул, тулы ир ҡорона кергән Үлмәҫҡол, башҡа иптәштәре менән икешәр атта Мейәс элеваторына һәр көҙ октябрь, ноябрь айҙарында дәүләткә ашлыҡ ташып тапшыра ине. Бәлки, ул ашлыҡ тапшырыу әле лә барҙыр... Поездан төшөп, элеватор тирәһенә барһам, ылаусылар осрар, тип тә уйланы.

Был ваҡытта поезд Ағиҙел, Ҡариҙел уйһыулыҡтарын үтеп, ҡалын урманлы тауҙар ҡуйынына кереп бара ине. Бәләкәй йылғалар үҙәне буйлап, тауҙар

армыттарын йә борола-борола, йә ҡырҡып үтеп бара торғас, көн кискә ауышты.

Ҡапыл Үлмәҫҡолдоң башына уй килде. «Туҡта! Ҡайтыу ҡайтыу ҙа ул, минең бит бөтә ҡағыҙҙарым поездың баш табибында. Үткән өсөнсө көн мин санитарҙан ул ҡағыҙҙарҙы һорағайным, һары сәсле ҡыҙыҡай: «Барлыҡ ҡағыҙҙарығыҙ ҙа баш табипта. Госпиталгә барып еткәс тә һәр кемдең ауырыуы, яралары тураһындағы табиптар комиссияһының ҡарарын ҡулдарығыҙға бирәсәктәр», — тигәйне. «Тимәк, мин ҡайтып бармайым что ли? — тип күңелдә үҙ-үҙенә һорау бирҙе. — Тағы ла госпиталгә аслы-туҡлы булып ятырға һалып ҡуясаҡтармы ни? Миңә бит табип Загорск госпиталенән сығарған ваҡытта: «Ты уже почти здоров. Рана затянулась. Сукровица не капает. Повязка сухая. Готов к демобилизации», — тигәйне. Ә ҡағыҙҙарҙы ҡулға, ниңәлер, бирмәне. Шулай булһа, мин хәҙер, баш ауырып торһа ла, «старший» тип аталған шәфҡәт туташына әйтеп, документтарымды талап итәм. «Мин бит ҡайтып еткәнмен. Ана, ауылыма егерме генә саҡрым. Хәҙер ҡайтып етәм», — тип аңлатырмын. Унда мине ҡатыным, дүрт улым көтә. Загорскиға яҙған һуңғы хатында ҡатыны: «Малайҙарың тупылдашып үҫеп киләләр. Урал менән Мираҫ быйыл да миңә бесән эшләштеләр. Һыйырыбыҙ бар, ике кәзәбеҙ. Һин ҡайтҡас һуйырбыҙ тигән башмаҡты көпә-көндөҙ ауыл эсенән арҡыры аҡҡан йылға буйында бүреләр ашаны, — тип бошоноп яҙғайны. — Һин ҡайтыуға Димгә алты йәш, ә Сабурға дүрт тула. Атайым ҡайта, ул беҙгә күү-үп итеп икмәк алып ҡайта, тип һәр саҡ һөйләнәләр». Ҡатынының был хатын ул иң-иң ҡәҙерле аманат итеп түш кеҫәһенә һалған. Унда уның бер ниндәй ҙә фотоһы булмаһа ла, һәр саҡ, хат ятамы икән, тип һул ҡулының бармаҡтары менән түш кеҫәһен һәрмәп ҡарай. Үлмәҫҡол һуғышҡа киткәндә оло улы Уралға — ете ярым, Мираҫҡа — биш, Димгә ике йәш тулғайны. Ә бына Сабур донъяла юҡ ине әле. Атаһы әле уны күрмәгән. Уға хәҙер дүрт йәш булып килә. «Сабур, сана һөйрәтеп, ағайҙары менән түбәнән арба менән шыуып йөрөй», — тигән бит ҡатыны. Аяуһыҙ ҡанлы һуғыш осоронда тигеҙ каска йомролоғона һалып яҙған хатында ул буласаҡ балаға, әгәр ул булһа, мәрхүм ҡустыһының исемен — Сабур тип, ҡыҙ бала булһа, мәрхүмә инәһенең исемен — Заһира тип ҡушыуын үтенгәйне ҡатынынан. Эйе, ул хат теүәл генә барып еткән. Ул бала аҡ донъяға килгәс, иренең теләген бойомға ашырып, бәләкәс йән киҫәгенә ҡатыны Сабур тип исем ҡуштырҙы. Ә бөгөн шул бәләкәй малай дүртен тултырып килә. Әле Загорск госпиталендә үк норма менән бирелгән көндәлек икмәктән киҫәктәрҙе йыя-йыя, уларҙы ярты килограмм самаһына еткергәс, урамдағы һатыусынан шул икмәккә бәләкәй уйынсыҡ автомашина алмаштырып алып, вещевой мешогының төбөнә һалып ҡуйғайны. Был автомашина — әле күрмәгән улына бүләк.

Шул уйҙарына төрөнөп, арлы-бирле бәүелеп барған вагон тотҡаларына, таяныс тимерҙәренә һыңар ҡулы менән тотона-тотона, күрше вагонға өлкән шәфҡәт туташын эҙләп китте. Күрше вагонда ике табип, биш-алты шәфҡәт туташы кемдеңдер ыңғырашыуы, һыҙланыуҙан тешен шығырҙатыуы аҫтында әллә яра бәйләй, тере тәненән тимер киҫәген соҡоп алалар, буғай. Тауыштары, һөйләшеүҙәре буйынса шулай аңланы Үлмәҫҡол. Йәнәш купела арт терәрлек урын табып, шәфҡәт туташтарының, табиптарҙың бушай биреүен көтә башланы. Әллә дауанан, әллә бәйләүҙән яралының тауышы шиңгәндән-шиңә барҙы. Унан бөтөнләй тынды. Аҡ халатлылар купеһында тынлыҡ урынлашты. «Пульс, пульс!»тигән тауыш ишетелде лә, күршелә тағы ла

тынлыҡ урынлашты. Ике-өс минут шулай дауам иткәндән һуң, шәфҡәт туташтары яйлап ҡына таралыштылар. Тик ике табип, дәрәжәһе буйынса оло тип иҫәпләнгән таныш шәфҡәт туташы ғына купела ниҙер һөйләшәләр, кәңәш итәләр ине. Көттө Үлмәҫҡол уларҙың бушай биреүҙәрен. Ниһайәт, аҡ халатлы ике табип та яй ғына был күңелһеҙ купенан икенсе вагонға киттеләр. Әҙ генә көтә биреп, Үлмәҫҡол баш шәфҡәт туташы янына сығып, үҙенең исем-шәрифен, госпиталдә күпме ятыуын, яраһын, ҡайһы өлкә, ҡайһы төбәк кешеһе булыуын аңлатып, үҙенең төшә торған станцияһына өс-дүрт сәғәттән етәсәген әйтте һәм «Личное дело» тип аталған ҡағыҙҙарын һораны.

Шәфҡәт туташы уға ҙур күҙҙәрен тултырып ҡараны ла: «Боец! Давай чуть попозже? Я оформляю документы ушедшему в мир иной», — тип бите аша ябылып ятҡан кешегә күрһәтте. Унан һуң: «Кстати, вы откуда родом?» — тип ҡабатлап һораны. Үлмәҫҡол үҙенең Уралдан, Башҡортостандан булыуын, өйө ул төшәсәк вокзалдан егерме генә саҡрымда икәнлеген тағы ла һөйләне.

«Ушедшему в мир иной торопиться некуда. Давай посмотрим ваши документы», — тип ултырған ятаҡ аҫтынан бер ҡосаҡ бәйле ҡағыҙҙар сығарҙы ла Үлмәҫҡолдоң фамилияһын Иҡсанов тип эҙләй башланы. Тиҙ тапты ул Үлмәҫҡолдоң исем-шәрифен. «Иксанов У.М. выписан из Загорского госпиталя Московской области. Направлен литерным маршрутом в Новосибирский госпиталь. Здоров», — тип уҡыны ла, Үлмәҫҡолдоң бер күҙҙәренә, бер сулаҡ ҡулдарына ҡарап аптырап оҙаҡ ҡына текләп торҙо. «Ты что, боец Иксанов, здоров что ли?» — тип һәлберәп торған буш еңен дә ҡапшап ҡараны ла башын һелкте. Унан һуң ул: «Что-то я не пойму. Написано «здоров». А направление пишут в Новосибирский госпиталь, — тип аптыраны. — А направления на районный военный комиссариат для явки нет. Нет, здесь должно быть врачебное заключение. Вы подождите, я схожу к врачу». Шулай тине лә, шәфҡәт туташы китте. «Я доехал до дома. Вот дом мой, в 17 — 20 километрах», — тип артынан ҡысҡырып ҡалды Үлмәҫҡол.

Шәфҡәт туташы эшелондың баш табибы купеһына ингәндә, унда кәңәшмә бара ине.

— Эшелонда 700-гә яҡын ғәриптәр һәм яралылар бара. Ләкин Новосибирск госпиталенә ни бары 300 кешене генә аласаҡтар. Ә ҡалған 400 кешене ҡайҙа урынлаштырабыҙ? Кире ебәреп булмай. Бөтәһе лә йә Уралдан, йә Себерҙән. Силәбелә туҡтап, сығышы менән Уралдан булған һәм аяғына баҫып йөрөй алырҙайҙарын ҡалдырайыҡ. Урындарға хәрби комиссариаттар аша хәбәр ебәрәйек, ҡаршы алырҙар, — тигән ҡарарға килделәр.

Шул ваҡытта шәфҡәт туташы Үлмәҫҡолдоң ҡағыҙҙарын баш табип алдына һалды. Ентекләп уҡып сыҡҡандан һуң, баш табип шәфҡәт туташына: «Подпишу. Только перед уходом проверьте температуру, давление и общее состояние», — тине. Шулай килештеләр.

Златоуст ҡалаһында поезд оҙаҡ ҡына торҙо. Унда ла эшелондан байтаҡ халыҡты төшөрҙөләр. Носилкалы санитарҙар, ә перронда арбалы аттар туҡ-туҡ йөрөнө. Ниһайәт, тағы ла ҡуҙғалып киттеләр. Инде тышта дөм-ҡараңғы. Тауҙар араһынан бормалана-бормалана Мейәс ҡалаһына етергә бер сәғәт самаһы ваҡыт ҡалды. Ә шәфҡәт туташы, әйтерһең дә, һыуға батты. Китте лә юғалды.

Түҙемлеге бөткән Үлмәҫҡол шәфҡәт туташын эҙләр өсөн урынынан ғына торғайны, ул үҙе килеп керҙе лә: «Иксанов, главврач тебя выписал. Сейчас я вас отпущу», — тигәс, йөрәге дарҫ та дорҫ тибә башланы.

Тышта төн ҡараңғылығы булһа ла, тәҙрәгә ҡапланды. Вагон тәҙрәләренән төшкән яҡтылыҡта йым-йым итеп үтеп киткән ағастар шәүләһенән башҡа һис бер нәмәне абайлай алманы. Тиҙерәк-тиҙерәк үҙ купеһына вагон менән бергә сайҡала-сайҡала атлап китте.

Вагон оҙатыусыһы Үлмәҫҡолдан юлда ҡулланыр өсөн бирелгән кружка, ҡалаҡ-тәгәсте алыр өсөн килгәс, ул эшелондың Мейәстә туҡтау-туҡтамауын һәм унда нисә минуттан етәсәген һорап белгәс, йөрәге шатлығынан тағы ла алҡымына тығылды. Иң алда ул өйөнә, балаларына күстәнәс итеп алып ҡайтыр өсөн юлға бирелгән «сухой паек» тигән төргәкте тоҡсайына һау ҡалған һул ҡулын тығып һәрмәне. Бәләкәс Сабурға икмәк ҡатыларына алмашып алған ағас машинаны тотҡослап ҡараны. Ялпаҡ, эсе бешкән ҡып-ҡыҙыл ит иҙмәһе менән тулы, ә тышына ҙур итеп «MOR» тигән яҙыулы америка консерваһын да төпкәрәк тыҡты. Шунда уҡ һаҡал-мыйыҡ ҡыра торған үткер, ҡыҫҡа ғына трофей бритваһын, уны үткерләр өсөн ағас таҡта киҫәгенә ҡағылған ҡайышты сепрәк киҫәгенә төрөлгән һабын киҫәген дә һәрмәне. Дәүләт милкен, кружка, тәгәс, алюмин ҡалаҡты тапшырғас, үҙен бөтөнләйгә үҙ аллы, иркле итеп тойҙо. Бөтә булған бурыстар өҫтөнән ҡойолоп төштө лә ҡуйҙы. Хәҙер ул үҙ аллы. Үҙенә үҙе хужа. Тиҙҙән, бик тиҙҙән үҙен көткән ҡатыны, балалары, йортона ҡайтып керәсәк. Төндө төн тип тормаясаҡ. Туп-тура, белгән һуҡмаҡ менән атлаясаҡ та атлаясаҡ Үлмәҫҡол. Ҡабаланып, бик ҡабаланып, эшелонға тейәлер өсөн китер ваҡытта Загорск госпиталендә бирелгән иҫке, иҫке булһа ла ныҡ, оҙон ҡунысл‌ы америка ботинкаһын, ойоҡ булмағанда сылғау урынына ҡулланылған «обмотка» тип аталған оҙон, киң, беше тауар менән йәпһеҙ итеп ялан аяғын солғаны ла солғаны. Әле уң ҡул эшенә өйрәнмәгән һулаҡай йәпле итеп оҙон обмотканы тота ла, бәйләй ҙә алмай. Өҫтәүенә, поезд һелкенеп тиҙлеген кәметте, ҡыҫҡа-ҡыҫҡа итеп һыҙғырырға кереште. Вагондар бер-береһенә бәрелеп, туҡтай башлағанда, ул обмоткаһының осон уралған урамаға тығып, аяғүрә баҫты.

Купела ла, күршелә лә хушлашырлыҡ кеше юҡ. Барыһы ла һыҙлана, барыһы ла ыңғыраша. Шулай ҙа, яуап ала алмаһа ла, Үлмәҫҡол юлдаштары менән ҡысҡырып хушлашты. Башҡаса бер ваҡытта ла улар менән осраша ла, һөйләшә лә алмаясаҡтар бит. Шулай ҙа үлемесле һуғышҡа керер алдынан бөтәһе лә һау, таҙа ине. Ҡарыулы ир булыуың үҙе ғүмереңдең бәхетле миҡдары икән! Бөтәбеҙ ҙә әлегә ул ваҡыт миҡдарында һау, таҙа, ғәйрәтле инек бит. Ә хәҙер... Ә хәҙер, ҡайтып барһаҡ та, һәр беребеҙҙең тәрән яраһынан ҡан һарҡый. Ҡан менән бергә йән һарҡый. Бөтәбеҙ ҙә ғәрип...

Һулаҡай һыңар ҡул менән нисек итеп бесән сабырмын, кәбән һалырмын, утын ҡырҡырмын? Малайҙар әле бәләкәй. Был уйҙар башына килһә, йөрәгенең бер осон бысаҡ менән ҡырҡып алғандай тойола. Тормош йөгөн һөйрәтеү, уны ҡарау ҙа һөйөклө ҡатыны өҫтөнә төшәрмө? Берәйһенән, мәҫәлән, урындағы ойошмаларҙан, берәй төрлө ярҙам булырмы икән? Был уйҙар уның башына госпиталдә һыҙланыу әҙ генә баҫылған осорҙа килә торғайны. Ә бөгөн, ә хәҙер уның башында тик тиҙерәк ҡайтып етеү, балаҡайҙарын, донъяла иң яҡын кешеһен, ҡәҙерлеләрҙән дә ҡәҙерле ҡатыны янына ҡайтып етеү шатлығы ярһыта. Һуғыштың башынан алып Берлинға тиклем арҡаһынан төшмәгән беше тоҡсайын һау ҡулбашына элеп, сығыу ишегенә килгәндә, вагон оҙатыусы уны асып, шаҡ та шоҡ итеп күтәрмәләрен төшөрә ине.

Перронда һис бер әҙәм юҡ. Шулай ҙа ҡайһы бер вагондарҙан носилкаларҙа яралыларҙы төшөрөп, тиҙ генә асыҡ кузовлы ЗИС-тарға тейәнеләр ҙә, машиналар, ергә генә төшкән тоноҡ яҡтылыҡтарын йәшереп, ҡайҙалыр китеп юғалдылар. Үлмәҫҡолдоң да поезының артҡы ҡыҙыл уттары һүрелгәндән-һүрелә барып, төн ҡараңғылығына кереп юҡ булды. Перронда ҡулбаштарындағы тоҡсайы менән генә ҡалған Үлмәҫҡол, ҡайһы яҡҡа атларға икәнлеген билдәләр өсөн, тирә-йүндәге иҫәндә ҡалған айырым билдәләрҙе ҡарап сыҡты. Ҡараңғылыҡҡа бер аҙ өйрәнгән күҙҙәренә алыҫтағы йорттоң шәүлә-һыны пәйҙә булды. Был бит — элек аттар менән аш ташый торған элеваторҙың бейек ҡорамы. Эйе-эйе, нәҡ тә шул, тип шул яҡҡа ыңғайланы. Бәлки, ул элеватор көн-төн эшләйҙер. Тирә-йүндән туҡтамай ашлыҡ ташыйҙарҙыр. Юлға ыңғай юлаусылар булыр, тигән өмөттә атланы. Ләкин элеватор ҡапҡаһы, уның алды буш ине. Бәләкәй ҡапҡаһын асып, эскә керергә тотҡа-фәлән эҙләгәндә, ҡапыл таш стенаның икенсе еренән ишек асылып китте лә, ҡулдарына винтовка тотҡан ике кеше килеп сыҡты һәм, Үлмәҫҡолдан һорау алған тәфтишсе кеүек, олорағы һорау артынан һорау яуҙыра башланы.

Аңлаштылар. Ҡораллылар тынысланды. Әммә үҙ иленә, үҙ еренә килеп етеп тә, уны йә енәйәтсе, йә ҡараҡ кеүек итеп һөйләшкән кешеләр Үлмәҫҡолдоң күңеленә ауыр яра һалдылар. Йөҙәрләгән, меңәрләгән үлектәр, яралылар араһында ла бер-береңде һаҡлау, яҡлау, тик дошманға ғына үс һәм нәфрәт тойғоһо эсендә ҡайнаған Үлмәҫҡол өсөн үҙ илендәге был мөнәсәбәт һис аңлашылманы. Уның уйынса, илдә кешеләр бер-береһе менән был оло мәхшәр — һуғыштан һуң шул тиклем яҡындар, ихтирамлылар, ярҙамсылдар кеүек тойола ине. Ҡораллыларҙың тупаҫ мөнәсәбәтенән һуң шаҡ ҡатты. Ләкин кешеләрҙең яҡшылығына күңеле һүрелмәне.

Хәҙер төн. Бик ҡараңғы. Урамдар яҡтыртылмай. Һуғыш осорондағы йыраҡ авиацияның бомбаға тотоуынан һаҡланыу саралары, күрәһең, һаман да үҙ көсөндә, тип уйланы Үлмәҫҡол. Вокзал, элеватор тирәһендәге ниндәйҙер соҡор-саҡыр, ташлыҡтар, ағас өйөмдәренә һөрөнөп, ике тапҡыр йығылып, яралы ҡулбашын ауырттырҙы. Һуңғы һөрөнөүҙә бигерәк тә уңайһыҙ йығылды. Һау һул ҡулы менән таянып та өлгөрмәне, тәкмәсләп китеп, уң ҡабырғаһы менән төштө. Эй, эстәге һөйәктең һыҙлауы... Әллә осло башы менән сөрөшөп бөтәшкән тирене тишеп сыҡтымы? Түҙеп торғоһоҙ әсетеү үҙәгенә үтте. Ятҡан килеш һау ҡулы менән уң ҡулбашын һәрмәп ҡараны. Ҡан аҡмай микән? Юҡ. Аҡмай шикелле. Ҡараңғыла һәрмәнә торғас, әйбер тоғон да бәйенән эләктереп табып алды. Һулҡылдап һыҙлай ине өҙөлгән ҡулбашы. Һулҡылдап һыҙлай. Һыҙлауына берәй төрлө им булмаҫмы тип, кире әле генә ҡаты аңлашҡан ҡапҡа эргәһенә китте. Етте лә ҡапҡаны һау ҡулы менән дөбөрҙәтә башланы. Ҡапҡаға лаулап эттәр өрөп килделәр. Ҡайҙандыр төптән таш һарайҙар, буралар араһынан йәмһеҙ ирешеү тауышы ишетелде лә, артынан уҡ атыу яңғыраны. Ҡапҡаға лап та лоп йүгереп килгәне, тағы ла йәмһеҙерәк итеп ирешеп, Үлмәҫҡолдоң был тирәнән хәҙер үк китеүен талап итте, был объекттың айырым хәрби объект булыуын киҫәтте, юғиһә, атып үлтерәсәкмен, тип янаны. Үлмәҫҡол уға тимер ҡапҡа аша үҙенең яралы һалдат булыуын әйтте һәм бер мөйөштә ҡунып сығырға урын һораны. Уны тағы ла әшәкерәк һүҙҙәр менән ҡойондорҙолар ҙа, ҡапҡаны асып, береһе винтовка, береһе ППШ автоматының көбәгән тоҫҡаны: «Предупреждаю!

Считаю до трех! Рукки вверх!» — тип ҡәтғи бойорғас, тоҡ күтәргән һыңар ҡулын күтәрергә мәжбүр булды. Көсһөҙлөгөнән ғәрләнеп, күҙҙәренән йәштәре тәгәрәне. «Мине, мине, дүрт йыл дошман менән йөҙгә-йөҙ килеп һуғышҡан, бер ваҡытта ла ҡурҡып сигенмәгән, илен, ҡатынын, ғәзиз дүрт улын һаҡлап һуғышҡан һалдатты, бында элеваторҙа икмәк ашап һимергән тыл крысалары ҡул күтәртеп ҡыуалар», — тип һулҡылданы ул. Үлмәҫҡол ҡараңғыға кергәс, арттан тағы ла аттылар. Был юлы, күрәһең, тейһә — тейенгә, теймәһә — ботаҡҡа, тип төҙәп атҡандарҙыр. Зыйлап, ситтәнерәк пуля осоп үткәндәй тойолдо.

Һуғыш осороноң ҡарарҙары буйынса, ҡорал, аҙыҡ-түлек һарайҙары айырым ҡағиҙә буйынса һаҡлана ине. Әле һуғыш бөтөп тә етмәгән шикелле. Алыҫ Көнсығышта япондар менән һуғыш әле лә бара, буғай. Хәйер, Үлмәҫҡол госпиталдә ятҡанда ул турала һүҙ сыҡҡайны. Әммә ҡулһыҙҙарға, аяҡһыҙҙарға һуғыш, ҡайҙа барһа ла, бөткән ине инде.

Юл кеүек таҡырлыҡ менән бара торғас, алда күҙҙәрен ҡыҫып ҡына барған шикелле, әкрен генә геүләп, машина үтте. Тимәк, унда юл бар, тип шул йүнәлештә атланы. Бара торғас, ул юлға төштө. Төштө лә, хәҙер инде үҙе белгән боронғо юлды төҫмөрләп, алда ятҡан ҙур иҫке Мейәс ҡасабаһы аша ауылына илткән юл башына йүнәлде. Урам менән барһа ла, урамда түгел, хатта йорттарҙа ла ут юҡ. Ҡараңғы. Өҫтө ҡуржаҡ боҙ менән ҡапланған юл күләүегенә килеп керәһеңме, ташҡа һөрөнәһеңме — барыһы ла унның аяҡ аҫтында ҡарауыллап яталар кеүек.

Оҙаҡ ҡына атланы Үлмәҫҡол. Хатта йылынып, ирәбәйеп китте. Аяҡтарын һуҙып-һуҙып атларға кереште. Ҡасаба рәүешле ҡаланан килеп сыҡты ул. «Ҡайһы юл менән ҡайтырға, тигән уй башына килеп барған килеш, юл һайлай башланы. Тәүгеһе — оло юл. Уны бөгөн «Ям юлы» тип атағандар. 1900 йылдарҙан һуң Ям юлы халыҡ телендә «Яңы һуғыш юлы» тип йөрөтөлә башланы. Сөнки районның барлыҡ яугирҙары ла 1904 йылғы Япон һуғышына ла, 1914 йылғы Беренсе империалистик һуғышҡа ла, революция, Граждандар һуғышына ла, тағы ла Фин һәм 1941 йылғы Ватан һуғыштарына ла шул юл менән Мейәс ҡалаһы аша киткән. Осор үтеү менән исемдәр ҙә онотола. Үлмәҫҡол, ана шул һуғыш юлы менән барып, Устиново тип аталған староверҙар ауылы аша ҡайтырғамы, әллә һуғышҡа тиклем йөрөгән тураҡ кеүек тойолған һанама юл менән атларғамы, тип икеләнеберәк килде.

Бына, алда ғына ята кеүек ауылы. Унда йортонда бер-береһенә һырығышып, мыш-мыш килеп балаҡайҙары йоҡлайҙыр. Ә Хәлиҙәһе? Хәлиҙәһе йоҡлаймы икән? Үлмәҫҡолдоң күкрәгенә бөтмәҫтәй шатлыҡ тулды. Ҡайһы юл менән? Ҡайһы юл менән ҡайтырға? Тура юл, һанама булһа ла, тик ҡатылыҡ буйлап, йә алтын йыуыуҙан ҡалған отвалдар, йә ҡырсынташтар түшәлгән уйпаттар аша туп-тура ауыл осона килтереп сығара. Ләкин унда дөм-ҡараңғылыҡ. Таллыҡтар эсенән дә үтергә тура килә. Ә урауыраҡ оло юл менән барғанда, иҫке динлеләрҙең тораҡтарын үтеү менән, ауылға бороласһың. Унда дүрт саҡрымдай ғына юл ҡала. Ә һуҡмаҡ юл яҡыныраҡ.

Шул арала төн тағы ҡуйырҙы. Болоттар күптән инде ай-йондоҙҙарҙы ҡаплаған булһа ла, хәҙер ул юрған ҡабарып, күпсеп, тағы ла ҡалынайҙы. Ҡалынайҙы ла, ябалаҡ-ябалаҡ итеп ҡар яуырға тотондо. Тура һуҡмаҡ башы бөтөнләйгә дөм-ҡараңғылыҡҡа сумғас, ул боролоп, кире оло юлға сыҡты. Ни тиһәң дә, бында юл киңерәк, үҙе ҡаты. Ә ҡар, ә ҡар яумай, күктән ҡойола ла

ҡойола. Алдағы иҫке динлеләр ауылына һигеҙ-туғыҙ саҡрым юл бар әле. Ҡапыл һалҡынайтты. Ел көсәйҙе. Үлмәҫҡолдоң шинелен госпиталдә үк урлағайнылар. Әллә госпиталь персоналы, әллә һәр төрлө эшкә ялланып эшләүсе шулерҙар. Юҡсылыҡ, ашау-тәғәмгә генә түгел, кейем-һалымға ла ҙур ҡытлыҡ. Ике-өс көндән эшелонға тейәлеп, Новосибирск госпиталенә китеү билдәле булғас, ул өҫтөнә, шинеле булмағанлығын белеп, нимәлер йүнәтә башлағайны, уға бик иҫке бишмәт кеүек нәмә табып биргәйнеләр. Әммә ул бик ҡыҫҡа ла, йоҡа ла. Атланы ла атланы ул юлдан. Ә ҡар яуҙы ла яуҙы. Бер тына, бер көсәйә. Бик асыҡты, әммә тоҡсайын асып, ундағы ярты булка икмәген ашарға теләмәне. Малайҙарына һаҡланы. Уларға бит бер консерва һәм шул ярты булка ҡара икмәктән башҡа һис нәмә юҡ. Ә улар атайҙарының ҡайтып килеүен беләлер, көн һайын көтәлер. Сөнки Новосибирскиға юл алыуҙарын белеү менән, ул өсмөйөш хат ебәргәйне. Ғәриптәрҙе тейәгән поезд бик яй килде. Ҙур ҡалаларҙа тик төндә генә туҡтап торһалар ҙа, ҡайһы берҙәрендә тупикта көндәр үтә. Ә көнсығышҡа эшелондар үтәләр ҙә үтәләр...

Килә торғас, төн яҡтырғандай тойолдо. Тирә-йүн ап-аҡ булды. Унан тағы ҡараңғыланып, ҡар өҫтән ҡойолдо ла ҡойолдо. Ҡар йырып килә торғас, ул тирләне, лысма һыу булды. Бик һыуһаны. Эттәр өрөүен ишеткәс, ул туҡтаны. Нисә йыл инде ул ауылда эттәр өрөүен ишеткәне юҡ. Торҙо, тыңланы эттәр өрөүен. Был тауыштар уға шул тиклем үҙ, яҡын, туған кеүек ине. Тыңланы ла ҡәтғи ҡарар менән ауылға атланы: «Тәҙрә, ҡапҡа ҡағырмын. Бик кисәү төн булһа ла, берәйһе керетер, бәлки, сәй эсерер. Әҙерәк ял итермен, әҙ-мәҙ булһа ла кибенермен. Унан сығып ауылыма атлармын», — тип уйланы. Был ауылда тик алтын йыуыу менән шөғөлләнгән кешеләр йәшәгәнен белә ине Үлмәҫҡол.

Урам яҡтан баҡсаһы булмаған тәүге өйҙөң тәҙрәһен ҡаҡты. Әммә һис бер кем тауыш-тын бирмәне. Тағы ла, тағы ла ҡаҡты. Юҡ. Һис берәү ҙә өндәшмәне. Тәҙрә ҡағыуға шунда уҡ уянып, һөйләшеп, ишек асырҙар, тигән ҙур өмөттә ине ул. Тик был хужаларҙа кеше ҡайғыһы юҡ.

Тағы ла, тағы ла ҡаҡты. Аптырағас, ситкәрәк китеп, бер аҙ көтөп торҙо. Хәҙер сығырҙар, ҡапҡа төбөнә килеп тауыш бирерҙәр, тип тә өмөтләнде. Тәҙрә пәрҙәһе ситтән генә асылды ла кире ябылды. Эстә һүрән генә ут янды. Кемдер тышҡа сығып, тәмәке тоҡандырҙы. Ҡапҡа эсендә лаулап өргән этте, күрәһең, ул сынйырынан ысҡындырҙы. Былай ҙа ғәйәрләнеп лаулаған Барбос ҡапҡаға килеп аҫылынды.

Быңдай ҡаршылауҙы көтмәгән Үлмәҫҡол йәнә урам буйлап атланы. Бына был өй мәрхәмәтлелер, тигән уйҙа тағы ла ҡапҡа ҡаҡты. Был өйҙән дә тауыш биреүсе булманы. Тәүгеһендәге кеүек, тәҙрә ябыуын астылар. Унан ҙур йөнлө баш уға текәлде. Үлмәҫҡол уға кем, ҡайҙан килеүен, ҡайҙа барыуын әйтте. Йылынып сығырға, лысма һыу аяҡтарын киптереп алырға һораны. Тыныс ҡына тыңланы, буғай, йөнлө ҙур баш тәҙрә аша. Унан һуң пәрҙә ябылды. Һәм ләм-мим. Тауыш та, тын да юҡ. Ҡапҡа ана асылыр, бына асылыр тип көтөп тора-тора, өшөй башланы. Ахырҙа тағы ла урам буйлап китте сулаҡ. Аслыҡтан интегеп, төнө буйы темеҫкенеп йөрөгән бер нисә эт лауылдап, уны урам буйлап абалап килделәр.

Уны өсөнсө өйгә лә керетмәнеләр. Һәм ул ауыл осонда торған ҙур, тыштан ҡарағанда бай йорт ҡапҡаһы төбөнә килде. Һыңар ҡул менән булһа ла, асыу менән ҡапҡа ҡаға башланы. Ҡаға, туҡтай. Тыңлай. Унан тағы ла ҡапҡа

дөбөрләтә башлай. Кемдер сыҡты. Көрһөндө. Уның артынан тағы ла икенсеһе сыҡты. Ҡапҡа аша: «Че надобно?» — тигән ҡалын тауыш ишетелде. Үлмәҫҡол тағы ла ҡайҙан килеүен, ҡайҙа барыуын төшөндөрҙө. Йылынып сығырға һораны. Ә төн һалҡынайғандан-һалҡынайҙы. Көтә торғас, күптән дә түгел тирләп килгән Үлмәҫҡолдоң тәненә зымбырҙап һыуыҡ йәбешә башланы. Бигерәк тә сөрөшөп, ослайып күгәреп ҡатҡан сулаҡ тупыс ҡулбаш өшөй, әсетә ине.

Ҡапҡа эсенән «Че надобно?» — тигән ауазда хәлгә керерлек бер ниндәй ҙә өмөт саҡтыһы һиҙелмәһә лә, керетеүҙәренә өмөтөн юғалтманы ир. Үлмәҫҡолдоң кем булыуын, ҡайҙан килеүен тыңлап та бөтмәне ҡапҡа аръяғындағы кеше. Ул винтовка затворының асып ябылған тауышын ап-асыҡ ишетте. Нимә-нимә, ә затвор асылып ябылған тауышты ул тимер тауыштарының барыһына ҡарағанда ла яҡшы белә. Ул тауыш дүрт йыл буйына көнө лә, төнө лә янда булды. Ҡалын тауыш әллә үҙҙәренең псалма доғаларынан, әллә донъяуи тәғлимәттәренән һорау бирҙе. Әммә уны Үлмәҫҡол аңламаны. Урыҫтар менән иңгә-иң терәп окопта ятһа ла, бер касканан бутҡа ашаһа ла, бер төпсөктө сиратлап һурһа ла, бындай һорауҙарҙы, һүҙҙәрҙе ишеткәне булманы. Шуға күрә һис бер һүҙ әйтә алманы.

«Слушай, путник, мы тебя, иноверца, не пущаем, тем более инородца. Иди, сейчас же ступай своей дорогой. Иначе...» — тип тағы ла затвор шылтыратты.

Аптыраны Үлмәҫҡол. «Илдә бындай ҙа кешеләр бармы ни? Әллә немец фашистарының бындағы бер иленең күләгәһендә йөрөйөм микән? Мин һуғышҡа киткәнгә тиклем бында, сит өлкә булһа ла, ауылым күршеһендә был тиклем мәрхәмәтһеҙ кешеләр осраманы. Хатта һуғышта ла. Бер туғандай берберебеҙҙе яҡланыҡ, һаҡланыҡ. Нишләп беҙ, һау ҡалғандар, аяҡһыҙҙар, ҡулһыҙҙар бындай кешеләрҙе һаҡлап һуғыштыҡ әле? Мин дошманмы ни уларға?» — тип бик тә, бик тә күңеле әрнеп, асыуы килеп, тағы ла ҡапҡаларын типкесләр сиккә еткәйне... «Эх! Һау, ике ҡуллы ла булһам, күрһәтер инем мин һеҙгә! Алҡымынан тотоп, һелкеп һөйрәп сығарыр инем мин ул һаҡалбайҙы!»

Тик... Тик шул. Үҙенең ғәрип, төптән үк өҙөлгән ҡулһыҙ, өҫтәүенә, уң ҡулһыҙ булыуына әсенеп, көсһөҙлөгөнә ғәрләнеп, сүгәләп-сүгәләп һулҡылданы. Унан ҡапыл күңеле ҡатты. Төн. Кинәт тағы ла һыуыта башланы. Төньяҡтан һалҡын ел иҫте, ә ғәрептә Үлмәҫҡолдоң ауылы артындағы уға саҡ-саҡ төҫмөрләнгән Юлдыбай, Ҡыйҙыш тауҙары өҫтөн ҡап-ҡара булып болот ҡапланы. Һалҡын ел уның битенә бәрелеп, инде аҙна буйы ҡырынмауҙан үҫкән һаҡал-мыйыҡтарын тирбәтте. Үҙ ауылының артындағы тау армытының шәүләһен күреү ҙә уның күңеленә йылылыҡ, ғаиләһенә һағыш, ә еренә бөтмәҫ һөйөү хисе уятты.

Сығырынан сығарған тупаҫлыҡты, уны тыуҙырған һаҡалбайҙы, хатта уның ауылын да онотто сулаҡ. Ул ауылдың фиғеле лә, уҫал эттәре лә, тупаҫ һаҡалбай ҙа әллә ҡайҙа юғалдылар ҙа ҡуйҙылар. Юлдыбай, Ҡыйҙыш тауынан, башҡорт Уралынан иҫкән ел йотто ул яманлыҡты, иманһыҙлыҡты, кешеһеҙлекте! Тауҙарына, уның алдында әле уттары күренмәгән ауылына етеп килеүенә дәрте күтәрелеп, һуҙа-һуҙа баҫып атлай бирҙе.

Кешелеклек тигән төшөнсәне белмәгән был иманһыҙ тораҡ ҡасандыр башҡорттарҙан заводчиктарға күскән яҫы түбә өҫтөндә ултыра. Ә аҫта, түбәлектең итәген йыуып, Мейесле һыуы аға. Һуғышҡа тиклем Үлмәҫҡол

иптәштәре менән был ауылға килештергеләй ине. Йылғаны бер нисә тоҡ һалынған арба менән ат еңел генә сығарыр булды. Игенгә, иткә, онға улар старателдәрҙән шәкәр, лампаға ҡыуыҡ, кәрәсин, балаларға кәнфит, яҙырға ҡағыҙ һәм башҡа кәрәк-яраҡ алмаштыралар ине. Уларҙың ауылына ла һыу аръяғынан килә торғандар. "Бизра тупляргә бармы?" — тип һәм башҡа эштәр ҙә һорап йөрөр булдылар.

Был хәтирәләр Үлмәҫҡолдоң иҫендә бик йыраҡта ҡалған. Был ауылдан алыҫайған һайын ул үҙ ауылы яғына ҡарап йөрәкһене. Бына йылға. Уның үрендәрәк, ярҙары бер-береһенә яҡын килгән ерҙә, аҫтында таяулы баҫма була торғайны. Йылға буйлап өҫкәрәк китте. Һыу үҙе тоташ туңмаған. Ситсите ҡуржаҡланһа ла, уртаһы ҡап-ҡара булып нимәгәлер һуғылыпмы, өйөрөлөп, бүлкелдәп ағып ята. Ә баҫма юҡ. Һыу эсенә ултыртылған бағаналар ҙа. Аптыраны Үлмәҫҡол. Староверҙар ауылы ҡабул итмәне. Бар, ҡайт, тине. Ә йылға, ашыҡма, был ярҙа берәйһенең бесәнлегендә булһа ла йоҡла, яҡтырғас, юлыңды дауам итерһең, тигәндәй, ҡап-ҡара булып ҡурҡытып ағып ята.

Йылға аша сығырға төрлө ысулдар уйлап ҡараһа ла, сара таба алманы. Ни булһа ла булыр. Әҙ һыу кистеме ул фронтта? Бынан унар, хатта йөҙәр тапҡыр киңерәк йылғаларҙы ла үттеләр бит улар. Ә был ун метрлыҡ киңлек тотоп ята.

Тәүәккәлләне. Аяғындағы обмотка осон, оҙон ҡуңыслы америкаң ботинкаһын систе. Юҡ, еүеш булыр, тип һалдатса йәшел галифе салбарын да һалды. Барыһын да һау ҡулы менән күтәреп, йылғаға керҙе. Сирҡандырғыс һыуыҡ ине һыу. Ни тиһәң дә, октябрь аҙағы. Төпкәрәк кергән һайын, һыу арта килде, тубығынан аша ботона етте. Тағы ла һыу күтәрелмәһен тип, бармаҡтары осона баҫып атларға кереште. Бына ул һыуҙың уртаһына етте, шикелле. Ҡапыл аҫта ятҡан ләмгә күмелгән йәйемгә таш өҫтөнән аяҡ бармаҡтары тайып китте лә, ҡулындағы әйбер тоҡсайы, бер-береһенә бәйләнгән ботинкалары ҡулынан ысҡынып, һыуға төшөп китте. Тайыуҙан үҙе лә сөрсөп, саҡ-саҡ һыуға ҡоламай, инде буш һау ҡулы менән йылға төбөнә таянып һыу уртап килеп торҙо ла, шунда уҡ ҡуҙғалып аға башлаған тоҡсайҙың бәйенән эләктереп алып, ярға һелтәне. Унан һуң шул уҡ минутта ҡулы менән һыу төбөнән ботинкаһын эҙләй башланы. Бәхеткә күрә, һыу тулған ауыр ботинкалар ҡапыл ғына ағып китмәгән. Икеһе бергә ялғанып бәйләнгән ботинка бауҙары ҡулына эләгеп, уларҙы тотоп, лысма һыу булғас, хәҙер инде сирҡанмай һыуҙан килеп сыҡты. Нишләргә? Тәүге уйы шул булды. Шунда уҡ ҡарарға килде. Һыу кейемдәрҙе һығып, ботинкаларҙың һыуын түгергә лә кейенеп йүгерергә. Йылғанан ауылға тиклем өс — өс ярым саҡрым булыр...

Кейемдәрен һығып, ботинкаларының һыуын түгеп кейгәнсе, еүеш тән төнгө елдә ҡалтырана башланы. Ҡатам, туңам хәҙер, тип уйланы ул. Туңыуҙан ҡотолоуҙың бер генә сараһы бар. Ул — йүгереү. Һәм ул ауылына табан йүгерҙе. Элеккеге юл шунан ине бит. Ләкин уның алдында бер ниндәй ҙә юл булмай сыҡты. Әллә ниндәй бейек, ҡомло-ташлы өйөмдәр, ҡырсынлыҡтар, таллыҡтар, һыулы соҡорҙар... Хатта бәләкәй күлдәр ҙә... Тағы ла аптыраны Үлмәҫҡол. Туҡтаны. Ян-яғына ҡаранды. Яңылыш киткәнмен, тип уйлар ине, шул таныш кисеү аша сыҡты. Тик уның юлындағы ер үҙгәргән. Элек тигеҙ ине. Әҙ-мәҙ һаҙыраҡ ере булды. Һаҙ яғаһында ауылдаштары бесән саба торғайны. Кәбәндәр, күбәләр ултырҙы. Тик Үлмәҫҡол, һуғыш сыҡҡас, алтын

табыу шөғөлө тағы ла көсәйеп, был урынды алтын йыуған драгалар, гидравликалар тетмәһен тетеп, бихисап күләүектәр, һыулы һәм һыуһыҙ соҡорҙар, ҙур, бейек отвалдар ҡалдырғандарын ғына белмәй ине. Ул ерҙәр ҡайҙа таллыҡтар, ҡайҙа ваҡ ҡырсынлыҡ, муйыллыҡ менән ҡапланып өлгөргән.

Аҙашты Үлмәҫҡол. Һис йүгерерлек түгел. Тирә-йүн дә күренмәй. Таллыҡтар аша ауыл да, Ҡыйҙыш тауы ла күренмәй, хатта эттәрҙең өрөүе ишетелмәй. Күләүектәрҙе, отвалдарҙы урап йөрөй торғас, ҡараңғы төндә ул үҙенең төп йүнәлешен дә юғалтты. Ҡайһы яҡҡа барырға? Тауыш та, тын да юҡ. Еүеш гимнастерка, фуфайка шәрәмәте, салбар һалҡын елгә туңып, тәнгә йәбешә башланы. «Юҡ! Былай торһам, мин боҙ булып ҡатам. Йүгерергә, йүгерергә кәрәк!» — тип уйлап, ҙур ғына күләүектең ситендә үк үҫкән таллыҡтарҙан янтая биреп, уларҙы һулдан сығып бара ине, ҡапыл аяҡтары, баҫыр, терәр ер тапмай, бушлыҡҡа төшөп китте. Тал сыбыҡтарының битен сыйып түбәнгә осоп барғанын хәтерләне ул. Башы һәм ҡулбашы бик ныҡ һуғылыуҙан иҫен юғалтты. Тәне ҡатып туңып, ҡулбашы һыҙлауға түҙә алмайынса, ахыры, иҫенә килде. Күпме ятҡандыр? Күкте күрҙе Үлмәҫҡол. Өҫтә яп-яҡты ине. Ҡар ҙа яумай. Тик, күрәһең, был соҡорға ҡолағанда, бүрке башынан осоп, соҡор өҫтөндәге талдың асаһына ҡыҫылған да ҡыйшайыбыраҡ уның өҫтөндә тора ине. Әллә берәй йәнлеккә оҡшатып, әллә Аллаһы Тәғәлә уның ҡайҙа фажиғәгә эләгеүен күрһәтеп, бүректән ситтәрәк, өҫтәрәк, һыңар һайыҫҡан шыҡырыҡлай. Күрҙе ул һайыҫҡанды ла, тик үҙенең ҡайҙа ятҡанына төшөнмәне. Торорға маташты. Тик бер бөтөн булып туңып ҡатҡан йоҡа, ниңәлер эстән ылдырап туҙып бөткән фуфайка, салбары аяҡтарын бөгөп ергә, терәргә ҡамасаулай. Шуға күрә лә ятҡан кәүҙәһе йүнәлешендә хәрәкәт иткән аяҡтары тәнен күтәрә алмай. Таяныр ине, һау ҡулы аҫта ҡалған. Шулай ҙа, тырыша торғас, ул соҡор стенаһына арҡаһын терәй алды. Аяҡтары менән типкесләп этәрә-этәрә, арҡаһын соҡор стенаһы буйлап шыуҙырып, аяғына баҫа алды. Ә аяҡтары яҙа-йоҙа уралып килгән обмотка эсендә ботинкаларына ҡуша туңып, дөйөм бер туң түмәрҙеме, төбөрҙөмө хәтерләтә. Ул ергә баҫһа ла, ерҙе тоймай, ҡатҡан.

Аңына килгәс, хәленең ни тиклем фажиғәле булыуын аңлап, асырғаланып, йән өшөтөрлөк итеп  һөрәнләй башланы. Соҡор тәрән ине. Стеналары дүрт яҡтан да теп-текә. Көрәк менән ҡаҙылған. Һау ҡулын өҫкә, соҡор ситенә ,һуҙып ҡараны. Ә уның йәбешерлек сите Үлмәҫҡолдоң ҡулы осонан тағы ла өҫтә ярты метр ашыуыраҡ йыраҡлыҡта ине. Тотонорлоҡ тал да тышта, ситтә, бейектә. Баҫып ынтылырлыҡ соҡор эсендә һис бер әйбер, таш, түмәр, бүрәнә булһасы?! Ни ғилләнең соҡоролор был? Ниңә ҡаҙғандарҙыр?! Әйтерһең дә, ул Үлмәҫҡолдоң тәҡдиренә инселәп ҡаҙылған.

Нишләргә һуң? Һикереп, соҡор ситенән берәй үлән төбөнмө, тал ботағынмы тотоп алыр ине,  самаһыҙ бейек. Мәшәҡәтләнде шулай ҙа. Һикереүҙән туҡтаған арала ҡысҡырҙы ла ҡысҡырҙы. Тик уның ауазы берәүгә лә етмәне.

Соҡорҙоң бер яғына аяҡтарын терәп, өҫкә шыуышырға итеп  тә ҡараны. Ләкин аяҡтар кәүҙәне этәрмәне, улар тыңлауһыҙ булып ҡатҡайны. Сығырға бер сара ла булмауына асырғаланып, ул соҡор төбөндә һулҡылдап-һулҡылдап иланы. Йә инде. Ана ғына тора бит өйө. Унда балаҡайҙары, ҡатыны. Бөгөн дә, көн һайын да уны көтәләрҙер. Загорскиҙан сығабыҙ, тип хат яҙыуына инде ике аҙна тулып килә, буғай. Дүрт йыл буйы ул дошманға, ә

дошман уны үлтерергә төбәп күпме атты. Танкыға ҡаршы ата торған мылтығын күтәреп, окоп буйлап урынлашырға китеп барғанында, немец снайперы уның башындағы каскаһын вата атып төшөргәйне. Атакаға барғанда әйбер тоғо эсендә ятҡан котелогын да дошман пуляһы үтә сыҡты. Унда ла тере ҡалды. Үҙенә теймәне. Итек ҡунысын да ярып үткән ваҡиға булды. Тик улар билдә һалыу, тәҡдирҙең үҙен иҫкәртеүе генә булды, буғай.

Һис бер сәбәп, һис бер алым тапманы сығыуына. Әммә ышанысын юғалтманы. Была-была кемдер килеп сығыр, ҡысҡырған тауышын ишетер, тип өмөтләнде. Ә теге һайыҫҡан бүрке тирәһенә тағы килде. Тағы ла шыҡырыҡларға тотондо. Саҡыра бит ул, кешеләрҙе саҡыра соҡор янына. Донъяла иң ҡәҙерле, иң яҡын ҡошҡа әйләнде һайыҫҡан. Бөтә ышанысын, өмөтөн шул һайыҫҡандың шыҡырыҡлауында күрҙе. Әллә аяҡтары тотмай, әллә көсһөҙлөгөнән соҡорҙоң мөйөшөнә ултырҙы. Берәй тимер булһасы соҡорҙоң стенаһын ҡаҙырға... Ҡаҙыуҙан сыҡҡан балсыҡты аяҡ аҫтына өйөр ҙә өйөр ине. Соҡор ситенә яртышар сирекләп булһа ла яҡынлашыр ине. Әммә уның янында һис тимер киҫәге юҡ. Немец сәғәтенән алған ваҡ ҡына сынйырға элеп йөрөткән бәкеһен дә вагонда кемдер алды ла — вәссәләм. Бирмәне. Была шунда ғына тора ине бит ул эленеп, тип билендәге ҡайышын да һәрмәп ҡараны. Ләкин вагонда йоҡлағанда төндә уны һурып, тартып алғандар ине. Ҡапыл бөтә өмөтө шул бәкегә төштө. Әммә... Әммә ул да юҡ. Ахырҙа, әйбер тоҡсайын ҡутара башланы. Бәләкәс Сабурына алған бүләген, ағас автомашинаны, тартып сығарҙы ла өҫтәрәк торған ағас тамырының осона ҡыҫтырып ҡуйҙы. Бөтә тәне ут кеүек яна, үҙе туҡтауһыҙ йүткерә. Йүткерегәнән ҡып-ҡыҙыл ҡан килә. Ҡапыл уның ҡулы еүеш, туң тоҡсайы эсендә ҡаты нәмәне һәрмәне. Тотоп алды ла тартып сығарҙы. Был бит... ҡырына торған бритва! Бәләкәй, нәҙек, йоҡа ғына немец бритваһы. Әммә үҙенеке. Өмөтө уянды Үлмәҫҡолдоң. Бөтә ышанысы шул бритваға төштө. Хәҙер ул шул бритва осо менән соҡор стенаһын соҡой башлаясаҡ. Төшкән бер балсыҡты аяҡ аҫтына тапап барасаҡ. Тәүҙә ул ҡайһы ерҙән ҡаҙа башларға самалап торҙо. Унан һуң буйы еткән ерҙән туң ерҙе сыя башланы. Ләкин туңған еүеш балсыҡ, уның өмөтөнсә услап-услап сығыр урынға, ярма кеүек кенә ҡойолдо. Бәләкәй бритваны бармаҡ араһына ҡыҫтырып, туң ерҙе сыйғысланы ла соҡоно, сыйғысланы ла соҡоно. Аяҡтары уның хәҙер һис бер нәмә һиҙмәй. Ергә баҫып тороуҙы ла, һалҡынды ла, хәрәкәттән тыуған әҙ генә йылыны ла. Кәүҙәһе лә туң фуфайка эсендә уға йәбешеп ҡатты, шикелле. Үҙе генә боролмай. Бөтә кәүҙәһе менән, хатта башы, муйыны менән бергә боролһа ғына борола.

Яҡты көн үтте. Ҡараңғы төштө. Ҡараңғылыҡ менән һалҡын килде. Төнө буйы соҡоно ла соҡоно. Был шөғөлөнөң һөҙөмтәһеҙ булыуын ул таң атып, тағы ла яҡтырғас ҡына белде. Соҡолған еренән аяҡ аҫтына ике бүректәй генә балсыҡ төшкән. Бармаҡ остары ла туңып ҡатты, буғай. Тәне ут кеүек яна йә боҙ һыуыҡлығын тоя... Ҡалтырана, дерелдәй, теше тешкә теймәй. Баҫып торорға хәле ҡалмағандай тоя, ятҡыһы килә. Әммә соҡор төбө тар, еүеш, һалҡын. Ә зиһене, зиһене әле эшләй. Етелек ҡаҙау оҙонлоғондай бәкеҡырынғыс менән нисек итеп соҡорҙоң бер яҡ стенаһын ҡаҙып емерәһең инде? Бармаҡтар ҙа туңып, хәҙер инде насар бөгөлә, бәләкәс кенә тимер киҫәген йүнләп тота ла алмай. Ҡан төкөрөп йүткерә, туҡтауһыҙ йүтәлләй. Шул йүтәлләүҙән көсәнеү ҙә тәненә йылы биргәндәй тойола.

Туң стенаны сәтәкәй бармаҡтан да ҡыҫҡараҡ тимер киҫәге менән емереп сығыу мөмкинлеге булмауҙы аңлағас, ул стенала аяҡ йөҙлөгө һыйышлы бер-береһенән ике-өс сирек бейеклегендәге ҡыуышлыҡтар соҡорға булды. Был алым өмөтлөрәк кеүек. Аяҡ һыйырлыҡ өс йә дүрт ҡыйышлыҡ ҡаҙһам, мин соҡор төбөнән бер метрҙай күтәрелә алам. Ә унда инде соҡорҙоң ситенә, үлән һабаҡтарына, ә, бәлки, тал ботағына йәбешергә Алла ярҙам итер. Шундай йылы, өмөтлө уйҙар күңелен бер аҙ йылытты, йәшәргә ышаныс килтерҙе. Соҡорҙоң ҡайһы еренән ҡыуышлыҡтар соҡорға кәрәклеген билдәләне. Шөғөлө тәненә тағы ла йылы өҫтәне. Тик ҡараңғы ҡуйырғандан-ҡуйырҙы. Күп тә үтмәне, соҡор эсе дөм-ҡараңғы тоҡҡа әйләнде. Кинәт бик ныҡ һалҡынайтты. Әллә кемгә нәфрәте ҡалҡып, асыуы тәненә һытылып сығырҙай хәлгә килеп, тағы ла ҡысҡырырға тотондо. Бәлки, берәйһе ишетер, үткәүел юл барыбер йыраҡ түгелдер... Шул тирәнән үтә ине бит юл һуғышҡа тиклем... Тик унып тауышы бөгөн сағыу түгел, ә ғырылдау ҡатыш йүтәлләү, ҡан төкөрөү менән аралашҡан ине. Тамағына бер тәғәм киҫәк ҡапмауына ла бөгөн дүртенсе көн, буғай. Юлда килгәндә вагон һелкенеүенән тимергә ослоһо менән төртөлгән ҡулбашы тәүлек буйы һулҡылданы. Ашау теләге булманы. Унан Өфөгә етеү, ҡайтыу юлының һуңғы башына, һуңғы киҫәгенә сығыу ярһытты, тулҡынландырҙы. Унан ҡулға ҡағыҙҙарҙы биреп, әллә ҡайтаралар, әллә ҡайтармауҙары ла борсоно. Демобилизация, табиптар ҡарарының ҡағыҙын ҡулға алыу ҙа күңелендә эҙһеҙ ҡалманы, ашау икенсе урынға күсте.

Йә ямғыр, йә еүеш ҡар йырып егерме саҡрым ер атлау — йәйәүле өсөн яҡын ара түгел. Ә күрше ауылдаштары менән осрашыу, аңлатыуҙар, төнгө йылғаға сумғандай, тән генә түгел, йән өшөүен дә килтерҙе. Тамағы ғырылдап, ҡан төкөрөп, йүткереүенән тонсоғоп, ҡысҡыра алмаҫлыҡ хәлгә еткәнсе һөрәнләне ир. Ҡысҡырыуы олоуға, унан йүтәлләү аша һулҡылдап-һулҡылдап илауға күсте. Тәне, гүйә, йә утҡа керҙе, йә боҙло күлгә сумды. Көсәнеп-көсәнеп йүткереүҙән башы сатнап, күҙ алдына ут атҡылары сәсрәне. Ҡапыл ул ут атҡыһы гөлт итеп ҙур бер ялҡынға әйләнде. Ул ялҡын Үлмәҫҡолдоң битен, ирендәрен, ҡашын, сәс остарын көйҙөрөп, асыҡ иҙеүе аша муйынын, күкрәген, хатта арҡаһын бешерҙе. Эҫелектән сикәһе сатнап, аңын юғалта башланы...

Үлмәҫҡолдоң ротаһы Көнбайыш Украинаның бер ауылын азат итеү өсөн немец пехотаһын ҡыҫырыҡлай ине. Урам һуғышы башланды. Ауылда барлыҡ өйҙәр тигәндәй яна. Алға йүгереп барышлай ул ҡапыл күҙенең ҡырыйы менән башын нимә менәндер ураған ҡатындың тәҙрә аша биш-алты йәшлек баланы ырғытып, үҙе тағы ла ут эсенә кереп киткәнен күрҙе. Уйлап та тормаҫтан, кинәт боролоп, Үлмәҫҡол утҡа, өй эсенә тәҙрә аша ташланды. Эстә барлыҡ тирә-йүн яна, ут янырлыҡ бөтә нәмәне сорнап алған. Төтөн араһынан һәрмәп, илағанмы, йән асыуы менән сарылдағанмы кәүҙәне күтәреп алды ла, автоматы менән бергә ҡосаҡлап, тәҙрә аша кире һикерҙе. Уның артынан уҡ өй түшәме гөрһөлдәп, осҡондар сәсрәтеп емерелде. Ҡуйынындағы балаһы менән был ҡатынды үләнле ергә төшөрҙө лә, иптәштәренә ҡушылып «ура» ҡысҡырып, алға йүгерҙе.

Шул өйҙөң эсендәге ялҡын яндырҙымы Үлмәҫҡолдоң тәнен? Шул уттың эҫелегенә сисенә башланымы? Эҫе, бик эҫе ине ул ут, ул ялҡын. Ә бармаҡтары туңған фуфайкаһының элмәктәрен һис ысҡындыра алмай,

бөгөлмәй ҙә ҡуя. Алдағы тотош ут булып янған өйҙөң дә ялҡыны уны өтә. Тәне яна, сыҙар әмәл юҡ. Ә аяғы тубығының өҫтөнә тиклем туңып, бөгөлмәҫлек хәлгә килгән. Әллә төндөң, әллә таңдың ҡайһы ваҡыты булғандыр, башын соҡорҙоң стенаһына терәп, иҫен юғалтты. Хәҙер ул йығыла ла, тубыҡлана ла, ултыра ла алмай. Сөнки һыу кейем эсендә һыу тән тотош боҙ булып ҡатҡайны. Күрәһең, йәне, бик күп михнәт, бик күп үлем осрағанын үткәргән йәне тәнен тиҙ генә ҡалдырып, был соҡорҙан үҙе генә осоп сығып китергә ашыҡмай. Йәне ваҡыт менән көрәшә. Ғазраил ваҡыт менән берләшеп алған да Үлмәҫҡолдоң йәнен уның тәненән ҡыуалай. Ә йәне, уның йәнгенәһе, Үлмәҫҡолдоң зиһененә сатырман йәбешкән дә һис күккә осҡоһо килмәй. Йәненең зиһенен тырнауына ул ҡапыл аңына килеп, күҙҙәрен асты. Һәм ап-асыҡ ишетте. Яп-яҡын, янда ғына, өҫтә генә бүреләр олой ине. «Йә Хоҙай, миңә ярҙамға килгәндәр», — тип уйланы кисәге һалдат тағы ла юғала барған аңы менән. Ә һуғыш осоронда хатта ауыл эсенә лә килеп кергән ас бүреләр уның, Үлмәҫҡолдоң, соҡоро янында олонолар ҙа олонолар. Әллә аслыҡтан, әллә соҡорҙағы йән бирә алмай интеккән мәхлүктең йәнен йәһәннәмгә оҙатышырға олойҙармы? Әллә уларҙың ниндәйҙер башҡа ниәттәре бармы? Берәү генә түгел бит улар, бер өйөр. Һәр тәҡдирҙең һуңғы хужаһы — Ғазраил. Үлмәҫҡолдоң йәнен тәненән айырып ала алмағас, күмәкләшеп килгәндәрме әллә? Күмәкләп олоп, күмәкләп йолҡоп китәләрме йәнгенәһен Үлмәҫҡолдоң? Әҙ генә йылы тәненән!

Башҡаса ишетмәне Үлмәҫҡол бүреләрҙе. Һуңғы тауыш булдымы был? Әллә йән менән ваҡыт Ғазраилының һуңғы айҡалашыуымы? Күпселек — әҙселекте, көслө көсһөҙҙө һәр саҡ айырып ала. Һәр саҡ уны баҫа, үҙенә ҡуша. Ғүмер ағышындағы сәнәғәти көрәш, тәғлимәт һәм рух һуғышы, барлыҡ һәм юҡлыҡтың айҡалашыуы, бигерәк тә йән менән күңелдең тартҡылашыуы аяныслы тереләр өсөн.

Һуңғы көрәш, үлем менән йәшәү көрәше, башҡаларынан айырылып тора. Сөнки бында башҡа төр көрәштәренең барлығы йәки мәңгелеккә юғалыуы хәл итеүә...

Хәҙер уның тәне ҡалған ғына зиһенен бөтөнләйгә тыңламай. Аҙаҡҡы тапҡыр күҙен асҡанда, ул һуңғы көнөнөң яҡтыһын күрҙе. Түп-түңәрәк, ап-асыҡ ине ул. Соҡор ситенә һаҡал-мыйығы ҡуржаҡланып бөткән, әллә тәңре динле, әллә иҫке динле, төндә уны өйөнә керетмәгән кеше килде. Өҫтән, соҡор ситенән, Үлмәҫҡолдоң күҙҙәренә текләп тора ине ул. «А-а-а, здесь стоишь? Не велено Господом нам общаться с вами. С иноверцами! Жди суда Господня!» — тине лә күҙҙән юғалды. Тик уны Үлмәҫҡол аңламаны. Уның асыҡ көйө туңған күҙҙәре был йөнлө баш аша күк күгелйеменә, төпһөҙ зәңгәрлеккә баҡҡайны. Ә юғарыға күтәрелеп ҡатҡан һыңар ҡулында — мәңгелеккә китер алдынан әле күрмәгән бәләкәс улына алып ҡайтып килгән ағас машина. Гүйә, ул соҡор сите аша аманатын тапшырып, баҡыйлыҡҡа тыныс күңел менән осорға теләп, берҙән-бер һыңар ҡулын күккә һуҙғайны...



Риф
МИФТАХОВ

# «УТЫН ҠЫРҠТЫМ ӨС АҒАС...»

### ХИКӘЙӘ-ХӘТИРӘ

Яңыраҡ Хәйҙәрҙең тыуған көнө булды. Ай-һай, был ваҡыт тигәнең аҡҡан һыу кеүек үтә лә китә икән. Ҡасан ғына әле йүгереп йөрөгән малай ине, ә бына хәҙер йәше менән дә, эше менән дә олпатланып өлгөргән ғалим, университет профессоры – хәйер, быны эш урынында үткәргән тантанала әйттеләр. Был турала уйлағаны һирәк, ә бына һуғыш йылдарына тура килгән бала сағын бик йыш иҫенә төшөрә ул.

Иртәгә яңы фатирына ауылдан туғандары, күршеләре йыйыласаҡ. Хәйҙәр ҙур табын ҡороп, тыуған көнөн билдәләү тураһында башына ла килтермәгәйне-килтереүен, баҡһаң, ҡатыны бөтәһен дә алдан уйлап, әҙерләп йөрөгән икән. Хәйҙәр ҡаршылашҡас, түңәрәк етмеш ғүмерҙә бер генә була ул, ауыҙыңды ла асма, үткәрәбеҙ, тине лә ҡуйҙы.

Хәйҙәр, ҡатынының ҡылыҡ-ғәҙәттәрен яҡшы белгәнлектән:

– Ярай инде, дуҫ-туғандар менән ултырырға бер сәбәп булыр, тик һин, Шәмсиә, ҡара уны, тыуған көнө, яңы фатир, тимә, йәме, – тип ризалашып ҡуйҙы.

– Ярар, әйтмәм, әйтмәм, – тине лә Шәмсиә, ире эргәһенән кухняға сыҡҡас, серле йылмайып, үҙ эшенә тотоноп китте.

Хәйҙәр ошо һөйләшеүҙән һуң, туғандары, ауылдаштары менән күрешеү көнө яҡынлаған һайын, ниңәлер, алыҫлаша барған бала сағындағы ваҡиғаларҙы йышыраҡ хәтерләне, күңеленән уларҙы яңынан кисерҙе...

1945 йылдың 22 майы.

Ул көндө Хәйҙәрҙең кәйефе шәп ине. Тәйрүк йылғаһынан тотҡан бер шеш балыҡты өйҙәгеләргә тиҙерәк күрһәтеп, маҡтау һүҙе ишетергә уйлап, һыу буйынан ашҡынып ҡайтып, өйгә инде. Тик ишекте асып, тупһанан бер аҙым атлауы булды, урындыҡ башында ултырған әсәһе:

– Балам, балаҡайым, ағайың... – тип ҡулдары менән йөҙөн ҡаплап, йәш аралаш өҙгөләнеп, һөйләнә-һөйләнә, сеңләп иларға тотондо. Ағас карауатта апаһы,

---

*Риф Мифтахов (1939) Ишембай районының Кинйәбулат ауылында тыуған. Оҙаҡ йылдар матбуғатта эшләне. Бихисап шиғри һәм сәсмә әҫәрҙәр йыйынтыҡтары авторы.*

мендәргә башын ҡаплап, дерелдәп ята. – Балам... балаҡайым, бәхеткәйең булманы шул... Шатлығыңа етә алманың шул... Ҡәһәр һуҡҡыры Гитлер!..

Әсәһенең йән аянысы менән йөрәк төбөнән сыҡҡан әрнеүле һүҙҙәре Хәйҙәрҙең үҙәген яндырып төштө. Ул бөтәһен дә шунда уҡ төшөндө. Әсәһен ҡосаҡлап йыуатҡыһы, нимәлер әйткеһе килде. Тик үҙен кем йыуатһын. Хәйҙәр тышҡа атылды. Ике битенән дә сөбөрләгән бөрсөк-бөрсөк күҙ йәштәрен ҡул һырттары менән алмаш-тилмәш һөртә-һөртә, Арыҫлан йылғаһы аръяғындағы бейек тирәктәргә ҡарай йүгерҙе.

– Ағай... Ағай... – Тамағына килеп тығылған төйөр ошо һүҙҙе әйтергә ирек бирмәне.

Дауылға оҡшаш киҫкен ел сығыуҙан күтәрелеп осорҙай ярһыған тирәктәргә етер-етмәҫтән, Хәйҙәр тау битендәге яҙҙың тәүге бәпкә үләндәренә йөҙтүбән аунап, балыҡ еҫе килгән ҡулдарына үлән-тупраҡ услап, буҫығып иларға тотондо. Тик хәйләһеҙ Аҡтырнаҡ ҡына, бәләкәй хужаһының ҙур хәсрәтен уртаҡлашырға теләгәндәй, Хәйҙәрҙең әле аяҡтарына, әле сәстәренә ҡағылып-һуғылып тирәяғында шыңшыны, баш осона ултырып өрҙө, хатта иркәләнеп-шаярып та ҡараны...

Ус аяһындай ҡағыҙҙағы ҡара хәбәр дөрөҫ ине. Ағаһының: «Туғаным, фашистарҙың муйынын бороп бөтөрөп киләбеҙ инде. Оҙаҡламай бөтөнләйгә һеҙҙең янға ҡайтам. Ҡармаҡтар әҙерлә, таңда өсәүләп (мотлаҡ Аҡтырнаҡты ла эйәртеп) Тәйрүккә барырбыҙ. Беҙ тотҡан балыҡтарҙы әсәйемдәр ашап та бөтөрә алмаҫ», – тигән яҡты хыялы һандыҡ төбөндәге өсмөйөшлө хатта ғына ҡалды. Тик Аҡтырнаҡ ҡына таң ҡыйылып килгән мәлдәрҙә, өй нигеҙенә баҫып, өмөтөгөҙҙө өҙмәгеҙ, көтөгөҙ, тигәндәй:

– Һау!.. һау!.. – тип өрөп-ярһып ҡуя торғайны.

Ә өйҙәгеләрҙең өмөтө хәҙер икенсе берәүҙә ине.

Өмөт аҡланды. Нәҡ бер йыл үтеүгә, ҡара болот ҡаплаған өйҙә, гүйә, ҡояш ҡалҡты – Хәйҙәрҙең атаһы ҡайтты. Аяуһыҙ һуғыштың тәүге көндәренән үк яуға китеп, тимер-томорҙан, фляга һәм һалдат шөкәрәһенән башҡа нәмә тотмаған яугир ирекәйҙең һөйәлле ҡулдары Хәйҙәрҙең башынан йомшаҡ ҡына итеп һыйпағанда, моғайын, донъяла уларҙан да бәхетле кеше булмағандыр.

Ә теге... төнгө осрашыуҙы хәтерҙән сығарырлыҡмы ни?! Әле лә йәйы килгәндә иҫкә төшөрөп, көлөшөп алалар.

...Буранбай хәбәрһеҙ-ниһеҙ генә төнләтеп ҡайтҡайны. Әҙ генә өн-тауышҡа һиҙгер Аҡтырнаҡ һалдат өй ҡапҡаһына етер-етмәҫтән абалап-ярһып сыҡҡайны ла, таныш тауыш менән иркәләп әйтелгән исемен ишетеп, урынында ҡатып ҡалды. Хужаһы тағы өндәште: шул саҡ Аҡтырнаҡ, осоп барып, ағайҙың аяғы аҫтында ураланып, ул һуҙған икмәкте лә ҡабырға ла онотоп, хужаһының ҡулдарын яларға ынтылды. Үҙе туҡтауһыҙ шыңшый ине.

Ағай ҙур усы менән күҙ йәштәрен бер генә һөрттө лә, урам ҡапҡаһын шар асып, өйгә яҡынланы. Йоҡа таҡталарҙан ғына икегә бүленгән өйҙөң түр тәҙрәһенә үрелеп ҡараны. Түрьяҡта Хәйҙәрҙән башҡа бер кем юҡ ине. Буранбай ағай һуғыш башлағанда өсө лә тулыр-тулмаҫ ҡалған малайының ябыҡ кәүҙәһенә, оҙон муйынына, ябыҡ ҡулдарына ҡарап торҙо. Өйҙөң теге яғынан берәү ҙә сыҡманы.

Хәйҙәр иһә ниндәйҙер йырҙы ихлас көйләп, телен аҙ ғына ауыҙынан сығара тешләп, мөкиббән китеп, сыбыртҡы үреүен белде...

Шул хәлдә ағаҡай күпме торор ине икән – билдәһеҙ, шатлыҡтан сабырһыҙланған Аҡтырнаҡ һыңҡылдап-шыңшып алды ла, тороғоҙ, сығығыҙ, хужабыҙ ҡайтты, тигән шикелле, алғы аяҡтарын йорт нигеҙе таштарына ҡуйып, ярһып-

ярһып өрә башланы. Тауышҡа Хәйҙәр тәҙрәгә боролоп ҡараны. Атаһының йонсоған, йәшләнгән йөҙөн ғүмерендә тәүге тапҡыр күргән малай ҡурҡыуынан артҡа сигенеп ҡуйҙы. Буранбайҙың: «Атайың!..» – тигән һүҙҙәрен ишетеүгә:

– Аталар! Аталар! – тип һөрән-ҡырҡыу һалды ла, әсәләре йоҡлаған яҡҡа сығып, тыпырсынырға тотондо.

Тауышҡа Сәғиҙә апай ырғып торҙо ла:

– Ни булды, балам, балам!? – тип ярһып, һорауына яуап та көтөп тормай, һә тигәнсе мейес аҫтынан үтмәҫ балта һөйрәп сығарып, түрьяҡ тәҙрәгә ташланды. – Йә, кем ата минең баламды?! Батыр булғас, миңә ат, ҡара йөрәк!.. – тип тәҙрәне күкрәге менән ҡаплап барып баҫты.

Был мәлдә Буранбай берсә шатлығынан, берсә көтөлмәгәндә килеп сыҡҡан был хәлдән ни эшләргә лә белмәй, һаман бер һүҙҙе ҡабатланы:

– Атаһы, тип әйтәм бит! Атайығыҙ!.. – Шунда ул бар тауышына ҡысҡырып ебәрҙе: – Мин бит был, Сәғиҙә!!

Сәғиҙә апайҙың балтаһын, гүйә, һуғып төшөрҙөләр. Ул ике ҡулын йәйеп:

– Уй Алла, атайығыҙ ҡайтҡан бит, балаҡайҙарым! – тип ишеккә атылды.

Ҡурҡышынан юрғанына бер бәләкәй йомғаҡ хәтле генә булып йомарланған Хәлиҙә апаһы ырғып тороуға, мөйөшкә сумған Хәйҙәр ҙә, ҡурҡыу-ярһыуын онотоп, әсәһе артынан ишеккә ынтылды...

Тәүҙәрәк был ваҡиғаны Буранбай ағай иҫкә төшөрөргә яратты. Ә Хәйҙәр, бәләкәй саҡта был хәлде иҫенә төшөрһәләр, оялып ҡуйыр ине. Атаһы:

– Улым, һин теге саҡта ни тип йырлай инең, йә әле көйләп күрһәт, мин ул ваҡыт тәҙрә аша ишетә алманым, – тип шаяртһа, Хәйҙәр:

– Юҡ та, мин йырламаным, – тип баш тарта торғайны.

Хәҙер инде ауылға ҡайтҡанда был ваҡиғаны йыш ҡына үҙе лә хәтерләй. Тик йырҙың бер һүҙен генә үҙгәртеп йырлай:

*Утын ҡырҡтым өс аъас,*
*Өсәһө лә йүкә аъас,*
*Атаҡайым ҡайтып төштө*
*Фашистарҙы туҡмаъас.*

Тыуған көнөндә, өй туйлауҙа ҡотлауҙар, уйын-көлкө лә, йыр-таҡмаҡтар ҙа аҙ булманы. Ләкин Хәйҙәр был мәлдә лә малай сағындағы йән тетрәткес ваҡиғаларҙы тағы ла бер тапҡыр хәтеренә төшөрҙө. Ағаһын юғалтыу ҡайғыһы, ябыҡ ҡына малайҙың иңдәренә оло хәсрәт күтәртеп, унан егет яһаһа, атаһы ҡайтыу бәхете индәренә бөркөт ҡанаттары үҫтереп, йәшәүҙең матур икәнлегенә ышандырып, тағы ла бер тапҡыр донъяға тыуҙырып аяҡҡа баҫтырҙы...

Шуларҙы уйлап, хис-тойғоларға үтә бирелеп, уйҙарынан арына алмай ултырған Хәйҙәр ике тиҫтә йылдар элек донъя ҡуйған атаһының тауышын ишетеүҙән терт итеп ҡалды, гүйә, йоҡоһонан уянып китте. Уға ҡаршы ултырған бер туған ҡустыһы: «Йәле, абзый, атайыбыҙ иҫтәлеге-рухына берәй йырыңды һүҙып ебәр»,– тигәс, шуны ғына көтөп ултырған кеше кеүек, ағаһы матур тауышы менән йыр башланы:

*Утын ҡырҡтым өс аъас...*

Йыр йыйылғандарҙың күңелен арбаны, уйландырҙы.

Асылда күҙ йәштәрен күрһәтергә бик һаран Хәйҙәр был юлы һөртмәне, улар биттәре буйлап аҡты, ә моң йөрәктәргә тамды...

*Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ойошторолоуға – 80 йыл*

# ҮТКӘНДӘРҘЕ БАЙҠАП, КИЛӘСӘКТЕ УЙЛАП

Һәр халыҡтың тарихи хәтере юйылмаһын, ғөрөф-ғәҙәттәре онотолмаһын, туған теле үҫешһен, ауыҙ-тел ҡомартҡылары һаҡланһын, һүҙ сәнғәте сәскә атһын өсөн гуманитар фәндәрҙең юғары кимәлдә булыуы – төп шарттарҙың береһе. Республикабыҙҙа ошо мөһим һәм бик кәрәкле миссияны инде нисәмә тиҫтә йылдар буйы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты үтәп килә. Әлеге көндә Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәгенә ҡараған был институттың эшмәкәрлеге шаҡтай киң һәм күп яҡлы. Оло юбилейы уңайынан уның үткәндәренә һәм бөгөнгөһөнә ҡыҫҡаса байҡау яһап, күренеш булырҙай уңыш-ҡаҙаныштарын барлап сығыу бик урынлы булыр һымаҡ.

Институттың рәсми тарихы, ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты бюроһы тарафынан ҡабул ителгән ҡарарға ярашлы, 1932 йылдың 4 мартынан башлана. Әлбиттә, ул юҡ урында барлыҡҡа килмәгән. Быға тиклем 1922 йылдан башлап республикала Халыҡ мәғариф комиссариаты янында Академүҙәк һәм “Башҡортостанды өйрәнеү ойошмаһы” эшләп килгән. Улар тарафынан күпмелер ғилми-тикшеренеү эштәре башҡарылған, башҡорт һәм рус телдәрендә фәнни баҫмалар ойошторолоп, төрлө темаға мәҡәләләр, материалдар нәшер ителгән. Был эштәрҙә М.Ғафури, Д.Юлтый, С.Мирас, Р.Фәхретдинов, З.Шакиров, Ш.Сүнчәләй кеүек әҙиптәр һәм ғалимдар ҙа ҡатнашлыҡ иткән.

Филологик тикшеренеүҙәрҙең тарихын күҙаллағанда шуны әйтергә кәрәк: илленсе йылдарға тиклем институт күберәк башҡорт мәктәптәре өсөн дәреслектәр һәм хрестоматиялар төҙөү менән шөғөлләнгән. Бынан тыш, телселәр башҡорт теленең яңы алфавитын һәм орфографияһын булдырыу, төрлө өлкәләргә ҡараған ике телле һүҙлектәр төҙөү өлкәһендә әүҙем эш алып барған, әҙәбиәтселәр иһә М.Ғафури ижады буйынса хеҙмәттәр яҙып, уның һәм Ғ.Сәләмдең әҙәби йыйынтыҡтарын әҙерләп сығарыу йәһәтенән байтаҡ эш атҡарған, ә фольклорсылар халыҡ ижадын йыйыу һәм өйрәнеү эштәрен йәйелдергән, 1936 йылда “Башҡорт мәҡәлдәре” китабын әҙерләп донъяға сығарған.

1951 йылда СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы ойошторолоп, институт шул филиал ҡарамағына ингәс, тел, әҙәбиәт һәм фольклор буйынса ғилми тикшеренеүҙәр яңы һулыш ала, йылдамыраҡ үҫеш юлына баҫа. Әҙәбиәтселәр, мәҫәлән, совет осоро һүҙ сәнғәтен өйрәнеү менән генә сикләнмәйенсә, революцияға тиклемге башҡорт әҙәбиәте тарихын аяҡҡа баҫтырыу эшенә лә ҙур иғтибар бирә башлай. Шуның сағыу бер һөҙөмтәһе булараҡ, 1965 йылда Ә.Харисовтың “Башҡорт халҡының

әҙәби мираҫы. XVIII-XIX быуаттар" исемле монографияһы донъя күрә. Ошо йылдарҙа уҡ Ғ.Рамазановтың – М.Ғафури, Ғ.Хөсәйеновтың С.Ҡудаш, Р.Ниғмәти, Д.Юлтый һәм М.Кәрим ижадына арналған хеҙмәттәре айырым китаптар булып нәшер ителә. Тел белгестәре бик күп өҫтәлмәләр менән русса-башҡортса һүҙлектең яңы баҫмаһын әҙерләй һәм башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеген булдырыу өҫтөндә ҙур эштәр башлай. Был йылдарҙа "Башҡорт халыҡ ижады" донъя күрә, һуңыраҡ айырым китаптар булып тулыландырылған "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре" һәм "Башҡорт халыҡ йырҙары" нәшер ителә. Был эштәрҙә Ә.Харисов, К.Мәргән, Х.Әхмәтов, Л.Лебединскийҙар ҙур тырышлыҡ күрһәтә.

Етмешенсе-һикһәненсе йылдарҙа филологик тикшеренеүҙәр даирәһе тағы ла киңәйә, үткәндәргә һәм үҙ заманына бәйле фәнни эҙләнеүҙәр һан яғынан да, сифат яғынан да ҙур үҫеш ала. Быға, әлбиттә, илленсе-алтмышынсы йылдарҙан уҡ башлап интитутҡа йәш белгестәрҙең күпләп эшкә килеүе һәм төрлө тармаҡтар буйынса ғилми тикшеренеүҙәргә тотоноуы ла көслө этәргес бирә.

Лингвистика тармағында эшләүселәр, мәҫәлән, фәндең һәм телдең төрлө өлкәләренә ҡараған һүҙлектәр һәм уҡыу әсбаптары төҙөү менән бер ҡатарҙан, башҡорт әҙәби теленең тарихы, уның грамматикаһы һәм лексикаһының үҫеше буйынса коллектив һәм монографик хеҙмәттәр яҙҙылар. Был өлкәлә айырыуса Э.Ишбирҙин, И.Ғәләүетдинов, Р.Халиҡовалар әүҙем эшләне. Башҡорт теленең диалекттары һәм һөйләштәре буйынса үткәрелгән фәнни тикшеренеүҙәрҙең иң көслө осоро ла нәҡ ошо йылдарға тура килә. Н.Ишбулатов, Н.Мәҡсүтова, С.Миржанова, У.Нәҙерғолов, М.Дилмөхәмәтов, С.Сабирйәнова, Г.Гәрәевалрҙың күп йыллыҡ хеҙмәт емеше булып өс томлыҡ диалекттар һүҙлеге һәм айырым-айырым монографиялар донъя күрҙе, аҙағыраҡ башҡорт теленең диалектологик атласы ла баҫылып сыҡты. Р.Шәкүров, А.Камалов, Ф.Хисамитдинова, М.Усмановалар иһә ер-һыу, ауыл-ҡала атамалары буйынса төплө хеҙмәттәр яҙҙы.

Был осорҙа әҙәбиәт ғилеме өлкәһендә лә бихисап ҙур эштәр башҡарылды. Башҡорт совет шиғриәте тарихы буйынса Ғ.Хөсәйенов, Р.Бикбаев, К.Әхмәтйәновтың, проза буйынса Ә.Вахитовтың, драматургия буйынса Ғ.Рамазановтың, башҡорт әҙәбиәтенең ижади бәйләнештәре буйынса С.Сафуановтың, әҙәбиәт теорияһы буйынса К.Әхмәтйәновтың, совет осорона тиклемге әҙәбиәт һәм ижадсылар буйынса В.Әхмәҙиев, Ғ.Ҡунафин, Ә.Вилданов, И. Бүләков, З.Шәрипова, М.Иҙелбаевтарҙың хеҙмәттәре – быға асыҡ миҫал. Монографияларҙан тыш, бер нисә коллектив хеҙмәт яҙылды. Мәҫәлән, Ғ.Хөсәйенов, К.Әхмәтйәнов, С.Сафуанов, М.Хәмиҙуллина алты томлыҡ "Күп милләтле совет әҙәбиәте тарихы"н яҙыуҙа ҡатнаштылар, алтмышынсы йылдарҙа баҫылған "Башҡорт совет әҙәбиәте тарихы. Очерктар" китабына Мәскәүҙең "Наука" нәшриәтендә сыҡҡан "История башкирской советской литературы" исемле коллектив хеҙмәт өҫтәлде. Бер үк ваҡытта антологиялар, хрестоматиялар төҙөү эштәре лә алып барылды: етмешенсе йылдар башында "Башҡорт поэзияһы антологияһы" нәшер ителгән булһа, һикһәненсе йылдарҙа XX быуат башы әҙәбиәте буйынса 2 томлыҡ хрестоматия әҙерләп сығарылды.

Әлбиттә, әҙәбиәтселәрҙең был йылдарҙағы төп коллектив хеҙмәте 6 томлыҡ “Башҡорт әҙәбиәте тарихы” булды. Уны яҙыу эшендә профессор Ғ.Хөсәйенов етәкселегендәге тотош бүлек ҡатнашты. 1973 йылдан башлап даими ойошторолған археографик экспедициялар материалдары милли һүҙ сәнғәтенең совет осорона тиклемге тарихын тергеҙеүгә төплө ерлек булды, һәм күп томлыҡтың тәүге ике томы асылда архив сығанаҡтарына нигеҙләнеп яҙылды. Әҙәбиәттең совет осоро тарихын яҡтыртҡанда ла авторҙар быға тиклем йәшәп килгән идеологик ҡыҫаларҙан, сикләүҙәрҙән мөмкин тиклем арынып, дөйөм гуманистик принциптарҙан сығып эш итергә ынтылды.

Атап үтелгән осор фольклор фәне өсөн дә ғәйәт уңышлы булды. Халыҡ ижадын һөйөүселәр М.Сәғитовтың боронғо ҡобайырҙар, Ф.Нәҙершинаның мәҡәлдәр, әйтемдәр, риүәйәттәр, легендалар, Н.Зариповтың тарихи эпос, Ә.Сөләймәновтың хайуандар тураһында һәм тормош-көнкүреш әкиәттәре, Р.Сөләймәновтың музыкаль фольклор хаҡындағы һәм башҡа бик күп хеҙмәттәрен уҡып ҡыуанды. Археографик һәм фольклор экспедицияларында, төрлө командировкаларҙа магнитофон таҫмаларына яҙҙыртып алып ҡайтылған эпик фольклор үрнәктәре, йыр, бәйет, таҡмаҡ, мөнәжәттәр – былар барыһы бергә тупланып, ҡабатлап яҙҙыртылып, айырым фольклор-музыкаль фонд итеп ойошторолдо һәм һаҡлауға ҡуйылды. Был эштәрҙе яйға һалыуға Н.Шоңҡаров айырыуса ҙур өлөш индерҙе.

Шулай ҙа фольклорсыларҙың был осорҙағы иң ҙур ҡаҙанышы, һис шикһеҙ, “Башҡорт халыҡ ижады”ның 18 томлыҡ баҫмаһын әҙерләп сығарыу булды. Был мөһим һәм яуаплы эштә, үрҙә аталған өлкән быуын фольклорсыларынан тыш, Р.Солтангәрәева, Л.Сәлмәнова, Б.Байымов, Г.Хөсәйенова кеүек йәш белгестәр ҙә әүҙем ҡатнашты. Һикһәненсе йылдарҙың икенсе яртыһында иһә институт фольклорсылары башҡорт халыҡ ижадын күп томлы итеп рус телендә әҙерләп баҫтырыу эшенә тотондо.

Үҙгәртеп ҡороуҙар, Совет дәүләте тарҡалыуы, йәмғиәт һәм ил тормошоноң аҫтын-өҫкә килтергән реформалар, әлбиттә, институттың эшмәкәрлегенә лә йоғонто яһамай ҡалманы. Туҡһанынсы йылдарҙа фәнни эштәрҙе финанс менән тәьмин итеү иң түбән кимәлдәргә тиклем төштө. Ғилми хеҙмәткәрҙәр хәйерсе хәлендә тиерлек тороп ҡалды. Иң ҡыҙғанысы: ошо ауыр, болғансыҡ йылдарҙа институттың эштәрен төпкә егелеп тартҡан байтаҡ белгес арабыҙҙан китте, күптәр юғары уҡыу йорттарына уҡытыу эшенә күсте. Һуңғы ике тиҫтә йыл эсендә телселәрҙән, мәҫәлән, Н.Мәҡсүтова, У.Нәҙерғолов, С.Миржанова, Р.Халиҡова, З.Ураҡсин, М.Дилмөхәмәтов, Ә.Бейешев, А.Камалов, Т.Кусимова, Н.Суфиянова, фольклорсыларҙан М.Сәғитов, Н.Зарипов, Н.Шоңҡаров, Б.Байымов, Л.Атанова, әҙәбиәтселәрҙән Ғ.Рамазанов, Ә.Вахитов, В.Әхмәҙиев, К.Әхмәтйәнов, С.Сафуанов кеүек билдәле ғалимдар донъя ҡуйҙы. Быңдай үкенесле юғалтыуҙар арҡаһында филология фәненең күп кенә тармаҡтары етемһерәп, бушап ҡалды, быуаттар бәйләнеше өҙөлгәндәй булды.

Ауырлыҡтарға ҡарамаҫтан, институт үҙ эшен туҡтатманы, йәш белгестәрҙе йәлеп итеп, һәр өлкәлә лә ғилми-тикшеренеү эштәре дауам иттерелде. Ул ғына ла түгел, яңы темалар, яңы йүнәлештәр билдәләнеп, яңыса ижади эҙләнеүҙәргә юл һалынды.

Әйтәйек, тел ғилеме бүлеге хеҙмәткәрҙәре “Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының телдәре тураһындағы” закондың төп положениеларын эшләүҙә туранан-тура ҡатнашты. Закон ҡабул ителгәс, йәмғиәт тормошоноң төрлө өлкәләренә ҡараған бик күп ике телле һүҙлектәр әҙерләп донъяға сығарҙы, дәреслектәр яҙҙы, дәүләт теле булараҡ башҡорт телен ғәмәлгә индереү буйынса бихисап эштәр башҡарҙы. “Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге” (етәксеһе – Ә.Бейешев), тулыландырылған вариантта “Башҡортса-русса”, “Русса-башҡортса” һүҙлектәр (етәксеһе – З.Ураҡсин), “Башҡорт теленең диалектологик атласы” (етәксеһе – Ф.Хисамитдинова) кеүек хеҙмәттәрҙең донъя күреүе халҡыбыҙ өсөн оло ҡыуаныс булды. Заман талаптарына ярашлы, 2002 йылда бүлек янында “Лингвистика һәм информацион технологиялар лабораторияһы” (етәксеһе – З.Сиражетдинов) булдырылып, башҡорт теленең машина фондын төҙөү, Интернет селтәрендә телдең терминологик һәм йышлыҡ һүҙлектәрен урынлаштырыу, компьютер өсөн башҡорт теленең берҙәм программаһын ойоштороу кеүек эштәр атҡарыла башланы.

Әлеге көндә институттың директоры Ф.Хисамитдинова етәкселегендә тел ғилеме бүлеге ғәйәт яуаплы һәм мөһим тема – күп томлы “Башҡорт теленең академик һүҙлеге”н төҙөү өҫтөндә эш алып бара. Уның уңышлы һөҙөмтәләре күренә лә башланы инде: һүҙлектең тәүге өс томы төҙөлөп, баҫылып та сыҡты.

Һуңғы ике тиҫтә йыл эсендә фольклор ғилеме бүлеге лә алға табан етди аҙымдар яһаны. 1995 йылдан башлап ул “Башҡорт халыҡ ижады”ның 36 томлыҡ баҫмаһын әҙерләү эшенә тотондо. Был томдарҙы яҙыу өсөн, әлбиттә, институтта быға тиклем тупланған материал ғына етмәй ине. Шуға күрә фольклорсылар төрлө ғилми фонд һәм гранттар иҫәбенә йыл да тиерлек экспедициялар ойоштора башланы. 1990 – 2011 йылдар эсендә улар республикабыҙҙың Яңауыл, Балтас, Борай, Тәтешле, Аҫҡын, Ҡариҙел, Хәйбулла, Йылайыр, Бөрйән, Әбйәлил, Белорет, Учалы райондарында, шулай уҡ күрше Һамар, Пермь, Свердловск, Силәбе һәм Ырымбур өлкәләренең башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрендә булып, бик күп ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларын ҡағыҙға һәм магнитофон таҫмаларына күсереп алып ҡайтты. Был эштәрҙе ойоштороуға бүлектең хәҙерге мөдире Г.Хөсәйенова ҙур көс һалды. Бөгөнгә үрҙә аталған күп томлыҡтың 13 томы нәшер ителгән, 4 томы “Китап” нәшриәтендә сират көтөп ята, шул уҡ ваҡытта бер нисә яңы том өҫтөндә эш алып барыла.

Был мәҡәләлә күберәк коллектив хеҙмәттәр тураһында һүҙ алып барыу маҡсаты ҡуйылһа ла, күренекле фольклорсы Ф.Нәҙершинаның һуңғы йылдарҙа сығарған китаптарын телгә алмау яҙыҡ эш булыр. Туҡһанынсы йылдар уртаһынан ул, ҡайһы бер белгестәрҙе йәлеп итеп, башҡорт, рус һәм инглиз телдәрендә “Халҡым йыры”, “Башҡорт халыҡ йырҙары, йыр-риүәйәттәре”, “Башҡорт-инглиз-рус әйтемдәр һәм мәҡәлдәр һүҙлеге”, “Башҡорт халыҡ риүәйәттәре һәм легендалары”, “Урал батыр. Башҡорт халыҡ ҡобайыры”, “Салауат башҡорт фольклорында”, “Башҡорт халыҡ ҡобайыр-иртәктәре” тигән китаптар әҙерләп сығарҙы һәм халҡыбыҙҙың рухи ынйыларын бар донъяға танытыу йәһәтенән өр-яңы йүнәлешкә нигеҙ һалды. Бындай өс телле баҫмаларҙың киләсәге ҙур икәнлеге шик уятмай.

Әҙәбиәт ғилеме бүлегенең совет осоронан һуңғы йылдарҙағы эшмәкәрлегенә килгәндә, шулай уҡ бер нисә ҙур коллектив хеҙмәтте айырып атарға була. Милли әҙәбиәт тарихының башҡортса 6 томлығы донъя күргәндән һуң, бүлек хеҙмәткәрҙәре уның ҡыҫҡартылған русса 3 томлығын яҙып тамамланы. Уның тәүге 2 томы 2007 йылда уҡ "Китап" нәшриәтенә тапшырылып, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, әлегәсә донъя күрә алмай ята. Был хеҙмәт менән параллель рәүештә башҡорт әҙәбиәтенең антологияларын төҙөү һәм нәшер иттереү эштәре лә йәнле алып барылды. Шуларҙың нәтижәләре булараҡ, 1999 йылда "Башҡорт әҙәбиәте антологияһы. Т. 1. XIII – XVIII быуаттар" (төҙөүселәре – М.Нәҙерғолов, Ғ.Хөсәйенов), 2001 йылда "Башҡорт шиғриәте антологияһы" (төҙөүселәре – Р.Бикбаев, Ғ.Хөсәйенов, М.Нәҙерғолов, И.Кинйәбулатов, Ф.Әхмәтова), 2007 йылда "Башҡорт әҙәбиәте антологияһы. Т. 2. XIX быуат" (төҙөүселәре – Ғ.Хөсәйенов, М.Нәҙерғолов, З.Шәрипова) китаптары донъя күрҙе. Оҙаҡламай нәшриәткә 2 томдан торған "XX быуат башы башҡорт әҙәбиәте антологияһы" тәҡдим ителәсәк. Бүлек хеҙмәткәрҙәренең бер өлөшө байтаҡ йылдар инде институттың 6 мең ярымдан артыҡ боронғо ҡомарткылар һаҡланған ҡулъяҙма һәм баҫма китаптар фондына каталог төҙөү, фәнни тасуирлама яҙыу һәм реставрациялау эштәре менән мәшғүл. Фонд ҡомартҡылары буйынса Р.Болғаҡов, Ғ.Хөсәйенов, М.Нәҙерғоловтарҙың айырым хеҙмәттәре донъя күрҙе. Фондты тулыландырыу маҡсатында һуңғы йылдарҙа республиканың төньяҡ-көнсығыш районларына археографик экспедициялар ойошторолдо.

Бүлектең элекке етәксеһе академик Ғ.Хөсәйеновтың да монографик хеҙмәттәрен айырым телгә алмау мөмкин түгел. Һуңғы йылдарҙа уның әҙәбиәт тарихы һәм теорияһы буйынса береһенән-береһе тосораҡ бер нисә китабы баҫылып сыҡты. Әҙәбиәт һөйөүселәр, студенттар һәм уҡытыусылар өсөн "Башкирская литература XI – XVIII веков", "Литература и наука", "Башҡорт шиғыры. Шиғыр төҙөлөшө", "Башҡорт әҙәбиәте поэтикаһы", "Әҙәбиәт теорияһы" хеҙмәттәре бигерәк тә көтөп алынған китаптар булды.

Хәҙерге ваҡытта бүлек хеҙмәткәрҙәре "Башҡорт әҙәбиәте тарихы"ның бөгөнгө, йәғни совет осоронан һуңғы этабына арналған етенсе томын әҙерләү өҫтөндә эш алып бара. Уның айырым бүлектәрен яҙыуға халыҡ шағиры, ғалим Р.Бикбаев һәм ҡайһы бер БДУ уҡытыусылары ла йәлеп ителде. Бөгөнгө заман әҙәбиәте тураһындағы хеҙмәтте киләсәктә рус телендә лә әҙерләп сығарыу күҙ уңында тотола.

Бер мәҡәләлә институт филологтарының барлыҡ эшмәкәрлеген яҡтыртыу – мөмкин булмаған эш. Әммә ошо ҡыҫҡа ғына күҙәтеү ҙә башҡорт фәненең үткәндәрҙән алып бөгөнгәсә йылдам үҫеш юлында булғанлығын асыҡ дәлилләй. Киләсәккә институт ышаныслы аҙымдар менән атлай.

**Миңлеғәли НӘҘЕРҒОЛОВ,**
**филология фәндәре докторы,**
**Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының**
**әҙәбиәт ғилеме бүлеге мөдире.**

# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ЙЫЛЪЯҘМАҺЫ

“Ил һаҡлау – ҙурлыҡ, ил баҫыу – хурлыҡ” ти халыҡ мәҡәле. Ҡыҫҡа ғына әйтелгән был юлдарҙа башҡорт халҡының рухи донъяһы ла, тәбиғәтенә хас булған милли һыҙаттары ла, хатта тарихы ла сағылған. Тәғәйен тарихи йөкмәткеле фольклор әҫәрҙәренән күренеүенсә, бүтән сығанаҡтар буйынса ла, башҡорттарҙың баҫып алыу ниәте менән башҡа илдәргә яу сабыуҙары билдәле түгел. Ил һаҡлау тәңгәлендә иһә, уларға күп яуҙарҙа ҡатнашырға тура килгәнлеге (һундар менән бәрелеш, Алтын Урҙа дәүерендәге монгол яуҙары, нуғай мырҙалары ҡыҫымы, ҡаҙаҡ, ҡалмыҡ барымталары, 1812 йылғы Ватан һуғышы, Бөйөк Ватан һуғышы…) ғилми әҙәбиәттә лә, халыҡ ижадында ла киң яҡтыртылған.

Хәрби-патриотик тема ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәрендә күренекле һәм үҙенсәлекле урын биләй. Тәбиғи, был йәһәттән фольклорҙың тарихи “ойотҡо”ло төп жанрҙары – риүәйәттәр, риүәйәт-легендалар, ҡобайыр (эпос), йырҙар һәм бәйеттәр алға сығарылған. Шуныһы иғтибарҙы йәлеп итә: ошо ижад төрҙәре бербереһе менән тығыҙ бәйләнешкә инеп, йыш ҡына ҡатнаш формалар рәүешендә сығыш яһай. Ғилми әҙәбиәттән мәғлүм булыуынса, ысынбарлыҡты героик планда һүрәтләү вазифаһын әүәл, нигеҙҙә, эпос жанры үҙ өҫтөнә йөкмәгән[1]. Эпик традициялар һүлпәнләнә, йомшара төшкәс, был вазифаны лиро-эпик йырҙар, күпмелер кимәлдә бәйеттәр үтәй башлай. 1812 йылғы Ватан һуғышы осорон сағылдырған фольклор әҫәрҙәренең поэтик тәбиғәтенә жанрҙар яҙмышындағы ошо күренештәр йоғонто яһаған булһа кәрәк. Был “Байыҡ Айҙар” эпосы, “Икенсе Әрме”, “Каһым түрә” риүәйәттәренең төҙөлөш үҙенсәлегендә ярайһы уҡ асыҡ күренә. Берләшкән башҡорт ырыуҙарының ике быуаттан ашыу ваҡыт Рәсәй дәүләте ҡарамағында йәшәүе, милли һәм ижтимағи аң үҫешенең икенсерәк баҫҡысҡа күтәрелеүе кеүек мөһим күренештәр фольклор ижадсыларының иғтибарынан ситтә ҡала алмай, әлбиттә. Хәҙер инде әҫәрҙәрҙең төп геройы булып айырым бер ырыу йәки төбәк батыры түгел, ә илен, Ватанын һаҡларға дәррәү күтәрелгән халыҡ массалары сығыш яһай. 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт халҡының уйнаған роле, уның патриотик тойғоһо бигерәк тә “Икенсе Әрме”[2] әҫәрендә тәрән асыла. Урыҫ батшаһының саҡырыуына ҡушылып, башҡорттарҙың француз яуына дәррәү күтәрелеүе риүәйәттә ҙур тасуири оҫталыҡ менән бирелгән. Һуғыш хәбәрен ишеткәс тә

---

[1] *Жирмунский В.М. Народный героический эпос. М.; Л., 1962. — С.195.*

[2] *Риүәйәт, йыр, ҡобайыр жанрҙарын берләштергән үҙенсәлекле текст. Риүәйәте француз яуы тураһындағы йырҙарҙың килеп сығышына бәйле сығарылған. Әрме йырҙарын Мөхәмәтша Буранғолов үҙенсә төркөмләп, «Әрмеләрҙә йөрөп сәс еткерҙем, сәскенәйем етте үрмәгә» тип башланған киң билдәле йырҙы — «Беренсе Әрме», 1812 йылғы Ватан һуғышы хаҡындағы эскадрон йырҙарын — «Икенсе Әрме», башҡорт ғәскәрҙәренең Перовский етәкселегендәге Урта Азия походы тураһындағыларын («Һыр», «Аҡ мәсет») «Өсөнсө Әрме» тип атай.*

“йәшен һуҡҡандай һиҫкәнеп китеп, аяғөҫтө баҫҡан бөтә Урал халҡы”, ир-егеттәрҙе оҙатырға йыйылған бисә-сәсә, ҡарт-ҡоро, бала-сағаның яҡындары менән хушлашыу мәле бөйөк рәссам ҡулы тейгән картина булып күҙ алдына баҫа.

Оҙатыусыларҙың яугирҙарға биргән наказдары ифрат тәрән мәғәнәле, оло хис-тойғолар менән һуғарылған. Хикәйәләүҙең йолаға бәйле этнографик мәғлүмәттәр менән биҙәлеүе (яуға китеүселәргә бирелгән бүләк-символдар: еп, тәңкәләр…) унын әһәмиәтен тағын да күтәрә төшә. Сәсәндәрҙең һамаҡлап ҡобайыр әйткәне иһә бөтә ил теләген белдергән изге нәсихәт булып яңғырай. Ә инде яуға киткән ир-егеттәрҙең “әй, илкәйем – нәҙекәй билкәйем” тип ғәзиз илкәйҙәрен ғәзиз йәрҙәре менән айырылмаҫ образ итеп күҙаллауы халҡыбыҙ аңындағы ватансылыҡ тойғоһоноң тәрәндән килгән тамырҙарын яҡтыртыуы менән әһәмиәтле. Улар, ирекһеҙҙән, боронғо ҡараштар ерлегендә яралған “Заятүләк менән Һыуһылыу” эпосындағы: “Уң яғымдан терәргә Балҡантауым бар минең, /Һул яғымдан терәргә Һыуһылыуым бар минең” тигән фәлсәфәүи юлдарҙы хәтерләтә.

Башҡорттарҙың Рәсәй дәүләте эсендә тотҡан урыны, халыҡтар берҙәмлегенең киҫкен мәлдәрҙә айырыуса әһәмиәтлелеге, илһөйәрлек тойғоһо кеүек юғары уйланыуҙар урыҫ кешеһе, ябай балыҡсы ауыҙынан да әйттерелгән. Фольклор әҫәре өсөн был хәл тәбиғи: балыҡсы образы эпос һәм әкиәттәр геройына юл сатында осрап, уға ҡайһы юл менән китергә кәңәш биргән ҡарт образы юҫығында ижад ителгән. Балыҡсы риүәйәттә халыҡ вәкиле булараҡ күҙ алдына баҫа. Уның кәңәшен тотоп, олуғ батшаның башҡорттарға мөрәжәғәт итеүе, шуның һөҙөмтәһендә килеп тыуған артабанғы ваҡиғалар шәхес һәм халыҡ берҙәмлеге, дәүләтселек төшөнсәләренең аңда күптән нығынған булыуына ла ишара яһай; “бер тупраҡты еҫкәгән, бер һыуҙы эскән халыҡ” үҙенең ер-һыуын, Ватанын бергәләшеп яҡларға тейеш, тигән. “Байыҡ Айҙар” ҡобайырының нигеҙенә лә асылда ошо уҡ фекер һалынған.

Әгәр “Икенсе Әрме” башҡорт ғәскәрҙәренең “тау шишмәһендәй гөжөлдәп, диңгеҙҙәй урыҫ ғәскәренә барып ҡушылыуы” картинаһын һүрәтләһә, “Ҡаһым түрә” әҫәре халҡыбыҙҙың француз һуғышында күрһәткән батырлыҡтары тураһында бәйән ҡыла. Айырым шәхестең ҡаһарманлығын данлау маҡсатында барлыҡҡа килгән был әҫәр объектив рәүештә заманының тарихи шарттарын сағылдыра: ваҡиғалар ағышына халыҡ массаларының хәл иткес йоғонто яһағанлығын һүрәтләй. Аҡһаҡалдарҙың йыйылышып кәңәш-төңәш итеүҙәре, тирә-яҡҡа йәшен тиҙлегендә таралған оранды ишетеү менән күҙ асып йомғансы ғәскәр йыйылыуы һ.б. күренештәр шуға миҫал. Яугирҙарҙы яуға оҙатҡанда телгә килгән Уралтау образы айырыуса тәрән мәғәнәле: уның “һүҙ”е ил, халыҡ һүҙе булып ҡабул ителә. Яуға китеүсе егеттәрҙең Урал һүҙенән рухланыуы, уларҙың тыуған ерҙән көс алыуы һыҙыҡ өҫтөнә алына. Австрия еренә инеү, Парижды алыу эпизодтарын һүрәтләгәндә лә халыҡтың батырлығы менән ғорурланыу үҙәк урынға ҡуйыла. Ә Ҡаһым түрә иһә шәхси батырлыҡ күрһәтеүе менән генә түгел, ҡаһарман полководец, ил теләген бойомға ашырыусы ил батыры, юлбашсы сифатында күҙ алдына баҫа.

“Һарылай сәс” (“Төлбаҙыян”) исемле бер риүәйәттә Ҡаһым түрә ил аҡһаҡалдарының ораны, губернаторҙың фарманы буйынса Наполеон ғәскәренә ҡаршы сығыр өсөн майҙанға халыҡты йыйҙырған яугир командир итеп һүрәтләнә. Текстан аңлашылыуынса, Ҡаһым – элек тә яуҙарҙа ҡатнашып, ҡаһарман командир исеме алған шәхес. Ҡаһарманлыҡ һынауын үткәреү аша йөҙ баштарын (сотниктар) һайлау эпизоды ла Ҡаһым түрә хаҡындағы сюжеттарға яңы бер йәм өҫтәй: “... Ҡаһым түрә (...) уң ҡулына ҡылысын, һул ҡулына өс ҡырлы

һөңгөһөн алып, өс сажин аралыҡ менән кеше бейеклеге бағаналар башына һары тал сәнсеп ҡуйылған, уң яҡтан иң остағы бағанаға – ҡарасҡы, һул яҡта, тоҡ эсенә бесән тултырып элеп ҡуйылған кеше башы һымаҡ сәптәргә, атын ҡыҙҙырып сабып барған хәлдә, бер уңға, бер һулға әйләнеп, бер сыбыҡты ла ҡалдырмай өҙә сабып, һөңгө менән ҡарасҡыны, ҡылысы менән йомро “баш”ты сәнсеп алыуы булған, ҡарап тороусылар хайран ҡалып, Ҡаһымды хөрмәт ҡылғандар...”[3]

Әгәр ҙә “Каһым түрә” исемендәге сюжеттарҙа халыҡ һәм уны етәкләгән ҡаһарман башлыҡтың батырлығы данланһа, “Абдрахман Аҡъегет”, “Йәнһары батыр” риүәйәттәрендә шәхси батырлыҡты данлау, ыңғай геройҙы идеаллаштырыу мотивы өҫтөнлөк итә. Шуға ла һөйләүсе шәхестең эшмәкәрлегенә дөйөм баһа биреү менән генә сикләнмәй, ә уның характер һыҙаттарына баҫым яһап, образды күркәмләтеү ниәтендә гиперболик алымдар ҡуллана. Мәҫәлән, француз һуғышы батыры Абдрахман Аҡъегетов – пуля алмаҫ, ҡылыс үтмәҫ герой рәүешендә, Йәнһары батыр ҡеүәтле бәһлеүән, мәргән уҡсы булараҡ һүрәтләнә. Уның “атҡан уғы ике кеше аша үтеп сыға, (...) буйы ике аршын ярымға етеп, яурынға ла ибәтәйһеҙ киң була. Күс яғынан ат ни, ул ни!” Ошолай легендар формала, әкиәт геройҙары стилендә тасуирланһалар ҙа, риүәйәттәрҙә телгә алынған күпселек персонаждар – реаль шәхестәр. Уларҙың йәшәгән төбәге, дәрәжәләре, нәҫел-ептәре билдәле, улар хаҡында йырҙар йырлана. Әйтәйек, Абдрахман Аҡъегетовтың элекке Стәрлетамаҡ өйәҙе Үтәгән ауылы (хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районы) кешеһе икәнлеге, француз һуғышында есаул дәрәжәһендә булып, күп ҡаһарманлыҡтар күрһәтеүе хаҡында Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев яҙмалары буйынса билдәле. М. Өмөтбаевтың “Батырҙың улы Мырҙаҡай 1814 йылдың апрель айында атаһының француз телендә яҙылған өс запискаһын миңә тапшырҙы. Был ҡағыҙҙарҙы Абдрахманға крепость коменданттары биргәндәр” тигән мәғлүмәте иғтибарға лайыҡ. Риүәйәттең үҙендә килтерелгән “Беҙҙең ауылдың хәҙерге Мырҙаҡаевтары ана шул Абдрахман нәҫеленән булалар” тигән юлдар ҙа риүәйәт поэтикаһы талабынан сығып ҡына әйтелгән һүҙҙәр түгел. Ә инде даны бөтә Башҡортостанға таралып, исеме йырҙарҙа мәңгеләштерелгән Ҡаһым түрәнең тарихи шәхес булыуында ла шик юҡ, тик уның йәшәгән төбәгенә, ырыуына, туған-тыумасаларына ҡараған мәғлүмәттәр[4] артабан өйрәнеүҙе талап итә.

1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт халҡы ифрат көслө патриотик тойғо кисерә. Унда хатта башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ла ҡатнашҡан. “Ирәмәле” йыр-риүәйәте йәш ҡатындың яугир иренән ҡалышмай атҡа менеп, ҡоралланып, француз яуына китеүен, “Йәнтүрә хикәйәһе” (хәтирә) шул һуғышта ҡатнашып, батырлыҡтары өсөн миҙал алған ҡыйыу, сая, тапҡыр, аҡыллы башҡорт ҡатынының героик образы һынландырыла. Тарихи ерлеге тәғәйен асыҡ булыуы менән был хәтирә айырыуса ҡиммәтле. Рус сәйәхәтсеһе В. Зефиров 1847 йылда уны 1812 йылғы һуғышта ҡатнашҡан яугир ауыҙынан яҙып алып, матбуғатта сығарған (“Оренбургские губернские ведомости” № 47. С. 669 – 671). Йәнтүрә ҡатынының исеме ҡағыҙға теркәлмәй ҡалыуы ғына үкенесле.

Француз яуы ерлегендә тыуған халыҡ ижады әҫәрҙәре араһында йырҙар ҙур урын биләй. Уларҙың бер төркөмө ҡатнаш формалы жанр төрҙәре эсендә лирик мотивтарҙы хасил итеүсе йүнәлеш булараҡ сығыш яһаһа, икенселәре тик шиғри

[3] *Башҡортостан ҡыҙы, 1962. № 2, 15 — 17-се б.*

[4] *Әсфәндиәров Ә. "Совет Башкортостаны", 1986. 4 февраль; Бәҙретдинов С. Ҡаһым түрә, вай кем... //Башҡортостан, 2012. 12 ғинуар.*

юллы йыр текстары рәүешендә һаҡланып, хәҙерге көндәргәсә килеп еткән ҡиммәтле ҡомартҡылар. Мәҫәлән, “Ҡаһым түрә”, “Һары ла сәс”, “Ерән ҡашҡа” кеүек йырҙарҙың риүәйәттәр менән берлектә теркәлгәндәре лә, уларҙан тыш тик йыр сифатында йөрөгәндәре лә бар. Былдай үрнәктәрҙең һәр ҡайһыһы үҙенсә ҡиммәтле, әммә уларҙы йыйып, бер система эсендә ҡарағанда, халыҡтың тарихи ваҡиғаларға, был осраҡта һуғышҡа, мөнәсәбәтенең, ғөмүмән, донъяға (йәшәйешкә) ҡарашының үҙенсәлектәре тәрәндәнерәк асыла.

Француз яуы тураһындағы тарихи йырҙарҙа Ҡаһым түрә образы айырыуса сағыу һүрәтләнеш ала. Ватан һуғышының атаҡлы ҡаһарманына бағышланған йырҙарҙың, йыр-риүәйәттәрҙең бөтәһе өсөн уртаҡ мотивтар булып, геройҙың абруйлы командир булыуы, уның ҡаһарманлығы, фажиғәле үлеме тора. Ҡаһым түрәнең үлем фажиғәһе күпселек варианттарҙа ағыу эсереү мотивына бәйле. Ғилми әҙәбиәттән билдәле булыуынса, башҡорт полктарында командирҙар булып, ғәҙәттә, урыҫ хәрбиҙәре торған, башҡа милләт вәкилдәре, шул иҫәптән башҡорттар, командир ярҙамсылары булып хеҙмәт иткән. Улар ҙа ҡайһы ваҡыт тарихи документтарҙа командирҙар буларaҡ теркәлгән. Ҡаһым түрә йыр-риүәйәттәрҙең, йырҙарҙың һәр ҡайһыһында ғәскәр башлығы, командир дәрәжәһендә һүрәтләнә. Был осраҡлы хәл түгел, булһа кәрәк. Геройҙы күмгәндә биш йөҙ кешенең өнһөҙ ҡалып, ҡайғырыштарынан ҡәбер ҡаҙалмай тороуы; башҡорт батыры үлгәндән һуң хәрби уйындарҙы урыҫ майоры уйнатыуы кеүек мәғлүмәттәр ҙә Ҡаһым түрәнең күберәк һанлы ғәскәр менән етәкселек иткән башлыҡ булыуына ишара яһай.

Йырҙар ифрат тәрән көсөргәнешле хистәр менән һуғарылған. “Ағыу эсереп харап, ай, иттеләр, /Күмһеп-күмһеп яна шул йөрәк”, “Ҡаһым түрә үлгән, тип ишеткәс, /Зар илаша ауыл ҡарттары”. Сәсәндәрҙән һүҙ ҡала, батырҙарҙан дан ҡала, тиҙәр бит. Ватанын һаҡлауға дәррәү күтәрелгән халҡының хәтеренә Ҡаһым түрәнең героик образы хаҡ һүҙле һайлам ир булып уйылып ҡалған:

*Ыласын, бөркөт үҫкән, ай, Уралда, вай кем,*
*Сал бөркөттәй һайлам ир ине.*
*Яуға ҡаршы сапҡан мәлдәрендә, вай кем,*
*Тау-таш ярыр йылдам ир ине.*
.......................................
*Ҡаһым түрә фарман биргән саҡта, вай кем,*
*Әйтер һүҙкәйҙәре хаҡ ине.*

Дөйөм алғанда, 1812 йылғы Ватан һуғышы тураһындағы йырҙарҙың күбеһендә күтәренке тойғолар, еңеү шатлығын кисергән ир-егеттәрҙең күңелендә яралған ғорурлыҡ хистәре ярылып ята (“Любизар”, “Байыҡ”). Әммә, шуның менән бер рәттән, уларҙа һуғыш килтергән юғалтыуҙар, ғөмүмән, кешеләрҙең тыныс, ҡәҙимге тормошоноң тәбиғи ағышы үҙгәреүе арҡаһында килеп тыуған ауырлыҡтар, лирик геройҙың шәхсән кисерештәре хаҡында тәрән уйланыуҙар бар. Был – лирик геройҙың эске тойғоларын һүрәтләү аша сағылдырылған һағыш мотивы. Миҫалдарға мөрәжәғәт итәйек:

*Беҙ киткән саҡта, һай, юҡ үлән,*
*Ат күҙкәйҙәренә етте инде.*
*Хаттар ҙа яҙып етмәҫ ергә*
*Ғәзиз башҡайҙарым китте инде*[5].

---

[5]*НА. ф. 3. Оп. 21, Д. 8, Л. 360.*

*Ҡулда ла мылтыҡ, билдә сәске[6] ,*
*Өҙөлөп бара нескә билкәйем.*
*Уйнағанҡайым, көлгәнкәйем,*
*Исемә төшә тыуған илкәйем[7].*

Фажиғә мотивтары башлыса бәйеттәрҙә сағыла. Жанр тәбиғәтенә ярашлы, уларҙа трагик ваҡиғаларҙың асылы аяныслы һүрәтләүҙәр аша күҙ алдына баҫтырыла:

*Көн буйынса көрәш барҙы ҙур аҡланда,*
*Иген-сиген күр(ә)алмаҫһың, ныҡ баҡһаң да.*
*Кеше белән хайуан ҡаны аралашты,*
*Ер һеңдереп өлгөр(ә)алмай, өҫтән ташты.*

*Ярһыу ирҙәр ҡурҡыу күҙен күрмәнеләр,*
*Аяҡ-ҡулдың өҙөлгәнен белмәнеләр.*

Ошо ҡан ҡойошта йөрөгән яугирҙың үҙе хаҡында уйламай, ә милләтенең генофондына һуғыш килтергән зыян тураһында әйтелгән әрнеүле һүҙҙәре ифрат тәрән мәғәнәле:

*Йә, илаһи, ҡарап тороп ни эшләйһең,*
*Затлы халҡың ҡырыла бит, ник белмәйһең?*

Бер үк ваҡытта бәйет ижадсыһы ил һаҡлау бурысының мөҡәддәслеген дә яҡшы аңлай:

*“Ыласын ирҙәр хас дошмандарҙы онотмаҫтар,*
*Һепереп түкмәй изге ерҙән вә ҡайтмаҫтар”,–*

ти ул (“Француз бәйете”).

Бәйеттәрҙә иғтибарҙы тағы бер нәмә йәлеп итә: ул – яуға күтәрелгән халыҡтарҙың, атап әйткәндә, рус һәм башҡорт халҡының берҙәмлеген данлау идеяһы. Был йәһәттән үҙенсәлекле кинәйәләү алымына ҡоролған “Кутуз бәйете” ҡыҙыҡлы. Кинәйәләү халыҡ ижадында йыш осрай торған төш мотиве аша еткерелә. Имеш, башҡорттарҙың яуҙа күрһәткән батырлыҡтарына ҡәнәғәтлек белдергән Кутузов Ҡаһым түрә менән осрашҡанда уға үҙенең төшөн һөйләй. Төштөң мәғәнәһе – бөркөт ояһына ташланған имәнес йыланды юҡ итеүҙә ҡарсығаның ярҙамға килеүенең мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алыу:

*Икеһе бергә – ҡарсыға бөркөт илә*
*Һөжүм ҡылғандар яуызға ғәйрәт илә.*
*Теткәндәр бергә йыландың тетмәһен,*
*Ырғытҡандар үҙ өңөнә, бүтән кермәһен.*

Күренеүенсә, бәйеттәрҙең тамамланыу өлөшө оптимистик рухта яҡтыртыла. Был тәңгәлдә улар йырҙар менән ауаздаш.

Ҡыҫҡаһы, француз һуғышы хаҡындағы фольклор әҫәрҙәренең бөтәһендә лә халыҡ һәм Тыуған ил хаҡына эшләнгән бөйөк ҡаһарманлыҡты данлау идеяһы, илде ҡотҡарыуҙа үҙенең актив ҡатнашлығын тойған халыҡтың уй-кисерештәре ята. Шуға ла был әҫәрҙәрҙә һағыш, төшөнкөлөк мотивтарына, илау-һыҡтау ауаздарына артыҡ ҙур урын бирелмәй, тиергә мөмкин, киреһенсә, уларҙа патриотик пафос, рух күтәренкелеге өҫтөнлөк итә. Үҙенең күңелен тетрәткән оло тарихи ваҡиғаны халыҡ үҙе аңлағанса, үҙ ҡараштары яҡтылығында бирә. Тарихи фактты эҙмә-эҙлекле һүрәтләү, уны туп-тура, нәҡ ысынбарлыҡта

[6]*Сәске — руссанан: шашка.*
[7]*НА. ф. 3. Оп. 21, Д. 8, Л. 359.*

булғанса күсереү халыҡ ижады әҫәрҙәренең бурысына инмәй. Һәр осраҡта ла һөйләүсенең теләге, художестволы фантазияһы билдәле кимәлдә әҫәрҙең йөкмәткеһенә йоғонто яһамай ҡалмай. Быны беҙ башҡорттарҙың Наполеон яуында ҡатнашыуы тураһындағы риүәйәттәрҙә асыҡ күрәбеҙ. Улар Ватан һуғышы ваҡиғаларын сағылдырғанда тарихи хәҡиҡәткә тоғро ҡалһалар ҙа, деталдәрҙе, айырым эпизодтарҙы тасуирлағанда ҡабартыбыраҡ күрһәтеү яғында, хатта ижади уйҙырманы ла “эшкә егә”ләр. (Башҡорттарҙы күргәс, Наполеондың Мәскәүгә ут төртөп ҡасыуы; күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн башҡорттарға урыҫ батшаһының бүләк, мал-мөлкәт, ер тәҡдим итеү эпизодтары шундайҙар иҫәбенә инә.) Ҡутәрелештең масштабын, ошо ҙур яуҙа башҡорт халҡының индергән өлөшөн иҫкә алғанда, риүәйәттәге уйҙырманың поэтик алым булыуы яҡшы аңлашыла. Уның реаль нигеҙен раҫлаусы ҡайһы бер тарихи материалдарҙы килтереп китеү ҙә был ерҙә урынһыҙ булмаҫ, моғайын.

Билдәле булыуынса, 1812 йылғы Ватан һуғышына һәм 1813 – 1814 йылғы сит ил походтарына ебәреү өсөн башҡорт атлыларынан – 20, мишәрҙәрҙән – 2, типтәрҙәрҙән 2 полк төҙөлгән. Былардан тыш, 2 башҡорт полкы хөкүмәткә бүләк ителгән 4139 атты оҙатып барған. Полктарҙың күбеһе Кутузов етәкселек иткән урыҫ армияһы составында Данциг, Лейпциг, Париж һәм башҡа ҡалалар янындағы һуғыштарҙа ҡатнашҡан. Французлар башҡорт һуғышсыларын мәргәнлектәре өсөн “төньяҡ амурҙары” тип атаған[8] .

Һуғыштың тәүге этабындағы Бородино янындағы алышта ла, Мәскәүҙе азат итеүҙәге бәрелештәрҙә лә башҡорт ғәскәрҙәре ҡаһармандарса көрәшә. Тылда ҡалған башҡорт халҡының ярҙамы – шулай уҡ заманы өсөн тойолорлоҡ һәм оло маҡтауға лайыҡлы ярҙам.

Башҡорт халҡының 1812 йылғы Ватан һуғышында әүҙем ҡатнашып дан яулауы,– әлбиттә, иҫтәлекле һәм ғорурланыу тойғоһо уятырлыҡ ваҡиға. Шуға ла ул быуындар хәтерендә уйылып, беҙҙең көндәргәсә йыр, риүәйәт һәм легендалар рәүешендә килеп еткән. Башҡорт музыка сәнғәтенең аҫыл ынйыһы булараҡ, “Ҡаһым түрә” йыры иһә күптән инде классик йырҙарыбыҙ рәтендә урын алған. Һуңғы йылдарҙа Ҡаһым түрә образының яңы балҡышы халҡыбыҙҙың бейеү мәҙәниәте донъяһында ла сағылды. “Байыҡ” бейеүе башҡарыусыларының Республика телевизион конкурсында “Ҡаһым түрә” бейеүҙәренең күрһәтелеүе шуға дәлил. 1812 йылға Ватан һуғышы темаһына ижад ителгән фольклор әҫәрҙәренә башҡа халыҡтарҙың күренекле вәкилдәре, атап әйткәндә, Рәсәй мәҙәниәте донъяһында танылыу алған С.Г. Рыбаковтың иғтибар итеүе (ул үҙенең “Музыка и песни уральских мусульман с очерком их быта” (СПБ, 1897) тигән китабында башҡорттарҙың йөҙҙән ашыу йырын баҫтырып сығарған), атаҡлы тел ғалимы Н.К. Дмитриевтың француз яуы тураһындағы башҡорт халыҡ йырҙарының үрнәктәрен итальян телендә Римдә нәшер итеүе (1933) – быларҙың береһе лә осраҡлы хәл түгел.

**Фәнүзә НӘҘЕРШИНА,**
**филология фәндәре докторы, профессор.**

---

[8]*Рахимов Р.Н. Военная служба башкир русскому государству в XVI—XIX вв.// Гуманитарные науки в Башкортостане: История и современность. Материалы Межд.научн.-практ.конф., посвященной 75-летию ИИЯЛ УНЦ РАН 16 ноября 2007 г. Уфа: Гилем, 2007. С. — 173—174. Он же. 1-й башкирский полк в Отечественной войне 1812 года // Ватандаш, 2010. № 10. С. 63; Асфандияров А.З. Участие башкир в войнах и походах России в период кантонного управления (1798—1865 гг.) // Из истории феодализма в Башкирии. Уфа, 1971. — С. 75—95.*

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫНДА ҠАТЫН-ҠЫҘ МАТУРЛЫҒЫ

Мәңгелек философик категорияларҙың береһе булған матурлыҡ төшөнсәһе кешелек тормошоноң бөтә өлкәләрендә лә урын ала. Кешенең төҫ-ҡиәфәтенән башлап тотонған һауыт-һабаһына, эш ҡоралдарына, һөйләгән һүҙенә, эшләгән эшенә тиклем барыһы ла матур булырға тейеш. Матурлыҡ төшөнсәһе кешегә бала сағынан уҡ таныш һәм яҡын. Һәр ата-әсә үҙ балаһын матурлыҡты тойорға, матур булырға өйрәтергә тырыша.

Халҡыбыҙҙың матурлыҡҡа ынтылыуы, матурлыҡты күҙаллауы халыҡ ижады әҫәрҙәрендә яҡшы сағылыш тапҡан. Халыҡ ижадының һәр жанрында матурлыҡ үрнәктәрен табырға мөмкин. Был осраҡта беҙ иң тәүҙә ҡатын-ҡыҙ матурлығын күҙ уңында тотабыҙ әлбиттә, сөнки “матурлыҡ” һәм “ҡатын-ҡыҙ” төшөнсәләре бер-береһенән айырылғыһыҙ.

Ҡатын-ҡыҙ матурлығының сағыу үрнәктәрен ҡобайырҙарҙа табырға мөмкин. Мәҫәлән, “Мәргән менән Маянһылыу” ҡобайырында[1] Урал ҡыҙҙарының матурлығы түбәндәгесә һүрәтләнә:

*Уралдың һылыу ҡыҙҙарын –*
*Ҡараъусҡыл сейәләй*
*Янып торъан йөҙҙәрен,*
*Шәлкемләнгән ебәктәй*
*Шоморт ҡара сәстәрен,*
*Сал бөркөттәй кәпәйеп*
*Ҡалҡып торъан түштәрен,*
*Атта уйнап сыныҡҡан*
*Бал ҡортондай билдәрен,*
*Ҡырсын ташҡа һибелгән*
*Көмөштәй сыҡҡан моңдарын,*
*Айҙай ҡыйъас ҡаш аҫты*
*Ҡуъалы[2] һылыу күлдәрҙәй,*
*Керпеге үтә һөҙөлөп,*
*Йылмайыусан күҙҙәрен*
*Һылыуҙарҙы белгән һуң,*
*Айҙай Урал һылыуы*
*Маянды күргән һуң,*
*Нуъай ханы уй туплаъан,*
*Маянды алам, тиеп.*
*Атаһынан һораъан.*

---

[1] *Башҡорт халыҡ батырҙары тураһында ҡобайырҙар/Төҙ.: М. Буранғолов. Өфө, 1943. 82—102-се биттәр.*

[2] *Ҡуға — диал.(дим) — ҡыркбыуын үләне.*

Миҫалдан күренеүенсә, һүҙ Урал һылыуҙары тураһында бара. Урал һылыуы тигәндең артында башҡорт һылыуы тора. Башҡорт халҡында кеше тураһында йәшәгән төбәк атамаһына баҫым яһап әйтеү киң таралған: “Төҫкә матур, эшкә батыр/Беҙҙең Маҡар ҡыҙҙары./Беҙҙең Маҡар ҡыҙҙарының/Янып тора күҙҙәре” йәки “Быуа ҡыҙҙары һөйкөмлө/Ут кеүек егеттәре”[3]. Халыҡ ижадында егеттәргә ҡарата “Ирәндек бөркөтө”, “Урал батыры” һ.б. кеүек һүҙбәйләнештәр осраһа, ҡыҙҙарға ҡарата “Ағиҙел һылыуы”, “Дим һылыуы”, “Ирәмәл ҡыҙы”, “Яйыҡ ҡыҙы” кеүек, йә булмаһа тау, дала , урман ҡыҙы йәки егете тигәнде лә ишетергә тура килә. Бер яҡтан ул кешенең ҡайһы төбәктән булыуын белдерһә, икенсе яҡтан эпитет һымаҡ ҡабул ителә һәм егет булһа – батыр, ҡыҙ булһа – матур тигәнгә бәрәбәр.

Халыҡ ижады әҫәрҙәрендә, ғәҙәттә, ҡыҙ матурлығын баһалау уның йөҙөнән башлана. Үрҙә ҡобайырҙан килтерелгән миҫалда ла иң тәүҙә иғтибар ҡыҙҙың янып торған йөҙөнә, ҡыйғас ҡашына, йылмайыусан күҙҙәренә йүнәлтелә. Артабан сәсенең матурлығы, ҡалҡыу түше, нәҙек биле тураһында әйтелә. Шунда уҡ беҙ Урал ҡыҙҙарының атта йөрөп сыныҡҡанлығы, моңло тауышлы булыуы тураһында ла мәғлүмәт алабыҙ.

Башҡорт халҡының бөйөк эпосы “Урал батыр”ҙа Һомайҙың, “Аҡбуҙат”та Мәсем хандың ҡыҙы Айһылыуҙың матурлығын һүрәтләгән юлдар булыуы, уларҙа ла күберәк иғтибарҙың тышҡы ҡиәфәтенән йөҙөнөң матурлығын: нәҙек ҡара ҡаш, оҙон керпектәр, нур сәсеп торған ҡара күҙҙәр, һирәгерәк битендәге миңе, тештәре, йылмайыуы телгә алыныуы тураһында беҙ яҙғайныҡ инде[4].

Халыҡ ижадында ҡатын-ҡыҙ матурлығын һүрәтләү айырыуса йыр жанрында күп осрай. Билдәле булыуынса, мөхәббәт йырҙарының күбеһендә ғашиҡ егеттең һөйгән ҡыҙының һылыулығына дан йырлау аша хис-тойғоларының көсөн һүрәтләү ҙур урын ала: “Ҡыйылған ҡара ҡаштарың/Ҡарлығандай күҙҙәрең”, “Тешең – ынйы, йөҙөң – көҙгө/Күҙең – йондоҙ, ҡашың – ай”, “Бер битеңдә балҡый ҡояш,/Бер битеңдә балҡый нур”[5]. Ғашиҡ егет тарафынан әйтелгән ошо һүҙҙәр халыҡ йырҙарының юлдарына һалынған да инде. Ҡыйғас ҡара ҡаш, муйылдай, әлеге осраҡта ҡарлығандай, ҡара күҙҙәр, ынйы менән сағыштырылған тигеҙ, аҡ тештәр, йондоҙға тиңләнгән матур күҙҙәр, ҡояшҡа, айға тиңләнгән йөҙ – барыһы ла башҡорт фольклорында ҡатын-ҡыҙ матурлығын тасуирлағанда даими ҡулланылып, традицияға әүерелгәндәр. Быны совет осоро халыҡ йырҙары миҫалдарында ла күреп була: “Ҡыҙҙары, ҡыҙҙары,/Ҡояш икән йөҙҙәре./Шоморт икән күҙҙәре,/Матур икән үҙҙәре”; “Биттәреңдә ҡояш уйнай./Ай ғына ҡуяһы бар”; “Алһыу йөҙөңдә нур балҡый,/Ал күлдәк кейгән һайын./Ынйы тешең йым-йым итә,/Йылмайып көлгән һайын”; “Ҡыйылған ҡара ҡаштары,/ Ҡарағаттай күҙҙәре”[6] һ.б.

*[3]Башҡорт халыҡ ижады. Совет осоро. Беренсе китап.; Бәйеттәр. Йырҙар. Таҡмаҡтар/Төҙ., инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторҙары Мөхтәр Сәғитов менән Миҙхәт Мәмбәтов. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1981. 164,165-се бб.*

*[4]Хусаинова Г.Р. Описание женской красоты в башкирском фольклоре//Философская и общественно-политическая мысль Башкортостана в ХХ столетии: Материалы региональной научной конференции (май 2001 г.). Уфа, 2001. С. 147-148.*

*[5]Ҡара: Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең ғилми архивы (артабан: РФА ӨҒҮ ҒА). Ф.3. Яҙма 47. Һаҡлау берәмеге 2. 164-се, 243-сө, 245-се бб.*

*[6]Башҡорт халыҡ ижады. Совет осоро. Беренсе китап. ; Бәйеттәр. Йырҙар. Таҡмаҡтар/Төҙ., инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторҙары Мөхтәр Сәғитов менән Миҙхәт Мәмбәтов. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1981. 168, 297,299,323-сө бб.*

Ҡатын-ҡыҙ һәм матурлыҡ төшөнсәләре бер бөтөн булған кеүек, ҡатын-ҡыҙ янында һәр ваҡыт ир-егет төшөнсәһе лә ныҡлы урын ала: “Ир малай – ил былбылы,/Ҡыҙҙар – былбылдың гөлө./Гөл былбылын, былбыл гөлөн/Һағыналыр билгеле”[7], – тиеләә халыҡ йырында, ә мәҡәлдәрҙә “Ҡыҙ егеткә ҡушыла – ебәк булып ишелә”, “Ҡыҙ тыйнаҡ булһа, егет йыйнаҡ була”,“Егет булһа, батыр булһын,/Ҡыҙ булһа, матур булһын”, “Ҡыҙ баланың дәрте күкрәктә,/Ир баланың дәрте йөрәктә”[8] һ.б.

Донъяла матурҙар күп булыуы, ә һөйгән йәрҙең берәү генә булыуы тураһында ла йырлана халыҡ йырҙарында: “Ал бер генә була ул/ Гөл бер генә була ул./Йән тартҡан, күңел яратҡан/Йәр бер генә була ул”. Йәки “Һыуҙа балыҡ күп булыр,/Суртан балыҡ бер булыр./Илдә матур күп булыр,/Йән һөйгәнең бер булыр”[9], ә мәҡәлдәрҙә “Бер күктә ике ай булмай,/Бер күңелдә ике мөхәббәт булмай”, “Һөйгән – һигеҙ, йән теләгән – бер”[10] һ.б.

Матурлыҡ – мөхәббәт тыуҙыра, ә мөхәббәт үҙен һаҡлауҙы һәм тоғролоҡ талап итә. Йәмғиәт әхлаҡлы кешене матур итеп күрә һәм баһалай. Әхлаҡ булһа, мөхәббәт менән бәхет тә ғүмерле була. Әхлаҡлы кеше – тәү сиратта – хеҙмәт һөйөүсән кеше. Халыҡ ижады әҫәрҙәрендә улар ҙа урын ала. Мәҫәлән, “Һары һандуғас балаһын/Ҡулдарымда һайратам/Матурлығы бер ни түгел – /Уңғанлығын яратам” йәки “Һеҙ һөйөгөҙ шундай ҡыҙҙы – эшсәнен һәм уңғанын”[11]. Был осраҡта халыҡта тышҡы матурлыҡтан уңғанлыҡ өҫтөнөрәк ҡуйыла, йәғни киң мәғәнәләге матурлыҡҡа баҫым яһала.

Дөйөмләштереп әйткәндә, башҡорт халыҡ ижадында ҡатын-ҡыҙҙың тышҡы матурлығын һүрәтләү ҙур урын алһа ла, уның тышҡы ҡиәфәтенә ҡарағанда күркәм холҡона, уңғанлығына өҫтөнлөк бирелә. Шуға ла халыҡта “Матур матур күренмәҫ, һөйгән матур күренер”, “Йөҙө аҡ тип алданма, эсе ҡара булмаһын”, “Күңел һөймәһә, күҙ һөймәҫ”, “Матурҙы күрге килә, яҡшыны алғы килә”, “Матурлыҡ туйҙа кәрәк, уңғанлыҡ көн дә кәрәк”, “Яҡшы ҡатындың ире кейеменән билдәле”, “Яҡшы ҡатын арыш онон кәбәк итер, яман ҡатын бойҙай онон харап итер”[12] кеүек мәҡәлдәр бөгөнгө көндә лә йыш осрай һәм йәшәүен дауам итә.

**Гөлнур ХӨСӘЙЕНОВА,**
**Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының**
**фольклор ғилеме бүлеге мөдире.**

---

[7]*РФА ӨҒҮ ҒА. Ф.3. Яҙма 47. Һаҡлау берәмеге 2. 101-се б.*

[8]*Башҡорт халыҡ ижады.10-сы том. 1-се китап. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр/Төҙ., инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы — Фәнүзә Нәҙершина. Өфө: Китап, 2006. 143, 149, 150-се бб.*

[9]*РФА ӨҒҮ ҒА. Ф.3. Яҙма 47. Һаҡлау берәмеге 2.123-сө б.*

[10]*Башҡорт халыҡ ижады.10-сы том. 1-се китап. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр/Төҙ., инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы — Фәнүзә Нәҙершина. Өфө: Китап, 2006. 141, 146-сы бб.*

[11]*Башҡорт халыҡ ижады. Совет осоро. Беренсе китап.; Бәйеттәр. Йырҙар. Таҡмаҡтар/Төҙ., инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторҙары — Мөхтәр Сәғитов менән Миҙхәт Мәмбәтов. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1981. 149, 159-сы б.б.*

[12]*Башҡорт халыҡ ижады.10-сы том. 1-се китап. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр/Төҙ., инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы — Фәнүзә Нәҙершина. Өфө: Китап, 2006. 141—151, 213-сө бб.*

# ХАЛЫҠ ХӘТЕРЕНДӘ – ХЫЗЫР-ИЛЬЯС

Атеистик совет заманы осоронда фольклорсыларға дини тематикаға ҡағылышлы материалдар йыйыу тыйылғанлыҡтан, Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге архивында был темаға бәйле сығанаҡтар юҡ кимәлендә. Һуңғы ун йылда дингә ҡараш үҙгәреүе һәм Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты тарафынан фольклор экспедициялары тергеҙелеү сәбәпле, халыҡ ижадын, шул рәттән Исламға бәйле төрлө жанрҙар: легенда-риүәйәттәр, мөнәжәттәр күпләп туплана башланды. Уларҙа дин, пәйғәмбәрҙәр тарихы, фәрештәләр, әүлиәләр, мөғжизәләр, изге шишмәләр һ.б. хаҡында бәйән ителә. Был мәҡәләбеҙ башҡорттар араһында йыш иҫкә алынған Хызыр-Ильясҡа бағышлана. 1998 – 2011 йылдар аралығында Башҡортостандың күп райондарында һәм күрше өлкәләрҙә Хызыр-Ильяс тураһында бер-береһенә сюжеттары менән оҡшаш байтаҡ риүәйәттәр яҙып алырға тура килде.

Хызыр-Ильяс образы – Ислам донъяһында киң билдәле. Уның хаҡында төрки ғалимдар байтаҡ ғилми хеҙмәттәр яҙған, Интернет селтәрендә лә материалдар бихисап. Беҙҙең башҡорт фольклористикаһында иһә был тема ғалимдарыбыҙ иғтибарынан ситтә ҡала килә.

Башҡорттарҙа Хызыр-Ильяс бер фәрештә исеме тип ҡабул ителә, ә дин тарихында иһә ул фәрештә түгел, ә айырым ике кеше. Ильястың пәйғәмбәр булыуы билдәле, ә Хызыр – пәйғәмбәр йәки әүлиә булған, тигән төшөнсә йәшәй. Ильясты мосолмандарҙа – “Ильяс пәйғәмбәр”, христиандарҙа – “Пророк Илья” тип йөрөтәләр. Халыҡ аңында Хызыр-Ильяс – юлсыларға ярҙамсы, иген үҫтереүсе, ризыҡ биреүсе фәрештә булараҡ танылған. Шуға ла, йыш ҡына: “Хызыр-Ильяс юлдаш булһын!” – тип оҙатып ҡалалар. Хызыр-Ильясты осратҡан кеше – бәхетле була, тигән ышаныу ҙа бар халыҡта. Уны йәшел сапанлы, аҡ сәлләле, аҡ һаҡаллы, йәшел таяҡлы ҡарт итеп һүрәтләйҙәр. Ҡайһы бер осраҡта, ул яратмаған кешең, насар ғына кейемле кеше сүрәтендә лә булыуы ихтимал. Хызыр-Ильясҡа бәйле риүәйәттәрҙә: ул өҫтәл артына ултырһа ла ашамай, кешеләрҙең уйын белә, йорттарға доға уҡып сыға һәм уның теләктәре ҡабул була. Шулай уҡ ул кешеләргә ҡыйын ваҡытта юлдарында тап булып ярҙам итә йә һынау өсөн өйҙәренә килеп инә, харамдан тыя, бәлә-ҡаза булыр алдынан иҫкәртә лә. Был риүәйәттәр барыһы ла ниндәйҙер ырым-ышаныу, тыйыуҙар менән оҙатыла бара.

Хызыр-Ильяс кешеләрҙе һынау өсөн өйҙәренә килеп кергән ваҡытта уны мотлаҡ ихлас ҡабул итергә, ризыҡ тәҡдим итергә йә хәйер бирергә кәрәк. Сөнки халҡыбыҙҙа “Көтөлмәгән ҡунаҡ – Аллаһы Тәғәләнең ҡунағы”, “Юлсы, мосафир кешенең доғаһы ҡабул була” тигән ышаныуҙар бар. Шулай уҡ динебеҙ буйынса ла күрше-тирә, халыҡ менән татыу булып, ярҙамлашып йәшәргә тейешбеҙ,

харамдан йыраҡ булырға, тыйылған эштәрҙән тыйылырға кәрәк. Мәҫәлән, ауылдарҙа “Йома көн кер йыуырға ярамай, бысраҡ һыу түгергә ярамай” тигән тыйыу киң таралған. Сөнки йома – мосолмандарҙың байрамы, иң мөбәрәк, изге көнө иҫәпләнә. Шуға ла, мосолмандарҙы ярамаған эштәрҙән иҫкәртеп Хызыр-Ильяс йөрөй, имеш, тиҙәр.

Беҙ журнал уҡыусыларына төрлө районда ҙа беҙҙең тарафтан яҙылып алынған Хызыр-Ильяс тураһында риүәйәттәрҙе тәҡдим итәбеҙ.

**1. ӨЙГӘ ХЫЗЫР-ИЛЬЯС КЕРЕҮЕ**

*2005 йылда Һарытау өлкәһе Перелюб районы Күсәбай ауылы Искәндәрова Миңлевафа Яҡуп ҡыҙынан (1933 йылғы).*

Инәйем һөйләй, зыярат яғынан бер алама ғына кейенгән кеше килеп керҙе, ти. Икмәк һораны, бирҙем, ти. Сыҡһам, икмәкте күтәрмәлә ҡалдырып киткән. Шунан белдем Хызыр-Ильяс булғанын, ти. Хызыр-Ильяс ҡай саҡ иң яратмаған кешең ҡиәфәтендә лә килә икән.

Тағы ла бер хәл булған. Магазинға берәү йүгереп килеп кергән:

– Тиҙ бул, икмәк бир! Ана, ҡаза килеп ултыра, хәҙер һәләк булаһың, – тип әйткән. Был һаман тора, ти. Шунан, биргән икән, теге икмәкте өҫкә алып бәргән. Икмәк ҡазаны күтәрә, ти. Икмәк – иң ҙур хәйер икән.

**2. ХЫЗЫР-ИЛЬЯСҠА ИКМӘК БИРЕҮ**

*2005 йылда Һарытау өлкәһе Пугачев районы Мәҡсүт ауылы Яҡупова Өмөтбикә Хәйрулла ҡыҙынан (1926 й.).*

Фазих тигән кешенең ҡатыны кер йыуып ятҡан. Бер кеше килеп кергән, икмәк һораған, ти. Йылы, бешкән икмәген биреп сығарған хужабикә. Бер аҙ торғас, ҡатын: “Керемде урлап китмәһен!” – тип артынан сыҡһа, теге юҡ, ти. Ул кире керһә, икмәге өйҙә ята икән. Шунан аңлаған кем кергәнен. Аҙаҡ улар ғүмер буйы аш-һыуға бай булдылар, ә шул “керемде урлап китмәһен!” тип насар уйлағаны өсөн әйбергә бер ваҡытта ла ялсыманылар (йәлсемәнеләр).

**3. ХЫЗЫР-ИЛЬЯС МЕНӘН ОСРАШЫУ**

*2004 йылда Тәтешле районы Шулған ауылы Хисмәтова Лутфиә Әбүталиб ҡыҙынан (1915 й.).*

Хызыр-Ильясты мин үҙем күрҙем. Оло тауға бара инем, ныҡ арыным. Артҡа боролоп ҡараһам, ике ҡатын килә. Уларҙы көтөп ятып торҙом. Шунда оҙон, аҡ башлы йәшел таяҡҡа таянған, йәшел сапан кейгән бабай күренде:

– Балам, тор! Быйыл һиңә ҡаза килер. Икмәккә май яғып, юғары ергә ҡуй! Эт ашамаһын, ҡарға-ҡоҙғон ашаһын, улар ризығына яҙһын, – тине.

Үҙем менән булған майлы икмәкте тау башына мендереп, ҡалдырып киттем.

Икенсеһендә Тәтешленән ҡайтып киләм. Ҡояш байығанда оло урмандан сығып килә инем. Үҙен күрмәнем, янда кемдер бар икәне тойола. Япраҡтар ҡыштырлап, еле менән эргәнән килә.

– Ҡурҡма, балам, ҡурҡма, йөрәгеңә таян, Аллаңа ышан, бер нәмә лә булмаҫ! – тине.

**4. ХЫЗЫР-ИЛЬЯСТЫҢ КИҪӘТЕҮЕ**

*2004 йылда Свердловск өлкәһе Түбәнге Серге районы Үрмәкәй ауылы Хәмбәлов Мәндияр Хәмбәл улынан (1924 й.).*

Ҡәйнәм Хызыр-Ильясты күргән. Элек аслыҡ саҡта бер урында күп кенә бойҙай тапҡан. Мөшәгенә (тоҡ) тултырып алған. Шунда бер ҡарт килеп сыҡҡан. Ҡәйнәм уға:

– Бына бынан һин дә тултырып ал, етә бит, – тигән. Ҡарт:

– Мин арыраҡтан тултырып алырмын, – тигән. Шунан, ҡарт:

– Һин тултыраһың да ул, тик ризыҡыңа яҙмаясаҡ бит, – тигән.

Ҡарсыҡ йылға аша сығып барғанда бата яҙған. Ағып киткәндә ҡулындағы игенен ысҡындырған. Үҙе ярға саҡ килеп сыҡҡан.

**5. ХЫЗЫР-ИЛЬЯСТЫҢ КҮРЕНЕҮЕ**

*2004 йылда Свердловск өлкәһе Түбәнге Серге районы Өфө-Шигере ауылы Мөзипова Кәшифә Мансур ҡыҙынан (1938 й.).*

Шөкүр ауылынан Ғашиға әбей бар ине. Шарамбыға килен булып төшөп, шунда йәшәне. Ул уҡына, өшкөрә ине, доғалары кешеләргә бик килешә ине. Кем килһә лә, үҙенең ашарына булмаһа ла, сәй эсереп сығарыр ине. Шул миңә һөйләне.

Был бер ваҡыт йоҡа (йәймә) бешереп торған. Быға Хызыр-Ильяс килеп кергән. Бергә ултырып өйгә доға уҡығандар. Уға хәйер итеп ошо йоҡаһын биргән. Ғашиға әбей артынан сыҡһа, ҡайҙан сыкты икәнен ҡарайым тип, йоҡаһы ята, ҡарт юҡ, ти.

Икенсе тапҡыр шулай булған. Ҡарсыҡ һуғыш ваҡытында урамда сикүшкә (араҡы) тапҡан. Шуны аҙыҡҡа алмаштырып алырмын тип, урыҫ ауылы Михайловкаға китеп барған. Урыҫ ҡәберлегенән йәшел сапан, сәллә кейгән бабай килеп сыҡҡан да:

– Һинең ҡулыңда харам, ул һиңә килешмәй. Бар ҡайт! – тигән. Шунан ул кире ҡайтҡан.

**6. СҮЛДӘ ХЫЗЫР-ИЛЬЯСТЫҢ ОСРАУЫ**

*2008 йылда Балтас районы Түбәнге Ханһөйәр ауылы Заирова Саимә Ғатин ҡыҙынан (1931 й.).*

Минең малай Ҡаҙағстанда йәшәне бит. Ул унда Хызыр-Ильясты күргән. Сүллектә машина менән китеп барһа, юлда бер ап-аҡ бабай тора икән. Шуны ултыртып алдым, һөйләшеп барҙыҡ, ти. Бер ерҙә төшөрөргә ҡушты, мине шунда төшөр, тип әйтте. Төшөрҙөм, һаубуллашты, ти. Унан ҡарайым, юҡ булды, ти. Аптырағас, машинанан төшөп ҡараным. Тирәяҡта сүллек, юл да юҡ, бер нәмә лә, бер кем дә юҡ, ти.

**7. ХЫЗЫР-ИЛЬЯСТЫҢ КИЛЕҮЕ**

*2005 йылда Һамар өлкәһе Глушицкий районы Ташбулат ауылы Мусина Зәйтүнә Әбхәлим ҡыҙынан (1924 й.).*

Бер ҡарсыҡ Һамарҙа йәшәй. (Минең инәйемдең инәһе менән унының инәһе бер туғандар.) Шул ҡарсыҡҡа Хызыр-Ильяс килгән. Йәшел таяҡҡа

таянған, йәшел сапан кейгән, ти. “Һин кешеләрҙе дауалаусы, ҡараусы булырһың”, – тигән, бер китап биреп киткән. Шул ҡарсыҡ аҙаҡ кешеләрҙе дауалап ултырған. “Яман уй менән килгән кешегә китап асылмай”, – ти ине.

**8. ХЫЗЫР-ИЛЬЯС**

*2005 йылда Һарытау өлкәһе Перелюб районы Ҡатай (Күсембәт) ауылы Ибраһимов Ғәбдрәүеф Ғәбдрәҡиб улынан (1934 й.).*

Инәйем һөйләй ине. Ҡыпсаҡта йәшәгәндә, ишек асылып, берәү килеп кергәйне. Атайым:

– Кем ул? – тип ҡысҡырғас, теге сығып киткән. Хызыр-Ильяс булғандыр, тип уйланыҡ. Хызыр-Ильяс кергәндә усаҡ алдында мотлаҡ ҡомған менән һыу булырға тейеш. Ул тәһәрәт алып сығып китә икән.

**9. ХЫЗЫР-ИЛЬЯС ТЫЙЫУЫ**

*2005 йылда Яңауыл районы Әхтиял ауылы Ғарифуллина Зинира Ниғмәтйән ҡыҙынан (1931 й.).*

Күп йылдар элек Нурислам тигән кеше булған. Ул Иннек буйында, зыярат эргәһендә ат менән ер һөргән. Бер ваҡыт шулай зыяратты уратып, эсенә керә биреп һөргәндә, йәшел таяҡ тотҡан, башына сәллә ураған бабай килеп сыҡҡан да:

– Был ерҙе һөрөргә ярамай бит, улым, бында мәрхүмдәр ята, – тигән. Нурислам уның ҡайҙа китеп киткәнен дә күрмәгән. Шунан Нурислам сирләп йығылған да оҙаҡ та ятмаған, үлгән.

**10. ХЫЗЫР-ИЛЬЯС ЮЛЫ**

*2005 йылда Яңауыл районы Йөҙсуҡа ауылы Баһауетдинов Ғабдулхай Бахауетдин улынан (1927 й.).*

Кәримов Сәғит абый баҫыуҙа, бураҙнала йоҡлап киткән. Бер аҡ бабай уятты ла әйтте, ти:

– Улым, юлға ултырғанһың, күсеп ултыр!

Шул Хызыр-Ильяс булғандыр, уның юлы шул бураҙнанан, ти бит.

Ҡәйнәм һөйләй ине, юл буйында аҡтан кейенгән бабай осрай ине, тип.

**11. ШАКИРЙӘН КӨРӘШСЕ**

*2003 йылда Ҡыйғы районы Сутыш ауылы Камалова Сайма Абдулйән ҡыҙынан (1935 й.).*

Шакирйән исемле көрәшсе бар ине. Бик данлыҡлы, гел еңеп йөрөгән. Бер көрәштә еңгәндә уға теген машинаһы бүләк итәләр. Златоуст ҡалаһында ла көрәшеп еңә. Шунда бер ҡарт килеп, арҡаһынан һөйөп:

– Хәҙер генә ғүмереңде 10 йылға ҡыҫҡарттың (40 йылға тигәнме),– тигән. Хызыр-Ильяс булғандыр, күрәһең. Шакирйән боролоп ҡараһа – ҡарт күҙҙән юғалған. Халыҡ араһынан эҙләһә лә, ул ҡартты тапмай. Шунан күп тә үтмәй, һуғышҡа китә, оҙаҡ та тормай, Шакирйән үлә.

**12. ЙОМА КӨН**

*2003 йылда Ҡыйғы районы Сутыш ауылы Камалова Сайма Абдулйән ҡыҙынан (1935 й.).*

Ҡәҙерауыл ауылында Әсмә әбей йәшәй ине. Йома көндө кер йыуып йөрөгән. Шул ваҡыт бер ҡарт килеп кергән:

– Ҡыҙым, һыу эсер әле, тамағым кипте, – тигән. Тегенең самауыры ҡайнап ултырған булған.

– Минең ваҡытым юҡ, бушамайым, кер йыуам, – тип сәй эсермәгән. Бабай:

– Киләһе аҙнала был ваҡытта булмаҫһың, – тип сығып киткән.

Был иҫенә килеп, бабайҙың Хызыр-Ильяс икәненә төшөнөп, артынан йүгереп сыҡһа, бабай юҡ, ти. Икенсе аҙнала был, ысынлап та, мәрхүм булған.

**13. ЙОМА КӨНӨ ХЫЗЫР-ИЛЬЯСТЫҢ КИЛЕҮЕ**

*2006 йылда Борай районы Иҫке Бикмәт ауылы Ҡасимова Орҡоя Шәрәфей ҡыҙынан (1932 й.).*

Берәүҙәргә бер ҡарт килеп кергән, ти. Был кешенең ҡыҙы иҙән йыуып йөрөгән. Был ҡарт әйткән:

– Бөгөн йома көн бит, – тип. Ҡыҙ:

– Эй, бабай, йома көндө ҡара һыйыр ашаған бит, – тип әйткән.

Шунан был ҡарт сығып киткәс, теге ҡыҙ ҡара һыйырға әйләнгән, ти.

**14. ХЫЗЫР-ИЛЬЯС УЯТҠАН**

*2007 йылда Асҡын районы Әмир ауылы Сәйетова Фәнзифә Имай ҡыҙынан (1931 й.).*

Минең ҡартым Яруллин Ниғмәтулла Ҡыҙылбайҙа аттар көткәндә йоҡлап киткән. Шунда берәү: «Улым, тор! Ауыҙыңа йылан керә», – тигән. Тороп ҡараһа, бер кем дә юҡ икән, ә ун метр йыраҡлыҡта йылан килә, ти.

**15. ХЫЗЫР-ИЛЬЯС КЕРГӘН**

*2007 йылда Асҡын районы Иҫке Ҡушкилде ауылы Фазинурова Ғәйникамал Фазинур ҡыҙынан (1935 й., Әмир ауылынан килен булып төшкән).*

Беҙҙең килен, Шәһримандың ҡатыны, Хызыр-Ильясты күргән. Бер аҡ һаҡаллы, аҡ еләнле бабай килеп кергән.

– Ултыр, бабай, хәҙер самауыр ҡуям, – тип әйткән. Теге бабай ултырып доға ҡылған. Был самауыр ҡуям тип боролғансы, бабай юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы, ти.

**16. ЯРҘАМ**

*2007 йылда Асҡын районы Үршиҙе ауылы Сәләмова Фатима Зәйнетдин ҡыҙынан (1928 й., Кубияҙ ауылынан килен булып төшкән).*

Низаметдин бабайҙың Хәтимәһе бар бит. Ул яңғыҙ ҡатын. Шул һөйләне: “Бесән һалырға хәл юҡ, илайым. Эй, Аллаһ, бесән һалырға хәлем дә юҡ, ямғыр ҙа килә, кипкән бесән һыулана бит. Нишләйем инде, тип. Шунан бер ир килеп сыҡты ла бесәнемде һалышты ла юҡ та булды”. Ярҙамға Аллаһы Тәғәлә Хызыр-Ильясты ебәргән булғандыр, ти халыҡ.

## 17. ЙОСОП ОЛАТАЙҘЫҢ ХЫЗЫР-ИЛЬЯСТЫ КҮРЕҮЕ

*1997 йылда Салауат районы Мөсәт ауылы Ғайсин Фәсхетдин Шәмсетдин улынан (1935 й.).*

Йосоп олатай төбәктә бозор аулаған. Ауға эләккән ҡошто, “тиҙерәк булһын” тип, муйынын бора ла ҡултыҡ аҫтына тыға икән. Бер көндө лә шулай итеп торғанда, кемдер килеп ҡулбашына ҡулын һалған, боролһа – аҡ сәлләле, йәшел сапан кейгән бабай тора, ти.

– Йосоп, ниңә улай итәһең? Һиңә бит харам. Улай ҡошто интектереп башын борма! Һәр береһен сал! – тигән дә юҡ булған. Шул көндө Йосоп олатайға йөҙләп ҡош эләккән. Шул хәлдән һуң ул улай эшләмәгән, һәр береһен һуйып алған.

## 18. ХЫЗЫР-ИЛЬЯС ТЫЙҘЫ

*2004 йылда Әлшәй районы Ғәйниямаҡ ауылы Шакирова Рәмзиә Хәйҙәрғәле ҡыҙынан (1938 й.).*

Мин йәш саҡта бик йырлай инем, “артист булам” тип хыялландым. Көн дә, радионан йыр отһам, йырлап йөрөнөм. Мине “Һандуғасыбыҙ” тиҙәр ине. Мин йырлағанда бөтә кеше илай ине. Хәҙер йырламайым.

1976 йылды инәкәйҙәргә барған инек, Светлана исемле әхирәтем менән төнөн йырлап ҡайттыҡ. Әхирәтемде туғандарына керетеп ебәрҙем дә яңғыҙ ҡайтып киттем. Шунан бер ерҙә ҡаршыма таяҡ тотҡан, оҙон аҡ һаҡаллы, аҡ бабай килеп сыҡты ла:

– Балам, төнөн йырлама! Йырлап ҡына ғүмерең үтте бит (ә Аллаһты иҫеңә лә төшөрмәйһең мәғәнәһендә – **Ф.Ғ.**), – тине.

Икенсе көн Бибинур әбейгә барып һөйләгән инем, ул: “Һиңә Хызыр-Ильяс осраған. Ул дөрөҫ әйткән. Бүтән йырлама!” – тине.

Шунан алып хәҙер һис йырлағым килмәй, йырламайым да. Ҡай саҡ мөнәжәттәр генә әйтәм. Көйлө кеше – ҡайғылы була, ти бит. Ысынлап та, минең ғүмерем бик ҡайғылы үтте.

## 19. ФАЗИЛАНЫҢ ХЫЗЫР-ИЛЬЯСТЫ КҮРЕҮЕ

*2009 йылда Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районы Баязит ауылы Закирова Сәлимә Сәйғәфәр ҡыҙынан (1927 й.).*

Алабағата ауылынан килгән Фазила менән Рабиға ҡарсыҡтар беҙҙең Баязит зыяратына барған. Ул ҡарсыҡтар эшкә китеп ултырған, тәпке тотоп. Рабиға ҡарсыҡ зыяратҡа кереп, ғаиләһенә аят уҡый башлаған. Фазила ҡарсыҡ: “Тәпкегә таянып юл ситендә тороп ҡалдым”, – тип әйтә. Шунда Фазила ҡарсыҡ менән Хызыр-Ильяс килеп күрешкән, ҡулы йомшаҡ ҡына, ти. Сәллә кейгән, ҡулына таяҡ тотҡан, аҡтан кейенгән, ти.

– Үәт рәхмәт, зыяратҡа кермәнең. Иптәшеңә әйт, бүтән зыяратҡа кереп аят уҡымаһын! Ҡатын-ҡыҙға зыяратҡа кереп аят уҡырға ярамай! Зыяраттың тыш яғынан уҡыһын, юлдың теге яғында тороп, – тигән.

**Фәнирә ҒАЙСИНА,**
**ғилми хеҙмәткәр.**

# ЫРЫМБУР БАШҠОРТТАРЫНЫҢ РУХИ ХАЗИНАЛАРЫ*

Ырымбур башҡорттарының ауыҙ-тел ижадын, тарихын, мәҙәниәтен өйрәнеү маҡсатында, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғалимдары тарафынан әленән-әле ғилми экспедициялар, шәхси эш сәфәрҙәре үткәрелеп тора.

Был төбәктең фольклорын өйрәнеү тарихына күҙ һалғанда, тәүге ҙур ғилми экспедиция 1960 йылдарҙа СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты (хәҙерге Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих тел һәм әҙәбиәт институты) фольклорсылары тарафынан Ә.Н. Кирәев (Кирәй Мәргән) етәкселегендә уҙғарыла. Экспедиция ағзалары С.Ә. Галин, Ф.А. Нәҙершина, Н.Д. Шоңҡаров Ырымбур өлкәһенең Ново-Сергеевка, Люксембург (хәҙерге Красногвардейск), Переволоцк, Александр, Тоцк райондарының 33 башҡорт ауылында эш алып бара, ифрат бай йөкмәткеле рухи хазиналар йыйыла. Туҡ-Соран буйы башҡорттарынан яҙып алынған “Алпамыша", “Заятүләк менән Һыуһылыу", “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу", “Аҡһаҡ ҡола", “Ҡара юрға", “Ҡуңыр буға" эпостары варианттары менән, күп һанлы әкиәттәр, йырҙар (оҙон көйгә йырлана торған, ҡыҫҡа, исемһеҙ), легендалар, ҡобайырҙар, бәйеттәр, афористик ижад төрҙәре (мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтар), төрлө уйындар был төбәктең халыҡ ижадына байлығын күрһәтә.

Кирәй Мәргән, С.Ә. Галин, М.М. Сәғитовтарҙан торған экспедиция 1961 йылда Һарыҡташ, Медногорск, Гай райондарында, утыҙҙан ашыу ауылда, ауыҙ-тел ижадын йыйыу эшен дауам итә. Был экспедиция ла мәғлүмәттәргә бай була.

1975 йылда Төйөлгән, Һарыҡташ, Ҡыуандыҡ райондарында З.F. Ураҡсин етәкселегендә Институттың диалектология бүлеге хеҙмәткәрҙәре эш алып бара. С.Ф. Миржанова, А.А. Камалов, М.Н. Дилмөхәмәтов, У.Ф. Нәҙерғолов, Р.F. Аҙнағолов, И.F. Fәләүетдиновтарҙан торған экспедиция диалектология, ономастика, ауыҙ-тел ижады буйынса бай материал туплай.

Шәхси эш сәфәрҙәре менән дә фольклорсылар был өлкәгә юлды һыуытмай, 1974 йылда М.М. Сәғитов, 1975 йылда Л.П. Атанова, Р.В. Нафиҡова (музыкаль фольклор), 1994 йылда Р.Ә. Солтангәрәева (йола фольклоры өлгөләре) тарафынан халыҡ ижады өлгөләре йыйыла.

Йыйылған материалдарҙың күпселеге хәҙерге көндә ғилми әйләнешкә индерелеп, “БХИ" томдарында, ғилми йыйынтыҡтарҙа, ғалимдарҙың фәнни хеҙмәттәрендә, гәзит-журналдарҙа донъя күргән.

---

*Мәҡәлә РГФФ проекты (№12—14 —02600) сиктәрендә яҙылды.

Хәҙерге көндәргә килгәндә иһә, 2005 йылда, Рәсәй дәүләт ғилми фонды финанслау ярҙамы менән, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты тарафынан Р.М. Йосопов етәкселегендә Красногвардейск, Гай, Ново-Сергеевка, Переволоцк, Александр, Тоцк райондарына комплекслы экспедиция уҙғарылып, Туҡ-Соран башҡорттарының этнографияһы, фольклоры, тарихы, антропологик сығыштары буйынса материал тупланды. Әлеге көндә йыйылған материалдар эшкәртелеү өҫтөндә.

Ырымбур башҡорттары халыҡ ижадының хәҙерге торошон күҙаллау маҡсатында, 2011 йылда беҙ ҙә ошо яҡтарға юлландыҡ. Коллегам, фольклорсы Гөлнур Хөсәйенова менән Гай районының Иҫке Хәлил, Өлкән Хәлил, Әптерәш, Ишкенә, Ишберҙе, Нурбулат ауылдарында бер аҙна һуҙымында эш алып барылды. Был мәҡәләлә иғтибарҙы йәлеп иткән материалдарға бер аҙ күҙәтеү яһала.

Ырымбурлылар беҙҙе ихлас, асыҡ йөҙ менән ҡаршы алды. Сәфәребеҙҙең маҡсатын белгәс, "...йөрөгән юлдарығыҙҙа Хызыр-Ильяс юлдаш булһын, хәүеф-хәтерҙәрҙән һаҡлаһын. Хоҙайым, елегеҙ арттан булһын, ҡояшыбыҙ алдан булһын, яман күҙҙәрҙән, яман телдәрҙән, яман сирҙәрҙән һаҡлаһын! Хоҙайым, ни теләһәгеҙ, шуны бирһен, Раббым. Бар теләгәндәрегеҙ алдығыҙға килһен! Амин!"(6) тип доға ҡылып, яҡшы ниәт менән йөрөйһөгөҙ икән, тип хуплап, фатиха бирҙеләр. "Ә кем һуң ул Хызыр-Ильяс?" — тип һорағас: "Юл фәрештәһе ул —Хызыр-Ильяс. Элек ул урам буйлап, фәҡир булып кейенеп, кешене йомартмы, һаранмы, ихласмы, тар күңеллеме икәнлеген һынап йөрөгән. Шулай бер көндө бер ҡатынға килеп кергән дә кер йыуырға кәритә һораған икән. Тегеһе асыуланып: "Кәритә һорайың да йөрөйһөң", — тип уны ҡыуып сығарған. Был асыуланып: "Кәритәңә ҡаплан!"— тигән дә сығып киткән. Ул сығып китеүгә булған, теге ҡатындың кәритәһе үҙенә ҡапланған да ҡуйған, ти. Бына гөбөргәйел шунан килеп сыҡҡан ул. Элек инәйемдәр шулайтып һөйләй торғайнылар. Гөбөргәйел кеше затынан, кәритәһен бирмәгән ҡатын ул. Хызыр-Ильяс уны шундай хәлгә төшөргән" (7),— тип яуап бирҙе информант.

Юл хужаһы — Хызыр-Ильяс образы — һәр яҡтың фольклорында ла үҙенсәлекле сағылыш тапҡан. Халыҡ һөйләүенә ҡарағанда, ул элек бураҙналар буйлап, йәшел сапанын кейеп, башына аҡ сәлләһен урап йөрөгән. Изге күңелле кешеләргә ярҙам, насар уйҙағыларға зыян да иткеләп ҡуйған. Сағыштырыу өсөн миҫалға Свердловск өлкәһендә яҙып алынған мәғлүмәтте килтерәм. "Кем ул Хызыр-Ильяс?"— тигән һорауға информант: "Элек Хызыр-Ильяс йөрөгән. Бер ваҡыт ул бер өйгә хәйерсе булып барып кергән. Хужабикә уға асыуланып:

— Бушамайым әле, йөрөмәһәң дә ярар, — тип ҡысҡырған. Хызыр уға:

— Бер ваҡытта ла буш торма, эшлә лә эшлә, эшең бер ҙә күренмәһен, — тигән, ти.

Ә йорт хужаһы Хызырҙы алып кергән, яйлап һөйләшеп ултырған, сәй эсергән. Хызыр уға:

— Тыныс йәшә, бер ҡаҙаҡ ҡаҡһаң да, эшең күренеп барһын, — тигән.

Бына шуға хәҙер ҡатын-ҡыҙҙың эше тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел, ә ирҙәрҙең һәр эше күренеп бара", (5) — тип яуап биргәйне. Юл фәрештәһе тураһында бына шундай үҙенсәлекле мәғлүмәттәр йәшәй халыҡ телендә.

Әлбиттә, бер мәҡәләлә генә бар материалды биреп булмай, был образ хаҡында тикшеренеүҙәр киләсәккә ҡала.

Ай, ҡояш, йондоҙҙар тураһында ла ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр ишетергә тура килде был яҡтарҙа. Һәр өйҙә ағинәйҙәр: "Илдәр имен, батшаларыбыҙ аҡыллы булһындар инде, балам", — тип, һәр яңы тыуған айға ҡарап:

*"Бисмиллаһи рахмани рахим!*
*Яңы айҙа ярлыҡа,*
*Иҫке айҙа иҫкелеккә.*
*Яррабби, Хоҙайым,*
*Мөьмин мосолман балаларына,*
*Бәхет бир, һаулыҡ бир!" (4) —*

тип теләк теләп ҡаршы алалар.

Борон-борондан башҡорт халҡында айҙы ололағандар, яңы тыуған айға ҡарап теләк теләгәндәр, уның ауырыуҙан дауалаусы тылсымлы көсөнә ышанғандар. Мәҫәлән, тәнде сөйәл баҫһа, айға күрһәтеп: "Ай, бына минең тәтәйем, бармы һинең тәтәйең?" — тип һорайҙар. Шунан һуң тәндәге сөйәлдәр ҡойолоп төшөр, ти (7).

Айҙағы таптар иһә элек-электән халыҡ аңында мифтар, әкиәттәр, легендалар тыуҙырған. Һәр бер кеше уны үҙенсә аңлатырға тырышҡан. Ай тураһындағы легендалар төрлө версиялар, варианттарҙа йөрөһәләр ҙә, нигеҙҙәрендә уртаҡ мотив һаҡлана, айҙағы таптар — ул көйәнтәле етем ҡыҙ һүрәте. Был турала һәр төбәк фольклорында ла яҙып алырға була. Бер яҡта уны көйәнтәле ҡыҙ тип кенә йөрөтһәләр, икенсе яҡта Зөһрә ҡыҙ тип атайҙар. Ырымбур өлкәһе Нурбулат ауылында ла информант: "Айҙа ҡыҙ тора ул, балам. Борон бер етем ҡыҙ булған. Үгәй әсәһе ныҡ йонсотҡан уны. Һыуға барған ваҡытында айға ҡарап зарланған ул ҡыҙ. Шунан Алланың әмере менән Ай уны йәлләп, көйәнтәһе-ние менән үҙенә алған"(6), — тип һөйләгән ине. Ишкенә ауылында иһә: "Иң әүәле Ай ғына булған бит донъяла. Шунан ул икегә, Ҡояшҡа бүленгән"(4), — тигәнде лә ишетергә тура килде. "Ә ул нисек икегә бүленгән һуң?" — тигән һорауға: "Хоҙай әмере менән инде", — тип яуап бирҙе. Айҙың барлыҡҡа килеүе тураһында легендалар бар халыҡтарҙа ла һаҡланған. Башҡорт халыҡ ижадында ла "Ай һәм Урал тауҙарының барлыҡҡа килеүе" тигән легенда барлығы билдәле.[1] Бында ике ҡояштың көнө-төнө яҡтыртыуы һөҙөмтәһендә йонсоған кешеләргә Урал исемле батыр ярҙамға килә. Ул күктәге ике ҡояштың береһенә уҡ менән атып, уртаға яра. Бер ярсыҡ ергә төшөп Урал тауҙарына әйләнә, икенсе яртыһы ай булып күктә ҡала. Күренеүенсә, бында батыр тарафынан яраланған ҡояштың айға әүерелеүе һүрәтләнә. Ә экспедиция материалын алғанда, ай бүленеү арҡаһында ҡояштың барлыҡҡа килеүе тураһында һүҙ бара. Бәлки, элек ул тулы йөкмәткеле үҙ аллы әҫәр булғандыр, ә, бәлки, үрҙә иҫкә алынып киткән легенданың ярсыҡтары беҙҙең көндәргә шундай хәлдә килеп еткәндер. Информанттың легенданы тулыһынса иҫенә төшөрә алмауы ҡыҙғаныс, әлбиттә, һәм беҙгә был турала хәҙер ниндәйҙер һығымталар эшләүе, тикшереүҙәр алып барыуы ауыр.

---

[1]*Башкирское народное творчество. Т.2: Предания и легенды. Уфа, 1987. С. 31; Башҡорт халыҡ ижады. 2-се том: Риүәйәттәр, легендалар. Өфө, 1997. 37-се б.(Легенданы 1984 йылда Ейәнсура районы Ғәббәс ауылында Ш.С.Сәфәрғәлинанан Г.Сәфәрғәлина яҙып алған.)*

Экспедицияла ҡояшҡа ҡағылышлы тыйыуҙар ҙа ҡағыҙға теркәлде. Мәҫәлән, ҡояш байығас: "ауырлы ҡатынға яланбаш йөрөргә ярмай, ел иҫә лә, шайтан ҡағылып, балаһы ғәрип булып тыуа"(6); "һыу алырға ярамай, һыу йоҡлай икән. Алырға кәрәк булһа: "Бисмиллаһи рахмани рахим, әһүрәһем аппағым, Шәһүрәм, һыуҙың эйәһе мин", — тип әйтергә кәрәк"(5); йә иһә "һыу алырға ярамай, үлгән әҙәмдең ҡанын алып эсерһең"(2),— тип әйтәләр. Был тыйыуҙар нигеҙендә халыҡ аҡылының тәрбиәүи ҡараштары сағылыш таба.

Ерҙең, донъяның барлыҡҡа килеүе лә шулай уҡ халыҡ ижадында үҙенсәлекле урын алған. Оло быуын кешеләре "ерҙе фил тотоп тора" йәки "ер үгеҙ мөгөҙөндә эленеп тора" тип һөйләйҙәр. Ырымбур өлкәһендә информант: "Ер шарын бит өс мөгөҙлө үгеҙ тотоп тора. Элек инәйемдәр шулай һөйләй торғайны", — тип бәйән итте һәм: "Әле ул үгеҙҙең бер мөгөҙө һынған, ике мөгөҙө генә ҡалған икән, шуға бит ана ер тетрәүҙәр күбәйҙе хәҙер", — тип өҫтәп тә ҡуйҙы (4).

Туҡ-Соран башҡорттары хәтерендә йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр ҙә тотороҡло һаҡланған. Бигерәк тә ҡаҙ өмәләренең күңелле үтеүе тураһында ихласлап һөйләнеләр: "Ҡаҙ өмәһенә бар туған-тыумаса, күрше-күлән йыйыла ине. Ирҙәр салып биреп тора, ҡатындар ҡаҙ йолҡа. Йолҡоп бөткәс, ҡаҙҙарҙы көйәнтәгә элеп, һыу буйына барып йыуабыҙ. Кисен ҡаҙ өмәһе үткән өйгә ашҡа йыйылабыҙ. Ҡаҙҙы өлөшләп бүлә белергә лә кәрәк. Нисә кеше була, шул тиклем өлөш булырға тейеш. Минең инәйем бер өйрәкте ҡырҡ өлөшкә бүлә белгән. Иң өлкән кешегә боттоң төбөндәге електе тоттораһың, шунан етәгеһенә балаяҡ яғы. Түш ите барыһына ла етергә тейеш. Ҡанатты кейәүгә сыға торған ҡыҙҙарға бирәләр. Башын, тәпәйҙәрен, эске өлөштәрен һәр кемгә бүләләр. Ҡаҙҙың йөнөнән мендәр, түшәк эшләйҙәр. Ҡаҙ ҡанатын һыҙырғас, икенсе йылға ла уңып сыҡһын, тип ырымлап, юл буйлап һибеп сығабыҙ"(2).

Ҡош-ҡорттоң айыры һөйәгенән "йәтәс айырышыу" ғәҙәте лә бар икән. Йәтәс айырышҡанда, ике кеше береһен-береһе отошорҙан айырыша. Кем иҫлерәк, шул тиҙерәк отоусан була. Айырышҡанда бер йәки өс тапҡыр отошорҙан һөйләшәләр (3).

Һуғым һуйыу — элек-электән оло бер байрам ул. Ерҙе туңдырып, ҡар ҡаплау менән, ауыл халҡы һуғым һуйырға йыйына башлай. "Һуғымды ағай-эне йыйылышып һуябыҙ. Ирҙәр һуя, ҡатын-ҡыҙ эсәк йыуа. Кискә һуғымсыларҙы ашҡа саҡыраһың. Һәр кемгә өлөш һалына, эске өлөштәре күстәнәскә биреп ҡайтарыла.

Элек беҙҙең яҡта баш итен шул хәтлем ныҡ ҡәҙерләй инеләр. Март тыуһа, яҡын туғандарҙы, күрше-күләнде йыйып, баш ашына саҡырып, аят уҡытыу ғәҙәте бар. Баш итенә берәй киҫәк кенә ит ҡушып, һалма һалып аш бешерәһең. Һәр кемгә өлөш сыҡһын, һәр кем тәмләп ҡараһын өсөн, баштың сикәләрен өлөшләп кенә теләләр. Был бик борондан килгән ғәҙәт ул" (2),— тип һөйләне информант, һәм хәҙер был ғәҙәттең юғалып барыуын да әйтеп ҡуйҙы.

Ырымбур яҡтарында ҡорбан салыу ҙа матур ғәҙәткә әйләнеп киткән. "Ҡорбанлыҡҡа тояғы асалы мал кәрәк, күберәген тәкә малы салалар. Ҡош-ҡорт, инәү һалынған мал, ат салырға ярамай. Аттың тояғы айыры түгел, шуға ярамай.

Ҡорбанлыҡтың итен өс өлөшкә бүләләр: беренсеһен — етем-фәҡиргә, икенсеһен — туғандарға, өсөнсөһөн шул көндө бешереп, күрше-күләнгә, халыҡҡа ашатырға кәрәк. Ҡорбанлыҡты бүлгәндә балталамайҙар (балта менән сабырға ярамай — **Г.Ю.**), быуынынан ғына бүләләр. Ашағанда хатта һөйәгенә лә теш тейҙерергә ярамай, ҡул менән йәки итен бысаҡ менән һыҙырып алып ҡына ашарға кәрәк.

Салыу ҡанын, тиреһен, һөйәген кеше аяғы баҫмаған ергә күмәләр. Ҡорбандың иң изге нәмәһе тиреһе бит ул. Ахыры заман булғанда бөтә донъя түңкәрелер, үлгән кешеләр ҙә терелер, ти. Бер ат баҫып торорлоҡ урында мең ғәләм бер аяғында ғына баҫып тора алыр, ти. Ер өҫтөнә кеше һыймаҫ. Ҡояш ергә яҡынайып, ҡыҙҙыра башлар. Эҫелектән әҙәмдең мейеһе сүл өҫтөндә ҡайнаған һыу кеүек ҡайнап торор. Бына шул ваҡытта һинең биргән саҙаҡаларың, хәйерҙәрең, ҡорбанлыҡ тиреһе ана шул ҡояш эҫеһенән һаҡлап, күләгә булып торор, ти" (2).

Ырымбур башҡорттары йыр-моңға әүәҫ булып сыҡты. "Элек, балам, беҙгә йырлашып ултырырға ваҡыт булманы бит. Һуғыш, унан һуңғы аслыҡ-ялан-ғаслыҡ йылдары үҙәккә үтте", — тиһәләр ҙә, ата-әсәләренең, үҙҙәренең ятраҡан йырҙарын бик теләп хәтерҙәренә төшөрҙөләр. Тик шуныһы үкенесле: бер йырҙы ла тулыһынса иҫләй алманылар, халыҡ йырҙарынан "Ашҡаҙар", "Урал" йырҙарының икешәр куплеты, күбеһенсә исемһеҙ ҡыҫҡа йырҙар ҡағыҙға теркәлде.

Йәшлек ваҡыттарында кистәрен йыйылышып күңел асҡан саҡтарын да иҫләй ололар. Был яҡта киске уйынды "Күләгәгә сығыу" тип атайҙар икән (7). Күләгәгә сыҡҡанда, һәр яҡта ла билдәле булған "Йөҙөк һалыш", "Татыу" уйындары уйналған, таҡмаҡ әйтеп бейегәндәр. Матур таҡмаҡ өлгөләрен дә йырлап ишеттерҙе әбейҙәр:

*Бейе, ҡыҙым, бейе, ҡыҙым,*
*Бейеһәң, көй әйтермен.*
*Кәҙә тубыҡсаһынан*
*Ҡата тегеп бирермен (4).*

*Уфа бит ул, Уфа бит ул,*
*Уфа бит ул, ҙур ҡала.*
*Йәш ваҡыттар бик ҡыйбатлы,*
*Уҙып китһә, юғала.*

*Комбайнер булһаң ине,*
*Ураҡты урһаң ине.*
*Күңелле ине бергә йәшәү,*
*Гел бергә булһаң ине.*

*Самауырҙы тиҙ ҡайната*
*Ҡаты ҡайын күмере.*
*Ҡунаҡ итеп, хөрмәт итһәң,*
*Оҙаҡ булыр ғүмерең.*

*Ап-аҡ ҡайындың ботағын*
*Ботаған булам тағын.*
*Үҙ күңелемде үҙем күреп,*
*Йырлаған булам тағын.*

*Ҡашыңдың ҡаралары,*
*Тар икән аралары.*
*Ҡайһы илдәрҙән килдең,*
*Һандуғас балалары (1).*

Халыҡ медицинаһына ҡағылышлы мәғлүмәттәр ҙә яҙып алырға тура килде экспедиция мәлендә. Ололар әйтеүенсә, "кеше үҙенең хәленән килһә генә имләүгә тотонорға тейеш. Үҙенең көсө етмәҫен һиҙһә, дауаларға ярамай. Ауырыу үҙенә ҡағылыуы бар" (2). Мәҫәлән, был өлкәлә "Ҡот ҡойоу", "Өс йән имләү", "Осоҡлау", ҡыҙылса, һары ауырыуҙарынан дауалау серҙәре яҙып алынды. Кеше ныҡ ҡурҡып, ҡото осһа, шул кешегә ҡот ҡоялар.

“Кешене ултырғысҡа ултыртаһың. Ҡурғаш, һары май, сеүәтә менән һыу алаһың. Ҡурғашты әҙерәк май һалып эретеп, шуны кешенең баш осона ҡуйып, һыуға ҡояһың. Шунан йөрәк тапҡырында, баш тапҡырында өйөрөлтөп:

*Ҡорайт, ҡорайт,*
*Һыуҙан килһәң, һыуға кит,*
*Тауҙан килһәң, тауға кит,*
*Елдән килһәң, елгә кит.*
*Минең ҡулым түгел,*
*Ғәйшә ананың ҡулы,*
*Минең ҡулым түгел,*
*Фатима ананың ҡулы, —*

тип һамаҡлап әйтәһең. Кеше нимәнән ҡурҡҡан, ҡурғаш шул фигура булып төшә. Фигураны ҡағыҙға төрөп, йөрәк тапҡырына тағып йөрөйҙәр. Үҙе өҙөлөп төшкәнсе муйында йөрөй” (7).

Ҡыҙылса менән сирләгәндә ауырыуҙы ҡыҙылға урап һалаһың. Шунан кешенең иңенә-буйына үлсәп ҡыҙыл тауар алып, шуны киҫкеләп, кешегә хәйер итеп таратырға кәрәк икән (7), йә иһә кеше буйын ҡыҙыл еп менән үлсәп алып, аҙаҡ ул епте хәйергә бирергә кәрәк, шунан ауырыуға еңеллек килер, йәнәһе (1).

Һары ауырыуынан иһә һары балыҡ тотоп, шуны еҙ тасҡа ебәреп, шуға текләп ултыраһың, һуңынан ул һыуҙы эсергә икән (2).

Кеше яман ергә, мәҫәлән, мәйет еренә, йә иһә мәйет һыуы түгелгән урынға баҫһа, кеше осона, ауырыуға әйләнә, ти. Шул ваҡытта кешене осоҡлайҙар. Кешене тышҡа ултыртып, өҫтөн ябындыралар. “Аятел Көрси”ҙе уҡыйҙар. Шунан ҡорос тимерҙе утта ҡыҙҙырып алып:

*Һыуҙан килһәң, һыуға кит,*
*Елдән килһәң, елгә кит,*
*Ерҙән килһәң, ергә кит,*
*Тауҙан килһәң, тауға кит,*
*Кит, мәлғүн, кит,*
*Кит, мәлғүн, кит, —*

тип һамаҡлап, ауыҙға һыу уртлап алып, ҡыҙған тимергә һибәләр. Ауырыу ныҡ аҙып киткән булһа, имләгәндә, ауыртҡан ер сәнсеп-сәнсеп ҡуйыр. Имләүҙе өс көн рәттән ҡабатларға кәрәк.

Ауырыу ныҡ көслө булһа, үҙ хәленә ҡарап, хәйергә йәнле мал, аҙмаған булһа, ҡул хәйере генә бирәләр (2).

Оҙаҡ атлай алмай ултырған балаға ярҙам итеү серен дә беләләр был яҡта. Бының өсөн баланың аяғын ун йәки ун ике тапҡыр еп менән уратаһың да, шуны берәй йүгерек кешенән ҡырҡтырырға кәрәк. Һуңынан ул епте ҡырҡҡан кешегә, сумаҡлап, хәйергә бирәһең икән (2).

Эш мәлендә ололарҙан иртән торғас, ятыр алдынан, юлға сыҡҡанда әйтелә торған ҡыҙыҡлы һамаҡ өлгөләре лә яҙып алынды. Мәҫәлән, йоҡларға ятҡанда:

*“Яттым, йә, Алла,*
*Торһам, иншалла.*

*Ошо ятыуымдан тора алмаһам,*
*Иманымды юлдаш ит, Аллам.*
*Яттым уңыма,*
*Ойоном собханыма,*
*Сәләм бирҙем*
*Ҡобра атлы йыланыма"(7)*

(информант әйтеүенсә, ҡобра йылан — зыярат йыланы, ул һине теге донъяла ҡаршы алып тора икән — **Г.Ю.**), — тип әйтһәләр, иртән тәҙрәләрҙе асҡас та, ҡояшҡа ҡарап сәләм биреп, күршеләренең мөрйәһен ҡарайҙар: төтөнө сығамы, юҡмы? Сыҡһа, "Әлхәмдулиллаһи, күршем иҫән-һау" тип шатланалар, төтөнө сыҡмаһа, хәлен белергә йүгерәләр икән (7). Бына шулай "Күрше хаҡы — Тәңре хаҡы" тигәндә лә онотмай, үҙ-ара татыу донъя көтә ололар.

Ырымбур төбәгендә беҙгә бына шундай ҡыҙыҡлы халыҡ ижады өлгөләре яҙып алырға тура килде. Улар беҙҙе ихлас күңелдән:

*"Хызыр-Ильяс булһын юлдашығыҙ,*
*Баһауитдин булһын һаҡсығыҙ.*
*Алдан килгән, арттан килгән,*
*Ерҙән килгән, күктән килгән,*
*Һыуҙан килгән бәлә-ҡазаларҙан һаҡлаһын,*
*Хоҙайым, һеҙҙе" (7),* —

тип оҙатып ҡалды.

Беҙҙең бурыс Ырымбур өлкәһендә уҙған быуат фольклорсылары үткән юлды яңынан үтеп, яңынан-яңы экспедициялар уҙғарып, халыҡ ижадының үткәне менән бөгөнгө торошон сағыштырыу, тикшереү, үҙебеҙ тарафынан йыйылған материалдарҙы эшкәртеп, ғилми әйләнешкә индереү, уларҙы яңынан халыҡҡа ҡайтарыуға ҡайтып ҡала.

## Информанттар:

*1. Байшөкөрова Миңлекамал Әхмәт ҡыҙы, 1926 йылғы, 4 класс белемле, 8 бала әсәһе, колхозда эшләгән, Иҫке Хәлил ауылынан.*

*2. Ишалбаева Гөлсинә Хөснулла ҡыҙы, 1941 йылғы, 5 класс белемле, 4 бала әсәһе, колхозда эшләгән, Ишкенә ауылынан.*

*3. Ишалбаева Менәүәрә Мөхәмәҙиәр ҡыҙы, 1926 йылғы, 4 класс белемле, 6 бала әсәһе, колхозда эшләгән, Ишкенә ауылынан.*

*4. Ишҡарина Гөлнур Арыҫланғәле ҡыҙы, 1928 йылғы, 6 класс белемле, 1 бала әсәһе, колхозда эшләгән, Ишбирҙе ауылынан.*

*5. Мубинова Мәнзүмә Мирсәйет ҡыҙы, 1932 йылғы, 4 класс белемле, 5 бала әсәһе, совхозда эшләгән, Свердловск өлкәһе Әртә районы Әртә-Шигере ауылынан.*

*6. Хөсәйенова Ғәфиә Әбделғәлим ҡыҙы, 1931 йылғы, 2 бала әсәһе, колхозда эшләгән, Нурбулат ауылынан.*

*7. Яҡупова Венера, 1939 йылғы, 7 класс белемле, 4 бала әсәһе, һауынсы булып эшләгән, Өлкән Хәлил ауылынан.*

**Гөлнар ЮЛДЫБАЕВА,**
**өлкән ғилми хеҙмәткәр.**

*Башҡортостандың халыҡ шағиры*
*Рәми Ғариповтың тыуыуына – 80 йыл*



**Рәми**
**Ғарипов**
(1932 - 1977)

**Гөлнара ХӘЛФЕТДИНОВА**

## ТЕРЕҺЫУ

Рәми Ғариповҡа

*Һүҙ батшаһы! Һинең йөрәгеңдең*
*Төпһөҙ булған, беләм, сөңгөлө.*
*Аҡылыңа тик бер заман түгел,*
*Һыйған шуға теүәл мәңгелек.*

*Һин үҙең дә мәңгелеккә шағир,*
*Һәр әйткәнең – тылсым ҡоралдай,*
*Моңһоҙҙарҙы хатта һиҫкәндереп,*
*Алдарына ҡалҡа Уралдай.*

*Уралтауға һеңгән тереһыуҙай –*
*Тос һүҙҙәрең тере йәндәргә.*
*Көнләшәмен китабыңды уҡып*
*Үлеп ҡабат терелгәндәргә.*

# Фото – хәтер



Шағир әсәһе менән.1947 йыл.



Татар шағиры Хәсән Туфан
менән осрашыу. Өфө.



Ленинград, С.-Щедрин исемендәге китапханала.
Рәми Ғарипов, Әнғәм Атнабаев, Хәким Ғиләжев.
1969 йыл.



Рәми Ғарипов якташтары менән
Йүрүҙән паромында. 1960-сы йылдар.



Йүрүҙән буйында. 1967 йыл.



**Сәлмән ЯҠУПОВ**

## Һыҙланыу

«Бөтә башҡорт, бөтә! Һис шикһеҙ
бөтөр был башҡорт!»

**Г. Успенский. 1889 йыл.**

«Уяндың һин, халҡым, берүк кенә
Битарафлыҡ баҫып, ойой күрмә!»

**З. Йәнбирҙина. 1995 йыл.**

*Тарих битен асһам – йән тетрәй,*
*Сыңлап тора ҡанлы быуаттар.*
*Ах, телең юҡ, Урал, һөйләр инең,*
*Һорауҙар күп, юҡ тик яуаптар.*
*Ожмахстан – илем Башҡортостан,*
*Урман – икмәк – нефть – газстан.*
*Химпромдың – әрһеҙ ашҡаҙаны,*
*Танып була һине алыҫтан!..*
*Ҡайҙа баҡма – байлыҡ!*
*Тик халҡыма*

---

*Сәлмән Яҡупов (1951) Мәләүез районының Түбәнге Таш ауылынан. Өфө дәүләт сәнғәт институтын тамамлай. Мәләүез мәҙәниәт йорто директоры, халыҡ театры режиссеры булып эшләй. Мәктәптә уҡыта. Әле хаҡлы ялда.*

*Ҡала һаман кимерек һөйәктәр.*
*Диоксины, фенол, ҡара һөрөм...*
*Йән ҡоҫалар тыуған төйәктәр.*
*Ни хаҡына ҡандар түгелгән һуң?*
*Ни хаҡына башҡорт ҡырылған?*
*Батырҙарым ғәзиз башын һалған,*
*Ә быуаттар ҡанға ҡойонған?..*
*Кемдәр хужа – мәғрур Уралыма,*
*Урманыма, нефть, газыма?*
*Иҙелемә, булыр ҡәберемә,*
*Тыуған ерем, улым, ҡыҙыма?..*
*Ни хаҡына Себер киткән күптәр,*
*Ни хаҡына ҡылыс ҡайралған?*
*Ҡара ҡанға батҡан башҡорт ере,*
*Башҡорт йәне уттан ҡарайған?..*
*...Тарих битен асһам, зар илайым,*
*Сыңлап тора ҡанлы быуаттар.*
*Һорауҙар күп. Ҡасан ғына булыр*
*Һорауҙарға айыҡ яуаптар!*

## *Аҙаштым*

*Ҡара төндә ҡайсаҡ аҙаштым мин,*
*Аҙаштым мин хәтәр буранда.*
*Урманда ла булды аҙашҡаным,*
*Аҙаштым бер сит-ят урамда...*

*Ҡайсағында, ҡыҙҙар ятағында,*
*«Ишектәрҙе бутап...» аҙаштым...*
*Ҡайһы юлдар ҡайҙа йөрөтһә лә,*
*Һинең күҙҙәр менән һаташтым.*

*Аҙаштым мин. Һис ни аңламайым...*
*Ҡайһы юлдың ҡайҙа илтерен.*
*Ҡайҙа нисек кенә аҙашһам да –*
*Юлым һәр саҡ һиңә илтерһен!*

## Аптырама!

*Һуңғы мәлдә ниҙер булды миңә...*
*Үҙ-үҙемә үҙем шаҡ ҡатам.*
*Ҡылығыма ҡарап мин үҙемде*
*Диуанаға хатта оҡшатам.*

*Һәүетемсә түгел барыһы ла,*
*Аҫты-өҫкә килде күңелдең.*
*Шаҡ ҡатырлыҡ, эйе, шаҡ ҡатырлыҡ...*
*Мин түгелдер был, тим, түгелмен!..*

*Аптырама, шулай көтмәгәндә*
*Йүләрлектәр ҡылып ташлаһам.*
*Яндарыңда таман онотолоп,*
*Диуанаға ҡайсаҡ оҡшаһам!*

***

*Өҙөлөп тә һайрай һандуғаскай,*
*Ниҙәр булды икән үҙенә?*
*Һәр һулышы шундай таныш миңә,*
*Моңланышы шундай үҙ генә.*

*Үҙәктәрҙе өҙөп нисәнсе ҡат,*
*Осоп-ҡуныp, тәҙрә төбөмдә,*
*Һағыштарын сәсә гөл-баҡсама,*
*Бына инде килеп бөгөн дә...*

*Бөтөрөлә меҫкен, бөтөрөлә,*
*Шундай моңло тағы ҡош ҡайҙа?*
*Кескәй йөрәгенең сыңлауынан*
*Йәшкәҙәйҙер хатта таштар ҙа.*

*Ниҙәр булды һиңә, һандуғасым,*
*Ҡылайым һуң икән ни сара?..*
*Юҡ!..*
*Үҙ йөрәгем, шул һандуғас булып,*
*Өҙгөләнә көн дә, бисара!*



**Кәрим БУЛАТ**

## *Аҫыл минуттар*

*Ләйсән ямғыр тамсылауға*
*Гөлдәр нурға ҡойона.*
*Яҙ йәмдәре йөрәгемә*
*Йәйғор булып уйыла.*

*Байрам итә күңелкәйем*
*Шатлыҡ хисе кисереп.*
*Их, асһаңсы ошо мәлдә*
*Һөйгәнеңә эс серең!*

*Һөйгәнеңдән һөйөлөүҙән*
*Юҡ бит аҫыл минуттар!*
*Үтә ҡыҙыл тиҙ уңмаһын,*
*Яҡтыраҡ янһын уттар.*

---

*Кәрим Булат (1949) — Ғафури районынан. Стәрлетамаҡта йәшәй. Әҫәрҙәре республика гәзит-журналдарында даими баҫыла килә.*

## Тыуған яғым

*Ҡайтыуыма шатһың, тыуған яғым, –*
*Улың күңеле, күрсе, – яҡтылыҡ!*
*Бер үпкә лә һиңә һаҡламаған*
*Йөрәк сығыр төҫлө атылып.*

*Эй, тыуған яҡ, һирәк ҡайтылды шул,*
*Йәшәргә лә кире ҡайталмам.*
*Күңелемә яҡын яҡташтарҙың*
*Араһына таштай баталмам.*

*Бурыстарым буйтым торған ергә*
*Аяҡтарҙы нығлап бәйләгән.*
*Ҡыуаныстар бөтмәй ҡайтыуыма,*
*Эштәр төшөп кире әйләнәм.*

*Һис ҡәнәғәт булмай эштәремдән*
*Йөрәк алғас тағы яралар,*
*Яраларҙы ялап, мин ҡайтҡансы*
*Һис һыуынмаҫ беҙҙең аралар.*

*Тыуған яғым, күңел күгем аяҙ*
*Һине күреп, уҙып китһәм дә,*
*Һиңә ҡайтам яҙмышымды юллап,*
*Хыял тауҙарына етһәм дә.*

*Тыуған ерҙә тыуған тупһам да юҡ,*
*Тирмәңә лә кире ҡайталмам.*
*Үкенмәҫмен үткән ғүмеремә,*
*Тупрағыңа ҡайтып яталһам.*



**Фәнир МАЛБАЕВ**

## *Тальян моңо*

Атайымдың якты иҫтәлегенә

*Ҡулдарына алып тальянкаһын,*
*Һуңғы тапҡыр уйнап – моңайып,*
*Атай китҡән һуғыш ялынына,*
*Ҡояш сыҡҡан мәлдә ҡыҙарып.*

*Илен баҫҡан яуыз хаин менән*
*Алышҡан ул, йәнен аямай.*
*Йөрәгендә тальян моңо булған,*
*Туптар шартлауына ҡарамай.*

*Ҡыҫҡа Һуғыш ялдарында атай*
*Ҡулына алған тальян тотҡаһын:*
*«Һул ҡулымды алһаң ал һин, әжәл,*
*Уң ҡулымды, Аллам, һаҡла һин».*

*Үҙ бурысын үтәп ил алдында,*
*Ун туғыҙы тулған көнөндә,*
*Михнәттәрен төйнәп хәтеренә,*
*«Сулаҡ» булып ҡайтҡан өйөнә.*

---

*Фәнир Малбаев Үзбәкстанда тыуған, Көйөргәҙе районының Илкәнәй ауылында үҫкән. Мәҙәниәт өлкәһендә эшләй, аҙаҡ милицияға күсә, хаҡлы ялға сығып, киренән Көйөргәҙе районы хакимиәтенең мәҙәниәт бүлегенең етәксеһе була. Әлеге көндә районның башҡорттар ҡоролтайын етәкләй.*

*Бала саҡта моңло атайыма*
*Ҡарап тора инем ҡыҙғанып:*
*Тальян гармун алып, һул ҡул менән*
*Илай-илай көйҙәр һыҙғанын.*

*Шул ваҡытта, бәлки, уянғандыр*
*Оло хистәр тальян моңона.*
*Атайҙан һуң мин дә, тулҡынланып,*
*Ала инем тальян ҡулыма.*

*Тальян гармундары түрҙә хәҙер,*
*Беҙ уйнайбыҙ гармун, баянда.*
*Тик нишләптер серле тальян моңо*
*Ҡолағымда сыңлай һаман да.*

## Мотал ҡыҙына

*Матур ҡыҙҙар ҡайҙа тиһәң, Үрге Моталда үҫкән,*
*Ҡыҙҙар тауында бейегән, Сорагол һыуын эскән.*

*Халыҡ әйтһә – хаҡ әйтә, тип юҡҡа әйтмәйҙәр икән:*
*Ысынлап та, матур ҡыҙҙар Үрге Моталда үҫкән.*

*Атай ҙа, яусы ебәреп, алдырған Мотал ҡыҙын,*
*Әсәйем дә һәр саҡ булды уңған һәм матур килен.*

*Яҙмыш юлым, аҙаштырмай, боролдо шул яҡтарға,*
*Моталдың бер сибәр ҡыҙын һөйҙөрмәнем яттарҙан.*

*Һөйгәнемә вәғәҙә бирҙем, ҡушҡайынына барып,*
*Мөхәббәтем, шишмә башым һыу булып китте ағып.*

*Бергә бәйләп яҙмыштарҙы, иңгә терәп иңдәрҙе,*
*Һоҡландырғыс тормош көттөк, берләштереп уйҙарҙы.*

*Үткән ғүмерҙе баһалап, ваҡыт әйтер үҙ һүҙен.*
*Тик мин һаман ғашиҡ һиңә, Үрге Моталдың ҡыҙы.*

# ДОНЪЯ – НАҒЫШ, Ә КҮҢЕЛДӘ – ҺАҒЫШ...

*(М. Ямалетдиндың һуңғы йылдарҙағы шиғриәтенә бер ҡараш)*

Мәүлит Ямалетдиндың исеме әҙәбиәт һөйөүселәргә уҙған быуаттың етмешенсе йылдарынан бирле таныш. Шул мәлдән башлап бөгөнгә көнгә тиклем төрлө жанрға ҡараған һәм бер-бер артлы ташҡа баҫылып торған китаптары менән ул халҡыбыҙҙың һүҙ сәнғәтенә тоғро хеҙмәт итә. Һыйына күрә – хөрмәте, тигәндәй, һикһәненсе-туҡһанынсы йылдарҙа уға тәнҡитселәр ҙә битараф булманы. Хатта уларҙың иғтибар үҙәгендә торҙо, тиергә мөмкин. Ике тиҫтә йылға яҡын ваҡыт арауығында шағир һәм прозаиктың әҫәрҙәрен баһалауға арналған ун бишләп мәҡәлә яҙылыуы һәм матбуғат биттәрендә донъя күреүе – шуға асыҡ дәлил.

Бәхеткә күрә, был популярлыҡ талант эйәһенең башын әйләндереп, «йондоҙ сире»нә һабыштырманы: ул, эш урындарын йыш ҡына алыштырғалап торһа ла, бер нигә ҡарамай, әүәлгесә ижад менән шөғөлләнеүен белде. Тик бына, нишләптер, һуңғы йылдарҙа ундан артыҡ китап авторына иғтибар бер аҙ кәмей төштө һымаҡ. Ул, бәлки, әҙип хаҡында теге быуатта баҫылып сыҡҡан бәғзе мәҡәләләрҙең авторҙары үтә күренекле һәм үтә мәртәбәле шәхестәр булыуҙан да киләлер. Назар Нәжмиҙең «Шағир тигән исем күтәреп...» («Ҡыҙыл таң» гәзите, 1997 йыл, 6 март) тигән мәҡәләһенән һуң, мәҫәлән, Мәүлиттең шиғриәте хаҡында яңы һүҙ әйтергә баҙнат итеп ҡара әле!

Ләкин баҙнат итмәй ҙә булмай. Сөнки әҙип – юлда. Йыл артынан йыл үткән һайын, үләне ҡырып сабылған бесән бакуйы шикелле, уның ижад емештәре лә ишәйгәндән-ишәйә, һутланғандан - һутлана бара. Ошо урында йәнә Назар Нәжмигә – был юлы уның «Яҙ! Яҙ! – тиҙәр» (1958) исемле шиғырына һылтанырға тура килә: нисек инде Мәүлит Ямалетдиндың быуат башындағы шиғриәтенә битараф ҡалаһың? Шағирҙың күпселек әҫәрҙәре үҙҙәре үк «Беҙҙең хаҡта ла яҙ, яҙ!» тип торғандай бит. «Бер шағирға» («Ағиҙел», 2009, 5-се һан) тигәнен уҡып сыҡҡас, уның авторы тураһында бер кәлимә генә булһа ла һүҙ әйтеү теләге уғата ла арта төштө.

Дүртәр юллы дүрт кенә строфанан торған был шиғыр Мәүлит Ямалетдиндың, ҡәләмдәш ағаһы Назар Нәжми шикелле, шиғриәткә ни тиклем ҙур яуаплылыҡ тойғоһо менән ҡарағанлығын иҫбатлап тора: табаҡ-табаҡ һәм том-том шиғри китаптарын сығарыусы берәүгә мөрәжәғәт итеп, «Һүҙ ынйыһын һиңә рух-даръянан сүпләргә лә әле сүпләргә» тигән кәңәш бирә ул һәм кәңәшен түбәндәге юлдар менән нығытып ҡуя:

*Сүпләп бөткәс, «иң-иң»дәрен һайлап,*
*Фекер ептәренә теҙергә;*
*Кешеләрҙең күңеленә уны*
*Моң епсәһе менән тегергә.*

*Ышанмаһаң, тыңла: Буранбайҙың*
*Моң-зар тулы кескәй хатынан*
*Ҡарттар илаъанъа тетрәнгән ил*
*Арына алмай һаман аһынан.*

Әлбиттә, һүҙ ынйыһын сүпләү – еңел кәсеп түгел. Уны кәсеп тип атап булһа әле. Һүҙ ынйыһы тиҙ генә табылмаҫҡа ла мөмкин. Таптым, тигәс тә, алдаҡыс ҡына булып сығыуы ихтимал. Иң мөһиме, ынйы булып күренгән һүҙендең тәрән мәғәнәгә эйә булыуындалыр. Тыштан ялтырап торған, ләкин һай фекерле һүҙҙәр теҙмәһенән кемгә һәм ни файҙа? Мәүлиттең «Бер шағирға»һына был ҡурҡыныс янамай һымаҡ. Һуңғы ике юлда кинәйәләп әйтелгән фекер уҡыусыла икеләнеү-микеләнеү тойғоһо уятырға урын ҡалдырмайҙыр.

Әйткәндәй, ошо ике юлға төрөлгән фекер М. Ямалетдиндың «Буранбай сәсәндең хаты» («Ағиҙел», 2010, 10-сы һан) тигән шиғырында артабан үҫтерелгән һәм бер ни тиклем асыҡлабыраҡ бирелгән. Минең уйымса, ошо бер шиғыр сиктәрендә автор йөкмәткеһе буйынса поэма геройына торорлоҡ образ тыуҙырыуға ирешкән. Буранбайҙың «Илем, халҡым иҫән ҡалһын өсөн мин кисерер инем мең үлем», «Мин ҡайтырмын ҡурай моңо булып, мин ҡайтырмын һеҙгә йыр булып» тигән һүҙҙәре генә лә Себер тарафтарына олаҡтырылған сәсәндең онотолмаҫ поэтик һынын күҙ алдына баҫтыра.

Һүҙҙең, һүҙҙән үрелгән шиғриәттең тылсымлы ҡөҙрәтенә тәрән ышаныу һәм уға ысын күңелдән табыныу хисе М. Ямалетдиндың бынан элегерәк ижад ителгән «Бер күңелле шиғыр яҙһаң ине…» («Ағиҙел», 2001, 6-сы һан) тигән әҫәрендә айырыуса көслө яңғырай. Шиғырҙың тәүге өс строфаһында автор, был донъяның барлыҡ көйөктәрен, һағыштарын юҡҡа сығарырҙай, ғаләм халҡын, йыйылып китеп, күҙҙәренән йәштәр сыҡҡансы көлдөрөп, ғүмер буйы күңеленә йыйған юшҡындарҙы иретеп ағыҙырҙай шиғыр яҙһаң ине, тип хыяллана һәм:

*Көлгән тауыш яңъыраһын ине*
*Ҡош йырында, шишмә сыңында.*
*Тормош үҙе бер йылмайһын ине*
*Егерменсе быуат һуңында,.. –*

тигән теләген белдерә. Әҫәрҙе ошо изге теләк менән ослап ҡуйырға ла булыр ине, бәлки. Ләкин ул саҡта бигүк Мәүлитсә килеп сыҡмаҫ ине. Сөнки әлеге осраҡта уға шиғриәттең тәьҫир итеү көсөн күрһәтеп кенә сикләнмәйенсә, уҡыусы менән донъя хәлдәре тураһында гәпләшеп алыу мөһимерәк. Шуға күрә лә шиғырҙың ҡалған өс строфаһында ул, үҙенең эске донъяһы һәм күңел торошо менән уртаҡлашҡан булып, әйтергә теләгәнен туранан-тура ярып һала:

*Донъя буп-буш.*
*Күңел үкһеҙ етем,*
*Һағышынан ятып үлмәле.*
*Ә беҙ һаман ниҙер даулашабыҙ,*
*Тәгәрәп йөрөп шуъа көлмәле.*

«Шағирҙар ҙа шул уҡ кеше…», «Хушлашыу», «Һаҡмар ағыр», «Аҡмулла», «Әхмәҙин Әфтәхкә», «Әйләнә лә бер ҡош…» тигән әҫәрҙәр ҙә авторҙың шиғриәт хаҡында, уның асылы һәм тәғәйенләше хаҡында уйланыуҙарҙан үҫеп сыҡҡандар, тиергә була. Тәүгеһендә, әйтәйек, шағирҙарҙың күңеле нескәрәк булыуы, шуға күрә «илдең ғәмен, халыҡ зарын» тәрәнерәк аңлауҙары һыҙыҡ өҫтөнә алынһа, икенсеһендә иһә ижад кешеләренең күңел кисерештәре бик оҫта тотоп алынған һәм матур итеп һүрәтләнгән: әҫәр яҙылып бөткәс, шатлыҡлы хистәр

кисереп, үҙенде өҫтөндән оло бер тау төшкән шикелле итеп тойһаң да, барыбер яманһыу, сөнки хәҙер ул һине ташлап китә. (Тәнҡит мәҡәләһен яҙып бөткәс тә шундай хистәр кисерәһең.) Шиғырҙың һуңғы юлдарында был тойғо айырыуса һағышлы яңғырай:

*Һин, беләмен, көн итерһең минһеҙ,*
*Ә мин бына ҡалайтырмын һинһеҙ?*

*Был донъяла йәнә яңғыҙ ҡалам,*
*Хәс ашлығын урып алған ялан…*

«Һаҡмар ағыр» – арабыҙҙан иртә киткән билдәле шағир Рәйес Түләк иҫтәлегенә арналған ыҡсым, әммә ифрат тәрән йөкмәткеле әҫәр:

*Рәйес Түләк!*
*Ниндәй хаҡтар түләп*
*Ҡайтарайыҡ яҡты донъяға?..*
*Хәйер, ҡайтмаҫ инең – ыласындар*
*Ике ҡунмай бер үк ҡаяға.*
. . . . . . . . . . . . . . . .
*Донъя фани. Ғүмер сикле. Әммә*
*Унда түгел эштең асылы –*
*Мәңге һүнмәҫ дан ҡалдырып китә*
*Ата балаһының аҫылы.*

«Аҡ күңелле Аҡмулланың һыны балҡый йыраҡтан» тигән юлдар менән тамамланған «Аҡмулла» исемле шиғыр ҙа, ҡәләмдәше һәм замандашы, сәсән телле шағир Буранбай Исҡужин иҫтәлегенә арналған «Әйләнә лә бер ҡош…» тигән шиғыр ҙа Мәүлит Ямалетдиндың шиғриәт Ғали йәнәптәре алдында ысын мәғәнәһендә баш эйеүен дәлилләп тороусы асыҡ миҫалдарҙыр ул.

Тәбиғәте, холҡо-фиғеле менән Мәүлит юморға бай шәхескә оҡшап тора: уның тәү ҡарамаҡҡа етди генә күренгән шиғырҙарында ла аҫтыртын йылмайыуҙы шәйләргә мөмкин. Башкөллө шаян тулҡындарға көйләнгән әҫәрҙәр ҙә осрап ҡуйғылай шағирҙың ижад арсеналында. Шундайҙар иҫәбенә һис бер шикләнеүһеҙ «Яҙмағандыр» менән «Әхмәҙин Әфтәхкә» тигәндәрен индерер инем. Улар икеһе лә шул уҡ шиғриәт темаһына, шиғриәттең эстетик мөмкинлектәрен асыҡлауға һәм уның йәмғиәт тормошонда тотҡан урынын билдәләүгә арналған.

«Яҙмағандыр»ҙа, мәҫәлән, автор, тормошҡа ашмаҫ хәбәр һөйләп, уҡыусыны еңелсә йылмайып алырға мәжбүр итә. Йәнәһе, көтмәгән-нитмәгән ерҙән, Нобель премияһы алырға саҡырып, уға Стокгольмдан телеграмма килеп төшә. Аптыраšта ҡалған автор, кәңәш һорап, башта йөрәгенә мөрәжәғәт итә. Унан һуң – аҡылына. Йөрәге шағирҙы премия алырға барырға өндәһә, аҡылы иһә киреһенсә хәл итә: «Ҡуй, йөрәмә, ҡустым, мине тыңла. Һәм ҡайт асылыңа»,– ти ҙә артабан һүҙен былай дауам итә:

*«Йә, был хәбәр дөрөҫлөккә сығып,*
*Тапшырылһа Нобель миллиондары,*
*Илһам утын байлыҡ томалаһа,*
*Нигә ынтылырһың унан ары?..»*

Шиғыр иронияллы көлөү менән тамамлана: йәнәһе, шағирҙың ике самолеты ла ремонтта, шул сәбәпле премия алырға бара алмауын белдереп, Королгә хат яҙып һала.

Шаяртыу формаһында яҙылған «Әхмәҙин Әфтәхкә» тигән шиғыр ҙа уҡыусыла йылмайыу тойғоһо уятмай ҡалмаҫ, моғайын. Башҡорт шағиры Әхмәҙиндең исеме Иран президентыныҡына яҡын тороуҙан оҫта файҙаланып, автор был шиғырында шаҡтай уҫал һәм зәһәр үткер фекер әйтеүгә ирешкән.

Шулай ҙа М. Ямалетдиндың сатира һәм юмор өлкәһендәге маһирлығы «Шаңдауҙар» («Ағиҙел», 2007, 7-се һан) тигән әҫәрендә көслөрәк сағылғандыр. Был әҫәрен автор үҙе «пародик поэма» тип атаған. Ләкин бында, минең

ҡарашымса, пародия ғына түгел, гротеск та барҙыр, сөнки сатира-юморға хас йылмайып көлөү сюжет ағышында әкренләп әсе көлөүгә әйләнә.

Әҫәр күләмле генә: ете йөҙ иллеләп юлдан тора. Структураһы ла үҙенсәлекле: рим цифрҙары менән билдәләнгән ун өс бүлеккә бүленгән. Тик, тышҡы яҡтан ҡарағанда, улар бер ниндәй ҙә ҡанунға буйһондоролмағандар: иң ҡыҫҡаһы – туғыҙ, иң оҙоно – йөҙ ҙә һикһәндән артыҡ юлдан тора. Өҫтәп, тағы бер үҙенсәлек хаҡында әйтергә кәрәк: Мәүлит Ямалетдин поэмаһының һәр бүлеге шағир Инсур Артурҙан (Йәһүҙиндан) эпиграф итеп алынған юлдар менән асыла. Һәр эпиграф Мәүлит ҡәләме аҫтында пародияға әйләнә һәм, бүлектән-бүлеккә күскән һайын, ул көсәйгәндән-көсәйә, үткерләнгәндән-үткерләнә бара.

Ләкин Мәүлиттең төп маҡсаты – Инсурҙы битәрләү түгелдер (хәйер, уға ҡарата әйтелгән тәнҡит һүҙҙәре урыны-урыны менән ярайһы уҡ ҡаты яңғыраһа ла). Ҡәләмдәшен битәрләүҙән дә бигерәк, поэма авторы был эпиграфтарҙы ширма өсөн ҡулланғандыр, тип уйлайым. Сөнки ул үҙенең был әҫәрен башлыса йәшертен генә, көлөп-йылмайып, ләкин тоҙлап-борослап ҡына (ошо яғы менән «Шаңдауҙар»ҙың стиле уҙған быуаттың илленсе-алтмышынсы йылдарында шағирҙарыбыҙ бер-береһенә төрттөрөп яҙған һәм «Һәнәк» журналы биттәрендә баҫылғылап торған эпиграммаларҙы иҫкә төшөрөп ҡуйҙы) йәмғиәтебеҙ тормошондағы тиҫкәре күренештәрҙе фашлауға арнаған бит.

Быңдайын да ҡатмарлы бурысты үтәп сығыр өсөн автор художестволы әҙәбиәткә, бигерәк тә уның сатирик жанрҙарына хас һүрәтләү сараларын мул ғына файҙаланған. Шул сараларҙың бында йыш ҡына күҙгә салынғаны – символлаштырыуҙыр, үҙебеҙсә әйткәндә – ишаралыр. Поэма баштанаяҡ ишараға ҡоролған, тиһәк тә, хата булмаҫ. Беренсе бүлектәге «заман» тигән уртаҡлыҡ исеменең икенсе бүлектә «Заман» тигән яңғыҙлыҡ исеменә әйләнеп китеүе – үҙе генә лә серле йомаҡҡа оҡшап тора. Поэмала тасуирланған хәл-ваҡиғаларҙың (дөрөҫөрәге – Заман менән шағир, лейтенант ҡатын менән шәфҡәт туташы араһындағы диалогтарҙың) айнытҡыста барыуы ла – ишара. Хатта, бик ҡурҡыныс ишара, тиер инем: яңғыҙлыҡ исемен йөрөткән Заман ҡарт, хәмер эсеп, айнытҡысҡа килеп эләккән икән, тимәк, уртаҡлыҡ исемен йөрөтөүсе заман да (йәғни беҙ йәшәгән заман!) шул хәлгә тарыған түгелме һуң? Авторҙың был ишараһын шулай аңларға кәрәктер. Һәм уның менән килешмәй сара юҡ. Ниндәй аяныс!

Заман ҡарттың «Шағир булған ерҙә – мөтәшағир, бесәйем бар ерҙә бар этем», «Бер келәмгә ике тубыҡ һыймай, ҙурын алам тиһәң – аҡса юҡ», «Төрлө мәғәнәһеҙ талап менән сығармағыҙ мине сығырҙан: элеккесә аралармын һаман был донъяны йүнһеҙ шағирҙан», «Яҡты донъя – цирк. Тик мин унда тамашасы ғына ни бары» һәм башҡа шуның кеүек кинәйәле фекерҙәре; Иблистең Заман ҡолағына «Талант булған ерҙә көнсөллөк бар» тип бышылдауы; телгә килгән аҡ бесәйҙең Заман ҡартҡа йән аҙҙырғыс кәңәштәр биреүе; эскеселекте ғәйепләгән шәфҡәт туташының «Ниндәй көнгә төшөрҙөләр илде» тип әсенеүе; айнытҡыс хеҙмәткәре лейтенант ҡатындың «Беҙҙең илдә башҡаса һис мөмкин түгелдер. Бында йәшәү аҡылынан яҙған диуанаға ғына еңелдер» тигән ишаралары поэманы уҡыған саҡта бер-бер артлы тыуып торған бошоноу-борсолоу хистәрен уғата ла көсәйтә.

Әҫәрҙең башынан алып ахырына тиклем тулып ятҡан кинәйәле фекерҙәрҙе, ишараларҙы артабан да килтерергә булыр ине. Ләкин уҡыусы иғтибарына Заман ҡарт менән шағир араһындағы бәхәс-диалогты (етенсе бүлек) тәҡдим итеү менән генә сикләнергә тура килер. Айныҡҡыҫҡа килеп эләккән шағирҙың «Ниңә аҙҙың улай, әйт, заман?» тигән һорауына Заман ҡарт былай тип яуап ҡайтара: «Был һорауың миңә түгел, улым, – үҙеңә. Һорау ниндәй – яуап шундай, кисер, тура бәреп әйтһәм йөҙөңә. Ниңә аҙҙың, тинең. Мин – тик шәүлә. Һеҙ, кешеләр, үҙегеҙ аҙҙығыҙ. Дошманығыҙ Иблис ыңғайына хаҡ һәм тура юлдан яҙҙығыҙ. Кеше ниндәй – заман шундай. Мин бит – донъялағы һеҙҙең сағылыш. Ниңә миңә өйөләргә тейеш тормоштағы һәр бер яңылыш?»

Йыйып ҡына әйткәндә, Мәүлит Ямалетдиндың «Шаңдауҙар» исемле пародик поэмаһы – был жанрҙың шаҡтай киң эстетик мөмкинлектәргә эйә булыуын раҫлап тороусы әҫәр, тиер инем. Әгәр дәртең-дарманың, көсөңҡеүәтең етһә, тәүәккәллегең һәм ҡыйыулығың ташып торһа, ә иң мөһиме – талантың булһа, пародияны кемдән булһа ла берәй кешенән, уның айырымасыҡ етешһеҙлектәренән, тормош тип аталған ҙур сәхнә буйлап ҡыйышмыйыш атлауынан әсе көлөү өсөн генә түгел, бәлки, сәйәси һәм фәлсәфәүи юҫыҡтағы мәсьәләләрҙе күтәреү өсөн дә ярайһы ғына уңышлы файҙаланырға мөмкин икән. Киләсәктә башҡорт поэзияһында сатира һәм юмор темаһын фәнни нигеҙҙә өйрәнеүсе йәш быуын әҙәбиәт белгестәре был поэмаға иғтибар итмәй ҡалмаҫтар, моғайын, һәм уны иркенләберәк, тәрәнерәк тикшерерҙәр, тип өмөтләнәйек.

Яңы быуатты Мәүлит Ямалетдин «Хуш, бәхил бул, егерменсе быуат…» тигән шиғыры менән ҡаршыланы. Муса Ғәлиҙең «Ҡапҡанды ас, Быуат!» тигән поэмаһын һәм Ихсан Әхтәмйәновтың «Рәхмәт һиңә, Егерме!» тигән шиғырын иҫкә төшөрөп ҡуя ҡуйыуын, ләкин Мәүлит уларҙы ҡабатламай: үткән быуатҡа уның үҙ ҡарашы, үҙенең әйтер һүҙе. Әгәр Ихсан Әхтәмйәнов Егерменсе быуатты шатлыҡ хистәре кисерә-кисерә оҙатһа, Мәүлит Ямалетдин иһә уның менән моңһоуыраҡ тойғоларын белдереп хушлаша. Шуныһы мөһим: был шиғырҙың артында ялтырауыҡ һүҙҙәр менән эш итеүсе түгел, ә ғүмер ағышына философтарса күҙ ташлаусы һәм фекер йөрөтөүсе зат тора. Ул Егерменсе быуатты дифирамб йырлап оҙатмай, ә хушлаша, бәхилләшә, рәнйеп ҡалмауын үтенә, ташлап киттеләр, тип үпкәләмәүен һорай, сөнки был беҙҙең теләктән һәм ихтыярҙан тормай, ул гел шулай булған һәм киләсәктә лә шулай дауам итәсәк. Шиғырҙың авторы үҙен Егерменсе быуат балаһы тип һанай һәм унан, фатихаһын биреп, киләсәккә аҡ юл теләүен һәм бәхет юрап ҡалыуын үтенә. Шиғыр яҙылышы менән дә бик матур яңғырай. Һигеҙ строфалы ошо матур шиғырҙан бында икеһен генә күсереү менән сикләнергә мәжбүрмен:

*Бик яманһыу һинән айырылыу,*
*Ташлап китеү ҡыйын.*
*Ғәзизерәк була бара инең,*
*Йылдар үткән һайын.*

*Тороп ҡала һиндә ғүмерҙәрҙең*
*Иң ҡәҙерле мәле.*
*Уны һағынып иҫләр көндәребеҙ*
*Алда булыр әле.*

Үҙенсә бер фәлсәфәүилекте (ябайлаштырыбыраҡ, мин уны, тәрән фекер төрөлгән серлелек, тип атар инем) М.Ямалетдиндың «Ҡыш бигерәк кинәт килде быйыл…», «Көҙгө йыр»,

«Көрәш», «Бушлыҡ», «Төн», «Азатлыҡ», «Мәҙәниәт», «Сәнғәт», «Баҫалҡылыҡ», «Донъя», «Телһеҙ ҡыңғырау», «Өҙгөләнеү», «Культура», «Символдар», «Яңғыҙлыҡ», «Тормош йыры», «Көнәй-көнәй замандарҙы…», «Хыял» тигән шиғырҙарында ла һиҙемләргә була.

«Ҡыш бигерәк кинәт килде быйыл…» менән «Көҙгө йыр» тигәндәрен башта, исемдәренә ҡарап, былар – пейзаж лирикаһылыр, тип уйлайһың. Асылда иһә, уларҙы иғтибар менән уҡый башлағас, шиғырҙарҙың икеһендә лә ҡоро пейзаж ғына түгел икәнлегенә төшөнәһең. Тәүгеһендә тәҙрә аша тәбиғәт донъяһын күҙәтеп торған лирик герой ҡыҙыҡ ҡына һөҙөмтә яһап ҡуя:

*Өйөрөлөп яуған был ҡарҙың да*
*Ни эше бар беҙҙә – тереклектә?*
*Үҙ ҡануны, күк ҡөҙрәте менән*
*Яралған бит улар бейеклектә.*

*Беҙ – ерҙеке.*
*Хәстәребеҙ бында –*
*Ҡоштарҙыҡы тышта, минеке өйҙә.*
*Үҙебеҙгә күрә эшебеҙ бар.*
*Ҡар беҙһеҙ ҙә яуыр.*
*Яуһын әйҙә!*

Икенсеһендә, «Көҙгө йыр»ҙа, һалҡын ел аҫтында сайҡалған ағастар телгә килә. Ҡоштарҙай теҙелеп йылы яҡтарға осоп китеү ниәтенән уларҙы бер уй туҡтата:

*«Беҙ, ярай, китербеҙ,*
*Елдәр күп ҡаҡһалар.*
*Кешеләр нишләр һуң*
*Беҙһеҙ ҙә ҡалһалар?!»*

«Көрәш» – фәлсәфәүи шиғыр, тиергә мөмкин. Философиялағы закондар һәм категориялар туранан-тура аталмаһа ла (әгәр шулай була ҡалһа, ул, бәлки, шиғырлығын да юғалта төшөр ине), был закондарҙың һәм категорияларҙың образлы сағылышы күҙгә бәрелеп тора:

*Ваҡыт көслө – ташып тора ҡеүәте,*
*Мәңгелектең бирешмәҫкә – ниәте.*

*Уртала беҙ – тарихты бар итеүсе,*
*Мәңгелекте мәңгелеккә илтеүсе.*

(Ошо урында Назар Нәжмиҙе, уның:

*Ер өҫтөнә һибелгәндәр*
*Мәңгелек уттар.*
*Бара ғүмер… Яна уттар –*
*Яна минуттар,*
*Яна минуттар.*

*Яна уттар, уттар яна –*
*Мәңгелек уттар.*
*Мәңгелеккә ҡалыр өсөн*
*Һүнә минуттар,*
*Һүнә минуттар,..* –

тигән юлдарын хәтергә төшөрмәй сара юҡ.)

Фәлсәфә булған ерҙә хәйләгә лә урын барҙыр ул. Мәүлит Ямалетдиндың «Бушлыҡ», «Төн», «Азатлыҡ» тигән шиғырҙары шундайҙарға оҡшап тора. Уларҙың береһендә лә сәйәси лексика тапмаҫһың: әйтер фекерен автор туранан-тура ярып һалмай, бәлки, сағыштырыуҙар, йәнәшәлектәр аша белдерә. «Бушлыҡ»тағы «Донъя – нағыш, ә күңелдә – һағыш» тигән фраза, мәҫәлән, бер генә уҡыусыны ла битараф ҡалдырмағандыр. «Төн»дә авторҙың уй-фекерҙәрен асыҡларға Иблис образы ярҙамға килгән: уның, «Әҙәмде еңдем» тип маҡтаныуынан һуң, авторға, «Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ шул инде – төн ҡуйыра күңел күгендә» тип килешеүҙән башҡа сара ҡалмай. Яңғыраштары менән дә, мәғәнәләре буйынса ла шиғырҙың тәүге һәм һуңғы строфалары (ә ул алты строфанан тора) бер-береһенә бик яҡындар:

*Тарихта төн.*
*Ҡараңғылыҡ арта.*
*Шом пәрҙәһе ҡаплай офоҡто.*
*Беҙ күрмәбеҙ, нәҫелебеҙ күрер*
*Киләсәктә таңғы ысыҡты.*

Төрлө осорҙа, төрлө телдә азатлыҡ хаҡында баш ватып шиғыр яҙыусылар әҙ булмағандыр. Ә бына Мәүлит азатлыҡтың ҡатлы-ҡатлы булыуына, уның тик уйҙа ғына еңел, хыялда ғына татлы икәнлегенә баҫым яһап әйткән. Шиғырҙың дүрт строфаһы ла «Азатлыҡтың юлы фажиғәле» тигән рефрен менән көсәйтелгән.

«Көнәй-көнәй замандарҙы…» менән «Хыял» тигән шиғырҙар ҙа («Ағиҙел», 2009, 5-се һан) – ошо типтағы әҫәрҙәр. Тәүгеһе быуындан быуынға күскән ғүмерҙең мәғәнәһеҙерәк үтеүе хаҡында фәлсәфәүи пландағы уйланыуҙарға ҡоролған. Ул былдай юлдар менән тамамлана:

*Баҡыйға китеп барабыҙ*
*Әкиәт һөйләй-һөйләй.*
*Ни ҡалдырҙығыҙ беҙгә, тип*
*Салғыйҙан тарта тәнәй.*

Икенсеһе («Хыял» тигәне) аллегорияға тартым. Кинәйә тәүге строфанан уҡ башлана:

*Ваҡыт машинаһы булһа ине,*
*Үҙе менән мине алһа ине.*
*Тәҙрә артындағы ысынбарлыҡ*
*Офоҡ арғыяғында ҡалһа ине.*

Артабанғы строфаларҙа лирик герой бала сағына сәфәр ҡылырға, атаһы менән әсәһен күрергә, тыуған төйәгендәге дуҫтары менән осрашырға хыяллана. Ләкин был хыялдар уның төп теләген йәшерер өсөн генә һанап сығылған. Сөнки һуңғы строфала ул, бала саҡтағы болоттар уны үҙе менән алып китһә ине һәм «Тәҙрә артындағы ысынбарлыҡ ҡулғынаһын болғап ҡалһа ине» тигән теләген белдерә. Шунан сығып, тәүге һәм һуңғы строфалар шиғырҙың идеяһын тәрәнерәк аңларға булышлыҡ итеүсе компоненттар булып тора.

Был мәҡәләлә телгә алынған шиғырҙарҙың байтағында Мәүлит Ямалетдин, «Яҙмағандыр» тигән шиғырындағыса, күберәк аҡылға таяна. Ләкин аҡылдың ара-тирә хис-тойғоларҙан өҫтөнлөк итеүе һис кенә лә шиғриәттең төп ҡанундарын һанға һуҡмау тигән һүҙ түгел. Әгәр ҡайһы бер осраҡта аҡыл ысынлап та үҙен ныҒыраҡ һиҙҙерә башлай икән, ул һаман шул Мәүлит шиғриәтенә хас фәлсәфәүилелек менән аңлатыла торғандыр, тип уйлайым. Мәүлиттең шиғриәттә һәм музыка сәнғәтендә генә түгел, бәлки, кеше эшмәкәрлегенең башҡа өлкәләрендә лә киң мәғлүмәтле, донъяға айыҡ ҡарашлы шәхес икәнлеге бер кемдә лә шик-шөбһә уятмайҙыр.

Фәлсәфәүилелек, эрудиция хаҡында һүҙ сыҡҡас, «Мәҙәниәт» («Ағиҙел», 2003, 1-се һан) тигән шиғырға туҡталып китеү урынлы булыр. Бынан элегерәк яҙылған «Бушлыҡ» тигән шиғырына бирелгән төшөрмәлә автор, «мәҙәниәт» һүҙе ғәрәпсәнән алынған «цивилизация» мәғәнәһен бирә, тип аңлатҡайны. Әле һүҙ барған шиғырҙы «Цивилизация» тип атаһа ла бер ниндәй ҙә хилафлыҡ булмаҫ ине. Беренсенән, был һүҙ башҡорт телендә лә йәшәй. Икенсенән (быныһы – мөһимерәк тә) шиғырҙа һүҙ ысынлап та Ер йөҙөндә беҙгә тиклем йәшәп, юҡҡа сыҡҡан цивилизациялар хаҡында бара.

Шиғырҙы (күләме менән ул әллә ни ҙур түгел) «Һәр бер мәҙәниәт, ахыр сиктә, тамамлана ерҙә үлем менән» тигән юлдар асып ебәрә. («Һәр бер цивилизация…» тиелгән булһа, көслөрәк тә, урынлыраҡ та яңғырамаҫ ине микән?). Артабан уларҙың исемдәре һанала. Һуңынан «Хужалары киткән. Ятып ҡалған серҙәр тултырылған һандыҡтары» тигән ғәйәт йөкмәткеле һәм ғибрәтле һөҙөмтә яһап ҡуйыла.

Шулай ҙа авторҙың әйтергә теләгән төп фекере (шиғыр цивилизацияларҙы тиктомалға һанап сығыу өсөн

түгел, ә шул фекерҙе әйтер өсөн яҙылғандыр ҙа инде!) беренсе строфалағы «Улар һәләкәте беҙҙекенән айырыла бары күләм менән» тигән юлдарҙалыр, минеңсә. Ошо урында ирекһеҙҙән Урта быуаттарҙа киң таралған «Мәскәү – Өсөнсө Рим» тигән сәйәси теория иҫкә килеп төшә. Ул теория 1453 йылда төрөктәр Византияны-(Икенсе Римде) ҡолатҡас донъяға тыуа. Шул замандағы ҡайһы бер аҡыл эйәләренең «Дүртенсе Рим булмаясаҡ!» тигән киҫәтеүҙәре лә билдәле. Был киҫәтеү ике яҡлыраҡ фекер уята, әлбиттә: Мәскәү – йә ғүмергә Өсөнсө Рим булып ҡаласаҡ, йә ваҡыты еткәс, тағы бер цивилизация юҡҡа сығасаҡ. Төплө әйтелгән бер поэтик юл бына ниндәй фекерләүҙәргә алып килергә мөмкин!

Беҙ йәшәгән цивилизация сиктәрендәге тормоштоң ҡайһы бер яҡтарын сағылдырған «Сәнғәт» һәм «Баҫалҡылыҡ» тигән шиғырҙар (улар икеһе лә «Мәҙәниәт» менән бер тирәлә ижад ителгәндәр булһа кәрәк), ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бәхәслерәк уй-фекер тыуҙыра. Тәүгеһендә һүҙ сәнғәттең бөйөклөгө, донъяның да, сәнғәттең дә камиллығы һәм теүәллеге хаҡында бара. Тик бына камиллыҡтың да, теүәллектең дә ниндәйҙер ҡөҙрәт менән аңлатылыуы ғына нисектер мәҙәгерәк тойола. Икенсе шиғырында автор үҙ-үҙен инҡар иткәндәй: башта ул баҫалҡылыҡ, тыйнаҡлылыҡ, әҙәплелек урынына мин-минлектең, һөмһеҙлөктөң арта барыуы тураһында бәйән итә лә һуңынан быңдайыраҡ һығымта яһап ҡуя:

*Донъя алмаш.*
*Бер ҡараһаң, алдын,*
*Бер ҡараһаң, артын күрһәтә.*
*Мәңгелектәй күргән ҡиммәттәрең*
*Кәкре ҡайындарға терәтә.*

Камил, теүәл донъя, шулай итеп, йә алдын, йә артын күрһәтергә лә һәләтле икән дә баһа.

Ҡөҙрәт хаҡында һүҙ сығып ҡуйғас, бынан алда донъя күргән ҡайһы бер мәҡәләләремдәге шикелле, быныһында ла уға бер ни тиклем туҡталып китергә кәрәктер. Билдәле булыуынса, халыҡ аңында, башлыса – сәйәсәтселәр араһында, выждан иреклеге тип аталған иҫ киткес нескә төшөнсә йәшәп килә. Йөкмәткеһе буйынса ул ифрат сетерекле. Уны һаҡһыҙ ҡулланһаң, мөкиббән китеп дингә бирелгән кешенең хәтерен ҡалдырып ҡуйырға ла күп кәрәкмәй. Әммә Мәжит Ғафуриҙың 1915 йылда, бөтә диндәрҙең дә ҡотороп сәскә атҡан мәлендә, «Юҡтырһың да, Алла» тип икеләнеүен дә онотоп булмай. Ошо исемдәге шиғырының тәүге строфаһында уҡ ул «Бөтә ҡөҙрәтеңде бағлап ҡуймаҫ инең ерҙә алтын, көмөшкә…» тип нарыҡлаған бит. Йөҙ йылдан һуң уҡыусы зиһененә Ғафури әйткәндең киреһе тылҡыла түгелме? Бынан йөҙ йыл элек ижад ителгән «Юҡтырһың да, Алла» бөгөн ифрат заманса яңғырамаймы? Уны ҡат-ҡат уҡыйһың да совет заманында еңел генә махсус юғары белем алып, әҙергә мәҙер генә әҙәбиәт донъяһына килеп ингән бәғзе берәүҙәрҙең халыҡ шағиры мираҫына еңелсәрәк ҡараш ташлауына ғәжәпләнәһең.

Мәүлит шиғырҙарына кире әйләнеп ҡайтып (хәйер, ҡөҙрәт көсөн иҫкә алыу бер уға ғына хас күренеш түгел), шуны әйткем килә: ҡөҙрәт менән һатыу итеүгә ҡарағанда, уҡыусыны ерҙә йәшәп киткән һәм йәшәп ятҡан аҡыл эйәләре, әүлиәләр үрнәгендә тәрбиәләргә тырышыу отошлораҡ түгел микән? «Зәйнулла ишан нәсихәттәре» – ана ниндәй матур, күңелгә йәтешле һәм уҡыусы аңында ышаныс уятырҙай шиғыр! Ни өсөн ышаныс уятырҙай? Сөнки шиғырҙың геройы – абстракт төшөнсә түгел, ә ер кешеһе. Һәм Мәүлит Ямалетдин халыҡты яҡшылыҡҡа өндәүҙең бик урынлы, оригиналь ысулын

уйлап тапҡан: йәнәһе, ишан, выжданығыҙ таҙа булһын, тигән; ҡомһоҙлоҡтан ҡасырға ҡушҡан; ғәйбәт һатыуҙан, яла яғыуҙан һаҡ булырға өндәгән; боҙоҡлоҡтан бушанырға саҡырған, һ.б.

Аҡылдың ара-тирә хис-тойғоларҙан өҫтөнлөк алып ҡуйыуын «Символдар» тигән шиғырҙа ла төҫмөрләргә мөмкин. Был шиғыр уҙған быуатта үҙенең «Кеше», «Кардиограмма», «Авиаэтюдтар», «Карусель» тигән китаптары менән шаулаған Литва шағиры Эдуардас Межелайтисты хәтергә төшөрөп ҡуйҙы. Иғтибарҙы йәлеп итерлек фәлсәфәүи уйланыуҙар юҡ түгел бында. Шағир фекеренсә, беҙҙең бөтә тормошобоҙ символдарға оҡшаш. Ерҙә йәшәүҙе ул бөйөк символ тип атай. Тыуыу менән үлем дә, унынса, – символ: кеше «үтә ике билге – тыуым менән үлем араһын».

Ниһайәт, фәлсәфәгә ҡоролған тағы бер шиғыр – «Тормош йыры». Тик был юлы «фәлсәфә» төшөнсәһе бер аҙ икенсерәк мәғәнәлә ҡулланыла. Ҡайһы бер ғалимдарҙың фекеренсә, үҙенең законларына, категорияларына таянып йәшәүсе философиянан тыш, ябай тормошто сағылдырғанғәҙәти философия ла танылыу алырға хаҡлы икән. Шунан сығып, Мәүлит Ямалетдиндың әле һүҙ барған шиғырын мин «Тормош фәлсәфәһе» тип атар инем. Сөнки унда, йәйәләр эсендә «Бер ҡатын ауыҙынан» тигән булып, кешенең ер йөҙөндә йәшәү асылы, билдәле бер ҡалыпҡа һалып, күҙ алдына килтереп баҫтырылған. Шиғыр дүрт строфанан тора. Уларҙың дүртеһе лә «Тормош көтөүҙәре еңел түгел» тигән юлдан башлана. («Тормош көтөүҙәре» урынына «Донъя көтөүҙәре» тиелһә, дөрөҫөрәк булмаҫ ине микән?) Һәр строфаның үҙ мәғәнәһе, үҙ тәғәйенләнеше бар. Беренсеһенеке – «Еңел түгел йәшәп китеүҙәре»; икенсеһенеке – «Еңел түгел бала көтөүҙәре»: өсөнсөһөнөкө – «Еңел түгел иргә түҙеүҙәре»; дүртенсеһенеке – «Еңел түгел ҡартлыҡ етеүҙәре». Яңғырашы менән дә шиғыр ҡолаҡҡа йәтешле.

Аҡылға таянып, фәлсәфәүи юҫыҡта уй-фекер йөрөтөүсән М.Ямалетдин өсөн заман ғәме лә ят тема түгел. Өҫтәрәк һүҙ барған «Шаңдауҙар» поэмаһынан башҡа, был тема уның айырым шиғырҙарында ла сағылыш таба. Әгәр «Ауырыйым. Сирем бик яман…» да ул наркомандың хәлен ышандырырлыҡ деталдәр ярҙамында асып һалһа, «Алыпһатар, талпан булып…»-та иһә сирҙең икенсе төрөн – бизнес тыуҙырған ауҙы фашлай:

*Алыпһатар, мәскәй булып,*
*Һура елегебеҙҙе.*
*Ул, исмаһам, тауар һата,*
*Ә беҙ – бер-беребеҙҙе.*

Мәүлиткә хас булғанса, шиғырға кинәйәле фекер төрөлгән, әлбиттә: уның асылы бизнесты фашлауға ғына ҡайтып ҡалмағанлығы күҙгә бәрелеп тора.

«Рекламалы донъя» менән «Ер һатыуға ҡарата» тигән шиғырҙар бер ниндәй ҙә кинәйәгә мохтажлыҡ кисермәйҙәр, сөнки унда бөтәһе лә апасыҡ һәм яп-ялан ғас. Телеканалдар аша бер үк нәмә тураһында сәғәтенә бишәр тапҡыр ҡабатланған рекламаларҙы автор яфа һәм яза тип атай. Һуңғы строфа айырыуса уҫал яңғырай:

*Аҡса.*
*Нәфсе.*
*Рекламалы донъя –*
*Һыҙаттары яңы быуаттың.*
*Тормош, тормош!*
*Дөрөҫ юҫығыңды*
*Ҡайһы бөгөлдәрҙә юғалттың?!*

«Ер һатыуға ҡарата» – публицистик пафос менән һуғарылған әҫәр. Был ҡырын эште автор ҡасандыр «ирек

өсөн башын һалған батырҙарҙың рухын кәмһетеү», тип нарыҡлай һәм уны енәйәт ҡылыуға тиңләп, былай ти:

*Ерен һатҡан бәндә – көнәлгәре*
*Үҙ ҡәберен һатҡан әҙәм ул.*
*Ундай мөртәттәргә был донъяла*
*«Кеше» тигән исем әрәм ул.*

Һирәк-мирәк булһа ла, Мәүлит Ямалетдин мөхәббәт темаһына ла мөрәжәғәт иткеләй. Был мәңге иҫкермәҫ, һүнмәҫ-һүрелмәҫ темаға тотонғанда ла ул үҙе булып – әҙ һүҙле, бер аҙ ҡырыҫыраҡ, йыш ҡына көтөлмәгәнерәк боролош яһап ҡуйыусан шағир булып ҡала. «Табындым мөхәббәткә»нең лирик геройы, мәҫәлән, Ҡиәмәт көнөндә үҙенә башҡа төрлө яза табыуҙарын үтенә, сөнки ул, мөхәббәт ялҡынында ғазапланып, алаһы язаһын ерҙә саҡта уҡ алып киткән.

«Мин көнләшеү ялҡынында янам…» менән «Яндыр, әйҙә, йөрәгемде» тигәндәре лә шул уҡ сериянан. Тәүгеһенең йәлеп итеү көсө – көслө тойғоно сөсөләнеп, борғанлап түгел, ә тәрән фекер төрөлгән тәғәйен һүҙҙәр ярҙамында асып һалыуҙа булһа, икенсеһенеке – әлеге шул көтөлмәгәнерәк боролошта: ике арала килеп тыуған һалҡынлыҡты лирик герой янған йөрәге менән йылытмаҡсы.

«Алты егет, ете ҡыҙ», «Шаңдауҙар» шикелле, күләмәсерәк әҫәр. Унда шаянлыҡ та етерлек, сатираһы ла бар, юморы ла күҙгә бәрелеп тора. Был сараларҙың бөтәһе лә заманыбыҙға хас һәм шаҡтай киң таралған бер сирҙең симптомын асыҡлауға буйһондоролған:

*Ауыл һайын кәлеп һала*
*Бер өйөр буйҙаҡ егет,*
*Донъя көтәһе урынға –*
*Эт менеп, бесәй егеп.*

*Берҙән-бер уй-хәсрәттәре –*
*Ярлылыҡ аҡса табыу.*
*Ҡайҙа инде кәләш күҙләп,*
*Ҡыҙҙар артынан сабыу?!.*

Башҡорт халыҡ йырынан алынған эпиграф та авторға ярҙам иткән. Уның әйтергә теләгәне, элек ете ҡыҙға алты егет тура килһә, «ә бөгөн һуң нисә егет тап килә ете ҡыҙға?» тигән һорауға ҡайтып ҡала. Быға яуапты тормоштоң үҙенән эҙләргә кәрәк.

Мәүлит Ямалетдин – үҙен төрлө жанрҙарҙа һынап, арымай-талмай эшләгән тынғыһыҙ ижадсы. Баштараҡ әйткәнемсә, байтаҡ китап авторы. Ул китаптарҙа ижадсының шиғырҙарын да, поэмаларын да, әкиәттәрен дә, повесть менән хикәйәләрен дә, ривәйәттәрен дә, дастандарын да, робағиҙарын да, тәржемәләрен дә, хатта йыр ноталарын да табырға мөмкин. Был мәҡәләлә һүҙ Мәүлиттең быуат башына ҡараған ҡайһы бер поэтик әҫәрҙәре хаҡында ғына барҙы. Күреүебеҙсә, улар бай йөкмәткеле, тосфекерле, заманса яңғырашлы, уйланғанды – уйландырырлыҡ. Шағир әүҙем ижад тормошонда ҡайнап йәшәй. Беҙҙе артабан да үҙенең яңы әҫәрҙәре менән ҡыуандырып торор әле, тигән ышаныс белдерәһе генә ҡала.

**Әнғәм ХӘБИРОВ.**
**Бөрө ҡалаһы.**

**Шәһәр
ШӘРИФ**

# ҒАСЫР СӘҒӘҘӘТ ЙӘКИ БӘХЕТЛЕ БЫУАТ

*Шәһәр Шәрифтең был әҫәре Пәйғәмбәрҙең әхүәле үә Исламдың башланыуы хаҡында. Ул Ҡазан ҡалаһының «Үрнәк» матбағаһында 1910 йылда донъя күрә. Филология фәндәре докторы Салауат Галин ғәрәп яҙмаһындағы татар теленән тәржемә иткән был хеҙмәт бер нисә йыл элек «Ағиҙел» архивына килеп ингәйне. Уның йөкмәткеһе менән Башҡортостан Мосолмандары диниә назараты мөфтөйө Нурмөхәмәт Ниғмәтуллин да таныштты.*

## *Мөхәммәт Ғәләйһис-сәләм менән һөйөнөс биреү*

Ғәләйһис-сәләм, Хаҡ (Алла) йәнәбтәре хәҙрәттәренә доға ҡылып, улы Исмәғил Ғәләйһис-сәләмдең нәҫеленә бәрәкәт (бер кешенең башҡаларҙан берәй сифатта өҫтөн булыуы) биреүҙе теләне. Хаҡ йәнәбтәре Ибраһим Ғәләйһис-сәләмдең доғаһын ҡабул итеп, уның балаларын бөйөк бер милләт итәсәген вәғәҙә итте. Былар Тауратта мәҙкүрҙер (әйтелеп үтелгәндер). Таураттан һуң ингән Забур вә Инжилдә лә олуғ бер пәйғәмбәр киләсәге, уның бәғзе сифаттары вә ғәләмәттәре зекер ителде (телгә алынды, әйтеп үтелде).

Исмәғил Ғәләйһис-сәләмдең икенсе улы Исхаҡ Ғәләйһис-сәләм нәҫеленән Яҡуп, Муса, Дауыт, Сөләймән, Ғайса (ғәләйһимүс-сәләм) кеүек пәйғәмбәрҙәр килһә лә, Мөхәммәт Ғәләйһис-сәләмдең ваҡытына ҡәҙәр Исмәғил Ғәләйһис-сәләм нәҫеленән ундайҙар күренгәне юҡ ине. Шунлыҡтан Исмәғил Ғәләйһис-сәләм балаларынан олуғ бер пәйғәмбәр килеүҙе көттөләр. Хәҙрәт Ғайсанан һуң (600 йыл ҡәҙәр) пәйғәмбәр килмәй тороу сәбәпле, халыҡты наҙанлыҡ баҫып, әүәлге пәйғәмбәрҙәрҙең диндәренә дә төрлө бидғәттәр (диндә булмаған йола) ҡатнашҡайны. Шул ваҡытта пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт Ғәләйһис-сәләм донъяға тәшриф итте (донъяға килде).

## *Нәсәб Шәриф* (пәйғәмбәрҙең нәҫеле)

Мөхәммәт Ғәләйһис-сәләм ғәрәптәр араһында иң мөғтәбәр (хөрмәтле) үә ҡәҙерле булған Ҡурайыш ҡәбиләһенән булып, нәсәб шәриф (нәҫеле) Исмәғил

Ғәләйһис-сәләмгә тоташалыр. Асыҡ мәғлүм булған бабалары шуларҙыр: Мөхәммәт бине Ғәбделмоталлиб, бине Һашим, бине Ғәбдеманаф, бине Ҡусай, бине Киләб, бине Мурра, бине Ҡәғб, бине Луәй, бине Ғәлиб, бине Фиһр, бине Мәлик, бине Нәҙр, бине Кинәнә, бине Хүҙәймә, бине Мудрикә, бине Ильяс, бине Мүҙар, бине Низар, бине Мәғдд, бине Ғәднән. Әсәһе: Әминә бине Ваһап, бине Ғәбде, бине Манаф, бине Зөһрә, бине Киләбтер. Киләбтә нәсәбтәре пәйғәмбәребеҙ нәсәбе менән бергә ҡушыла.

Рәсүлулла (салалаллаһу Ғәләйһи үә сәлләм) тарих миләди 517 йыл 20 апрелдә рәбиғел әүүәлдең 12-һендә дүшәмбе көн таң ваҡытында донъяға килде. Тыуған ваҡытында әсәһе һис бер зәхмәт үә бала ауырыуы күрмәне. Сөннәтле вә киҫелгән хәлдә тыуҙы. Арҡаһында күгәрсен йомортҡаһынан бәләкәйерәк бер ғәләмәт бар ине. Уға «Хатам нүбүүәт», «Мөһөр нүбүүәт» тиерҙәр (пәйғәмбәрлек мөһөрө). Донъяға килеүе бөтөн әҡрәбәләренә (туғандарына) һөйкөмлө күренде. Һәммәһенә ҙур шатлыҡ булды. Бабаһы (ҡартатаһы) Ғәбделмоталлиб, ҙур туй үткәреп, бик күп халыҡты һыйланы, Мөхәммәт тип исем ҡуйҙы. Әбүжәһл, Әбүләһәбтәргә лә һөймәле (һөйкөмлө) күренеп, Әбүләһәб һөйөнөстән Ҫүәйбә исемле кәнизәген (ҡол ҡатынды) азат итте.

Хәҙерге ваҡытта (12 рәбиғел әүүәл) донъя үә әхирәттә бәхетле булыуыбыҙға сәбәп булған пәйғәмбәребеҙҙең тыуған көнө булғанлыҡтан, бөтә мосолмандарға иң ҙур байрам көнөлөр. Рәсүлулланың атаһы Ғабдулла балаһы донъяға килгәнсе әйләнеп ҡайтыу ниәте менән, Шам (Дамаск) тарафына сауҙа менән сәфәргә киткәйне. Шул сәфәрендә вафат булып, Мәҙинәлә дәфен ителде (ерләнде). Рәсүлулла етем булып донъяға килде.

## *Пәйғәмбәр тыуған Үиләдәт ваҡытындағы бәғзе ваҡиғалар*

Рәсүлулланың тыуыуынан 50 көн элек Йәмән батшаһы, Ҡәғбәтулланы харап итергә тип, ҙур филдәре үә ғәскәр менән Мәккәгә килгәйне. Аллаһы Тәғәлә тарафынан Абабил ҡоштары уның бөтә ғәскәрен ваҡ таштар менән һәләк итте. Ғәрәптәр был йылды «Ғәм әл-фил» (фил йылы) тиерҙәр. Ҡөрьәндә былар хаҡында «Сүрәтүл-фил» назил булған (күктән индерелгән). Шул йылдарҙа ғәрәп араһында, бигерәк тә Ҡурайышта көслө аслыҡ, ә Рәсүлулла тыуған йылдан ямғыр күп яуып, игендәр үә емештәр башҡа йылдарға ҡарағанда нисә өлөш артыҡ үә күп етешкән. Ғәрәптәр был йылды «иркенлек, шатлыҡ йылы» тип атаған. Рәсүлулла тыуған көндө күп әҙәмдәр ахыр заман пәйғәмбәренең донъяға килеүен төштәрендә күргән. Бабаһы (ҡартатаһы) Ғәбделмоталлиб яңы тыуған баланың олуғ бер зат буласағын төшөндә күргән вә шул кистә Ҡәғбәтулла янында: «Ғәләмдә рәхмәт итеп ебәрелгән бала тыуҙы», – тигән тауыш ишеткән. Шатлығынан оло зыяфәт (ҡунаҡ итеү, хөрмәтләү) үә туй итеп, Рәсүлулланы гүзәл ҡасидә (маҡтау шиғыры) менән маҡтанылар.

Саф һауалы ерҙә, ауылда үҫкән бала сәләмәт, үткер зиһенле була тип, Мәккә халҡы йәш балаларын ҡәрйәләрҙә (ауылдарҙа) һөт әсәләренә имеҙергә биреп тәрбиә итерҙәр ине. Ауыл ҡатындары ла Мәккәгә килеп, имеҙергә үә тәрбиә итергә балалар алып китә торған булды. Рәсүлулланы ла Мәккә сәхрәһендә мәғишәт иткән (йәшәгән) Бәнү Сәғт ҡәбиләһенән Хәлимә исемле ҡатынға имеҙергә бирмәксе булғандар. Ҡатын башта: «Үҙебеҙ ҙә фәҡир, был етем баланы тәрбиә итеүҙән файҙа булырмы икән?» – тип икеләнеп торған. Ләкин Рәсүлуллаға күҙе төшкәс, ул бала күңеленә бик һөйкөмлө күренеп, Хәлимә уны ауылына алып киткән. Рәсүлулланы тәрбиәгә алыу менән өйҙәренә бәрәкәт ингән, малдарының һөтө лә арта башлаған. Шунан: «Был баланың аяғы еңел, бәрәкәтле булһа кәрәк», – тиешеп, ихлас тәрбиә итә башлағандар. Малай бик тиҙ үҫеп,

алтынсы айҙа аяғына баҫа, туғыҙ ай тулғас асыҡ һөйләшә башлап, бишенсе йәшенә ҡәҙәр шунда тәрбиәләнә.

Рәсүлулла ошонда саҡта әҙәм сүрәтендәге ике фәрештә килеп, баланың күкрәген яра ла, йөрәгендәге боҙоҡ ҡанды алып, нур тултыра. Быны «Шаҡ сандр ваҡиғаһы» тип атағандар. Хәлимә бик һөйөп тәрбиә иткәнлектән, айырылғыһы килмәһә лә, был ваҡиғанан ҡурҡып, баланы әсәһенә тапшыра.

## *Әсәһе үә олатаһының вафаты*

Рәсүлулла алты йәшенә еткәндә, әсәһе вафат булды. Унан һуң малайҙы олатаһы Ғәбделмоталлиб тәрбиә итә башланы. Ғәбделмоталлиб, Рәсүлулла хаҡында төрлө төштәр күргәнлектән үә төрлө ваҡиғалар ишеткәнлектән, уны үҙ балаһынан артыҡ күреп, ихлас вә риғәйә (ололау) менән тәрбиә итте.

Рәсүлулла һигеҙ йәшенә еткәндә, Ғәбделмоталлиб та йөҙ йәшенән үтеп вафат булды. Ул Ҡурайыш ҡәбиләһенең рәйесе үә иң йомарт, иң аҡыллы ирҙәренән һанала ине. «Аллаһының миңә биргән ниғмәттәренән (муллыҡ, байлыҡ) әҙәмдәр генә түгел, ҡоштар ҙа файҙаланһын», – тип тау баштарына аҙыҡ ҡуйҙыра ине. Вафатында бөтә Мәккә халҡы илап, бер нисә көн сауҙа итмәй матәм (траур, ҡайғы) тотто. Рәсүлулла ла йыназа артынан илап эйәрҙе.

Ғәбделмоталлиб вафат булғас, малай Абуталиб тәрбиәһенә күсте. Ул ваҡытта Рәсүлулланың атаһы менән бер туған ҡәрҙәше Абуталибтың хәле уртаса ғына ине. Уны тәрбиәләй башлағас, быларҙа ла бәрәкәт артты, Абуталибтың бәхете асылды. Рәсүлулла ағаһының күҙенә бик һөйкөмлө күренде. Уны үҙ балаларынан да яҡыныраҡ күреп, шәфҡәт һәм мәрхәмәт менән тәрбиә итте.

Рәсүлулла мөләйем, йомшаҡ күңелле, әҙәпле ине. Башҡа балалар кеүек, ауыҙына килгәнде һөйләп йөрөмәй, ашарға-эсергә һорап борсомай ине. Бирһәләр, ҡәнәғәт итә, бирмәһәләр – өндәшмәй. Бәғзе көндәрҙә Харам Шәрифкә барып зәм-зәм һыуы эсә лә шуның менән ҡәнәғәтләнә ине. Шул ваҡыттан уҡ Рәсүлулланың әҙәпле исеме сығып, күрше-тирәһе балаларына: «Мөхәммәт кеүек әҙәпле, инсафлы булырға кәрәк», – тип әйтә ине.

## *Шамъа сәфәре*

Рәсүлулла (салаллаһу Ғәләйһи үә сәлләм) 12 йәшенә еткәндә, Абуталиб сауҙа менән Шамға сәфәр итмәк булды. Рәсүлулла ла уның менән сәфәргә сығырға теләне. Абуталибтың шәфҡәте килеп, уны үҙе менән бергә алды. Шам вилайәтендәге Бусра ҡалаһына килгәс, уларға нәсараларҙың (христиандарҙың) ҙур ғалимы Бәхирә исеме менән мәшһүр булған раһиб (монах) тап булды. Бәхирә: «Әүәлге китаптарҙың яҙыуына ҡарағанда, ғәрәптәрҙән бер пәйғәмбәр киләсәк, шуның хәбәре юҡмы?» – тип белеште. «Әүәлгәсә ишетелгәне юҡ», – тип яуап бирҙеләр.

Бәхирә Рәсүлулланы аҡ болот күләгәләп торғанын күреп, үҙенең ғилеме менән уның ахыр заман пәйғәмбәре булыуын самаланы. Янына саҡырып, нәҫелнәсәбен, уй-фекерен, ниндәй төштәр күргәнен һорашты ла киләсәк пәйғәмбәр хаҡында әүәлге китаптарҙа хәбәр бирелгән сифаттарҙы үә ғәләмәттәрҙе Рәсүлуллала тапты. Яйын табып, Рәсүлулланың арҡаһында булған нүбүүәтлек (пәйғәмбәрлек) мөһөрөн үбеп: «Был бала ахыр заман пәйғәмбәре булһа кәрәк», – тип шәһәдәт (гуаһлыҡ) бирҙе. Әүәлге китаптарҙа, яурынында бер ғәләмәт булыр, тип яҙылғайны. Һуңынан Абуталибҡа: «Малдарығыҙҙы ошо ерҙә һатып ҡайтыуығыҙҙы мәслихәт күрер инем», – тине. Абуталиб малдарын Бусра ҡалаһында һатып, Мәккәгә ҡайтып китте.

Рәсүлулла (салаллаһу Ғәләйһи үә сәлләм) 25 йәшенә еткәндә, Хәҙисә бине

Хүләдтең малы менән сауҙа итергә Шамға китте. Хәҙисә үҙе бик бай үә һәр йыл Шамға каруан ебәреп, сауҙа иттерә ине. Рәсүлулланың ғәйәт тоғро үә аҡыллы булыуын ишетеп, уның был сәнәлә (йылда) мал менән Шамға барыуын үтенде. Рәсүлулла, ҡабул ҡылып, Хәҙисәнең ҡоло Мәйсәрә менән сәфәр итте. Башҡа йылдарға ҡарағанда бик күп файҙа итеп ҡайттылар. Хәҙисә бик шатланды, Рәсүлуллаға рәхмәт әйтеп, килешкәндән күберәк хаҡ бирҙе.

Сәфәрҙән ҡайтҡас, Мәйсәрә Рәсүлулланы Хәҙисәгә бик маҡтаны, Бусрала бер раһибтың риғәйә иткәнен, ахыр заман пәйғәмбәре шул булыр, тип хәбәр биргәнен һөйләне. Хәҙисә Рәсүлулланың тоғролоғона, әхлағына ҡыҙыҡты, теләһә, уға кейәүгә бармаҡ булды. Рәсүлулла, кәңәш иткәндән һуң, ҡабул итте. Ул ваҡыт Хәҙисә 40 йәшендәге тол ҡатын ине.

## *Ҡәғбәтулланы төҙөү*

Рәсүлулла (салаллаһу Ғәләйһи үә сәлләм) 35 йәшенә еткәндә, көслө ямғыр булып, Ҡәғбәнең ҡайһы бер урындары ярылды. Ҡурайыш халҡы, хәләл малдарҙан ғына иғәнә йыйып, Ҡәғбәне яңынан бина итте. Бина тамам булғас та, Хәжәр әл-әсүәд (ҡара таш) ҡуйғанда ихтилал (дау, ыҙғыш) сыҡты. Бәғзеләр, беҙҙә шәрәфәт күберәк, бәғзеләре, беҙ күберәк иғәнә иттек, бәғзеләре, беҙҙең ҡаныбыҙ күп, беҙ урынлаштырабыҙ, тинеләр. Йәнә бәғзеләре, беҙ һуғышабыҙ, ҡайһы ҡәбилә еңә, шул урынлаштырыр, тип өс-дүрт көн ҡысҡырыштылар. Аҙаҡ килеп, Мәсет әл-Харам ҡапҡаһынан иң элек кергән кешенең хөкөмөнә һәммәһе риза булырға, тип һүҙ ҡуйыштылар. Шул ваҡыт ҡапҡанан Рәсүлулла килеп инде, һәммәһе: «Мөхәммәт керҙе, ул тоғро, хөкөмөнә ризабыҙ», – тине. Араларында тоғролоғо менән исеме сыҡҡанлыҡтан, уның осрауына шатландылар.

Рәсүлуллаға эштең нимәлә икәнлеген һөйләгәс, ул бер кейем өҫтөнә «Хәжәр әл-әсүәд»те алып ҡуйып: «Һәр мөйөшөнән бер ҡәбилә рәйесе тотоп барһын», – тине. Барып еткәс, үҙе мөбәрәк (ҡәҙерле, бәхетле, хөрмәтле) ҡулына алып, урынына ҡуйҙы. Был тәдбире (эштең ахырын уйлап эшләү, алдан күреү) өсөн һәммәһе шатланып, Рәсүлуллаға рәхмәт уҡыны.

## *Пәйғәмбәребеҙҙең элекке хәлдәре*

Рәсүлулла (салаллаһу Ғәләйһи үә сәлләм) йәш ваҡытынан күркәм холоҡло, инсафлы ине. Фәҡир вә ғажиздарға (көсһөҙ, зәғиф, бер эш тә эшләй алмаған кеше) шәфҡәтле булыуҙы, туған-ҡәрҙәштәргә ололап ҡарауҙы, ҡунаҡ һыйлауҙы яратты. Халыҡ араһында тоғролоҡ, яҡшылыҡ менән исеме сығып, «Мөхәммәт әл-Әмин» тип аталыр ине. Был һүҙ, ышанычлы үә тоғро Мөхәммәт, тимәктер. Һүҙҙе уйлап, аҙ ғына һөйләй, һәр эшендә үә һүҙендә бик тоғро булғанлыҡтан, халыҡ араһында низағ-ыҙғыш, талаш, ғауға сыҡҡанда, күп ваҡыттарҙа унан хөкөм иттерәләр ине. Әүәле китаптарҙа ебәреләсәге вәғәҙә ителгән пәйғәмбәр ошо Мөхәммәт булһа кәрәк, тип уйлаусылар ҙа бар ине.

Ул ваҡытта ғәрәптәрҙең һәммәһе тиерлек мөшриктәр (поттарға ғибәҙәт итеүселәр) ине. Рәсүлулла йәш ваҡытынан уҡ поттарҙы һөймәй үә яҡын да бармай ине. «Был халыҡ утын, таш киҫәктәренән яһалған нәмәләргә ғибәҙәт итә, уларҙан ни файҙа көтәләр икән », – тип ғәжәпләнеп йөрөй ине. Үҙе ваҡыт-ваҡыт Хира тауына барып ғибәҙәт ҡыла, ҡайһы ваҡыттарҙа аҙыҡ алып килеп, шунда унар, ун бишәр көн халыҡҡа ҡатнашмайынса ғибәҙәт (табыныу) менән мәшғүл булып ваҡыт үткәрә торғайны.

Ул ваҡыт ғәрәптәрҙә шиғыр үә хөтбәнән нотоҡ, вәғәз башҡа ғилем, мәғрифәт юҡ, уҡый-яҙа белеүселәр бик аҙ ине. Рәсүлулла 40 йәшенә ҡәҙәр шундай яһил

(наҙан, белемһеҙ) халыҡ араһында һис кемдән ғилем, мәғрифәт өйрәнмәй, уҡыу, яҙыу менән мәшғүл булмай, остаз (уҡытыусы) алдына барып дәрес күрмәй тереклек итте.

## *Пәйғәмбәрлек килеүе*

Рәсүлулла (салаллаһу Ғәләйһи үә сәлләм) 40 йәшенә еткәндә, Аллаһы Тәғәлә бөтөн ғәләмгә рәхмәт еткерҙе. Халыҡтың донъя үә әхирәттә бәхетле булыуына, дин үә мәғрифәт юлына кереүҙәренә сәбәп булған ул мөбәрәк затты пәйғәмбәр итеп күндерҙе (ебәрҙе). Уға вәхи (Аллаһы Тәғәлә бойороғон йәшерен рәүештә ирештереү) килә башланы. Вәхи әүүәл мөрәттәбтә (тәртипкә килтерелгән, рәткә һалынған, төҙөлгән) руъйә садика, йәғни дөрөҫ төш күреү, менән башланды. Төшөндә нимә күрһә, һәммәһе күргәненсә заһир (асыҡ билдәле) була ине.

Хира тауында булған 17-се рамаҙанда Ябраил Ғәләйһис-сәләм вәхи килтереп: «Йә, Мөхәммәт, ысын хаҡ пәйғәмбәр һин, мин һиңә Алла тарафынан ебәрелдем»,– тине. «Иҡра» сүрәһен индерҙе. Беренсе мәртәбә фәрештәне күреү үә уның арҡылы вәхи килеү Рәсүлуллаға ауыр булды. Тетрәп, хәҙрәт Хәҙисәһе янына ҡайтып, ваҡиғаны һөйләне. «Үҙемә зарар булыуҙан ҡурҡтым», – тигәс, Хәҙисә: «Һин мосафирҙарҙы хөрмәт, етемдәрҙе, ғәриптәрҙе, ҡәрҙәштәрҙе риғәйә итәһең, тоғро һөйләйһең, халыҡты үҙеңдән риза итергә тырышаһың, һис хәүеф итмәй, Аллаһы Тәғәлә һиңә зарар килтермәҫ, Аллаһы менән йәмин (ант) итәм, һин был өммәттең пәйғәмбәре булһаң кәрәк», – тине.

Һуңынан Хәҙисә үҙенең туғаны Вәрәкә бин Нәүфәлгә барып, ошо ваҡиғаны һөйләне. Вәрәкә яуабында: «Әй, Хәҙисә! Әгәр һөйләгәнең дөрөҫ булһа, вәхи килтергән зат хәҙрәт Мусаға килгән Ябраил булып, Мөхәммәт тә был өммәттең пәйғәмбәрелер», – тине. Вәрәкә әүәлге китаптарҙы уҡыған ҙур ғалим ине. Вәрәкә Рәсүлуллаға осрағанда: «Йә, Мөхәммәт! Халыҡ һиңә ыҙа үә яфа итер, ялғансы тиер, Мәккәнән сығарырҙар, әүәлге пәйғәмбәрҙәргә лә шулай булды. Әгәр сәләмәт булһам, ҡулымдан килгән ҡәҙәр ярҙамсың булырмын», – тине. Ләкин оҙаҡ тормай вафат булды.

## *Дингә йәшерен дәғүәт* (өндәү, саҡырыу)

Шунан һуң «Йә әййүһәл мүддәҫәр» сүрәһе индерелде, халыҡты дингә өндәргә әмер килде. Үҙ диндәренә ихласлы, тәғәссублы (ныҡ йәбешкән), наҙан халыҡты юлға һалыу ҡыйын буласағын уйлап, Рәсүлулла бик ауырһынды, «Кем иманға килер, был ҡәҙәр олуғ эште нисек еренә еткерермен?» – тип ҡайғырҙы. Шунан һуң Аллаға тәүәккәл итеп (тапшырып) дәғүәт итергә кереште. Иң элек үҙе яҡын күргән үә ышанған дуҫтарын дәғүәт итте. Ирҙәрҙән – Әбүбәкер, сабыйҙарҙан – Ғәли, ҡатындарҙан – Хәҙисә, азат ҡолдарҙан Зәит бин Хәрҫә иманға килде. Әбүбәкер хәҙрәт Ҡурайыштың иғтибарлы, аҡыллы кешеләренән ине. Йәш ваҡытынан бирле Рәсүлуллаға ихласлы булды. Поттарға ғибәҙәт итеүҙе һөймәй, «Башҡа бер хаҡ дин булырға кәрәк» тип йөрөй ине. Пәйғәмбәрлек килеү хәбәрен ишеткәс тә, иман килтерҙе. Рәсүлуллаға ихлас ышанды, дуҫтарын да иманға килергә ҡыҙыҡтыра башланы, бөтөн зиһенен егеп, мосолмандарҙы арттырырға тырышты. Уның өндәүе менән хәҙрәт Ғосман бин Ғаффан, Ғабдррахман бин Ғәүф, Зөбәйер бин әл-Ғәүүам, Сәғд бин әби Уаҡҡас, Талха бин Ғәбиҙулла иманға килде. Был заттар ҙа дуҫтарын иманға ҡыҙыҡтыра башланы.

Был ваҡыттарҙа Рәсүлулла, халыҡ яңы дингә ҡаршы ҡуҙғалып китмәһен тип, аҡрын ғына дәғүәт итә, Мәккә тирәһендә тынысыраҡ урындарҙа ғына йәшерен ғибәҙәт ҡылып, Ҡөрьәнде лә хафи (йәшерен) ғына уҡыйҙар ине. Ни ҡәҙәр йәшерһәләр ҙә, был хәбәр телдән телгә таралды. Халыҡ араһында: «Мөхәммәт яңы

дин сығарған, бәғзе әҙәмдәр иман килтергән, йәшерен ғибәҙәт ҡылалар, имеш», – тип һөйләйҙәр ине.

Иманға килгән кешене белгәс, кафырҙар (мосолман булмаған): «Ата-баба диненән айырылған, һаташҡан», – тип шелтәләй үә мәсхәрә итә ине. Рәсүлулла өс йылға ҡәҙәр йәшерен дәғүәт итте. Шул арала утыҙлап кеше иманға килде.

## Дингә асыҡтан дәъүәт

Нәбүүәттең (пәйғәмбәрлектең) дүртенсе йылында «Фәсдәх бимә түъмәр» (динде асыҡ һөйләү) ашкәрә («асыҡтан-асыҡ дәғүәт ит» мәғәнәһендә) аят индерелде. Рәсүлулла дингә ашкәрә дәғүәт итә, халыҡты йыйып үә йыйылыштарына барып һөйләй башланы. Ҡурайыш халҡы башта ул ҡәҙәр ҡаты мөғәмәлә ҡылманы. «Мөхәммәт аҡыллы, тоғро ғына егет ине, быйндайын эшкә тотондо, күктән вәхи килә, фәрештә килә, тип һөйләй икән», – тип яратмайынса ғына йөрөнөләр. Һуңынан: «Аллаға ғына ғибәҙәт итергә кәрәк, поттарға ғибәҙәт итеүселәр зәләлаттә» (аҙашыуҙа, яңылыш юлда) тигән һүҙҙәр килә башлап, Ҡурайыш халҡы ҡуҙғалды.

«Кем булған ул Мөхәммәт? Ата-бабаларығыҙ зәләлаттә ине, файҙаһыҙ таш, утын киҫәктәренә ғибәҙәт итәһегеҙ, тип динебеҙҙе мәсхәрә итә, – тип асыуландылар. – Ата-баба диненән сыҡмайбыҙ, нисә йөҙ йылдарҙан бирле килгән поттарыбыҙҙы ташламайбыҙ», – тинеләр.

Рәсүлулла (салаллаһу Ғәләйһи үә сәлләм), кафырҙар ҡаты мөғәмәләлә торһа ла, һаман да уларға йомшаҡлыҡ менән мөғәмәлә итте, Ислам диненең аҡылға, хикмәткә муафиҡ (яраҡлы, урынлы) булыуын аңлатырға тырыша ине. Кафырҙарға ҡаршы: «Әгәр ҙә минең пәйғәмбәр булыуыма, Ҡөрьәндең Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелеүенә инанмаһағыҙ, һүҙгә маһир, аҡыллы уландарығыҙ шул Ҡөрьән кеүек хикмәтле фәсәхәтле (юғары шиғриәтле, риторикалы) бер сүрә генә һөйләп күрһәтһен», – ти ине.

Кафырҙарҙың аҡыллылары, ғалимдары, шағирҙары ни хәтле Ҡөрьән кеүек һөйләргә тырышып ҡараһа ла, бер аят та һөйләргә булдыра алманылар. Һәммәһе яуаптан ғажиз булып, аптырап ҡалды. Рәсүлуллаға ҡаршы бар һүҙҙәре: «Ата-бабаларыбыҙ тотҡан юлды боҙма, уларға яраған беҙгә лә ярай, яңы дин кәрәкмәй», – булды. Рәсүлулла, үҙенә шул ҡәҙәрле ауырлыҡ килһә лә, эшенән һис бер туҡталманы, һаман Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылыуға, дәғүәт итергә өндәне, поттарҙан файҙа килмәгәнен һөйләне. Тоғро фекерле, инсафлы кешеләр аҡрынлап булһа ла иманға килә ине.

Был эштәрҙе күреп, бер көн Ҡурайыш халҡы Рәсүлулла янына килде: «Йә, Мөхәммәт! Һинең нәҫел-нәсәбең яҡшы, үҙең ҡәҙерле инең, ләкин һис кем ҡылмағанды эшләнең, мәғбудләребеҙҙе (ғибәҙәт ҡыла, табына торған заттарыбыҙҙы) хәкарәт (кәмһетеү, хур итеү) иттең. Ата-бабаларыбыҙҙы зәләлаттә булған тинең, арабыҙға һалҡынлыҡ һалдың. Был яңы динде сығарыуҙан маҡсатың ниҙә? Әгәр мал кәрәк булһа, теләгән ҡәҙәр йыйып бирәбеҙ. Арабыҙҙа иң байыбыҙ булырһың. Әгәр маҡсатың дәрәжә йәки шөһрәт булһа, һине рәйес итәбеҙ. Әгәр һиндә хәстәлек (ауырыу, сир) йәки ен зәхмәте (нервы ауырыуы) булһа, дауа итербеҙ», – тинеләр.

Рәсүлулла уларға яуабында: «Мин быларҙың һис береһен теләмәйем, Аллаһы Тәғәлә мине һеҙгә пәйғәмбәр итеп ебәрҙе, Ҡөрьән индерҙе, итәғәт иткәндәргә – йәннәт, итәғәтһеҙҙәргә йәһәннәм буласағын белдерергә әмер итте. Мин Аллаһының әмерен еткерҙем. Бар маҡсатым – Аллаһыға ғына ғибәҙәт итеүегеҙ. Ҡабул итһәгеҙ, донъя үә әхирәттә бәхетле булырһығыҙ. Ҡабул итмәһәгеҙ, сабыр итәм, эште Аллаһыға тапшырам. Аллаһы үҙе хөкөм итер», – тине.

## *Абуталибтың химаяһы* (яҡлауы)

Рәсүлулланың бик тырышып дингә өндәүе, иманға килгәндәрҙең артыуы Ҡурайыш халҡын тәшүишкә (буталышҡа, шикләнеүгә) төшөрҙө. Улар иман килтереүселәргә ыҙа үә яфа итә башланы. Һашимиҙарҙың рәйесе Абуталиб, иман килтермәгән булһа ла, хәҙрәт Рәсүлде үҙ балаларынан артыҡ һөйҙө үә кафырҙарҙан һаҡларға тырышты. Кафырҙар ҙа Абуталибтың хәтерен риғәйә (ололау, хөрмәтләү) итеп, хәҙрәт Рәсүлгә артыҡ ыҙа итмәне.

Бер көн Ҡурайыштың ололары Абуталибҡа килеп: «Мөхәммәтте динебеҙ хаҡында һөйләүҙән туҡтат, уны риғәйә итмә», – тине. Абуталиб уларҙы татлы һүҙ үә яҡты йөҙ менән ҡайтарып ебәрҙе.

Кафырҙар Рәсүлулланың һаман дәғүәт иткәнлегенә асыуланып, икенсе мәртәбә Абуталибҡа килгәндә: «Мөхәммәт динебеҙгә, ата-бабаларыбыҙға тел тейҙерә. Һин уны риғәйә итмә, юҡһа беҙ һине ташлайбыҙ йә ысынлап айырылабыҙ», – тинеләр.

Абуталибҡа нәҫел-нәсәбенән, ҡәбиләһенән айырылыу ауыр күренде, һәм ул Ҡурайыш халҡынан ишеткәндәрен Рәсүлуллаға еткерҙе. Рәсүлулла: «Бынан һуң Абуталиб та риғәйә итмәҫкә уйлай икән. Үҙемә үә сәхәбәләргә (эйәреүселәр, яҡлаусылар) тағы ауырыраҡ булыр», – тигән фекергә килде. Мөбәрәк күҙҙәренән йәш ағып: «Ай, атай урынында булған ҡәрҙәшем, мин Аллаһы Тәғәлә бойорғанды һөйләргә бурыслымын, Ҡурайыш халҡы уң яғыма ай ҡуйып үтенһә лә, миңә туҡтамаҡ мөмкин түгел», – тине. Бер яҡҡа китте. Абуталиб Рәсүлулланың ҡайғырыуын, күҙҙәренән йәш килеүен күреп, үҙе лә әҫәрләнде. Шәфҡәте килеп: «Ай, ҡәрҙәшем улы! Нимә ишетһәң дә, һөйлә: мин сәләмәт ваҡытта һис зарар итмәҫтәр, уаллаһи, мин һине Ҡурайыш халҡына тапшырмам», – тине.

## *Кафырҙарҙың ғәҙәүәте* (асыу итеүе, дошман күреүе)

Рәсүлулланың һаман дәғүәт итеүен, Абуталибтың уны яҡлауын күреп, кафырҙар дошманлыҡты көсәйтте. Халыҡты Мөхәммәт янына барыуҙан, уның менән аралашыуҙан тыя башланылар. Урамда артынан: «Сихырсы мәжнүн, ялғансы!» – тип ҡысҡырҙылар. Иртә тороп сыҡҡас, әләгеп йығылһын тип һәм мәсхәрә итеп, ишеге төбөнә дегәнәктәр, таштар, һарыҡ эсәктәре ташланылар. Берәй ерҙә һүҙ башлаһа, көлөп туҡтатырға, һөйләгәнен халыҡҡа ишеттермәҫ өсөн төрлөсә тауышланырға тотондолар. Ҡәғбәтулла янына барып ғибәҙәт ҡыла башлаһа, өҫтөнә балсыҡ ташларға, тауышланып ғибәҙәт иттермәҫкә маташтылар. Хатта сәждәлә ваҡытында өҫтөнә мал эсәктәре ташланылар.

Бер ваҡыт Ҡәғбәтулла янында намаҙ уҡый башлағанда, Ғүкбә исемле кафыр: «Мөхәммәттән ҡотолмайынса тыныслыҡ тапмабыҙ», – тип Рәсүлде муйынынан быуа башланы. Шул ваҡытта Әбүбәкер хәҙрәт осрап: «Хаҡ (Аллаһы) пәйғәмбәрлегенә асыҡ дәлилдәр килтергән, мөғжизәләр күрһәткән, Аллаға дәғүәт иткән затты үлтермәк булдығыҙмы?» – тине лә Ғүкбәне иңбашынан тартып ебәрҙе.

Рәсүлулланың ҡыҙы Әбүләһәб улына никах ителгәйне. Әбүләһәб, дошманлыҡ күрһәтеп, уны талаҡ иттерҙе (айыртты). Улы Рәсүлуллаға килеп: «Мин һине лә, динеңде лә яратмайым, шунлыҡтан ҡыҙыңды айырам», – тине лә, уның мөбәрәк яғаһынан алып, кейемен йыртты. Рәсүлулла ла ғәйрәткә килеп: «Йә, Рабби! Быға ла бер йыртҡыс һөжүм итһен», – тине. Хаҡ йәнәптәре пәйғәмбәрҙең доғаһын ҡабул ҡылды, Шам тарафына сауҙа менән барғанда, арыҫлан килеп сығып, уны һәләк итте.

Рәсүлулла төрлө яҡтан килгән халыҡтарҙы: «Эй, йәмәғәт! Аллаға ғына ғибәҙәт итегеҙ!» – тип дәғүәт итһә, Әбүләһәб уның артынан: «Эй, йәмәғәт!

Инанмағыҙ, был әҙәм ялғансылыр»,– тип ҡысҡырып йөрөр булды. Рәсүлулланың халыҡҡа вәғәз үә ғибрәтле ваҡиғалар һөйләгәнен күрһә, Назар бин Харис: «Эй, йәмәғәт! Бында килегеҙ, мин матур ҡиссаларҙы Мөхәммәттән күберәк беләм», – тип фарсы батшаларының хикәйәттәрен һөйләй башлай ине. Кафырҙар ни ҡәҙәр яман мөғәмәлә итһә лә, Рәсүлулла һаман тоғро юлға дәғүәт итте, ни ҡәҙәр мәшәҡәт күрһә лә, һис ялыҡмай, бар көсө менән тырышты. Халыҡтың ҡаршыуына ҡарап, хаҡты һөйләүҙән, хаҡты эшләүҙән туҡтамай, бәлки, бер көн инсафҡа килерҙәр, тип һаман йомшаҡлыҡ менән дәғүәт итә, пәйғәмбәрлегенә төрлө мөғжизәләр күрһәтә ине.

## *Сәхбәләрҙең яфа күреүҙәре*

Ғәрәптәрҙә туғанлыҡ хисе бик көслө булғанлыҡтан, Мәккәлә нәҫел-ырыуы булған сәхәбәләр аҙ ғына тынысыраҡ йәшәй, кафырҙарҙың насар мөғәмәлә үә мәсхәрәләренән башҡа ауырлыҡ күрмәй ине. Әммә ҡәрҙәштәре булмаған фәҡир мосолмандарҙың хәле бик ауыр булды. Кафырҙар золом итә, диндән айырырға тырыша, кеше алдында ғибәҙәт ҡылыуҙан, Рәсүлуллаға ҡатнашыуҙан тыя, бәғзеләрен иҫтәре киткәнсе туҡмай, бығаулап, ас тота. Был кафырҙарҙың башлығы Әбүжәһл үҙе лә төрлөсә золом итергә тырыша, башҡаларҙы ла шуға өндәп йөрөй. Иман килтереүсе әҙәм дәрәжәле, атаҡлы булһа, уны кәмһетергә тырыша, бай булһа, сауҙаһына зарар ҡыла, фәҡир, зәғиф булһа, золом итә ине.

Мәккә кафырҙары ҡәрйәләргә: «Мөхәммәткә иман килтереүсе булһа, ул кешене диненә ҡайтарығыҙ. Ҡайтмаһа, үлтергәнсе яфалағыҙ», – тип әмер таратты. Төрлө ифтиралар (яла, ғәйбәт) һөйләп йөрөнөләр. Әбүбәкер хәҙрәт Ҡөрьән уҡый башлаһа, вәғәздәрҙән, хикмәттәрҙән әҫәрләнеп, тыйыла алмайынса, илай-илай уҡый торғайны. Ҡөрьән һүҙен ишетеп, ҡатындар, балалар боҙола, тип кафырҙар Әбүбәкер хәҙрәтте Ҡөрьән уҡыуҙан тыйҙы. Йәсир исемле сәхәбәне ут менән ғазаплап үлтерҙеләр. Рәсүл хәҙрәт, быларҙың ғазап сиккәнен күреп: «Эй, Йәсир йәмәғәттәре! Сабыр итегеҙ, урынығыҙ – йәннәт. Йә, Рабби! Йәсир йәмәғәттәрен үҙең ғәфү ит», – тине.

Сүмәййә исемле ҡатынға Әбужәһл осрап: «Мөхәммәт динен ташла!» – тип ныҡышты. Ул ҡабул итмәгәс, ҡулындағы һөңгөһө менән сәнсте, ҡатын шунан вафат булды. Дин юлында беренсе шәһиттәрҙән (дин өсөн үлгән йәки үлтерелгән) ошо ҡатын булмыштыр. Билал исемле сәхәбә иң элек мосолман булған ҡолдарҙан ине. Хужаһы Өмәййә бин Хәләф уға ашарға, эсергә бирмәй, муйынына еп тағып, балаларға биреп, Мәккә урамдарында йөрөтә, йоморҡа, ит бешерлек эҫе көндәрҙә ҡояшҡа сығарып, өҫтөнә ҙур таш баҫтырып ҡуйып: «Мөхәммәт диненән ҡайтмаһаң, шулай үлтерәм», – ти ине. Исламға мөхәббәте Билал хәҙрәттең йөрәгенә, ҡанына урынлашып, Ислам өсөн бер түгел, мең йәнен бирергә әҙер торғанлыҡтан, диндә сабат (үҙ уйында ныҡ тороусы) булды. Һуңынан уны Әбүбәкер хәҙрәт һатып алып, азат итте. Хәҙрәт Рәсүлдең мөәзине (аҙан әйтеүсе) булып ғүмер итте.

Сәғд бин Уаҡҡастың әсәһе улының мосолман булыуын ишеткәс: «Әй, Сәғд!` Мин һине һаташҡан тип ишеттем, Мөхәммәт динен ташламаһаң, быға бер ҡабым тәғам, бер йотом һыу, валлаһи, харам булһын», – тип ант итте. Өс көн шулай үтте. Һуңынан Сәғд Рәсүлуллаға килеп, шикәйәт (зарланыу, һуҡраныу) әйтте: Шул саҡ «Ата-әсәгеҙҙе хөрмәт үә риғәйә итегеҙ, ләкин гонаһ ҡылыуға, Аллаһыға шәрик килтереүгә бойорһалар, итәғәт итмәгеҙ» йөкмәткеле аят индерелде. Сәғдтең әсәһе, аслыҡтан үлә башлағас, аптырап, антын боҙҙо.

Хәббәп исемле сәхәбә бер ҡатындың ҡоло, тимерсе ине. Шул ҡатын Хәббәптең арҡаһына ҡыҙған тимер, утлы күмер ҡуйып: «Мөхәммәт динен ташла!» –

тип ғазаплай ине. Бер ваҡыт Хәббәп хәҙрәт Рәсүлгә килеп: «Йә, Рәсүлулла!` Беҙгә доға ҡылһаң ине»,– тигәс, Рәсүлулла: «Әүәлге өммәттәрҙә тимер тараҡ менән иттәре таралған, баштары бысаҡ менән ярылған әҙәмдәр булды, шулай ҙа диндәренә сабат булдылар. Сабыр итегеҙ, бер көн һеҙгә лә иркенлек килер, һис кемдән хәүеф, золом күрмәçһегеҙ», – тип яуап бирҙе.

Рәсүл хәҙрәткә Ғәрәбстанға үә төрлө тарафтарға мосолмандарҙың хужа буласағы, донъяның һәр ҡитғаһында Ислам диненең таралаcағы вәхи илә белдерелгән ине. Ул ваҡытта Мәккә кафырҙары: «Урамға ла сығып йөрөй алмай торған мосолмандар, бер көн Ғәрәбстанға хужа булабыҙ, тип һөйләйҙәр, имеш», – тип мәсхәрә итә ине.

Хәлид бин Сәғит төшөндә ҡурҡыныс бер соҡорға ауа башлағас, Рәсүл хәҙрәт халас иткәнен (ҡотҡарғанын) күргән. Иртән тороп килеп: «Әй, Мөхәммәт! Нимәгә дәғүәт итәһең?» – ти, имеш. Рәсүл хәҙрәт яуабында: «Аллаға ғына ғибәҙәт итергә! Күрмәй, ишетмәй, файҙа килтермәй торған ағас, таштарға ғибәҙәттән туҡталырға! Ата-әсәгә яҡшылыҡҡа, һүҙеңдә, фиғелеңдә тоғролоҡҡа һис кемгә хыянат, золом итмәçкә дәғүәт итәм», – тине. Хәлид: «Былар беҙҙең өсөн файҙалы эштәр икән», – тип иман килтерҙе. Атаһы Мәккәнең олуғ байҙарынан булған, Сәғиттең улы мосолман булыуын ишеткәс, уға ауыр яза биргән. Ашарға, эсергә биреүҙән, уға һүҙ ҡушыуҙан бөтөн туған, таныш-белештәрен тыйған. Шул ваҡытта Сәғит ауырыу булып: «Сәләмәтләнһәм, Мөхәммәтте үлтерер инем», – тип нәҙер (аҙарынып үҙ-үҙенә биргән ант, вәғәҙә) әйтте. Хәлид Рәсүлуллаға бик ихлас итеп: «Атағыҙ нәҙере хаҡ булһа, ауырыуынан сәләмәтләнмәһә ине», – тип доға ҡылған. Сәғит шул ауырыуҙан вафат булған.

## *Исламды ҡабул итеү үә уның сәбәптәре*

Ҡурайыш халҡының ыҙа сигеүҙәре мосолмандарҙы һәм мосолман булырға теләгәндәрҙе кәметмәне. Көндән-көн бәғзеләре асыҡтан-асыҡ, бәғзеләре йәшерен булһа ла иманға килә ине. Иман килтереүселәр ғәйәт ихлас, Рәсүл хәҙрәт үә Ислам өсөн мең-мең йәндәрен фиҙа итергә әҙер торор ине. Быларҙың иманға килеүҙәре төрлө сәбәптәрҙән ине.

Беренсе үә хәл иткес сәбәп – Ҡөрьәндең мөғжизәлеге. Рәсүл хәҙрәт килгәндә ғәрәптәр араһында гүзәл шиғыр үә хөтбәләр (нотоҡ, вәғәз) һөйләү бик шөһрәт һаналғандан, етештереп һөйләнгән һүҙ менән етештерелмәгәнде бик яҡшы аңлайҙар ине. Быларға бик маһир заттар күп ине. Рәсүл хәҙрәт йәш ваҡыттан бирле шиғыр, хөтбә менән һис тә, бер ҡасан да мәшғүл түгел ине. Ғәрәптәр Ҡөрьәнде ишеткәндә уның бик хикмәтле, бик камил булыуын күреп хайран ҡалды. Рәсүлулланың үҙ һүҙенә үә һис бер бәндә һүҙенә лә оҡшамағанлығын аңланылар. Ни ҡәҙәр тырышып ҡараһалар ҙа, Ҡөрьән кеүек бер аят та һөйләргә әҙер булманылар. Шунлыҡтан бәғзеләре: «Мөхәммәттең үҙ һүҙе булһа, беҙгә аңлатып ҡына һөйләй алыр ине. Әлбиттә, Аллаһы Тәғәлә тарафынан килгән булырға кәрәк», – тип иман килтерҙеләр. Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә: «Әгәр әҙәмдәр, ендәр бергә йыйылып, бер-беренә ярҙамсы булһалар ҙа, Ҡөрьән оҡшашлы итеп һис һөйләй алмаçтар», – тип әүәлдән хәбәр биреп ҡуйған ине.

Икенсе сәбәп. Бәғзе ғәрәптәр Рәсүл хәҙрәттең йәштән бирле күркәм холоҡло, аҡыллы булғанын үә һәр эштә тоғролоҡҡа тырышҡанын күреп, уға мөхәббәт иткәндәр ҙә үҙ араларында: «Балаң булһа, шуның кеүек булһын ине», – ти ине. Шунлыҡтан «Мөхәммәт хәҙергесә тоғро, һис тә ялған һөйләмәй ине. Әлбиттә, был һүҙҙәре лә тоғро булыр», – тип иманға киләләр ине.

Рәсүл хәҙрәттең булған йә буласаҡ хәлдәрҙән хәбәр бирергә, хикмәтле һүҙҙәр һөйләргә оçталығы өсөнсө сәбәп булды. Рәсүл 40 йәшенә ҡәҙәр уҡый-яҙа

белмәй, һис кемдән ғилем өйрәнмәй үҫте һәм ҡапыл бик ҙур ғилем күрһәтте. Әхлаҡ үә мөғәмәлә бик хикмәтле һүҙҙәр һөйләй башланы. Әүәлге пәйғәмбәрҙәрҙе үә әхирәт хәлдәрен уҡымаған көйөнсә лә асыҡ бәйән итте, күп эштәргә алдан хәбәр бирҙе. Шунлыҡтан бәғзеләре:«Уға Аллаһы Тәғәлә тарафынан пәйғәмбәрлек килмәһә, был ҡәҙәр ваҡиғалар үә хикмәтле һүҙҙәр һөйләй алмаҫ, һөйләгәне, хәбәр иткән ваҡиғалары һәммәһе дөрөҫ булып сыҡмаҫ ине. Әлбиттә, хаҡ пәйғәмбәр булырға кәрәк», – тип иман килтерәләр ине.

Дүртенсе сәбәп. Бәғзеләре, Ҡөрьәндә яҙылған һәм Рәсүл хәҙрәт һөйләгән һүҙҙәрҙе аҡылдары менән үлсәп ҡарағас, күрҙе: «Рәсүл, Аллаһы ғына ғибәҙәт итеп, ағас, таш кисәктәренә ғибәҙәттән тыйылырға, тоғролоҡҡа ғәҙәтләнергә, күркәм холоҡло булырға, золом үә хыянаттан һаҡланырға, ата-бабаларҙан ҡалған ғәҙәттәргә генә эйәрмәйенсә, һәр нәмәне үҙ аҡылың менән үлсәп ҡарарға, һәр ваҡыт үҙең һәм туғандарыңдың донъя, әхирәттә бәхетле, сәғәҙәтле булыуҙарын ҡайғыртырға бойоралыр. Был эштәр беҙҙең өсөн файҙалы үә лазым (тейеш, зарур) нәмә икән», – тип иманға киләләр ине.

Бишенсе сәбәп. Бәғзеләр, Таурат, Инжил, Забурҙа: «Бер олуғ пәйғәмбәр киләсәк», – тип хәбәр бирелгәнлектән, уны күптән көтә ине. Шул пәйғәмбәр хаҡында яҙылған сифаттар үә ғәләмәттәр һәммәһе Рәсүл хәҙрәткә тура килә. Шунлыҡтан: «Әүәлге китаптарҙа хәбәр бирелгән пәйғәмбәр, әлбиттә, ошо хәҙрәт салаллаһу Ғәләйһи үә сәлләм булырға кәрәк», – тип иман килтерҙе.

Бәғзеләренең иманға килеүҙәренә алтынсы сәбәп Рәсүлдең сәхәбәләре ине. Хәҙрәттең мәжлестәре ғәйәт тәьҫирле, һүҙе күңелдәрҙе иретә, мөһабәтле һөйләшеүселәрҙе яуаптан ғажиз итә ине. Хатта дошмандары ла унын янына килгәндә риғәйә менән һөйләй. Рәсүл хәҙрәт һүҙҙе уйлап, көслө дәлил менән һөйләгәненә аптырап ҡалалар ине. Саф күңелле заттар бер мәртәбә ултырышыу менән уның (пәйғәмбәрҙең) мәжлестәренә йән күңелдән ғашиҡ булды. Шунлыҡтан Ҡурайыш халҡы: «Мөхәммәт, янына барған кешеләрҙе сихырлап, үҙенә мөхәббәт иттерә», – тип уның менән һөйләшеүҙән тыйыла, өйөнә килеүселәргә золом ҡыла килә ине.

Етенсе сәбәп. Хәҙрәт Рәсүлулланың төрлө мөғжизәләр күрһәтеүе, сәхәбәләрҙең, ни ҡәҙәр ыҙа-яфа күрһәләр ҙә, иманлыҡтарында сабат булыуҙары ине. «Пәйғәмбәр булмаһа, Мөхәммәт бындай мөғжизәләр күрһәтә алмаҫ ине. Әгәр Ислам дине хаҡ булмаһа, сәхәбәләре был ҡәҙәр ихлас тырышмаҫтар ине», – тип иман менән мөшриф булалар ине. Хәҙрәт Рәсүл үә сәхәбәләрҙең ыҙа-яфа күреүҙәре, ни ҡәҙәр мәшәҡәттәр күрһәләр ҙә, барыһына сыҙап, ижтиһад итеүҙәре (тырышлыҡтары) үҙе бер мөғжизә ине.

## *Хәбәш* (Эфиопия) *еренә һижрәт* (күсенеү)

Кафырҙар мөьминдәрҙе Исламдан кире ҡайтарырға бик тырышһа ла, ул диндең фәлән ере аҡылға муафиҡ (яраҡлы) түгел, тип әйтергә һүҙ таба алмай ине. Шунлыҡтан Исламға һүҙ үә дәлил менән түгел, бәлки, ҡул үә көс менән ҡаршы тора, ҡулдарынан килгән ҡәҙәр золом итәләр ине. Кафырҙар сиктән сыға башлағас, Рәсүл хәҙрәт сәхәбәләргә: «Хәбәш еренә һижрәт итегеҙ. Аллаһы Тәғәлә ярҙам бирергә вәғәҙә итте, иншалла, бер ваҡыт йыйылырбыҙ», – тине. Тыуған-үҫкән ерҙәрен ташлап, сәхәбәләр бала-сағалары менән Хәбәш иленә күсенде. Улар араһында Ғосман хәҙрәт үә ҡатыны Рүкәййә (Рәсүлулланың ҡыҙы), Зөбәйер бин әл-Ғәүүәм, Ғабдрахман бин Ғәүф, Ғабдулла бин Мәсғүд, Йәғфәр бин Әби Талибтар бар ине. Хәбәш батшаһы мосолмандарға риғәйә үә хөрмәт итеп, уларҙы урынлаштырҙы, мөьминдәр һис мәшәҡәт күрмәйенсә, рәхәт мәғишәт (тормош) итә башланы. Был мөһәжирҙәрҙең (күсенеүселәрҙең) ҡабул ителеүен күргәс,

һижрәт итеүселәр күбәйҙе. Иман килтереүселәрҙең күбеһе шунда йыйыла башланы. Был хәбәр Мәккәлә лә билдәле булғас, Мәккә кафырҙары Ислам диненең Хәбәш ерендә лә таралыуынан ҡурҡты. Нәжәшигә (Хәбәш батшаларының ҡушаматы) һәҙиәләр (бүләк) менән илсе ебәреп, мосолмандарҙы ҡайтарыуын үтенделәр. «Мосолмандарҙың ҡайһыһы бурыслы, ҡайһыһы ҡасҡан ҡол», – тип ифтира (ялған) һөйләнеләр. Был һүҙҙәрҙең ифтира икәнен һорашып белгәс, Нәжәши уларҙың телегән ҡабул итмәне, бүләктәрен лә кире ҡайтарҙы. Илселәр Нәжәши тарафынан мәрдүд (ҡыуылған) булып ҡайтты.

## *Хәмзә үә Ғүмәр хәҙрәттең* (раҙийәл-ләһү ғәнһүмә) *иманға килеүе*

Пәйғәмбәр Ғәләйһис-сәләмдең атаһы менән бер туған ҡәрендәше булғанлыҡтан, Хәмзә ҡәрҙәшлеге менән уға Абуталиб кеүек риғәйә итә ине. Бер көн Әбүжәһл Рәсүл хәҙрәткә тап килеп, яман һүҙҙәр һөйләне, тәхфиф итте (кәмһетте). Хәҙрәт, яуап биреүҙең файҙаһыҙлығын уйлап, сәкүт итте (өндәшмәне, һөйләшмәне). Хәмзә быны ишеткәс, унда ҡәрҙәшлек хисе ҡуҙғалды. Әбүжәһлгә барып: «Ни өсөн минең ҡәрендәшемде хәкарат иттең (хурланың), мин дә Мөхәммәт динендә», – тине лә уҡ-йәйәһе менән Әбүжәһлдең башына һуҡты. Тегенең башынан ҡан китте. Әбүжәһл яҡлылар Хәмзәнән үс алырға һүҙ ҡуйышты. Ләкин Әбүжәһл: «Хәмзәгә ҡул һуҙмағыҙ, асыуланып ысынлап та мосолман булып китмәһен», – тип туҡтатты. Шунан Хәмзәнең Әбүжәһлдәргә дошманлығы көсәйеп, Исламға мөхәббәте төшөп, Рәсүл хәҙрәткә иман килтерҙе. Хәҙрәт өсөн ижтиһад итәсәген белдерҙе үә был хаҡта шиғырҙар һөйләне. Хәмзә хәҙрәт һүҙгә маһирлығы менән халыҡ араһында иғтибарлы зат ине. Шунлыҡтан уның мосолман булыуынан сәхәбәләр ғәйәт шатланды. Был ваҡиға кафырҙарға ла бик тәьҫир итеп, улар ҡайғырҙы. «Мөхәммәткә иман килтереүселәр күбәйһә, тиҙҙән бер сараһын табырға кәрәк», – тип үҙ-ара кәңәшләштеләр. Әбүжәһл: «Мөхәммәтте үлтереүҙән башҡа сара юҡ, үлтереүсегә үҙем йөҙ дөйә бирәм», – тине. Башҡалар ҙа был фекерҙе йөпләне. Донъянан Ислам исемен бөтөрмәгә ҡарар бирҙеләр. «Мөхәммәттең вариҫ булырлыҡ, эш атҡарырлыҡ улдары юҡ, үлтерһәк, ҡотолорбоҙ, – тинеләр үә, – эште Ғүмәрҙән башҡа кеше булдыра алмаҫ», – тип уны ғәйрәткә килтерҙеләр. Ғүмәр, ғәйрәтләнеп, ҡылысын алды ла, Рәсүлулланың ҡайҙалығын белешеп, юлға сыҡты. Юлда ҡәрендәше Фатима менән кейәүе Сәғит бин Зәйедтең иман килтереүен ишетте. «Әүәл уларға яза бирергә кәрәк», – тип уларҙың өйөнә китте. Ул ваҡытта ҡәрендәштәре Ҡөрьәндең «Та Һа» сүрәһен өйрәнә ине. Ғүмәр ингәс тә: «Һеҙ ҙә Мөхәммәткә алданған икәнһегеҙ. Нимә уҡый инегеҙ?» – тип ныҡышты, ҡаты һүҙҙәр әйтте. Фатиманың йөҙөнә һуғып ҡанатты. Фатима ла, ғәйрәткә килеп: «Эй, Ғүмәр! Нисек Аллаһынан ояламайһың, был ҡәҙәр мөғжизәләр күрһәткән пәйғәмбәргә нисек ышанмайһың? Бына беҙ иман менән мүшшәрәф булдыҡ, башыбыҙҙы ҡырҡһаң да, Ислам диненән ҡайтмайбыҙ», – тине.

Ғүмәр ҡәрендәшенең бите ҡанға буялғанын күреп, шәфҡәте килде. Уның ысын ихласлыҡ менән һөйләгәнен ишетеп, әҙерәк ғәйрәте баҫылды. Ҡөрьән һүҙҙәре яҙылған ҡағыҙҙарҙы алып уҡыны, бик тәьҫирләнеп уйға ҡалды. Ҡөрьәндә булған бәләғәт үә хикмәттәргә иҫе китте. «Былар бәндә һүҙе булырға оҡшамай, әлбиттә, Аллаһы тарафынан килгән, Мөхәммәт ысын пәйғәмбәр икән», – тип иман килтерҙе, шунда уҡ Рәсүл хәҙрәт янына китте.

Сәхәбәләр, Ғүмәрҙең ҡылыс тотоп килеүен күреп, ҡурҡышты. Рәсүл хәҙрәт: «Ҡурҡмағыҙ, Ғүмәр яҡшылыҡ менән килә», – тине. Ғүмәр Рәсүлулла (салаллаһу

Ғәләйһи үә сәлләм) янына килгәс, уның алдында теҙ сүгеп, иман килтерҙе, Кәлимәи шәһәҙәт (иман һүҙе, гуаһлыҡ, шаһитлыҡ) уҡыны. Мосолмандар бик шатланды, һәммәһе берләшеп, тәкбир (Аллаһыны ололау) әйтте. Тәкбирҙәре Мәккә урамдарына ишетелде. Мәккә кафырҙары: «Ғүмәр Мөхәммәтте үлтереп ҡайтыр», – тип көтә ине.

Ғүмәр ҡайтыу менән, кафырҙар йыйылышына килеп: «Мине белгән белә, белмәгән белһен, мин – Ғүмәр бин әл-Хаттапмын, Әшһәдү - әәл лә иләһә илләл-лаһу үә әшһәдү әннә Мүхәммәдән рәсүлул-лаһ», – тине. Кафырҙар, был ваҡиғаны күреп, аптырап ҡалды, хәсрәткә төштө. Ғүмәр – Ҡурайыштың иң данлыҡлы ирҙәренән ине. Әбүжәһл менән икеһе иң эшлекле кешеләрҙән һаналалар ине. Ғүмәр хәҙрәттең мосолман булыуы менән ҡурайыштарҙың ҡанаттары һынды, Ислам диненә ыңғай ҡараусылар, иман килтереүселәр күбәйҙе. «Ғүмәр кеүек аҡыллы кешегә яраған дин беҙгә лә ярар», – тинеләр. Кафырҙарҙың яфаһынан ҡурҡып йөрөгән кешеләр иманға килде. Мосолмандар Ҡәғбәтулла янында әшкәрә намаҙ (асыҡтан-асыҡ, йәшермәй) уҡый башланы.

## *Ҡурайыштарҙың иттифағы*

Сәхәбәләрҙең бәғзеләре Хәбәш еренә килеп, рәхәтләнеп тора башланы. Ҡурайыштарҙың илселәре мәрдүд (ҡыуылыу) булып ҡайтты. Уның өҫтәүенә, Хәмзә хәҙрәт, унан һуң Ғүмәр хәҙрәт мосолман булды. Уларға эйәреп, байтаҡ кеше иманға килгәс, кафырҙарҙың дошманлығы көсәйҙе. «Мөхәммәт Ғәләйһис-сәләмде үлтермәйенсә рәхәт күрмәбеҙ» тип, төрлө хәйләләр ҡора башланылар. Ләкин Абуталибтар тырышып һаҡлағанлыҡтан, Рәсүлгә һис хыян итә алманылар. Шунан һуң Әбүжәһл үә башҡа кафырҙар иттифаҡ итеп (берләшеп), ғәһед (йөкләмә, килешеү) хаты яҙҙы. Унда: «Һашим ҡәбиләһе үә мосолмандар менән алыш үә биреш итмәҫкә, ҡыҙ алып, ҡыҙ бирмәҫкә, баҙарға индермәҫкә, мөғәмәлә итешмәҫкә, Мөхәммәт Ғәләйһис-сәләмде тапшырғансы (үлтермәйенсә) һис ҡасан солох итешмәҫкә», – тип яҙылғайны. Һуңынан хатты яҙыусы Мансур бин Ғикримдең ҡулы ҡороп, сулаҡ булып ҡалды. Ғәһед хатын Ҡәғбәтулла эсенә ҡуйҙылар. Был эш Һашим ҡәбиләһенә үә мосолмандарға бик ауыр булды. Баҙарға, урамға сыҡһалар, кафырҙар хәкарат (мәсхәрә) итте, тейешле аҡсаһын бирһәң дә, һис нәмә һатмайҙар, ситтән килгән сауҙагәрҙән дә мосолмандарға мал һаттырмайҙар ине. Ошо рәүештә ике йылдан ашыу хибестә (төрмәлә) кеүек йәшәнеләр. Ғәһед хатынан кафырҙар үҙҙәре лә күп зыян күреп, бәғзе аҡыллы кешеләрҙең кәңәше буйынса ғәһед хатын боҙҙолар. Әбүжәһл ҡаршы төшһә лә, уның һүҙе ҡабул ителмәне.

Рәсүлулла салаллаһу Ғәләйһи үә сәлләм Абуталибҡа: «Ғәһед хатындағы яҙыуҙарҙың Аллаһы исеменән башҡаларын көйә ашаны», – тип хәбәр биргәйне. Уның дөрөҫләнеше бәғзе әҙәмдәрҙең инсафҡа килеүенә сәбәп булды.

## *Ғәм әл-хузн* (Ҡайғы йылы)

Ҡурайыштарҙың ғәһед хаты боҙолғас, мосолмандарға бер нисә ай иркенлек килеп, оҙаҡҡа барманы. Нубүүәттең (пәйғәмбәрлектең) унынсы йылында Һашим ҡәбиләһенең башлығы Абуталиб 87 йәшендә донъя ҡуйҙы. Шул арала 65 йәшендә Хәҙисә лә вафат булды. Уларҙың икеһенең дә бер ваҡытта вафат булыуынан Рәсүлуллаға бик ауыр булды, ул бик ҡайғырып, ул йылды «Ғәм әл-хузн» (Ҡайғы йылы) тип атаны.

Абуталиб иман килтермәһә лә, Рәсүлулланы үә мосолмандарҙы кафырҙарҙан һаҡларға тырыша, иманға килеүселәрҙе ярата, уның пәйғәмбәр булыуына ла инана ине. Ләкин үҙе Һашим ҡәбиләһенең башлығы булып, Рәсүлулла ла уның

ҡулында үҫкәнлектән, тел менән иҡрар итеүҙе үә уға эйәреүҙе ауырһына ине. Бер ваҡыт Абуталиб: «Мөхәммәттең һүҙҙәре дөрөҫ, ул батил (ялған) һүҙ һөйләмәй, әгәр Ҡурайыш ҡатындары, Абуталиб үҙ ҡулында үҫкән Мөхәммәткә эйәрҙе, тип ғәйеп итмәһә, уға эйәрер инем», – тине.

Хәҙисә хәҙрәт раҙи йәл-лаһү ғәнһә аҡыллы, тәдбирле (эштең аҙағын, ахырын уйлап эшләү, алдан күреү) ҡатын ине. Рәсүлулла кафырҙарҙан яман һүҙҙәр ишетеп, кәйефһеҙләнеп ҡайтһа, уны йыуатырға, күңелен табырға тырышты.

Рәсүлулланың унан Ҡасим, Ғабдулла исемле улдары, Зәйнәп, Рүкәййә, Өммөгөлсөм, Фатима исемле ҡыҙҙары донъяға килмештер. Быларға өҫтәп, Мария Ҡибтийәнән Ибраһим исемле улы тыуҙы. Малайҙарҙың барыһы ла сабый саҡта вафат булған. Ҡасим баш балаһы булғанлыҡтан, Рәсүлулланы Әбулҡасим (Ҡасимдың атаһы) тип йөрөттөләр. Ҡыҙы Зәйнәп Әбулғас бин Рәбиғ никахында ине. Рүкәййә Ғосман никахында булып, уның вафатынан һуң Ғосман Өммөгөлсөмгә никахланды. Шунлыҡтан Ғосман хәҙрәткә «ҙүн-нурайни» (пәйғәмбәрҙең ике ҡыҙына никахланған, ике нур эйәһе) тинеләр. Уларҙан нәҫел ҡалманы. Фатима Ғәлени хәҙрәт никахында булды. Ир үә ҡыҙ балалары, уларҙың да үҙ балалары күп булып, нәҫелдәре киң таралған. Был нәҫелгә сәййет (Мөхәммәт пәйғәмбәр нәҫеленән булған кеше) тиҙәр.

## *Таиф сәфәре*

Рәсүлуллаға дошманлыҡ, хөсөт кафырҙарҙың йөрәгенә урынлашып, улар Абуталиб хәтерен генә хөрмәтләп тора ине. Абуталибтың вафат булыуына кафырҙар бик шатланды. Рәсүлуллаға үә мосолмандарға яфаларын, дошманлыҡтарын арттырҙы. Дошманлыҡтары шул дәрәжәгә етте: «Йә Рабби!` Мөхәммәттең дине хаҡ булһа ла, күктән таш яуып йәки ҡаты ғазап менән һәләк булһаҡ та, иманға килмәһәк ине», – тиҙәр ине. Ҡурайыш халҡының ғинады (тиҫкәрлеге, үҙһүҙлеге) был дәрәжәгә еткәс, Рәсүлулла ла уларҙан өмөтөн өҙҙө, хаҡлыҡ өсөн тырышҡан инсафлы заттар табылыр, тип Зәйед бин Хәрҫә менән Таифҡа китте. Таифтың ололарын күреп, иманға дәғүәт итте. Таиф халҡы ҡабул итмәне генә түгел, бәлки, бәғзе ахмаҡ, аҡылһыҙҙарҙы үә ҡолдарҙы: «Хәҙер Мөхәммәт һеҙҙе лә аҙҙырырға, ата-бабаларығыҙ диненән сығарырға килгән», – тип ҡоторттo. Ул ахмаҡтар ҙа Рәсүл хәҙрәткә яман һүҙҙәр һөйләне, мәсхәрә итте, хатта: «Инде беҙҙе лә аҙҙырырға килдеңме?» – тип өҫтөнә балсыҡ үә таштар ырғытты, мөбәрәк аяғын ҡанатты.

Шул ваҡыт Зәйед бин Хәрҫә: «Миңә ауырлыҡ килһә килһен, фәҡәт Рәсүл генә сәләмәт булһын», – тип үҙен таштарға ҡалҡан итеп, бер нисә ерҙән йәрәхәтләнде. Рәсүлулла Таифтан киткәс: «Йә, Рабби, көс ҡеүәтем зәғиф, тәдбирем аҙ булыуын, әҙәмдәрҙең ғинадын беләһең. Йә, Рабби! Һин зәғифтәрҙең хужаһы! Йә, Рабби! Үҙең ярҙам бир! Йә, Рабби! Асыуыңа дусар булмаһам, башҡа һис бер нәмәгә иҫем китмәй, бер нәмәгә илтифат итмәйем», – тип доға ҡылды. Дингә дәғүәт итеүҙә ни ҡәҙәр мәшәҡәттәр күрһә лә, ғәйрәтенә, ижтиһадына һис зарар килтермәгәнен аңлатты.

Мөхәммәт Таифтан ҡайтҡас та, Ябраил хәҙрәт килеп: «Эй, Мөхәммәт! Был мөғәмәләләр өсөн Таиф ҡәүеменә ни бойорһаң, шуны эшләргә йәнәби Хаҡ (Аллаһы Тәғәлә) йәнәбтәре миңә әмер итте», – тине. Рәсүл хәҙрәт яуабында: «Эй, Ябраил! Таиф халҡы үҙҙәре яман мөғәмәлә ҡылһа ла, мин уларҙан Аллаһыға ғына ғибәҙәт ҡыла торған яҡшы балалар тыуыуына өмөт итәм», – тине. Һуңында: «Йә, Алла! Был ҡәүем наҙанлыҡтары менән шундайын мөғәмәлә ҡыла, йә, Рабби, үҙең уларҙы тоғро юлға күндерсе!», – тип халыҡҡа хәйер-доға ҡылды.

## *Мәҙинә халҡының Исламға килеүе*

Хаж ваҡыттарында Мәккәгә Ғәрәбстандың һәр яғынан йыйылып хаж ҡылалар, һәр ҡәбилә, үҙенең поттарын зыярат итеп, ҡорбан сала ине. Шул ваҡытта Мәккә яғынан да ҙур баҙарҙар ҡороп, алыш-биреш иттеләр. Һуңынан йыйылышып гүзәл шиғырҙар, төрлө хөтбәләр һөйләйҙәр, бик матур, мәҡбүл (ҡабул ителгән, күңелгә оҡшаған) шиғырҙарҙы алтын менән Ҡәғбә диуарына яҙып ҡуялар ине. Мәккә халҡынан өмөтөн өҙгәс, Рәсүлулла хаж ваҡытында йыйылған ғәрәптәрҙе дингә өгөтләргә кереште. Төрлө ҡәбиләләрҙән иманға килеүселәр артып торһа ла, таяныс булырлыҡ, дингә ярҙам бирерлек ҡәбиләләрҙең иманға килеүен көттө.

Пәйғәмбәрлектең ун беренсе йылында Мөхәммәт, Мәҙинә халҡынан алты кешегә осрап, уларҙы Ислам диненә дәғүәт итте, Ҡөрьән уҡыны. Мәҙинә халҡы күршеләре йәһүдтәрҙән: «Бер ҙур пәйғәмбәр киләсәк, тирә-яҡта ғалиб (еңеүсе, өҫтөн сығыусы) буласаҡ. Тауратта шулай хәбәр бирелгән», – тигән һүҙҙәрҙе ишеткәйне. Шунлыҡтан Рәсүлулла дәғүәт иткәндә, улар, бер-береһенә ҡарашып: «Йәһүдтәр һөйләгән пәйғәмбәр ошо зат булһа кәрәк, дошманыбыҙ булған йәһүдтәргә ҡәҙәр был динде ҡабул итәйек», – тип һөйләштеләр ҙә иманға килделәр, Рәсүлуллаға, Ислам диненә мөхәббәт тыуҙырып киттеләр.

Мәҙинәгә ҡайтып быны һөйләгәс тә, иманға килеүселәр күбәйҙе. Икенсе йылда Мәҙинәнән 12 кеше Рәсүлулла хозурына Ҡөрьән үә Ислам хөкөмдәрен өйрәнергә үҙҙәре менән Мүсғәп бин Ғүмәйр исемле сәхәбәне алып килделәр. Ошонан һуң Мәҙинәлә Ислам бик ныҡ таралды, мәжлестәрҙә бер-береһе менән осрашҡанда, бар һүҙҙәре Рәсүлулла һәм Ислам дине тураһында булды. Мәҙинәлә Ислам инмәгән өй бик аҙ ҡалды.

Пәйғәмбәрлектең ун өсөнсө йылында Мәҙинә халҡынан етмештән артыҡ ир үә бер нисә ҡатын Рәсүлулла хозурына килде, итәғәт үә мөхәббәт күрһәтте. Ислам өсөн малдары, йәндәре менән тырышасаҡтарына, ярҙам итәсәктәренә ғәһед бирҙеләр. Рәсүлулла һәм сәхәбәләр Мәҙинәгә һижрәт итһә, һәммәһе йән үә күңелдән шат буласаҡтарын һөйләнеләр, Мәҙинәгә күсеүҙәрен теләнеләр. Ҡурайыш халҡы, Мәҙинәнән килгән кешеләр менән Рәсүлулла араһында булған ғәһедтәрҙе ишеткәс тә, артығыраҡ дошманлыҡ күрһәтергә тырышты.

Бынан һуң Рәсүлулланың кәңәше менән сәхәбәләр берәм-берәм Мәҙинәгә һижрәт итә башланы.

Кафырҙарҙың хафаларынан ҡурҡып, һәммәһе кистәрҙә йәшерен генә һижрәт итә ине. Ғүмәр хәҙрәт кенә, ҡоралды килеш Ҡәғбәтулланы тәүаф итеп (әйләнеп сығып), шундағы кафырҙарға: «Мин һижрәт итәм, кем дә кем балаларын етем, ҡатынын тол итергә, ата-әсәһен илатырға теләмәһә, артымдан сыҡһын, мин Батханан (ер исеме) китәм», – тине. Һис кем уның артынан сығырға батырсылыҡ итмәне. Һуңынан сәхәбәләр бер-бер артлы һижрәт итеп, Мәккәлә Рәсүлулла менән Әбүбәкер, Ғәли үә кафырҙар тарафынан хибес ителгән сәхәбәләр генә ҡалды. Дин өсөн тыуған-үҫкән ерҙәрен ташлап киткән сәхәбәләргә «мөһәжирин» (күсеүсе), ә Ислам диненә ярҙам иткән Мәҙинә халҡына «әнсар» (ярҙамсы) тиҙәр.

## *Рәсүлулла салаллаһу Ғәләйһи үә сәлләмдең һижрәте*

Ислам диненең Мәҙинәлә ҡеүәт табыуы, сәхәбәләрҙең унда күсенеүе кафырҙарҙы тәшүишкә (буталышҡа, шикләнеүгә) төшөрҙө, сөнки Мәккә халҡының Шамға тижарәт (сауҙа) каруандары Мәҙинә арҡылы йөрөй ине. Мәҙинә ҡалаһы мосолмандар ҡулында булһа, бөтөн сауҙалары, каруандары туҡталасаҡ, Ислам

дине таралаcаҡ, мосолмандар ҡеүәтләнеп, кафырҙарҙан үс аласаҡ ине. Шуға күрә лә Ҡурайыш халҡы ҡаушап китте, кәңәш мәжлестәре ойоштороп, төрлөсә фекер йөрөттөләр. Һуңынан, Әбужәһл тәҡдиме буйынса, һәр ҡәбиләнән берәр кеше берҙәм һөжүм итеп, Рәсүлулланы үлтерергә ҡарар ителде. «Мөхәммәттең урынына пәйғәмбәр булырлыҡ балаһы юҡ, үлтерһәк, ҡотолорбоҙ, Ислам дине һүнеп ҡалыр», – тинеләр. Кис ишектән сыҡҡанда һәммәһе бергә һөжүм итеп, үлтермәк булдылар.

Шул ваҡыт хәҙрәт Ябраил фәрештә килеп, Рәсүлуллаға кафырҙарҙың кәңәшхәйләләре хаҡында хәбәр бирҙе үә йәнаб (ололап әйтелгән һүҙ) Хаҡ (Алла) тарафынан һижрәткә иҙн (рөхсәт) килтерҙе. Рәсүлулла үҙ урынына Ғәлиҙе ятҡырып сығып китте. Кафырҙарҙың күҙҙәре томаланып ғәфләттә ҡалды, уның сығып киткәнен белмәнеләр. Шунан Мөхәммәт, Әбүбәкер хәҙрәткә осрап, Аллаһы Тәғәлә тарафынан һижрәткә барыуын, үҙе менән бергә һижрәт итәсәктәрен һөйләне. Әбүбәкер хәҙрәт Рәсүлулла менән бергә һижрәттән ғәйәт дәрәжәлә шатланғанлыҡтан мөбәрәк күҙҙәренән йәш килде.

Икеһе бергә Мәккәнән сығып, Ҫәүр тауында бер ғарға (мәмерйә) кереп йәшенделәр. Кафырҙар Рәсүлулланың һиҙҙермәҫтән сығып киткәнен, үҙҙәренең Ғәлиҙе һаҡлап төн үткәргәндәрен белгәс, хайран ҡалдылар. «Кем дә кем Мөхәммәтте тотоп килтерә, йөҙ дөйә бирәбеҙ», – тип иғлан иттеләр, йыйылышып Мәккәнең тирә-яғынан эҙләнеләр, ғарға килделәр. Ләкин шул ваҡытта Аллаһының әмере менән мәмерйә ауыҙына үрмәксе ау ҡороп, күгәрсен йомортҡа һалғайны. «Был үрмәксе ауҙары Мөхәммәт тыуғанса ҡоролған, бында ул нисек булһын» – тип, инеп ҡарамай, ҡайтып киттеләр. Әбүбәкер хәҙрәт кафырҙарҙы күреп, бик ҡайғырҙы. «Йә, Рәсүлулла, мин бер кешемен, үлтерһәләр, һис нәмә булмаҫ. Хоҙай һаҡлаһын, һиңә берәй зарар килтерһәләр, бөтөн өммәт һәләк буласаҡ», – тине. Рәсүлулла: «Ҡайғырма! Аллаһы беҙҙең менән», – тине. Шунда мөбәрәк башын Әбүбәкер хәҙрәттең тубығына һалып, йоҡоға китте. Аллаһы Тәғәлә: «Эй, Мөхәммәт!` Һине кафырҙар зарарынан һаҡлармын», – тип вәғәҙә иткәненән һуң, ул ҡурҡманы ла, ҡайғырманы ла. Ғарҙа өс көн тороп, Мәҙинәгә һижрәт иттеләр.

## *Мәҙинә халҡының истиҡбалы* (хөрмәтләп ҡаршылауы)

Мәҙинә халҡы, Рәсүлулланың Мәккәнән сығыуын ишеткәс, ғәйәт дәрәжәлә шатланды, донъяһын онотто, бөтөн һөйләгәндәре Рәсүл Әкрәм булды, һәр көн юлға сығып көттө. Мәҙинәгә еткәндәрен күргәс тә, һәммәһе ҡоралланып, зиннәтләнеп сыҡты, ғәйәт дәрәжәлә ҡыуанышып ҡаршыланы. Мөхәммәт Мәҙинәгә биш саҡрым етмәйерәк Ҡуба ауылында бер нисә көн торҙо. Шунда бер мәсет бина итте. Исламда беренсе мәртәбә бина ителгән мәсет ошо Ҡуба мәсетелер.

Һуңынан Мәҙинә ҡалаһына килделәр. Ирҙәр, ҡатындар, балалар – барыһы ҡаршы алды. Был көн ҡала халҡына бик ҙур байрам булып, шатлыҡтары эстәренә һыймай ине. Балалар, шатланышып, урамдарҙа: «Рәсүлулла килде», – тип шатлыҡ изһар итәләр (шатлыҡтарын күрһәтә, майҙанға сығара), ҡатындар, кәнизәктәр: «Йә, Рәсүлулла, хуш килдегеҙ», – тип матур-матур шиғырҙар уҡый ине. Һәр йорт алдынан үткәндә: «Рәхим итегеҙ, йә, Рәсүлулла», – тип ҡунаҡҡа саҡырҙылар, ихласлыҡ күрһәтеп, дөйәһенең теҙгененә йәбешеп, йорттарында ҡунаҡ булыуын үтенделәр. Рәсүл хәҙрәт: «Дөйәнең ихтыярына ҡуйығыҙ, ҡайһы ергә сүкһә, шул ерҙә туҡталыш буласаҡ», – тине. Дөйә Әбү Әйүб әл-Әнсари йорто алдына теҙ сүкте. Рәсүл хәҙрәт уның йортона ҡунаҡ булды. Әнсарҙарҙан Әсғәт бин Зүрәрә: «Хәҙрәттең дөйәһе миндә булһын, дөйәһен ҡунаҡ итәйем», – тип уны алып китте.

Һижрәттән һуң, Ислам дине ҡеүәт табып, бик тиҙлек менән таралғанлыҡтан, хәҙрәт Ғүмәр хәлифә ваҡытында һижрәт әһел Ислам өсөн тарих тәғьйин (Ислам донъяһы өсөн йыл башы) ителде. Рәсүл хәҙрәт рәбиғүл әүүәлдә һижрәт итһә лә, сәхибәләр Ислам донъяһы өсөн йыл башы мөхәррәмдә һижрәт итә башлағанлыҡтан, жәһаләт (наҙанлыҡ) заманында ла мөхәррәмде йыл башы иткәнлектәренән шул йылдың мөхәррәменән йыл башы үә Һижри тарихы хисапланалыр.

Мәҙинә халҡы Рәсүл хәҙрәтте ғәйәт ололап, йәндәренән ғәзиз күреп хөрмәт итте. Үҙе ярҙамсыһы Әбү Әйүб йортонда торһа ла, унда ғына ҡунаҡ булыуына риза булманылар. Бәлки, хөрмәтле сәхәбәләр һәр көн Рәсүл хәҙрәткә сират менән тәғам (ашамлыҡ) килтерҙе. Һәр ваҡыт ярҙамға әҙер тороп, нисек тә уның күңелен табырға тырыштылар. Хатта Әнәс бин Мәликтең әсәһе килеп: «Йә, Рәсүлулла! Ҡабул итһәгеҙ, ошо балам Әнәс хеҙмәтегеҙҙә булһын ине», – тип улын килтерҙе. Рәсүл хәҙрәт ҡарсыҡтың әйткәненә риғәйә итеп ҡабул итте. Ул ваҡытта Әнәс ун йәшендә ине.

Хөрмәтле әнсарҙар үә мөһажирҙәрҙе ололап ҡаршы алды, күңелдәрен табырға тырышты. Һәр береһе хөрмәт итеүгә ҡыҙығып: «Минең өйөмдә лә мөһажирҙәр ҡунаҡ булһа ине», – тип тауышланды. Һуңынан мөһажирҙәрҙе үҙ өйҙәрендә ҡунаҡ итергә ҡорға (шыбаға) һалып, бүлешеп алдылар. Үҙ малдарын бүлешеп бирҙеләр, һәр йыл ни ҡәҙәр хөрмәләре булһа, шуның яртыһын мөһажирҙәргә бирә барҙылар. Хатта бәғзе ике ҡатынлы кешеләр бер ҡатынын талаҡ итеп (айырып), ҡатынһыҙ мөһажирҙәргә бирмәк булды. Рәсүл хәҙрәт былар араһындағы дуҫлыҡты арттырмаҡҡа, мөһажирҙәр менән әнсарҙарҙы бер-береһенә ҡәрҙәш итте. Һәр әнсар бер мөһәжир менән ҡәрендәш үә дуҫ булды. Бер-береһенән мираҫ алдылар, ярҙам итештеләр. Был эш ике фирҡә (төркөм) араһында иттифаҡ артыуына ҙур сәбәп булды.

Һуңынан Рәсүл хәҙрәт дөйәһе сүккән урынға мәсет бина итергә керешә. Уның диуарҙарын кирбестән, бағана, түбәләрен хөрмә ағасынан эшләнеләр. Мәсет бина иткәндә, Рәсүл хәҙрәт үҙе кирбес, таш ташыны. Мәсеттең бер яғына тоташтырып үҙенә махсус хөжәрәләр (бүлмә) бина итте.

## *Һижрәттән һуңғы ваҡиғалар*

Рәсүлулла сәхәбәләр менән Мәҙинәгә урынлашҡандан һуң үҙҙәренә әҙерәк иркенлек тапты. Эштәре уң булып, иттифаҡтары ҡеүәтләнде, Хәбәш еренә һижрәт иткән сәхәбәләрҙең дә күбеһе ҡайтты. Ислам, иман ләфзаларын (һүҙҙәрен) асыҡ һөйләй, теләгәнсә, белгәнсә ғибәҙәт ҡыла башланылар. Рәсүлулла Мәҙинә яҡтарындағы ҡәбиләләрҙе дәғүәт итеп ойоштороуҙы башлап, иман килтереүселәр көндән-көн артты. Рәсүл хәҙрәттең: «Бер көн иркенлек киләсәк, Ислам ғалиб (еңеүсе) буласаҡ», – тигән һүҙҙәренә ышаныстары артып, дин өсөн ижтиһад итергә тотондолар. Мәҙинәгә яҡын ҡәбиләләргә Ислам динен аңлатып, иманға килтерергә тырыштылар. Унда булған йәһүдиҙәр иһә бер-береһенә зарар ҡылмаҫҡа солох итте. Ләкин Мәккә кафырҙары, был хәлдәрҙе ишеткәс, бик әсәрләнде, ҡайғы-хәсрәттәре көсәйҙе. Мосолмандарҙың ҡеүәтләнеүенән, Ислам диненең бөтә Ғәрәбстанға таралыуынан ҡурҡа башланылар. Нисек тә мосолмандарға зарар ҡылып, бөтөнләй һәләк итергә уйлап, күрше ҡәбиләләрҙе ҡоторта башланылар. Рәсүлулланы үлтерергә тип нисә мәртәбә кеше ялланылар.

«Мосолмандар ҡеүәтләнһә, Шам менән сауҙабыҙҙы туҡтатырҙар, поттарыбыҙҙың ҡәҙере бөтөп, халыҡ Мәккәгә йөрөмәҫ. Мосолмандар беҙҙән үс ала башлар, шуға күрә эшебеҙҙе тиҙерәк бөтөрәйек, ҡеүәтләнеп еткәнсе мосолмандарҙы, Исламды юҡ итергә кәрәк», – тип ҡарар иттеләр. Кафырҙарҙың зарарҙарынан

ҡотолоу сараларына тотонорға тейеш булып, Аллаһы Тәғәлә тарафынан кафырҙар менән һуғышырға әмер бирелде. Рәсүлулла, сәхәбәләр дошмандың көсөн кәметергә, мосолмандарҙы кафырҙар зарарынан һаҡланырлыҡ дәрәжәгә күтәрергә кереште. Кафырҙар менән һуғыш нисә мәртәбә булды. Уларҙың Рәсүлулла ла ҡатнашҡандарын «ғазауат» тиҙәр. Үҙе ҡатнашмағандарына «сәриййәт» тиҙәр. Был китапта мәшһүр булған ғазауаттарҙы ғына бәйән итәбеҙ.

## *Әһле Ислам алып барған һуғыштар*

Һижрәттән һуң икенсе йылда Бәҙер һуғышы булып, унда мосолмандарҙан – 313, кафырҙарҙан 950 кеше ҡатнашты. Был Ҡурайыш халҡы менән ике арала беренсе иң мәшһүр һуғыштыр. Әүәл дә мосолмандар ҡурайыштарҙың күплегенән ҡурҡа ине. Рәсүлулла доға ҡылды, ярҙам теләне. «Аллаһы Тәғәлә мосолмандарға ярҙам бирәсәген үә ғалиб (еңеүсе) буласағыбыҙҙы вәғәҙә итте», – тип хәбәр бирҙе. Сәхәбәләрҙең йөрәктәренә ҡеүәт-ғәйрәт керҙе, кафыр ғәскәрҙәре аҙыраҡ булып күренде. Үҙҙәренән өс тапҡыр күберәк булған кафырҙар менән һуғышҡа инеп ғалиб булдылар, бик күп ғәнимәт малы алдылар. Кафырҙарҙың етмеше һәләк булды, етмеше әсир алынып, ҡалғандары ҡасты. Мосолмандарҙан 14 кеше шәһит (дин өсөн һуғышта үлеүсе) булды. Кафырҙарҙан Әбүжәһл, Өмәййә бин Хәләф, Ғүҡбә Назар бин Харис кеүек Исламдың ҡаты дошмандары юҡ ителде. Әбүләһәб – Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең ҡан дошманы, Ҡөрьәндең 111-се сүрәһе уға арналған: «Әбүләһәбтең ике ҡулы ла һәләк булһын, һәм ул үҙе һәләк булды». Был ваҡиғаны ишеткәс тә хәсрәтенән вафат булып, йәһәннәмгә китте. Әсирҙәрҙе, 1000 дирһәмдән (дирһәм – боронғо көмөш тәңкә) 4000 дирһәмгә ҡәҙәр түләтеп, азат иттеләр. Аҡса бирергә көсө етмәгәндәрҙе унар балаға уҡырға, яҙырға өйрәттереп, шуның хаҡына азат иттеләр. Әсирҙәр араһында Ғаббас бин Ғәбит әл-Моталлиб хәҙрәт, Ғуҡәил бин Әбүталиб та булып, һуңынан улар Исламға килде. Рәсүлулла ғәнимәт алған малдарҙы һуғышта ҡатнашыусыларға тигеҙ бүлеп бирҙе, үҙенә һис нәмә алманы.

Мосолмандарҙың аҙ ғәскәр менән ғалиб булып, кафырҙарҙың башлыҡтары һәләк булғанлыҡтан, Исламдың шөһрәте артты. Бик күп кешеләр был диндең хаҡ булғанлығына, Аллаһының мосолмандарға ярҙам итеүенә иғтиҡад (ышаныу, инаныу) булып, Рәсүлуллаға килеп, мосолман була башланылар.

Һижриҙең өсөнсө йылында Бәҙерҙән мәғлүб булып (еңелеп) ҡайтҡан кафырҙар 3000 кеше йыйылып, мосолмандарҙан үс алырға Мәҙинәгә сәфәр итте. Рәсүлулла үә бәғзе сәхәбәләр ҡала эсендә тороп һуғышыуҙы муафиҡ (яраҡлы, урынлы) күрһә лә, күберәк сәхәбәләр, бигерәк тә йәштәр «Ҡаршы сыҡмаһаҡ, ҡурҡаҡ тиерҙәр» тигәс, Рәсүлулла 1000 кешеһе менән кафырҙарға ҡаршы сыҡты. Йәшерәктәрҙе ҡайтарып ебәргәндә, Сәмрә исемле малай: «Көрәшкәндә мин Рафиҡты еңә инем, уны һуғышҡа алып, мине ҡалдырҙылар», – тип иланы. Рәсүлулла быны ишеткәс тә: «Рафиҡ менән көрәшеп ҡара, еңһәң, һин дә барырһың», – тине. Сәмрә көрәшеп еңгәс, уға ла һуғышҡа барырға рөхсәт ителде.

Монафиҡтарҙың (ике йөҙлө, эскерле) башлығы Ғабдулла бин Үбәй: «Рәсүлулла, йәштәр һүҙенә ҡарап, Мәҙинәнән сыҡты», – тип үпкәләп, 300 монафиҡ менән ҡайтып китте. Ислам ғәскәре 700 кеше генә ҡалды. Рәсүлулла: «Мин бойорғанса хәрәкәт итһәгеҙ, сабыр итһәгеҙ, әлбиттә, ғалиб булырһығыҙ», – тип сәхәбәләрҙе өгөтләне. Тау артынан дошман килеп сыҡмаһын тип, 50 кешенән һаҡсы ҡуйып: «Беҙҙең ғалиб булыуыбыҙҙы күрһәгеҙ ҙә, мин әмер бирмәйенсә ҡуҙғалмағыҙ», – тине.

Ике ғәскәр Ухуд тауында осрашып, һуғыш башланды. Аллаһы Тәғәлә мосолмандарға ярҙам биреп, улар үҙҙәре ҡәҙәр дүрт өлөш булған кафырҙарҙы ҡыйратты. Кафырҙар ҡаса башланы. Быны күргәс, сәхәбәләр: «Инде ҡурҡыу ҡалманы, мосолмандар ғалиб булды», – тип ғәнимәт малы алырға йүгерҙе, Рәсүлулланың әмеренә хилаф эш ҡылды. Шул ваҡыт уларҙың артынан дошман ғәскәре килеп сығып, мосолмандар ике дошман араһында аптырап ҡалды. Әһле Ислам (мосолман) ғәскәре тарала, ҡаса башланы. Фәҡәт Рәсүлулла бер нисә сәхәбә менән урынынан ҡуҙғалманы. Кафырҙар һөжүм итеп, етмешкә яҡын мосолманды шәһит итте. Шәһиттәр араһында Хәмзә хәҙрәт тә бар ине. Кафыр ғәскәренең башлығы Әбү Суфияндың ҡатыны Һинд асыуынан Хәмзә хәҙрәттең эсен ярып, йөрәген алып сәйнәне, танауын, ҡолаҡтарын киҫеп алды. Рәсүлуллаға таш ташлап, мөбәрәк тешен һындырҙылар, яңағын ҡанаттылар. Һуңынан әһле ислам ғәскәре йыйылып, яңынан һуғышҡа әҙерләнһә лә, кафырҙар: «Беҙ ғалиб булдыҡ!» тип, Мәҙинәгә инмәй, мосолмандарға ла башҡаса зарар ҡылмай, ашығып Мәккәгә ҡайтып китте.

Һижриҙең бишенсе йылында Мәккә кафырҙары, Мәҙинәне үә мосолмандарҙы һәләк итергә тип, бөтә тирә-яҡтағыларҙы һуғышҡа 10000 кешелек ғәскәр йыйып, Мәҙинәгә сәфәр итте. Рәсүлулла, кафырҙарҙың был ниәттәрен ишеткәс тә, сәхәбәләр менән кәңәшләште. Сәлмән әл-Фарсиҙың тәҡдиме менән, Мәҙинә яғына хәндәк (тәрән канау) ҡаҙыуҙы мәслихәт күрҙеләр. Рәсүлулла сәхәбәләре менән бик тырышып, бер нисә көндә эш тамам булды. Хәндәк ҡаҙығанда Рәсүлулла үә сәхәбәләр төрлө шиғырҙар уҡыйҙар ине.

Мәҙинәгә туп-тура барып керәбеҙ, тип килгән кафырҙар был хәндәкте күреп ғәжәпкә ҡалды, сөнки ғәрәптәрҙә хәндәк ҡаҙыу ғәҙәте юҡ ине. Кафырҙарҙың бәғзе баһадирҙары хәндәкте ат менгән килеш һикереп сығырға батырсылыҡ итеп ҡараһа ла, аттары менән һәндәккә төшөп һәләк булды. Ике аҙнанан артығыраҡ кафырҙар Мәҙинәне ҡамап торҙо. Ҡала янында булған йәһүдтәр, мосолмандар менән ғәһедтәрен боҙоп, кафырҙарға ҡушылһа ла, һуңынан кафырҙар менән йәһүдтәр араһында ихтилаф (дау, ыҙғыш) сыҡты. Шул ваҡыт бик ҡеүәтле ел сығып, кафырҙарҙың бөтөн сатырҙары емерелде.

Хаҡ (Алла) кафырҙарҙың күңеленә ҡурҡыу һалды. Улар, мосолмандар илә йәһүдтәр иттифаҡ итеп, һөжүм ҡылыр, тип ҡурҡты. Шул ҡараңғы кистә кафырҙар бик ашығып, бәғзе нәмәләрен ҡалдырып ҡайтып китте, һәм был хәндәк һуғышынан зарарланып ҡайтҡандары ла бик шомланды. Бәғзеләре: «Әгәр Мөхәммәттең дине хаҡ булмаһа, Аллаһы Тәғәлә уға ярҙам бирмәҫ, дошмандары яфа күреп ҡайтмаҫтар ине», – тип Исламға мөхәббәт итеп, мосолман булдылар.

## *Худәйбийә мөъәһәдәһе* (килешеүе)

Һижрәттең алтынсы йылында Рәсүлулла Мәккәгә барып, Ғөмрә үә Ҡәғбәне зыярат итмәк ниәтләп, 1400 ҡәҙәр сәхәбә менән юлға сыҡты, сәхәбәләргә ҡылыстан башҡа ҡорал алмаҫҡа бойорҙо. Худәйбийә исемле урынға еткәс, ни өсөн килгәндәрен белдереү өсөн Ғосман хәҙрәтте Мәккәгә ебәрҙе. Мәккә халҡы Ғосманды хибес итте. Мосолмандар араһында, уны үлтергәндәр, тигән хәбәр таралды. Шул ваҡыт Рәсүлулла: «Инде беҙгә һуғышмаҡ лазым (зарур) булды», – тип бер ағас төбөнә ултырып, сәхәбәләрҙән һуғышырға үә үлгәнсә дин өсөн тырышырға бәйғәт (берәүҙең хакимиәтен таныу, уға буйһоноу өсөн һүҙ биреү) үә ғәһед алды. Был бәйғәткә «Бәйғәт риҙуан» үә мәҙкүр (юғарыла әйтелгән) ағасҡа «Шәжәрә риҙһан» тиҙәр.

Был бәйғәтте ишеткәс тә, Ҡурайыш халҡы ҡурҡыуғ**а** төшөп, Ғосманды азат итте лә мосолмандар менән ике арала мөғәһәдә төҙөнө. Был ғәһеднамә:

«Ҡурайыштар менән ун йылға ҡәҙәр һуғышмаҫҡа үә золом итешмәҫкә, тәүафты (Ҡәғбәнең тирә-яғын әйләнеү) алдағы йылға кисектерергә, башҡа кешеләр менән ғәһед итергә мәнғ (тыйыу, тотҡарлыҡ) итешмәҫкә, Мәккәнән һижрәт иткән кешеләрҙе Мәҙинәгә ҡабул итмәҫкә» һүҙ бирҙеләр. Һуңынан Рәсүлулла Худайбийәлә ҡорбандарын салып, ҡайтып китте.

Был килешеүгә ҡәҙәр кафырҙар менән мосолмандар бер-береһенә дошман булып, һис бер ҡатнашмағанлыҡтан, кафырҙарҙың күбеһе Ислам диненең ни икәнлеген дә белмәй ине. Был килешеүҙән һуң кафырҙар, мосолмандар менән ҡатнашып, Ҡөрьәнде һәм ундағы бәләғәт (һүҙ, телмәр матурлығы) үә хикмәттәрҙе ишетә башланы. Ҡөрьән һүҙенең матурлығын, Ислам диненең хаҡлығын аңлаусы, иман килтереүселәр артты. Был хәл Ҡурайыш халҡының иманға килмәүе тәкәбберлектәренән генә булыуын аңлатты. Был килешеү Ислам диненең таралыуы өсөн бик ҙур файҙа булды.

## *Хәйбәр һуғышы*

Һижрәттең етенсе йылында Рәсүлулла 1600 кешеһе менән Мәҙинәнән өс көнлөк юлдағы Хәйбәр ҡалаһына китте. Хәйбәр халҡы һәммәһе йәһүд булып, ғилем үә мәғрифәттәре, ҡоралдары, байлыҡтары башҡаларҙан күберәк ине. Барлыҡ һуғыштарҙа йәһүдтәр мосолмандарға зыян килтерергә тырышҡанлыҡтан, уларҙың зыяндарынан ҡотолоу лазым ине. Мосолмандар Хәйбәр халҡын ике аҙна ҡәҙәр мөхасара итеп (ҡамап алып), ҡалаға инде, бик күп ғәнимәт малы алды. Йәһүдтәр мосолмандар теләгән ваҡытта ҡаланы ташлап сығырға риза булып, ерҙәрен дә ҡалдырып, һәр йыл мосолмандарға жизйә (һалым) түләп торҙо. Бик күп ҡоралды, мәғрифәтле, ҙур ҡәлғәле Хәйбәр йәһүдиҙәре лә мәғлүб (еңелеү) булғанлыҡтан, мосолмандарҙың шөһрәте тағы артты. Рәсүлулланың тоғролоҡҡа тырышыуы сит мәмләкәттәргә лә мәшһүр булды.

Мәҙинә тирәһендәге ҡәбиләләрҙең бәғзеләре мосолман булып, бәғзеләре мосолман булмайынса Ислам хөкүмәтенең химаяһына (яҡлауына) һыйына башланы. Ҡурайыштарҙың мәшһүр баһадирҙарынан Хәлид бин Әл-Үәлид, Ғөмрү бин әл-Ғас кеүектәр ҙә мосолман булды.

## *Батшаларҙы дәғүәт итеү*

Ислам динен барлыҡ халыҡҡа еткерергә хөрмәтле Хаҡ (Аллаһы) тарафынан әмер булғанлыҡтан, Рәсүлулла, бөтә тарафтарҙағы батшаларҙы үә әмирҙәрҙе Ислам диненә дәғүәт итеп, мәктүбтәр (хаттар) үә илселәр ебәрҙе. Был мәктүбтәрҙә баҫтырыу өсөн көмөштән «Мөхәммәт Рәсүлулла» тигән яҙыулы мисәт эшләтте.

Батшаларҙың бәғзеһе, әүәлге китаптарҙың хәбәр биреүенә күрә, ғәрәп еренән бер пәйғәмбәр киләсәгенә, бәғзеһе, Рәсүлулланың ғәҙәләтенән (тоғролоҡ, изгелегенән) үә дәғүәт иткән нәмәләренән хәбәрҙар булып, илселәрен хөрмәт үә риғәйә иттеләр. Хәбәш батшаһы Нәжәши, Бәхрәйән әмире Мунзир бин Сәүи, Ғүмән омман әмирҙәре Жәйфәр менән Ғәбд Исламды ҡабул итте. Мысыр батшаһы Мү Ҡауҡис, илсене хөрмәт итеп, Рәсүлуллаға ике әриә (йәш тол ҡатын), дадал тип мәғрүф (данлыҡлы) бер ҡасыр (мул), ҡиммәтле кейемдәр үә кәсәләр һәҙиә итте. Рум (Греция, Византия) батшаһы Һиракл Рәсүлулланың пәйғәмбәр булыуына ышанһа ла, халҡы хилаф булғанлыҡтан, мәмләкәте ҡулынан китеүенән ҡурҡып, иманға килмәне. Фәҡәт мәжүси Кисра пәйғәмбәр мәктүбенә илтифат итмәй тәкәбберләнеп, уны йыртып ташланы. Был хәбәр Рәсүлуллаға ишетелгәс: «Аллаһы Тәғәлә үҙ мәмләкәтендә йыртһын», – тип доға итте. Хәҙрәт Ғүмәр ваҡытында мәмләкәт мосолмандар ҡулына керҙе.

## *Мәккәне фәтех итеү* (яулап алыу)

Һижрәттең һигеҙенсе йылында Мәккә кафырҙары Худайбийәлә биргән вәғәҙәһен боҙғанлыҡтан, Рәсүлулла ун мең кешеһе менән Мәккә тарафына сәфәр итте. Ҡала янында Мәррүл-заһран исемле урынға еткәс тә, Рәсүлулла ун мең ергә ут яҡтырҙы. Быны күргәс тә, һис бер хәбәрһеҙ торған Мәккә халҡы ҡурҡып ҡалды, сөнки мосолмандарға ҡаршы торорлоҡ көстәре юҡ ине. Рәсүлулла ғәскәрҙе бер нисә төркөмгә бүлеп: «Мәккәгә кергәндә, ҡаршы тормаһалар, ҡан түкмәгеҙ», – тип әмер бирҙе. Ислам ғәскәре, ҡаланы һәр яҡтан ҡамап, ҡалаға килеп керҙе. Рәсүлулла Мәккәгә Хаҡ (Аллаһы) йәнәбтәренә шөкөр әйтеп, ҡайғылы әҙәм кеүек башын эйәренә ҡәҙәр эйеп, тәүәҙиғ (түбәнселек) күрһәтеп керҙе. Тура Ҡәғбәтуллаға барып, тауат итеп ике рәҡәғәт намаҙ уҡыны. Ҡәғбә янында 360 самаһы пот бар ине, уларҙы ваттырҙы. Был поттарҙың һәр береһе берәр ҡәбиләгә махсус төҙөлгәйне. Поттар ватылғас, был ҡәбиләләр мәғбүдһеҙ (ғибәҙәт ҡылына торған әйбер) ҡалды.

Һуңынан Ислам динен асыҡ бәйән итеп, бик фәсих (матур, килешле, оҫта), тәьҫирле бер хөтбә һөйләне. Мәккә халҡы бик әҫәрләнеп, Рәсүлуллаға үә Исламға ихласлығы артты. Был ваҡытта улар: «Беҙ Мөхәммәткә үә уның сәхәбәләренә бик күп ыҙа, яфа иттек, инде беҙгә ниндәй эш ҡылыр икән?» – тип һәммәһе Рәсүлуллаға ҡарап, ҡурҡып торҙо. Рәсүлулла ла: «Хәҙер минән нимә көтәһегеҙ, нимә уйлайһығыҙ?» – тип һораны. Улар: «Әй, Мөхәммәт, мәрхәмәтеңде көтәбеҙ», – тигәнгә Рәсүлулла: «Һәммәгеҙ азат», – тине.

Рәсүлулланың иң яман дошмандарына был ҡәҙәр күркәм мөғәмәлә итеүенә ғәфү үә мәрхәмәт күргәнлектән, ҡурайыштарҙың күбеһе Хаҡ пәйғәмбәре булыуына инанып, иманға килде. Әбүбәкер хәҙрәттең атаһы Әбү Кухафә, ҡурайыштарҙың башлығы Әбү Суфиян, улы Муғәүийә Әбүжәһәл, Әбүләһәбтең улдары мосолман булды. Шул көн Билал хәҙрәт Ҡәғбәгә сығып, аҙан әйтте. Исламиәт иғлан ителде. Мәккә халҡының ирҙәре үә ҡатындары Рәсүлуллаға бәйғәт итте.

Был ваҡытта әнсар (пәйғәмбәргә ярҙам итеүсе) Кирам: «Пәйғәмбәребеҙ хәҙрәттәре тыуған-үҫкән еренә хужа булды, инде Мәҙинәгә ҡайтмаҫ», – тип ҡайғыра башланы. Рәсүл хәҙрәт әнсарҙарҙың борсолоуын белгәс тә: «Әй, әнсар, һеҙҙең шәһәрегеҙгә һижрәт иттем (күстем), мәғишәтем дә (тормошом), вафатым да ошонда буласаҡ», – тине. Әнсарҙар быны ишеткәс тә ғәйәт дәрәжәлә шатланып, хатта иланылар.

## *Хунәйн һуғышы*

Мәккә фәтех ителгәс, кафырҙар бик хәсрәтләнде. 20 меңлек ғәскәр йыйып, тағы һуғышҡа әҙерләнделәр. Быны Рәсүл Әкрәм хәҙрәттәре ишеткәс, 12 меңлек ғәскәре менән ҡаршы сығып, Хунәйн исемле урында кафырҙарға юлыҡты. Бәғзе мосолмандар: «Беҙ аҙ ғәскәр менән дә ғалиб була инек инде. Әлбиттә, ғалиб булырбыҙ», – тип ғорурланды. Һуғыш башланғас, кафырҙарҙың йәшеренеп торған көтәре мосолмандарҙың артынан сыҡты. Мосолмандар ҡурҡыуға төшөп, ҡайтырға таралыша башланы. Рәсүл хәҙрәт урынынан һис ҡуҙғалманы. Үҙе үә янындағы Ғаббас хәҙрәт: «Әй, йәмәғәт, йыйылығыҙ!» – тип ғәйрәт менән ҡысҡырҙы.

Сәхәбәләр йыйылып, кафырҙарға яңынан һөжүм итеп, еңеүсе булды. Кафырҙар бөтөн малдарын, ҡатын үә балаларын ташлап ҡасты. Бәғзеләре кире ҡайтып, иманға килде. Бәғзеләре ҡасып, Таиф ҡалаһына йыйылды. Мосолмандар уларҙың артынан ҡалаға саҡлы барып, мөнжәник ярҙамында таш ата башлаһа ла, ҡасып сығыусыларҙың һүҙенән Таиф халҡының аҡрынлап иманға

киләсәге аңлашылып, ҡайтып киттеләр. Был хәбәр дөрөҫләнде: һуңынан үҙҙәре килеп мосолман булдылар. Рәсүлулла 6 меңләп әсирҙе ҡайтарып бирҙе, башлыҡтары Мәлик бин Ғәүефте шул тарафҡа рәйес итте.

## *Ислам таралыуы* (интишар ислам)

Мәккә фәтех ителеп, Хүнәйндә лә мәғлүб булғас, кафырҙарҙың шәүкәте (көсҡеүәте) бөттө, Ҡурайыш халҡы һәммәһе иманға килде. Улар артынан Мәккә тарафындағы башҡа ҡәбиләләр ҙә, берәм-берәм Рәсүлулла хозурына килеп, иман килтерә башланы. Ислам дине бик тиҙ арала бөтә тарафҡа йәйелде, сөнки ғәрәптәрҙең күбеһе Ҡөрьәндең бәләғәтен, Ислам диненең аҡылға, хикмәткә муафиҡ булыуын, Рәсүл хәҙрәттең тоғролоғон ишетеп, был дингә мөхәббәттәре артҡайны. Фәҡәт үҙҙәре: «Аллаһы Тәғәлә Мәккәне ямандарҙан һаҡлай, ҡәҙерле әҙәмдәр ҡулында ғына тота», – тип иғтиҡад иткәнлектән һәм Ҡурайыш ғәрәптәренең башлығы булғанынан ғына иманға килмәй торалар ине. Шунлыҡтан: «Әгәр Мөхәммәт хаҡ пәйғәмбәр булмаһа, Мәккәгә хужа була алмаҫ ине», – тип иман килтерҙеләр.

Мәккә яулап алынып, Рәсүлулла бер нисә көндән Мәҙинәгә ҡайтҡанда, төрлө тарафтан килеп мосолман булыусылар бик күбәйҙе. Һәр көн тиерлек төрлө яҡтан килгән ҡәбиләләр, илселәр Мәҙинәлә тулып торҙо. Мәккәлә 13 йылда йөҙләп кенә һаналған мосолмандар Мәҙинәгә урынлашып, туғыҙ-ун йыл торғас, йөҙләп, меңләп кенә түгел, бәлки, йөҙ меңләп, миллионлап һанала башланы. Ислам дине сит мәмләкәттәргә лә мәшһүр булып, һәммәһе мосолмандарҙан ҡурҡа башланы. Нисә мең йылдан бирле йоҡлап ятҡан ғәрәптәрҙең тиҙ ҡуҙғалып, һәр ерҙә ғалиб булыуҙарын, һәр ваҡыт ғәҙәләт үә тоғролоҡто алда тотоуҙарын күреп, иҫтәре китте. Өҫтәүенә, дошмандар зарарынан ҡурҡыу ҡалмағанлыҡтан, Рәсүлулла бик тырышып шәриғәт ҡанундарын өйрәтергә кереште. Ҡөрьәндә булған хөкөмдәрҙе, ғибәҙәт, әхлаҡ, мөғәмәлә мәсьәләләрен асыҡ аңлатты, донъяла бәхетле мәғишәт итеүгә, әхирәттә сәғәҙәткә (бәхеткә) сәбәп булған юлды күрһәтте. Бөтә эштәрҙе низамға (тәртипкә) ҡуйҙы, һәр тарафҡа вәлиҙәр (губернаторҙар), һәр ҡәбиләгә рәйестәр тәғәйен итте. Байҙарҙан зәҡәт йыйып, фәҡирҙәргә, башҡа тейешле урындарға таратмаҡ өсөн, һәр тарафҡа ғамилдар (зәҡәт йыйыусылар) билдәләнә.

## *Хәжжәтул үидәр* (хушлашыу хаты)

Һижрәттән унынсы сәнәлә Рәсүлулла хәҙрәт хаж сәфәренә ниәт итте. Мәҙинәнән үә уның тирәһенән йөҙ меңдән күберәк кеше әһле Ислам хажға әҙер булды. Рәсүл хәҙрәт был сәфәрҙә ғәйәт әҫәрле фәсих (матур һөйләү, ораторлыҡ), оҙон вәғәз һөйләп, Ислам диненең һәммә хөкөмдәрен бәйән итте: «Бәлки, бынан һуң ошо ерҙә минең менән күрешмәҫһегеҙ», – тип ғүмеренең аҙ ҡалғанлығын аңлатты, васыяттарын еткерҙе. Мәккәлә ун көн торғас, тәүаф итеп, тирәяҡтан килгән хажиҙар менән хушлашып, Мәҙинәгә ҡайтты. Рәсүл хәҙрәттең һуңғы хажы булғанлыҡтан, быға «Хәжжәтул үидәғ» тиҙәр.

Рәсүлулла тарафынан шәриғәт ҡанундары тамам бәйән ителде. Хаҡ (Алла) йәнәбтәре тарафынан 23 йылда Ҡөрьән тамам назил булды (күктән төшөрөлдө), Ислам бөтөн яҡҡа таралып, һәр йәһәттән дә хәүеф ҡалманы. Тимәк, Рәсүл хәҙрәт йәнәбтәре донъяла булған пәйғәмбәрлек вазифаһына камил ада (үтәне) итте. Шул ваҡыт һижрәттең ун беренсе йылында сәфәр айында хәстә (ауырыу) булып, мөбәрәк башы ауырта башланы, әҙерәк биҙгәк тотто. Рәбиғүл әүүәл кергәндә ауырыуы көсәйҙе. Ауырыу булһа ла, хәҙрәт һаман мәсеткә сыҡты. Вафатына өс көн ҡалғанда, хәле ауыр булғанлыҡтан, Әбүбәкер хәҙрәткә имам торорға

ҡушты. Рәсүл хәҙрәтте мәсеттә күрмәгәс, сәхәбәләр йәғәт дәрәжәлә ҡайғыға төштө, һауығыуын теләнеләр. Сәхәбәләр Рәсүл хәҙрәт өммәте өсөн йәнен фиҙа итергә торғанлыҡтан, Рәсүлулла кешеләр ҡултыҡлаған килеш мәсеткә сығып, намаҙ уҡыны, сәхәбәләргә һуңғы нәсихәттәрен еткерҙе. Сәхәбәләрҙең күбеһе ул көндәрҙе мәсет буйында илап үткәрә ине. Рәбиғүл әүүәл ун икенселә дүшәмбе көн ҡояш күтәрелгәндә, 63 йәшендә Рәсүл хәҙрәт тәшриф итте (китте). Бөтөн донъяға ҡараңғылыҡ килде, ҡайғы баҫты. Сәхәбәләр пәйғәмбәрҙең вафатынан ғәйәт ҡайғырҙы, ашау-эсеүҙәрен онотто. Бөгөн мәсеттә илашҡан тауыш ишетелде. Бәғзеләре һушы китеп йығылды, бәғзеләре телһеҙ булып, ҡатып ҡалды. Бәғзеләре: «Пәйғәмбәр булғас, нисек вафат булһын», – тип ышанманы. Хатта хәҙрәт Ғүмәр, хайранға ҡалып: «Пәйғәмбәребеҙ вафат булғаны юҡ, кем дә, вафат булды, тиһә, башын ҡылыс менән сабам», – тип ҡылысын күтәреп торҙо.

Шул ваҡытта Әбүбәкер хәҙрәт килде, ғәйәт сабыр, аҡыллы кеше ине. Шул хәтле ауырлыҡ килгәндә лә һис аптыраманы, Рәсүл хәҙрәт янына керҙе. Мөбәрәк йөҙөн асып, маңлайынан үбеп: «Тере ваҡытыңда ла хуш еҫле инең, үлгәс тә хуш еҫлеһең, йә, Рәсүлулла», – тине лә, күҙҙәренән йылға булып йәш аҡты. Һуңынан йыйылған халыҡҡа сығып: «Әй, йәмәғәт! Кем дә кем Мөхәммәткә ғибәҙәт итһә лә, Мөхәммәт вафат инде. Әгәр Аллаһыға ғибәҙәт итһә, Аллаһы хәй (тере, йәнле) үә баҡыйҙар һис бер ваҡыт вафат булмаҫ», – тине. Рәсүл хәҙрәткә лә үлем киләсәген аңлатҡан аятты уҡыны.

Әбүбәкер хәҙрәт рази йәл-лаһә Ғәнһүнең нәсихәтенән һуң сәхәбәләр аҡылдарына килеп, эшкә тотондо. Шишәмбе көн йыйылып, иттифаҡ менән Әбүбәкер хәҙрәтте хәлифә итеп һайланылар. Бер көн булһа ла хәлифәһеҙ тороуҙы монасиб (яраҡлы, кәрәкле) күрмәнеләр. Шаршамбы көн Рәсүл хәҙрәтте йыуып, вафат булған ерендә ҡәбер ҡаҙып, дәфен иттеләр.

## *Жәһилиәт* (наҙанлыҡ) *заманы*

Ғәрәптәрҙең Исламдан элек булған замандарына «жәһилиәт заманы» тиҙәр. Ул ваҡытта ғәрәптәр ғилем, мәғрифәттән хәбәрһеҙ, һәр йәһәттән низамһыҙ тарҡау, хайуан тәбиғәтле булып йәшәй ине. Ғәрәптәр ҡәбилә-ҡәбиләгә бүленеп, бер-береһенән айырылып мәғишәт итә, араларынан ҡартыраҡ, тәдбирерәк (эштең аҙағын алдан белеп, күреп эшләүсе) рәйес булып хөкөм итеп, бөтөн Ғәрәбстанда ҙур батшалыҡ булғаны юҡ ине. Ғәрәбстан ташлы үә ҡомло сүл булғанлыҡтан, башҡа батшалар ул ергә ҡыҙыҡмай, ғәрәптәр үҙҙәре лә ғәйрәтле, үҙен бөйөк күргән халыҡ булғанлыҡтан, башҡалар ҡулында тороуҙы ғәрлек һанай ине. Ҡәбиләләр араһында дошманлыҡ көслө булып, һәр ваҡыт низағлашып ғүмер итәләр, юҡ ҡына сәбәп өсөн дә үлтерешәләр, малдарын урлайҙар ине. Араларында иттифаҡ тигән нәмә юҡ, фәҡәт бәғзе ваҡыттарҙа яҡлашып һуғышыу өсөн генә бәғзе ҡәбиләләр берҙәмлеккә килә ине. Хаж айҙарында ғына бер-береһенә золом итмәй, һуғышмайҙар ине. Һуғышып ғүмер иткәнгә, һөңгө, ҡылыс тоторға, атҡа менергә маһир инеләр.

Ғәрәптәрҙә ғилем, мәғрифәт юҡ, уҡый-яҙа белеүсе лә бик аҙ. Бар ғилемдәре фәсих шиғырҙар үә вәғәз һөйләү ине. Күбеһе хайуан тәрбиә итеп, көтөү көтөп мәғишәт итәләр, ҡайһылары Шам, Йемен тарафтарына каруан йөрөтөп, сауҙа, хаж ваҡыттарында ҙур баҙарҙар, йәрминкәләр була ине. Бик күп насар ғәҙәттәр шәиғ (халыҡ араһына таралыу, һәр кемгә билдәле булыу) булып, жәһаләткә (наҙанлыҡҡа, белемһеҙлеккә) сумғандар ине. Кеше үлтереү, талау, зина ҡылыу, юҡбар нәмәләрҙән шомланыу, хәмер эсеү бик таралғайны. Бәғзеләре, фәҡирлектән ҡурҡып, балаларын тереләй дәфен итә, ҡыҙ бала тыуыуҙан шомлана, үҫтереп кейәүгә биреүҙән ғәрләнеп, уларҙы үлтерә, ҡатын-ҡыҙҙы үә сабыйҙарҙы мираҫтан мәхрүм итә ине.

Кешенең ғилеменә һәм аҡылына түгел, бәлки, нәҫел-нәсәбенә ҡарап фекер йөрөтәләр, нәҫел менән бик маҡтаналар ине. Ғәрәптәрҙең мосолмандарҙы хөрмәт, туғандарҙы ололау, йомартлыҡ, һүҙгә тоғролоҡ, ашау-эсеүҙә, кейемдә тәкәллефһеҙлек (яһалма, ҡыланыуҙың булмауы), аҙ менән ҡәнәғәтләнеү, аслыҡ үә һәр төрлө ауырлыҡтарға сабыр итеү кеүек күркәм ғәҙәттәре лә бар ине. Ғәрәптәр һүҙгә маһир, йөрәкле, баһадир, зиһенле булып, күбеһе хөтбәләрҙе, шиғырҙарҙы бер ишетеү менән күңеленә һала, кәрәк ваҡытта бер хәрефен яңылышмай уҡый ине. Нәҫелдәрен әллә нисә бабаларына хәтле яңылышмай һөйләйҙәр ине.

Ғәрәптәр элек тә Ибраһим Ғәләйһис-сәләм шәриғәте менән ғүмер итһә лә, уның вафатынан өс мең йылдан күберәк ваҡыт үткәс, дингә иғтиҡадтары боҙолоп, Ибраһим Ғәләйһис-сәләмдән ҡалған диндә бөтөнләй үҙгәрткәйне. Рәсүл Әкрәмебеҙ килгәс тә, күбеһе – поттарға, бәғзеләре – айға, ҡояшҡа, йондоҙҙарға, бәғзеләре утҡа ғибәҙәт ҡылып, араларында Таурат, Инжил менән ғәмәл итеүселәр бик аҙ ине. Иғтиҡад боҙоҡлоғо шул дәрәжәгә еткәйне: хатта бәғзе ҡәбиләләр поттарҙы ҡамырҙан, хәлүәнән яһап, шуға ғибәҙәт итәләр, аслыҡ булһа, шунан ярҙам һорайҙар, әгәр маҡсаттары хасил булмаһа, ул потты йыйылып ашайҙар ине.

Ғәрәптәрҙә Ибраһим Ғәләйһис-сәләмдән ҡалған нәзәфатҡа риғәйә итеү, мосафирҙарҙы хөрмәтләү, үлектәрҙе йыуып кәфенләү, ғөсөл, сөннәт ҡылыу кеүек күркәм ғәҙәттәр ҙә бар ине. Ғәрәптәр Ҡәғбәне бик ғәзиз белеп, һәр йыл хажға килеп тәүаф итә, поттарына ҡорбан сала ине. Ләкин хаж иткәндә гонаһлы донъя кейемдәре менән ғибәҙәт ҡылмайбыҙ тип, кейемдәрен һалып, ирҙәр ҙә, ҡатындар ҙа инәнән тыума яланғас тәүаф итә, фәҡәт бәғзе ҡатындар ғәүрәттәренә (оят ергә) бер пәрҙә генә ҡуя ине. Иғтиҡадтары буйынса ул кейемдәрҙе һис бер кемгә кейергә ярамағанлыҡтан, улар сереп, исраф булды. Кейем менән тәүаф итеү Ҡурайыш ҡәбиләһенә хас ине. Ғәрәптәрҙең бынан башҡа ла боҙоҡ ғәҙәттәре күп булып, балалары ла шуларҙы күреп тәрбиәләнгәндән, уларҙың төҙәлеү ихтималы булманы. Әгәр берәйһе: «Ғәрәптәр 15 – 20 йылда һәммәһе уянырҙар, иғтиҡадтары, әхлаҡтары төҙәлер, берҙәмлеккә килеп, ғәҙәләтле, ҡеүәтле хөкүмәттәре булыр, бөтөн тирә-яҡты ҡурҡытып торорҙар, был эштәрҙең һәммәһен бер зат эшләр», – тиһәләр, һис кем ышанмаҫ, һәр кеше көлөр, һөйләүсегә «йүләр» тип әйтерҙәр ине. Сөнки нисә мең йылдарҙан бирле ғилемһеҙ, мәғрифәтһеҙ, бәҙәүи (күсмә тормошло) булып килгән халыҡтың 15 – 20 йыл эсендә уяныш, төҙәлеп китеүе донъяла һис күренгәне юҡ ине.

## ***Ғасыр сәғәҙәт*** **(Бәхетле быуат)**

Рәсүл Әкрәм Мөхәммәт Ғәләйһис-сәләтү үәс-сәләм иғтиҡадтары, әхлаҡтары боҙолған, нисә мең йылдан бирле мәғрифәтһеҙ, ғафил булып ғүмер иткән, һис бер хөкүмәт, батшалыҡ күрмәгән, низам белмәгән ғәрәптәргә пәйғәмбәр итеп ебәрелде. Рәсүл бәндәләрҙең донъяла, әхирәттә бәхеткә сәбәп иткән юлды күрһәтеп, башта ғәрәптәрҙе, һуңынан барлыҡ инсандарҙы (кешеләрҙе) шул юлға дәғүәт итте.

Ҡурайыш халҡы яңы дингә ғәйәт ҡаршылашты, Рәсүл Әкрәмгә бик күп ыҙа, яфа күрһәтте, нисә мәртәбә үлтерергә ҡасид итте. Ләкин ул мөбәрәк зат, ни хәтле ауырлыҡ күрһә лә, ғәйрәтенә, ижтиһадына кәмселек килтермәне, өмөтөн өҙмәне. Һаман аҡрынлап йомшаҡлыҡ менән Ислам динен аңлатырға тырышты. Фәҡәт Ҡурайыш халҡының ҡарышыуы бик көслө булғанлыҡтан, 13 йылда ике йөҙләп кенә кеше иманға килде. Мәккә халҡынан өмөт өҙгәс, Мәҙинәгә күсеп,

Мөхәммәт унда ун йыл торҙо. Ислам диненең таралыуы һуңғы ун йыл эсендә булды.

Рәсүл Әкрәмебеҙ был мөҙҙәт эсендә Ҡиәмәткә (әхирәт, донъя бөткән көн) ҡәҙәр аҡыл үә хакимиәткә муафиҡ, донъя үә әхирәттә бәхетле булыуҙарына сәбәп булған дин килтерҙе, ике меңдәрсә ҡәбиләгә бүленеп мәғишәт иткән ғәрәптәрҙе бер иттифаҡҡа йыйып, ҡеүәтле милләт, ҙур бер хөкүмәт яһаны. Жәһилиәт (наҙанлыҡ, ҡараңғылыҡ) заманында булған золом, хыянат, талашыу, яҡлашыу, үлтереүҙәрҙе бөтөрөп, һәммәһен ғәҙәләтле, тигеҙ хоҡуҡлы, билгеле низамға ҡуйҙы. Нисә йылдар буйына ҡандарына һеңеп килгән боҙоҡ иғтиҡадтарҙы, шомланыуҙарҙы бөтөрөп, «файҙа үә зарар итеүсе Аллаһы ғына, һәр эштә фәҡәт Аллаһының ризалығын, тоғролоғон ғына уйлап эш ҡылырға кәрәклеген, шомланыуҙарҙың бөтәһе наҙанлыктан килгән Жәһилиәт ғәҙәттәре» икәнен камил төшөндөрҙө.

Ғәрәптәр араһындағы боҙоҡ ғәҙәттәрҙе, аҡылға хилаф эштәрҙе, маҡтаныуҙарҙы бөтөрөп, бөтөн Ғәрәбстанға Ислам үә ғәҙәләт таратты. Һәр кемгә ғилем өйрәнеү фарыз икәнлеген белдереп, халыҡ араһында уҡый-яҙа белгән кешеләр күберәк булһын тип, балаларҙы әсир төшкән кафырҙарҙан булһа ла уҡыттырҙы, мәғрифәтле, иғтиҡадлы, тоғро әҙәмдәрҙе арттырырға тырышты.

Хүләсә (нәтижә): Мөхтәрәм Рәсүл иғтиҡад, мөғәмәлә, ғәҙәт йәһәтенән бик түбән дәрәжәлә булған ғәрәптәрҙе иң юғары дәрәжәгә сығарҙы, уларҙың тәбиғәттәрендә булған золом, маҡтаныу урынына – инсаф, тупаҫлыҡ урынына – мөләйемлек, дошманлыҡ урынына – мөхәббәт, низағ үә һуғыш урынына – солох үә тыныслыҡ, наҙанлыҡ урынына – ғилем үә мәғрифәт, тарҡаулыҡ урынына – иттифаҡ, зина һәм фәхеш урынына – ғиффәт, зәләләт (түбәнлелек, хурлыҡ) урынына – тоғро иғтиҡад үә Аллаһынан ҡурҡыу, ялҡаулыҡтары урынына ижтиһад урынлаштырып, ҡеүәтле, мәғрифәтле, тәрбиәле милләт итте.

Ҡөрьән Рәсүлулла шәрифендә сәхәбәләргә икенсе төрлө йән керҙе. Уҡыуяҙыу белмәгән, хәмер эсеү, поттарға ғибәҙәт ҡылыу, шиғыр һөйләү, мал ҡарауҙан башҡаны белмәгән ғәрәптәр мәғрифәтле, донъя үә әхирәт өсөн ғәйәт ижтиһадлы заттар булып китте, боҙоҡ ғәҙәттәрен ташлап, малдарын, йәндәрен аямай, бөтөн зиһендәрен ҡуйып Ислам дине үә тоғролоҡ өсөн тырыштылар. Мосолмандар Ҡөрьән, хәҙис менән ғәмәл ҡылыуҙары, Аллаһыға табынып донъя үә әхирәттәрен төҙәтергә ижтиһад итеүҙәре арҡаһында бөтә тарафтарҙа булған батшаларҙы ҡурҡытып торҙо. Һәммәһенең ғәрәптәрҙең был ҡәҙәр тиҙ уянып, тереклек итеүенә, был ҡәҙәр берҙәмлектә булыуына иҫтәре китте.

Ғәрәптәрҙең жәһилиәт заманында булған иғтиҡад әхлаҡ боҙоҡлоҡтары бөтөп, һәммәһенең (ир, ҡатын, бай, фәҡир, нәҫелле, нәҫелһеҙ, ҡол, хужа) хоҡуҡтары риғәйә ителеп, мәғрифәт, ғәҙеллек менән бер-береһенә мөхәббәт үә ярҙам итеп, рәхәт йәшәне, һәр эш мөстәхиҡтарға (лайыҡлы кешеләргә) тапшырылды. Хатта Рәсүл Әкрәм хәҙрәттәренең вафаты ваҡытында Шам сәфәренә әҙерләнгән ғәскәрҙең башлығы ата-әсәһе ҡол булған 18 – 20 йәшлек Үсәмә бин Зәйл ине. Рәсүл Әкрәмебеҙҙән һуң Хүләфә Рәшидүн Ислам динен, тоғролоҡто нәшер итергә тырышты. Бик күп әҙәмдәр Ислам динен ишетеп, уны аҡыл үә хикмәткә мунафиҡ табып, йыраҡ ерҙәрҙән килеп мосолман булды. Ғәрәптәр донъяның төрлө тарафтарына сәйәхәт итте, Ислам дине донъяның бер тарафынан икенсе тарафына ҡәҙәр таралды. Ул ваҡыттарҙа мосолмандар Ҡөрьән вәғәздәренә, Рәсүл Әкрәмдең һүҙҙәренә камил риғәйә итеп, шуларҙы юлбашсы тотоп ижтиһад итә ине. Мосолмандарҙың диндә аңлап мәғишәт иткән был нурлы замандарына «Ғасыр сәғәҙәт» (Бәхетле быуат) тиҙәр.

## *Шәмаил шәриф*

Әүсаф Рәсүл (Рәсүлдең сифаттары): Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт салаллаһу Ғәләйһис-сәләм ғәйеттә күркәм, нурлы йөҙлө, тулы кәүҙәле, сәләмәт бәдәнле (тәнле, кәүҙәле) ине. Оҙонсараҡ буйлы, ҡулбаштары үә күкрәге киң һәм эсе менән тигеҙ ине. Ҙур башлы, киң маңлайлы, аҙ ғына ҡыҙыллыҡ ҡатышҡан аҡ түшле, түңәрәк йөҙлө, ғәйәт мөһабәт чәһрәле (йөҙ, ҡиәфәт) ине. Нурлы йөҙөн аңһыҙҙан күргән кешене уның мөһабәте баҫып ҡурҡып китер, Рәсүлулла менән сөхбәт үә өлфәт иткән (бергә ултырған, юлдашлыҡ иткән үә аралашҡан, дуҫлашҡан) әҙәм йән күңеленән уға ғашиҡ булыр ине. Бар ҡайғылы әҙәм уның мөбәрәк йөҙөн күргәндә ҡайғыһы бөтөп, шатлыҡ хасил булды. Ҙур ҡара күҙле, нескә оҙон ҡашлы, оҙон керпекле, уртаһы аҙ ғына ҡалҡыу танаулы, ҙурыраҡ ауыҙлы, тештәре бик аҡ үә һирәк ине. Күҙе бик үткер булып, көндөҙ ҙә йондоҙҙарҙы, ҡараңғы төндәрҙә нескә нәмәләрҙе күрә ине.

Ҡара һаҡаллы, ҡара сәсле, сәсе аҙ ғына бөҙрә булып, сәс үә һаҡалында бер нисә бөртөк кенә аҡтары бар ине. Ҡулы бик йомшаҡ үә киң, беләктәрендә, аяҡтарында һирәк төктәр бар ине. Йөрөгән ваҡыттарында, уйһыу ергә төшкән кеүек, аяғын күтәреп, эре атлап йөрөр булды. Төрлө тарафҡа ҡарарға булһа, күҙ сите менән генә түгел, кәүҙәһе менән боролоп ҡарай, күп ваҡытта сәхәбәләрҙе алдан ебәреп, үҙе арттарынан төшә ине.

Фәсәхәт (оҫта теллек) үә һөйләшеүе: Күркәм тауышлы, татлы үә мөләйем һүҙле, һүҙе ғәйәт тәьҫирле үә тәҡлифһеҙ (көсләүһеҙ) ине. Кәрәк ваҡытта зарурат (тейешле, кәрәкле) ҡәҙәрле генә һөйләй, һүҙ уйнатмай, насар һүҙҙәр әйтмәй, аҙ һөйләп тә күп мәғәнә аңлатты. Уйлап, фекерләп, һәр кемгә аңлайышлы, асыҡ итеп, ҡабаланмай һөйләй, һүҙҙәрен камил аңлап йәки һанап та торорға мөмкин. Яҡшы аңлаһындар өсөн, бәғзе һүҙҙәре өс мәртәбә ҡабатлай, һөйләй башлаһа, бөтөн мөхлисен (күңелен) биреп, һәммәһе туҡталып ихлас итеп тыңлайҙар. Пәйғәмбәр артыҡ һүҙҙәр ҡатнаштырмай, хәбәрен аңлатмайынса ҡалдырмай, артыҡ ҡысҡырып та һөйләмәй. Фәҡәт вәғәз, хөтбә һөйләргә башлаһа йәки Ҡиәмәт (ахырзаман) хаҡында һөйләһә, йөҙө ҡыҙара, тауышы күтәрелә, ғәйрәт менән тәьҫирле итеп һөйләй ине.

Мөғәмәләһе: Сит кешеләргә, хатта дошмандарына, асыҡ йөҙ, итәғәтле һүҙ менән мөғәмәлә итә, ҡайғылыларҙы йыуатырға тырыша. Һәр кемгә үҙе яратҡан исеме менән өндәшә, осрағандарға иң элек үҙе сәләм бирә, күрешергә башлап ҡул һуҙа. Кеше үҙе ебәрмәйенсә ҡулын алмай, берәүһе һүҙ башлаһа, һүҙен бөтөрөп, үҙе айырылып киткәнде көтә, бүлдереп, ташлап китмәй ине. Кешегә алдан хәбәр итеп, рөхсәт һорап, сәләм биреп бара. «Кем бар?» – тип һораһалар, «мин» тимәй, «Мөхәммәт», – тип исемен әйтә. Кис булһа, «йоҡлағандыр, уятмайым» тип аҡырыныраҡ сәләм бирә, берәйһе саҡырһа, «ләббәйкә» (ихласлыҡ менән үтенес үтәргә әҙерлек) тип асыҡ йөҙ менән яуап бирә ине.

Мәжлескә барһа, ҡайҙа урын бар, шунда ултыра, артыҡ тәғзим (ололауҙарын) итеүҙәрен яратмай, һис кемдән алға сығып ултырмай, аяғын кешегә табан һуҙмай. Мәжлестә ултырғандарҙың береһенә генә ҡарап һөйләмәйенсә, барыһына илтифат итеп, аҡрын тауыш менән һөйләй, ә мәжлестәгеләрҙең һәр ҡайһыһы, Рәсүл хәҙрәткә иң яҡыныраҡ ултырырға кәрәк, тип уйлай ине. Еңел мәжлесле булып, донъя үә әхирәт, мәғишәт мәсьәләләре хаҡында һөйләшә-кәңәшләшә, берәйһенә һөйләһә, уға бөтөнләй боролоп әйтә, кешене бүлеп һүҙ башламай. Кешегә, иҫе киткән төҫлө, бик тура ҡарамай ине.

Ниндәй ғәжәп хәл булһа ла, ҡысҡырып көлмәй, бәлки, йылмайып ҡына ҡуя. Насар һүҙ әйткәндә бәрелмәй, бәлки, сакит (һүҙҙән туҡтаусы) илә илтифат итмәйенсә, йомшаҡлыҡ менән тәнбиһ (иҫкәртеү) яһай ине. Сәхәбәләрҙән берәйһе

күренмәһә, уны ҡайғыртып, «Фәлән кеше ҡайҙа?» тип һораша, ауырыу булһа, хәлен белергә бара, үлеп ҡалһа, йыназаһына әҙерләнә ине.

Ике кеше йәки ике ҡәбилә араһында низағ, тауыш сыҡһа, ҡотортоп, дошманлыҡты арттырырға түгел, бәлки, мөмкин ҡәҙәр бер-береһе менән килештерергә тырыша. Кешенең хәжәтен үтәргә ярата, һәр кемдең аҡылына ҡарап һүҙ һөйләй, дәрәжәһенә күрә хөрмәт итә. Һис кемде үҙенә нәфрәт иттермәй, кешенең насарлығынан бигерәк яҡшылығын күрергә тырыша, ғәйбәтен тикшермәй, ғәйебе булһа ла: «Эй, йәмәғәт, фәлән эштәрҙе эшләмәҫкә кәрәк», – тип дөйөм әйтә, асыуланмай. Һәр кемдең күңелен табырға тырыша, кеше хәтерен ҡалдырыуҙы һөймәй, һәр кемде бер төрлө риғәйә итеп, был олуғ йәки бай кеше, тип иҫе китмәй, был дәрәжәһеҙ, фәҡир кеше, тип илтифатһыҙлыҡ күрһәтмәй ине.

Тәүәҙүғ үә шәфҡәтлеге: Һәр кемгә тәүәҙүғ (баҫалҡы, әҙәпле), түбәнселекле, мәрхәмәтле ине. Мәжлескә кергәндә сәхәбәләрҙең урындарынан торғандарын яратмай, үҙен һис кемдән артыҡ тоймай: «Мин дә бер ҡолмон, ҡолдар кеүек ултырам, ҡолдар ашағанды ашайым», – тип әйтер ине. Ишәккә, атҡа, дөйәгә атлана, бәғзе ваҡыт янына кеше мендерә, фәҡир, меҫкендәрҙең хәлен белешә, улар менән ултырыша, һәр ҡайһыһына ярҙам итергә ярата, йәғни фәҡир, зәғиф, тол ҡатындарға үә башҡа мохтаждарға ярҙам итергә өйрәтә ине.

Ни ҡәҙәр хәҙимдәре (хеҙмәтселәре) үә ҡолдары булһа ла, өй йәмәғәттәренә ярҙам итешә, ҡуйҙарын һауыша, малдарға ашарға бирә, иҙән һеперә, баҙарға бара, тауарын үҙе күтәреп ҡайта. Кейем йыртыҡтарын үҙе тегә, кейемен таҙа тота, эшен һис ауырһынмай башҡара, бәғзе ваҡыт хайуандарға һыу биргәндә эсеп бөтөргәнсе мөбәрәк ҡулы менән һауытты күтәреп тора ине. Ҡунаҡтарҙы: «Мәрхәбә (хуш килдегеҙ)», – тип асыҡ йөҙ менән ҡаршы ала, ҡунаҡ аҫтына нимәлер һала, бәғзе ваҡыт үҙенең аҫтында булған нәмәне ҡунаҡҡа биреп, үҙе ергә ултыра ине.

Бер ваҡыт ҡунаҡтар килеп, үҙе хеҙмәт итә башлағанда бәғзе сәхәбәләр: «Йә, Рәсүлулла, ултырығыҙ, үҙебеҙ хеҙмәт итәбеҙ», – тигәс: «Улар минең сәхәбәләремде хөрмәт иткәндәр ине, мин дә үҙем хеҙмәт итеүҙе яратам», – тине. Хайуандарға, хеҙмәтселәргә ҡул, тел тейҙереүҙе, кеше эшләгәндә ҡарап тороуҙы яратманы. Әнәс бин Мәлик: «Мин Рәсүлуллаға ун йыл хеҙмәт иттем. «Ниңә былай эшләнегеҙ?» тип асыуланманы үә һис кемгә һуҡманы үә һис ваҡыт «уф» тип тә әйтмәне», – тине.

Бер ваҡыт сәфәрҙә сәхәбәләр, тәғам бешерә башлап, бәғзеһе – ит, бәғзеһе – һыу, бәғзеһе ҡаҙан әҙерләргә тотонғанда: «Ул эштәрҙе һеҙ эшләй тороғоҙ, мин утын йыйырға барам», – тине. «Йә, Рәсүлулла! Беҙ үҙебеҙ һәммә эште эшләрбеҙ», – тигәс: «Беләм, эшләрһегеҙ, ләкин мин һеҙҙән айырылып, ҡарап тороуҙы яратмайым. Аллаһы бер әҙәмдең иптәштәренән айырым булыуын һөймәй», – тип яуап бирҙе. Яҡын-йыраҡ ир-ҡатын, хужа-ҡолдарҙың һәммәһенә ҡатнаша, һөйләшә, бәғзе ваҡыт мизах мотаябә (кәйеф, сәләмәтлек хаҡында көлкөлө, ҡыҙыҡлы һүҙҙәр) әйтә, бәғзе ваҡыт ҡолдар менән бер табаҡтан ашай, сәхәбәләрҙең сабыйҙарын алып һөйә, уйната, итәгенә ултырта. «Мин пәйғәмбәр» тип һис ололанып тормай, маҡтанмай.

Бер әҙәм артыҡ ололап, ҡулын үбә башлағанда: «Үҙегеҙҙең бер кешегеҙмен, батша түгелмен. Артыҡ тәғзим итмәгеҙ» – тине. Мәккәне яулап алғас, шатланып ғәйрәт, мөһабәтлек күрһәтеп, ҡалаға башын түбән эйеп, тәүәҙүғ (түбәнселек) күрһәтеп, ҡайғылы рәүештә килеп керҙе. Берәү уның мөһабәтлегенән ҡурҡып, дерелдәп торғанда: «Мин ҡатҡан ит, ҡатҡан икмәк киҫәктәре ашап торған бер ҡатын балаһымын, батша түгелмен, улай иҫең китмәһен», – тигән.

Ғәфү үә хәлиме (ғәфү итә белеүе, йыуашлығы, сабырлығы): Бик киң холоҡло,

йомшаҡ тәбиғәтле, күркәм мөғәмәләле, һис кемдән үс алырға теләмәй, үҙенә яман мөғәмәлә иткәндәрендә лә ғәфү итеп, яманлыҡҡа ҡаршы ихласлыҡ итергә тырышты. Ухуд һуғышында кафырҙар мөбәрәк йөҙөн йәрәхәтләп, тешен һындырғанда, бәғзе сәхәбәләр. «Йә, Рәсүлулла, быларға бәддоға (яуыз доға, ҡарғыш) ҡылһаң ине», – тигәндәренә: «Мин ләғнәт өсөн түгел, бәлки, рәхмәт өсөн ебәрелдем», – тине һәм: «Йә, Рабби, был халыҡ наҙанлығы менән шулай итә, уларҙы үҙең ғәфү ит, тоғро юлға күндер», – тип хәйер доға ҡылды.

Бер йәһүди Рәсүлуллаға килеп: «Йә, Мөхәммәт, бурысымды бир, һеҙ, Ғәбделмоталлиб балалары, һәммәгеҙ бурысты оҙаҡ тотаһығыҙ», – тип ғәйрәт күрһәтеп, яғаһынан алды. Быны күргәс, Ғүмәр хәҙрәт йәһүдигә күҙен тултырып ҡарап: «Ах, бәдбәхет, ни һөйләйһең?» – тип ғәйрәт күрһәтте. Рәсүл хәҙрәт һис асыуланмай: «Әй, Ғүмәр, ваҡыты етмәгән булһа ла, бурысын бир һәм 20 сағ (дүрт бот) арттырып бир, уныһы һинең ҡурҡытҡаның өсөн булыр», – тине. Йәһүди был мөғәмәләне күреп: «Мин, Тауратта ебәреләсәге хәбәр ителгән пәйғәмбәр үс алырға тырышмаҫ, тип күргәйнем. Хаҡ пәйғәмбәр икәнһең, һынап ҡарау өсөн генә шундай әҙәпһеҙлек иттем», – тип иманға килде.

Йомартлығы: Бик йомарт булып, һәр кемдең хәжәтен үтәргә тырыша, ҡулында булған нәмәне һис ҡыҙғанмай бирә, һис булмаһа, яҡшы һүҙе менән шатландыра йәки: «Иншалла (Аллаһы теләһә, Аллаһы ҡушһа) хәжәтең фәлән ваҡытта булыр», – тип күңелен таба. Үҙенә ни ҡәҙәр ғәнимәт малдары, һәҙиәләр йыйылһа ла, һис берен үҙендә тотмай, фәҡир, меҫкендәргә үә тейешле урындарға сарыф итә ине. Хатта үлгән ваҡытта бер кейеме рәһендә (аманатта) ине. Бер ваҡыт 90 мең дирһәм килгәс, уны бер балаҫҡа ҡуйҙырып, урынынан ҡуҙғалғансы тейешле урындарына таратып бөтөрҙө. Бер әҙәмгә бәлә килһә, малы һәләк булһа, ярҙам итә, ҡайғыһын бүлешә ине. Бәғзе ваҡыт мохтаж әҙәмдәр бер нәмә һорағанда, бирерлек нәмәһе булмаһа: «Бар, фәлән кешенән бирәсәккә алып тор, аҡсам булғас, үҙем түләрмен», – тиер ине. Саҙаҡҡа алмай, үҙе бирә, килгән һәҙиәне үҙе генә тотмай, башҡаларға ла бүлеп бирә ине.

Мәғишәте (тормошо): Ашау-эсеү, кейем үә әсбабата (кәрәк-яраҡ, йыһазда) бер ҙә тәҡлиф итмәй, күп ваҡыт үҙе үә йәмәғәттәре арпа икмәге үә хөрмә ашап йәки һөт эсеп мәғишәт итә. Бер дәрәжә күңеле булғас, ашауҙан туҡтала, артыҡ йәки таянып, ятып ашамай, һул ҡул менән ашауҙы яратмай. Ашарға ҡулын йыуып ултыра, тәғам алдынан «бисмиллаһ» әйтә, үҙе алдындағын ғына ашай, һуңынан Аллаһыға шөкөр әйтеп туҡтай, ҡулдарын йыуа ине.

Алдына килгән аш-һыуҙы «Был фәләнсәнән булған икән» тип ғәйепләмәй, теләһә ашай, теләмәһә: «Ашағыҙ, минең иштиһам (теләгем) юҡ», – тип сәҡит итә (һүҙҙән туҡтай). Ашарға күп ҡайғыртмайынса, алдына ни килтерһәләр, шуны ашай, ризыҡты вағыраҡ, бәләкәйерәк ҡабып, яҡшы сәйнәп ашай, эсемлекте бүлеп-бүлеп эсә, аштың ҡайнарын яратмай, «ҡайнар тәғам бәрәкәтһеҙ була» ти ине. Күберәк ваҡыт ҡиблаға ҡарап ултыра, кис иртәрәк ята, ярты төндән һуң тороп тәһәжжүд намаҙы (төнгө намаҙ) уҡый, һуңынан иртә намаҙына ҡәҙәр тағы ятып тора. Хөрмә ҡабығынан яһалған түшәктә, ҡайһы ваҡытта балаҫта, ҡайһы ваҡытта ергә ятып та йоҡлай ине. Кейемдә әрһеҙ булып, мамыҡ, йөн, етендән төрлөһөнән кейә, башына күберәк салма, бәғзе ваҡыттарҙа бүрек кейә, ғәйел, йома көндәрендә үә илселәр килгәндә махсус кейем кейә.

Ваҡытын буш үткәрмәйенсә, Аллаһыға ғибәҙәт үә мөнәжәт әйтә йәки үҙенең үә мосолмандарҙың мәслихәттәрен ҡарап үткәрә. Бер эш төшһә: «Йә, Рабби, тоғролоҡҡа күндер», – тип Аллаһынан ярҙам һорай. Һәр эш тәртипле, низамлы булып, көнөнөң өстән бер өлөшөн ғибәҙәт, бер өлөшөн үҙ йәки кеше эштәре үә ғәм (күмәк кеше, йәмәғәт, ябай халыҡ) мәслихәттәре, бер өлөшөн йәмәғәт эштәре менән үткәрә ине. Эшләнгәнен һөйләп, һанап йөрөүҙе яратмай, улар менән

маҡтанмай ине. Маҡтаһалар, осоноп китмәй, яманлап ҡаты һүҙ әйтһәләр, артыҡ кәйефһеҙләнмәй, үҙ эшендә була ине.

Малдары ни хәтле артып торһа ла, иман тәкәлифһеҙ мәғишәт итә, ҡулындағы малын үҙе йә йәмәғәттәре мәғишәт итерлек алып, ҡалғанын фәҡирҙәргә үә тейешле урындарға тарата, байлыҡ менән тәбиғәте үә мәғишәте үҙгәрмәй ине. Мәккәлә ваҡытта кафырҙар тарафынан һәр төрлө ыҙа, яфа күреп, Ислам зәғиф булып торғанда тәүәҙуғы, шәфҡәте, тәбиғәте нисек булһа, Мәҙинәгә һижрәт итеп һәр тарафҡа Ислам нуры таралғас та һаман шул тәбиғәттә булды.

Наҙафәт үә паклығы (сафлыҡ үә таҙалыҡ): Тән үә кейемдәрен һәр ваҡыт пак тота, тәһарәт менән йөрөй, мисүәк (теш таҙартҡыс ағас) истиғмал (ҡулланыу, файҙаланыу) итә, хушбуй һөртмәгәндә лә мөбәрәк бәдәндәренән хуш еҫ килеп тора, юлында хуш еҫ ҡала ине. Мөбәрәк күҙенә сәрмә тарта, тырнаҡтары үҫеүен яратмай, сәсен майлап йөрөтә, хуш еҫле майҙар һөртә, сәхәбәләренең дә таҙа үә хуш еҫле булып йөрөүҙәрен ярата үә шуға ҡыҙыҡтыра: «Дин таҙалыҡҡа бина ителгән, таҙалыҡ – диндең асылы», – ти ине.

Тәүәккүл үә шүжәғәте (тәүәккәл үә батырлығы, ҡыйыулығы): Ғәйәт батыр, ҡурҡыу тигән нәмәне белмәй, һуғыш ваҡыттарында дошманға иң яҡын кеше була ине. Һәр эшендә Аллаһыға тәүәккәл итеп, Аллаһынан ярҙам һорап, ихласлыҡ үә ижтиһад менән эшкә тотона, үҙҙәренән бер нисә тапҡыр күп булған кафырҙарға бик аҙ ғәскәр менән ҡаршы сыға үә ғалиб була ине. Аллаһының тоғро әҙәмдәргә ярҙамсыл икәненә камил инанған ине. Ухуд, Хүнәйн һуғыштарында сәхәбәләр ҡурҡып, таралып киткәндә, һис урынынан да ҡуҙғалманы.

Бер сәфәрҙә ҡылысын ағас ботағына элеп, йоҡлаған сағында бер дошман ғәрәп килде лә, ҡылысын алып: «Йә, Мөхәммәт, хәҙер һине үлтерәм, һине кем ҡотҡара?» – тигәндә, Рәсүл хәҙрәт: «Аллаһы һаҡлар», – тигән. Ғәрәптең күңеленә ҡурҡыу төшөп, ҡылысы төшөп киткәс тә, Рәсүлулла ҡылысты алып: «Инде һине кем ҡотҡара?» – тигән. Ғәрәп: «Йә, Мөхәммәт, мәрхәмәтең ҡотҡарһа ҡотҡарыр», – тигән, Рәсүлулла уны ғәфү иткән. Пәйғәмбәребеҙҙең ғәҙәләтле, Аллаһынан ҡурҡыуы, ғибәҙәте, ғиффәте, аҡылы үә тәдбире, көнө-төнө иждиһады кеүек холоҡтары үә эштәре ғәйәт дәрәжәлә күп булып, был хаҡта ҙур китаптар яҙылған. Инсаф менән аҡылға ҡайтып уйлағанда, был холоҡтарының да һәр ҡайһыһы берәр мөғжизә, пәйғәмбәрлегенә үә ысын тоғролоҡ үә хаҡлыҡ өсөн тырышҡанлығына асыҡ дәлилдер. Бик күп заттар мөхтәрәм Рәсүл хәҙрәттәренең әхлағын, мөғәмәләһен күреп иманға килде.

Рәсүл Әкрәм хәҙрәттәре Мәккәнән Мәҙинәгә һижрәт иткәндә йәһүд ғалимдарынан Ғабдулла бин Сәләм, уның мөбәрәк йөҙөнөң ғәйәт нурлы, ғәйәт мөһабәт булыуын күреп: «Валлаһи, был әҙәм ялғансы булмаҫ, бының йөҙө ялғансылар йөҙөнә оҡшамай», – тип пәйғәмбәрлегенә иман килтергән. Йәмән батшаһына Рәсүлулланың дингә дәғүәт хәбәре ишетелгәс: «Мин был пәйғәмбәрҙең хәлен тикшерҙем, ул яҡшылыҡҡа бойорһа, башлап үҙе эшләй, бер яманлыҡтан тыйһа, башлап үҙе тыйыла. Дошмандарына ғалиб булһа, маҡтанмай, тәккәбберләнмәй, мәғлүб (еңелгән) булһа, аптырамай, ҡайғырмай. Вәғәҙәһендә тора, тоғролоҡҡа тырыша, әлбиттә, хаҡ пәйғәмбәр булһа кәрәк», – тип иман килтергән.

*Әл-хәмду лил-ләһ Үә сәллал-лаһү ъәлә сәййидинә Мухәммәдән үә ә лиһи үә сахбиһи үә мүхиббиһ.*

## ТУҠҺАНДА ЛА ҺАЛДАТ!

***Очерк***



*Рядовой Асия Муллайәнова Польша ерендә 1944 йылда Мехлездоров ауылында ял ваҡытында төшкән.*

Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Асия Йәндәр ҡыҙы Ахунова менән миңә 1984 йылда Илеш районының Иҫке Күктау ауылында осрашырға тура килгәйне. Башпотребсоюзда эшләп йөрөгән саҡ. Бер көндө идара рәйесе Фәүзи Ғариф улы Ғарипов саҡырып алды ла: «Урал» колхозы магазин төҙөгән, шуны йәһәтерәк асыуҙы ойоштороорға кәрәк. Был һиңә йөкмәтелә, Хәбир Кәримович. Ул ауылда алдағы аҙнала «ҙур ҡунаҡтар» көтөлә. Барып, урында хәлдәр менән танышҡас, ярҙамға район белгестәрен ебәрегеҙ. Бәлки, үҙем дә барып сығырмын. Бөрө пединститутын тамамлағас, әрмегә киткәнсе ошо районды Иҫәнбай ауылы мәктәбендә ике йыл уҡытып киткәйнем. Бер сыҡҡанда, унда ла етеп ҡайтырмын», – тине.

Башпотребсоюз инструкторы Хәким Мөләковты эйәртеп алдым да киттек Иҫке Күктауға. Магазин тирәләй оло ғына ағай-апайҙар, балалар төҙөүселәрҙән ҡалған сүп-сарҙы йыйыштырып йөрөй ине. Беҙ – Өфөнән, Үрге Йәркәйҙән килгәндәр – яңы шкаф, кәштәләрҙе, башҡа йыһаздарҙы ҡорорға тотондоҡ. Ауыл халҡы көтөү ҡайтыу менән үҙ хужалыҡтарына ашыҡты. Ә беҙ, тамаҡ ялғап алғас, эшебеҙҙе дауам иттек. Бик һуң ғына берәү килеп, беҙҙе төнгө сәйгә саҡырғайны ла, икенсе сменаныҡылар: «Сәйҙән һуң йоҡлап булмаҫ», – тип рәхмәт әйтеп ҡалдылар. Һатыусылар шунда: «Ул ҡаршы ғына йортта йәшәй, иртән тороуығыҙға йүгереп килеп тә етер. Тынғыһыҙ апай, күпте күргән, күпте кисергән, һуғышта ҡатнашҡан боевой командирыбыҙ бит ул», – тип таныштырғайнылар.

...Йәндәр ағай менән Сания апай Муллайәновтар, революцияға тиклем ауыл байҙарына бил бөккәнлектән, Йәркәй яҡтарында Совет власы урынлашыуын ҙур ҡыуаныс менән ҡаршы алды һәм беренселәрҙән булып колхозға инде. Йәндәр ул йылдарҙағы иң маҡтаулы эштә – тимерлектә тир түкте. Арба йүнәтһенме, салғы тапаһынмы, тырма ремонтлаһынмы – көсөн йәлләмәне, сөнки үҙенә, үҙ колхозына эшләй ине. Ураҡ осоронда урғыс йә һуҡҡыс ватылһа, төн тип тормай, тимерлегенә йүгерҙе, көн башланыуға машиналар әҙер булһын тип тырышты. Олоғая килә, Үрге Маншыр ауылы янында ҡоролған ел тирмәнендә лә эшләне.

Сания апай ул йылдарҙа ауылдың йәш ҡатын-ҡыҙҙары менән йырлап бесән сабырға йөрөнө, көлтә бәйләне, иген елгәртте. Мәҙрәсәлә ике йыл алған белеме ҡойто ине. Етмәһә, алфавиттар үҙгәреп китте.

Йәштәр, буш ваҡыттары булғанда, тырыша-тырыша латинса уҡырға, яҙырға өйрәнде. Һуңыраҡ тағы урыҫ әлифбаһын үҙләштергәс, көн дә гәзит уҡып, донъя хәлдәрен, ил тормошон белеп торҙолар, китап уҡырға ла иренмәнеләр. Уҡыған һайын үҙҙәренә күп нәмәләрҙе асыҡлап шатландылар. Шуға күрә ғаилә ҡыҙҙарын да уҡытырға тырышты.

– Уҡы, ҡыҙым, уҡыған кеше иленә лә, ата-әсәһенә лә ярҙам итә, бәхетле лә була, – тип өйрәттеләр Асияны.

Асия Үрге Маншыр урта мәктәбен тамамлап, 1940 йылда Бөрө педучилищеһына уҡырға инде. Был йылдарҙа Башҡортостандың бөтә ауылдарында ла мәктәптәр асылғайны, тик, уҡытыусылар етешмәү сәбәпле, ҡайһы бер бәләкәй ауыл балалары күрше-тирә ауыл, ҡасабаларға йөрөп белем алды. Был ауыр хәлде аңлап, училище етәкселәре рөхсәте менән Асия, ике айҙа башланғыс мәктәптәрҙә уҡытыу методикаһын тиҙ генә үҙләштереп, Рысай ауылына уҡытыусы булып барҙы.

Ул осорҙа уҡытыусы – йәшме ул, оломо – ауылдың иң абруйлы кешеһе һаналды. Асия ла Рысайҙа шундай кеше ине. Һорауҙары, кәңәштәре менән, ҡайғыхәсрәте йә шатлығы булһа ла, кешеләр уға килде. Асия белгәненсә, ҡулынан килгәненсә һәммәһенә лә ярҙам итергә тырышты. Кистәрен ҡайһы берәүҙәргә инеп, балаларҙың дәрескә әҙерлектәрен тикшереп сығырға ла ваҡыт таба ине.

Йыш ҡына йыйылыштарҙа сығыш яһаны, лекциялар һөйләне. Гәзиттәрҙән уҡып, радио тыңлап, халыҡҡа ил һәм Башҡортостан яңылыҡтарын еткерҙе, колхоз уңыштары менән таныштырҙы. Бигерәк тә халыҡ уның донъя хәлдәре хаҡында һөйләүен яратып тыңланы. Улар немец фашистарының ҡайһы бер Европа илдәрен баҫып алыуҙарына бик ныҡ ризаһыҙлыҡ белдерә ине, Ватанды шул дошмандарҙан һаҡлап ҡалыу хаҡында борсолдолар.

...Яуыз дошман 1941 йылдың йәйендә СССР-ға ла баҫып инде. Колхоздың терәге – һөлөк кеүек ирҙәр, йәш егеттәр, оло ағайҙар изге яуға ашҡынды. Асия ла әхирәт ҡыҙҙары менән тәүҙә ауыл Советына, аҙаҡ хәрби комиссариатҡа килде. Бәғзе әхирәттәрен фронтҡа алдылар, ә уны килгән һайын:

– Һин китеп, балаларҙы кем уҡытыр һуң? Уҡыу йылы тамамланһын, шунан ҡарарбыҙ, – тип бороп ҡайтарҙылар.

Уҡытыусы мәктәптән һуң колхозсыларға төрлө яҡлап ярҙам итте. Фермала мал ҡарашты, төндәрен молотилкаға сыҡты. Көҙөн балалары менән башаҡ йыйып, фронтҡа өҫтәмә иген оҙаттылар. Кистәрен Асия, һалдат хаттарын уҡып, әсәй-өләсәйҙәрҙе, еңгәләрҙе шатландырҙы. Әхирәттәре яҙған хаттарҙы уҡыны, тағы ғаризалар яҙҙы.

1942 йылдың 1 апрелендә комсомол ойошмаһы секретарынан ғаризаһына «рөхсәт» һалдырып, Асия яңынан хәрби комиссариатҡа килде. Бында һаман ашыҡманылар. Асия әйләнде лә хәрби комиссар бүлмәһенә инде. Уныһы ла: «Уҡытыусы бында ла кәрәк», – тип бороп сығарҙы. Комиссар менән телләшеп бөттө ахырҙа. «Фашистар Мәскәүгә килеп еткән, Волга буйын тапай, ә һеҙ бында ултыраһығыҙ...» Өсөнсө көнөнә генә саҡ комиссияға эләкте ныҡыш комсомолка.

Гөрләп яҙ килгән мәл. Ҡояшлы иртә. Төндә күләүекләнеп туңған ҡар һыуҙары өҫтөндә нурҙар уйнап, күҙҙе сағылдыра. Ҡалҡыу урындар асылған, тик уйһыу ерҙәрҙә, тау араларында һәм ҡыш тапалған юлда ғына ҡар бар. Ғәҙәттәгесә, кистән – туңдыра, көндөҙ – иретә.

Бына ошондай көндө, сана егеп, Үрге Йәркәйҙән Груздевка яғына егермеләгән ылау юлға сыҡты. Сана башында – малайҙар, ә юлаусылары – Илештең көлөшөп килгән 65 ҡыҙы. Улар, ҡайҙа киткәндәрен белһәләр ҙә, мәрәкәләшеп бара. Ниңә ҡайғырырға – үҙҙәренең илен һаҡларға үҙҙәре теләп баралар бит.

Аҡ пароход уларҙы Өфөгә алып килде. Асияларҙы ҡаланың 3-сө һанлы мәктәбенә урынлаштырҙылар. Башҡа районлар ҡыҙҙарына ла урын мәктәптәрҙә табылды. 10 майҙа ғына Башҡортостандан 3748 ҡыҙ, эшелонға тейәлеп, көнбайышҡа, туптар гөрһөлдәшкән яҡҡа, юлланды.


*Асия Ахунова былтыр 90 йәшен билдәләне: автор уны юбилейы менән ҡотлай.*

Ағиҙел буйы ҡыҙҙарын Волгоград фронтының 43-сө прожекторҙар полкына тәғәйенләнеләр һәм ике ай буйы прожекторсы һөнәренә өйрәттеләр. Шунда ҡайһы берәүҙәр: «Кит, шул ябай эшкә ике ай уҡытмайҙарҙыр ҙа инде», – тип риаһыҙлыҡ белдерһә лә, уҡый башлағас, яңылышыуҙарын тиҙ һиҙҙеләр: ҡараңғы төндә дошман самолетын прожекторҙың үткер һәм сағыу «күҙ»енә эләктереп, артиллеристарға дөрөҫ сәп биреүе еңел түгел икән шул.

Дошман теше-тырнағы менән Волгоградты ҡамап, Волга аша сығырға һәм Рәсәйҙең үҙәге Уралды алырға шашынған сағы. Был йүнәлешкә гитлерсылар күп көсөн туплағайны, һәм улар Волга буйҙарын көнө-төнө бомбаға тоттолар. Асияларҙың полкы яуаплы бурыс үтәй: уларға немецтарҙың самолеттарын Волга буйына һәм тылға үткәрмәҫкә бойороҡ бирелде.

* * *

Рота Волгоградтан алыҫтағы Ивановка ауылы янында туҡтатылды. Фашистар көндөҙ ике тапҡыр һөжүмгә күтәрелеп ҡараны, тик совет һалдаттары уларға бер ҡарыш та ер бирмәне.

...Йәйге кис. Эңер төшкәс, унда-бында орудие шартлаған тауыштар ишетелеп ҡала. Бындай саҡта һалдаттар һағая төшә. Ивановка эттәре лә өрмәй. Нимәлер булыр кеүек... Командирҙар һаҡсыларҙы ишәйтә, разведка ебәрә.

Был юлы ла тынлыҡ алдатҡыс булып сыҡты. Төн урталарында прожекторсылар ротаһын күтәреп, алдан билдәләнгән урындарға ҡуйып сыҡтылар. Алда – фронт линияһы, пехота – нығытмаларҙа, немецтар күренһә, беҙҙекеләр яуға ташланырға әҙер. Арттараҡ күкте зенитсылар һаҡлай, дошман самолеттарын бәреп төшөрөргә улар ҙа уяу. Артта – Волгоград һәм киң Волга.

Башҡортостан ҡыҙҙары ла һағая төштө, һөйләшкән кеше юҡ. Ҡайһы саҡ ишаралашып ҡына аңлашалар. Иң мөһиме – дошман самолеттарын ваҡытында шәйләп, секунд та ваҡытты әрәм итмәй, артиллеристарға, летчиктарға хәбәр итергә һәм прожектор нәжәғәйенә «эләктереп» алырға тейештәр.

Бер ваҡыт алыҫтан, бик алыҫтан ел-дауыллап, күк дөһөрләп ямғыр килгәндәй, тирә-яҡты тотош тоноҡ геүләү солғаны. Һәр кем, был тауышты аңларға

тырышып, нығыраҡ ҡолаҡ һалды. Был – самолеттар тауышы, фашист самолеттары ине.

Төнгө ҡараңғылыҡты телгеләп, тиҫтәләгән, йөҙләгән прожектор әйләнә башланы. Фронттың бөтә участкаларында ла элемтә эшләй. «180 – көньяҡ», «220 – көньяҡ-көнбайыш» ...Был инде самолеттарҙың осоу йүнәлеше. Прожекторҙар яҡтыһында артиллеристар уларҙы көслө ут менән ҡаршы алды.

Минут үтеүгә, немецтарҙың бронялы «Хенкель-111» самолеттары Ивановка өҫтөнә ябырылды: тирә-яҡта бомбалар шартлай, артиллерия туптары гөрһөлдәй. Янған самолеттар һыҙғыра-һыҙғыра ҡолай... Урман яна, ауыл яна. Ерҙең аҫты өҫкә әйләнгәндәй тойола.

Күп тә үтмәне, самолеттар йәнә әйләнеп килде. Дошман бөгөн Волгоградты ҡулға эләктерергә тырыша. Разведка әйтеүенсә, бер төндә генә Волгоградка дүрт тапҡыр 500-гә яҡын дошман самолеты ташланып ҡараған, әммә бер нисәһе генә имен ҡалып, кире боролорға мәжбүр булғандар. Асия өс самолетты «эләктереп», зенитчиктарға «тотторҙо»: улар, мәргән атып, тегеләрҙе ергә бәреп төшөрҙө.

Дошман һауанан өсөнсөгә ябырылғанда, элемтә өҙөлдө. Ҙур булмаған йылға аша сығып, Асия бомба өҙгән сымды тоташтырып бөткәндә, фашист самолеттары, күҙҙе ныҡ сағылдырған прожекторҙарҙы юҡ итеү ниәте менән, Ивановка тирәһен ныҡлап утҡа тота башлағайны. Ауылды тотош янғын солғаған... Тереләр, өйҙәрен, ауылдарын ҡалдырып, йәшенер урын эҙләп, урманға, тау араларына, йылға буйына йүгерешә.

Алыш таңға тиклем дауам итте. Немецтар төрлө йүнәлештән һөжүм итеп тә маҡсаттарына ирешә алманы, һәм уларға итектәрен Волгала йыуырға яҙманы.

...Бер саҡ Асияның ҡолағына әсе итеп «Мамочка!» тип ҡысҡырған бала тауышы салынып ҡалды. Сабый сырылдауы самолет моторы геүләүенән дә, гөрһөлдәгән бомбалар шартлауынан да көслөрәк тойолдо Асияға. Түҙмәне, прожекторҙарын ҡалдырып, ярҙам һорап ҡысҡырған тауыш яғына ашыҡты.

Прожекторҙар уйнаған яҡтыла ул баланы оҙаҡ эҙләмәне. Ни күҙе менән күрһен: хәрәкәтһеҙ ятҡан әсәһе өҫтөндә 2-3 йәшлек бала аҡырып илай, әсәһенең биттәрен, танауын, ҡолаҡтарын тотоп ҡарай. Бахырҡай, йомоҡ күҙҙе асырға тырышҡандай, әсәһенең муйынын һыйпай, йөҙөн сәпәкләй, әммә ҡәҙерлеһе уны ҡосағына ала алмай. Ул инде йән биргәйне. Сабый, әсәһе йоҡлай типме, көслөрәк ҡысҡырҙы. Асия күтәреп алғас та, иланы ла иланы. Рядовой ҡулынан баланы тиҙҙән ошо ауылдың бер ҡарты алып китте.

– Был – уның апаһы, ә әсәһе иҫән, ҡыҙын икенсе яҡта эҙләй. Баланы әсәһенә тапшырырмын, рәхмәт, һалдат, – тип теге бабай, баланы күкрәгенә ҡыҫып, ары атланы. Бала ла тынып ҡалғандай булды.

Волгоградтан һуң Асиялар Днепропетровск, Житомир, Украинаның башҡа ҡала, өлкәләрен азат итеүҙә ҡатнашты. Башҡортостан ҡыҙҙары күрше Польша ерҙәренән дә немец-фашистарын ҡыуыуҙа ҡыйыу булды. 1944 йылдың көҙөндә улар үҙҙәре азат иткән Мехлездоров ауылында оҙаҡ ҡына торҙолар.

Командование был хәлде башта: «Беҙ күп юғалтыуҙарға дусар ителдек, өҫтәмә көс көтәбеҙ», – тип аңлатты. «Ял» оҙаҡҡа киткәс: «Үҙәк һәм Белорус фронттары һалдаттары Германия ерендә һуғыша. Ике фронт прожекторсылары етә. Әлегә ана шул Мехлездоров ауылында булығыҙ, тигән бойороҡ алдыҡ», – тине командирҙары.

Икенсе әмер алғансы һалдаттар тик ятманы. Асиялар поляк ҡатындарына һыйыр һауышты, мәктәпте төҙөкләндереүҙә, уңыш йыйып алыуҙа ярҙамлашты. Халыҡтың төрлөһө бар. Шулай ҙа поляктарҙың күбеһе, совет һалдаттарын

үҙҙәрен фашистарҙан азат итеүсе һанап, уларға яҡшы мөнәсәбәттә булып, туғандары кеүек күрҙе.

Асия халыҡ араһында булғанда совет кешеләренең нисек йәшәүе һәм үҙ колхоздары өлгөһөндә СССР-ҙа крәҫтиәндәрҙең хеҙмәте хаҡында һөйләне. Поляк балаларына, хатта оло йәштәгеләргә лә рус теленән дәрестәр бирҙе.

* * *

Асия апайҙың альбомында Олешек Рутковскиҙың Еңеү көнөнә русса иҫтәлек яҙып ебәргән открыткаһы һаҡлана.

– Ул саҡта икенсе класта ғына уҡый ине. Руссаға бик тиҙ өйрәнде Олешек, – тип иҫләне Асия апай беҙҙең менән осрашҡанда.

Эйе, Еңеү көнөн Польшаның Скорышев ауылында ҡаршы алдылар. Халыҡ ауыл уртаһындағы майҙансыҡҡа йыйылды. Асияларҙан тыш, бында башҡа совет һалдаттары ла бар ине. Митингыла поляк халҡы совет һалдаттарына сәскәләр тапшырҙы, рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе, аҙаҡ ҡулға-ҡул тотошоп бейенеләр, йырлаштылар. Ниндәйҙер ят тауыш ишетелһә, прожекторсылар, ғәҙәттәгесә, ҡараштарын күккә төбәне. Польша күге тыныс, йыр һәм бейеү тауыштары ғына ҡайҙандыр ҡайтауазлап яңғырай ине.

Асиялар взводынан комсорг Мария Руденко бөтә уйындарҙы ойоштороусы булды. Ауыл халҡы һәм совет һалдаттары, дүрт йыл һуғыш юлында арыттырһа ла, ялыҡтырһа ла, һылтау эҙләмәй, яңы рухи көс табып, көндө төнгә, төндө таңға бәйләп, 9 майҙы оло байрамға әйләндерҙе.

* * *

1945 йылдың 15 авгусында Дүртөйлө, Илеш ҡыҙҙары – Асия ла улар менән ине – аҡ пароходта Дүртөйлө пристаненә ҡайтып төштө. Асия ауылға ҡайтып етмәне: Үрге Йәркәйгә иҫәпкә торорға хәрби комиссариатҡа барҙы, ыңғайҙан РОНО-ға ла инде. Уны бик йылы ҡаршыланылар. Хәрби комиссар ялан сәскәләренән оло гөлләмә тотторҙо, башҡалар шампан шартлатып, тулы фужерҙар менән уратып алды.

Асия шул мәлдә рапорт кеүегерәк ҡанатлы һүҙ әйтергә йыйынғайны ла, булдыра алманы, күңеле тулып, күҙҙәренән йәш тамсылары атылып сыҡты, ишетелер-ишетелмәҫ кенә итеп рәхмәт күндерә алды. Тора-бара аңына килеп, уның менән фронтҡа киткән Илеш ҡыҙҙары хаҡында һорашты. Военком уларҙың 41-енең генә иҫән ҡайтыуы хаҡында әйтте. Асияның күҙҙәре ҡабат йәшкә тулды.

Фашист илбаҫарҙарының яуызлығы Рысай ауылында ғына түгел, тотош Башҡортостанда ла һиҙелә ине. Өй-ҡуралар иҫкергән, һалам башлы йорттар ергә һеңгән. Тирә-йүнде сүп-сар баҫҡан. Һуғыштан иҫән-һау ҡайтҡандарға, кем әйтмешләй, эш муйындан. Илеш яҡтарында ла һуғыш яраларын «ямауға» һәм яңы тормош ҡороп ебәреүгә дәррәү тотондолар.

Асия, ҡайтыу менән ауыл мәктәбен ремонтларға кереште. Ишек, тәҙрә рамдарын рәтләүҙе оҫталарға тапшырһа, үҙе иҙән-түбәләрҙе, парталарҙы буяп сыҡты. Ул йылды Рысайҙа уҡыу үҙ ваҡытында – 1 сентябрҙә башланды.

Асияның ата-әсәһе лә, уның һәләтен һиҙеп ҡалған Рысай кешеләре лә: «Башлы-күҙле булғанса, белемеңде арттырыу яғын ҡарарға кәрәк, балаҡай. Өфөгә барып, институтҡа инер инең», – тип өгөтләне. Асияның өмөтө бар ине, әлбиттә. Тик икенсерәк уйлаштырҙы шул ул саҡта. Белем алыу бер ҡасан да һуң түгел, ә бына... Тура килгәндә ғаиләле булырға ла теләне һәм Иҫке Күктау егетенә кейәүгә сыҡты.

«Күктау егетенә кейәүгә сыҡты» тиһәк тә, «кейәү» уға ҡарағанда күпкә оло ине. Ул – Фин һуғышында ҡатнашҡан һалдат.

Оло булһа ла, һораткас, ҡыҙҙың йәш күңелен төрлө уйҙар солғап алды. Исән ҡалған тиҫтерҙәре күптән бала бәхете менән йәшәй, ә ул? Өмөт итерлек тиҫтерҙәре бармы һуң?

Һуңғы һуғышта Мирзаян Ахунов Ленинград фронты сафында һуғыша, блокадала ла ҡала. Кешеләр азатлығы, халыҡ бәхете өсөн һаулығын юғалтҡан һалдат үҙ төйәгендә мандый алмай, оҙаҡ ауырыуҙан һуң был яҡты донъя менән иртә хушлаша. Иҫтәлеге, төҫө, мираҫы итеп Асия уның фамилияһын йөрөтә. Туҡһанға еткәнсе уның ауылында йәшәне һәм йәш быуынды уҡытты, тәрбиәләне.

Утыҙ йылдан ашыу ул уҡытҡан балалар бөгөн илебеҙҙең төрлө ҡалаларында, өлкәләрендә йәшәй һәм эшләй. Улар – төрлө һөнәр кешеләре, Асия апайҙың альбомдары араһында һаҡланған хаттар, фотоһүрәттәр был турала асыҡ һөйләй.

...Иртән һатыусы беҙҙе уятҡанда, кисә, иртүк килербеҙ, тип вәғәҙә биргәндәр магазинда юҡ ине әле.

– Ауыл халҡы ла, йәркәйҙәр ҙә хәҙер килеп етер... Ҡаршыла йәшәгән Асия инәй тәҙрәһенә ҡағыҙ йәбештерҙе, тимәк, сәй өлгөргән. Егеттәр, һеҙҙе саҡыра ул. Башҡалар килеп еткәнсе, ашай һалып сығығыҙ, – тип, беҙҙе етәкләгәндәй итеп, ҡаршы йортҡа алып барҙы һатыусы. Кисәге асыҡ йөҙлө, дәртле апай, ҡунаҡ көткәндәй, ҡапҡаһын асып ҡаршы алды өйөнә. Йәһәтләһә лә, урамында күҙгә эленгән «гидрометеостанцияһы»на туҡталмай үтә алманыҡ. Ә сәскәләре?! Шулай ҙа апай яуап биреп торманы: ваҡыт булғанда бөтәһе тураһында ла һөйләрмен, аш һыуына, тип беҙҙе өйөнә әйҙүкләне.

Аҙаҡ мин йәйге оҙон көндә кис еткерә алмай яфаландым. Алдан әйтеүҙәренсә, башта апайҙың һуғышта булыуы ҡыҙыҡһындырһа, әле иртән күргән өрәңы асыштар тынғы бирмәй. Белге килә... Кис, рөхсәт алып, күстәнәстәребеҙ менән уларға сәйгә индек.

Минең менән килгән Хәким, ауыл клубында булып ҡайтҡас, бер аҙ беҙҙе тыңлап ятты ла әүен баҙарына киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Беҙҙең икебеҙҙе лә йоҡо алмай. Төн сыҡҡанса, ауыл көтөүе киткәнсә бер тапҡыр ҙа керпек ҡаҡманыҡ. Асия апайҙың әле һеҙгә бәйән ителгән фәһемле лә, ҡыҙғаныс та, аяныс та тормошо хаҡында тыңлап, ҡайһы бер урынын аҡ ҡағыҙға һыҙып барып, төн уҙғаны һиҙелмәй ҙә ҡалынды.

Иртәгәһенә урамда күргәндәремде һорарға баҙнат иттем. Апайыбыҙ, агроном Шәйәхмәтовтың үтенесе буйынса, көн дә колхоз өсөн һауа торошон яҙып бара икән (Илдар Шәйәхмәтов һуңыраҡ КПСС-тың Илеш район комитетының беренсе секретары булып эшләне).

Асия апай:

– Бынан 15 йыл элек ҡорамалдарҙы колхоз алып бирҙе. Мин көндәлек тултырып барам. Ел тиҙлеген белә торған прибор булмағас, балалар уйынсығын элеп ҡуйҙыҡ. Елдең көсөн ағас башына ҡарап билдәләйем. Яҡынсараҡ булһа ла, байтаҡ тәжрибә тупланым инде. Ағас үҙен тынысыраҡ тотһа, ел көсө секундына 2-3 метр, башы геүләй башлаһа, 10-ға, ҡороған япраҡтар остониһә – 15-кә, ҡороған ботаҡтар һына башлаһа 20-гә етә, – тип аңлатты – Бынан тыш көн сыуаҡмы, болотломо, ямғыр күпме яуғанын һәм башҡа күрһәткестәрҙе көн дә теркәп барам.

Ә түтәлдәге сәскәләр! Башҡа баҡсаларҙа быңдағы сәскәләрҙең күбеһе юҡ. Асия апай почта аша әллә ҡайҙарҙан орлоҡтар ҡайтарта, имеш, хатта сит илдәрҙән дә.

– Бөгөн улар – минең ҡыуанысым да, йыуанысым да, – тип берәм-берәм тотоп уларҙы иркәләй, еҫкәп ала хужабикә.

* * *

Юбилейға барғанда хәл-әхүәлдәрҙе һорашам. Асия апай:

– Һуғыш ветерандарына күрһәткән хәстәрләүҙәре өсөн хөкүмәткә рәхмәт, – тип шатланды.

– Ә пенсияны күпмерәк бирәләр?

Ул, яуап урынына: «Үҙең күпме алаһың?» – тип һораны. Мин әйтәм: «Йәшерен-батырыны юҡ, ун меңдән саҡ ҡына күберәк». Апай: «Бер башыма һинән ике тапҡырҙан күберәк алам», – тип көлөмһөрәне.

Бер аҙ ултырғас, һуғыш ветераны:

– Дәүләткә үпкә һүҙҙәрем дә бар. Әле һөйләшеп ултырабыҙ: һин – башҡорт, мин татар ҡыҙы булғанымды беләһең. Йылдар үтер, ғүмер уҙыр, киләсәктә беҙҙе кем тиерҙәр икән? Мине шул һорау борсой. Бөтәбеҙҙе лә урыҫ тип йөрөтмәкселәрме икән? Гүйә, хөкүмәт үҙ кешеһен яңы әүәләнгән алпауыттар ҡарамағына ташланы. Был бит көлкө... Һуңғы ваҡыт кәмәләренә һыу инә башлағайны, иҫтәренә төштө: күп мәсьәләләр быға тиклем бысраҡ ҡулдар менән эшләнгәнлеге өҫкә ҡалҡып сыҡты. Шундай йүнһеҙлектәр илде ҡайҙа алып барыр икән? – тип борсолдо һуғыш ветераны.

103 йәшлек фронтташы Майбәҙәр Камалова инәй менән мәктәптәрҙә булалар, колхоз, район йыйылыштарында йыш ҡатнашалар. Үҙҙәрен һәм халыҡты борсоған мәсьәләләр хаҡында сығыш яһайҙар, тормоштан алған һабаҡтары менән уртаҡлашалар.

2010 йылда өс әхирәт – өс Илеш яугиры, өс ветеран осрашты. Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллыҡ тантанаһында. Асия апай: «Мин уҡытҡан уҡыусыларымдың балаларының балалары бөгөн тәмәкене арҡыры ҡабып, һыра эсеп йөрөүҙәренә бик ныҡ әсенәм, йоғошло, алама сир, – тип бошона, уҡытыусылар менән дә, атаәсәләре менән дә был хаҡта һөйләшмәйенсә булдыра алмай. – Тәрбиә етмәй», – ти ул. Тәрбиәүи эш, уныңса, даими алып барылырға тейеш.

Юбилей кисәһенән һуң мине оҙата сыҡҡас:

– Теге баланың тауышы әле булһа ҡолағымда яңғырап тора, – тип әрнене. Һуғыш ветеранын тағы бер тапҡыр 90 йәше менән ҡотлап, иҫән-һаулыҡ теләп, яңынан осрашырға яҙһын тип, ҡайтыу яғына ыңғайланыҡ. Яулыҡ осо менән күҙен һөрткөләп, ҡул болғап ҡалды геройыбыҙ.

Мин ҡыйыу һалдат хаҡында 1985 йылда Башҡортостан радиоһы аша һөйләгәйнем инде. Уҙған йыл аҙағында шул саҡта яҙған, инде һарғайып бөткән ҡағыҙ киҫәктәренә юлыҡтым да хәтирәләремде «Ағиҙел» уҡыусыларына тәҡдим итмәксе булдым. Был теләгем апайҙың юбилейында ҡатнашҡас тағы ла артты.

Тотош ғүмерен балалар уҡытыуға бағышлаған, илебеҙ азатлығы өсөн немецфашистарына ҡаршы батыр көрәшкән һуғыш ветераны Асия апай бер туған Миңнейыһан апаһының ҡыҙы Лүзә Шәһизада менән үҙе тыуған Үрге Маншыр ауылында йәшәй бөгөн. Тотош район халҡы хөрмәт итә үҙен. Күкрәген «Хеҙмәт ветераны» миҙалы менән бергә бик күп фронт билдәләре, Бөйөк Еңеүҙең юбилей наградалары биҙәй.

**Хәбир ДАУЫТОВ.**

*Хәлил Хәйрулла улы Хамматов 1907 йылда Силәбе өлкәһендә тыуа. Педагогия техникумын тамамлай, уҡытыусы булып эшләй. Башҡорт педагогия институтында уҡып сыҡҡас, Башҡортостан Фәндәр академияһының Тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институтында фәнни хеҙмәткәр, фольклор секторы мөдире, Бөйөк Ватан һуғышына тиклем институттың директоры була. Һуғышта ҡатнаша, капитан дәрәжәһе ала, Ҡыҙыл Йондоҙ ордены, миҙалдар менән бүләкләнә.*

*Тыуған яҡҡа ҡайтҡас, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры директоры булып эшләй һәм сәнғәтте үҫтереү өлкәһендәге уңыштары өсөн Почет билдәһе орденына лайыҡ була. 1962 – 1979 йылдарҙа Хәлил Хамматов Өфө дәүләт циркы директоры вазифаһын башҡара. Ул бик күп фольклор экспедицияларында ҡатнаша, бай материал туплай. Байтаҡ хикәйәләр авторы ла. Республика ваҡытлы матбуғатында күп мәҡәләләр, очерктар менән сығыш яһай. Ижади мираҫы байтаҡ ҡына. Журнал уҡыусыларға шуның береһен тәҡдим итәбеҙ.*

# САЛАУАТ БАТЫР – ХАЛЫҠ ХӘТЕРЕНДӘ[1]

Йәш саҡта атайым Салауат батыр, уның башҡорт халҡына хеҙмәте тураһында күп хәтирәләр һөйләй торғайны. Хатта уның был турала яҙған китап һымаҡ нәмәһе лә бар ине. Үкенескә ҡаршы, беҙ уны һаҡлай алманыҡ. Атайымдың хәтирәләрен әле булһа һөйләп йөрөйҙәр.

...1773 йылдарҙа, Рәсәйҙә Әбей батша (Екатерина II – **ред.**) хөкөм һөргән дәүерҙә, Яйыҡ йылғаһы буйында йәшәгән казактар ихтилалға күтәрелеп, уларға башҡа халыҡтар ҙа ҡушыла. Уларҙың етәксеһе Бугас тигән казак була. Салауат батыр, башҡорт ирҙәрен йыйып, Бугасҡа ҡатнашып, батша ғәскәрҙәренә ҡаршы ныҡ һуғыша икән, тигән хәбәр беҙҙең ауылда ла таралғайны. Башҡорт халҡының ер-һыуы өсөн көрәшкән Салауатты халыҡ бөтә ерҙә лә яратҡан, уға ныҡ ышанғандар, уның һүҙен тыңлағандар, әмерен үтәгәндәр.

Тирә-яҡ ауылдар халыҡтары ышанысլы кешеләрен ебәреп, Салауат батыр менән хәбәрләшеп торған. Беҙҙең Еҙем буйында йәшәүсе башҡорттар ҙа ошо турала уйлана. Ауыл халҡы йыйылышып, Салауат батырҙы күреп, халыҡ һүҙен уға еткерерлек ышанысլы кеше эҙләй башлай. Был ваҡыт Салауат батыр Ырымбур аҫтында булған, ти.

Башҡорт еренең тирә-яғы батша һалдаттары менән тулған саҡта, был бурысты

---

[1]Материал Ғафури районы Яҡты Күл ауылы В. Ҡоломбәтовтан яҙып алынды.

үтәү өсөн йөрәкле, ғәйрәтле кеше кәрәк була. Оҙаҡ ҡына уйлашҡандан һуң, 19 йәшлек Юлҡай (Юлыҡбай) йәмәғәт алдына сығып:

– Олатайҙар, ағайҙар! Риза булһағыҙ, Салауат батырҙы күреп, хәл-әхүәлен белергә үҙем барыр инем. Ышанығыҙ, юлда осрай ҡалһа, дошманға сер бирмәм. Беҙгә ҡурҡырға ярамай, батырлыҡ кәрәк. Ана, Салауат батыр бөтә донъяны әйҙәп, дошманын ҡуй һарығы кеүек ҡыра. Беҙ ҙә шулай тәүәккәл булырға тейешбеҙ, ти.

Егет һөйләп бөткәндән һуң уның атаһы Бәшәрғол ҡарт һүҙ башлай:

– Ағайҙар, ҡустылар! Мин Юлҡай улымдың Салауат батырҙы юллап китеүенә ризамын. Дөрөҫ, беҙгә ҡурҡыуҙан файҙа юҡ, ә ахыры яман булыуы бар. Булмаһа, тәүәккәлләйек, ул Салауат батырҙы күреп, бөтә эште белеп ҡайтһын.

Халыҡ ризалаша. Күп тә үтмәй, юллыҡ аҙыҡ алып, атын менеп, егет юлға сыға. Уның бығаса йыраҡ йөрөмәүе сәбәпле, Ырымбурға саҡлы барып етеү ауыр эш була. Шулай ҙа Юлҡай һыуҙар кисеп, урмандар аша үтеп, ҡалаға яҡынлаша. Уға етәрәк, егет йыраҡта атлы ғәскәр күрә лә атынан төшөп, эйәрен рәтләп торған кешегә һалыша. Атлы ғәскәр башҡорттарҙыҡы булып сыға. Береһе Юлҡай янына килеп:

– Һин кем булаһың, ҡайҙан киләһең, нимә эшләп йөрөйһөң? – тип һораша.

– Ошо яҡ кешеһе булам. Өләсәйҙәргә ҡунаҡҡа барғайным, шунан ҡайтып киләм, – ти Юлҡай иҫе китмәй генә.

Ләкин һыбайлыны уның яуабы ҡәнәғәтләндермәй.

– Егет, һин юҡты һөйләйһең, – ти ул, юлсыға туп-тура ҡарап. – Һинең күңелендә бөтөнләй икенсе уй барын мин күҙеңдән күреп торам. Ҡурҡмай, йәшермәй, дөрөҫөн һөйлә!

Юлҡай: «Был китһә, бер нәмә лә белмәй ҡалырмын, үҙебеҙҙең башҡорт егете бит», – тип уйлап, серен асырға була.

– Ағай, мин Богоявленский тирәһендә, Еҙем һыуы буйындағы тау араларында йәшәгән башҡорттар араһынан килдем, – ти ул, ҡыйыуланып. – Был тирәлә аҙна-ун көн йөрөп ятам, ләкин йомошомдо үтәй алғаным юҡ. Мине халыҡ: «Һин Салауат батырҙы эҙләп тап, уға хәл-әхүәлде һөйлә, беҙ уның менән икәнде әйт», – тип ебәрҙе.

Был һүҙҙәрҙе ишетеп, әлеге һыбайлы, кескәй генә мыйығын уң ҡулы менән һыпырып, көләмһөрәп ҡуйған да:

– Улайһа, Салауат Юлаев мин булам инде, – тигән.

Юлҡай, ни әйтергә белмәй, аптырап, һүҙһеҙ ҡалған. Салауат батыр иһә китеп барған ғәскәрен саҡырып алған да былай тигән:

– Туғандар! Еҙем һыуы буйында йәшәүсе башҡорттарҙан килгән был егет беҙгә ҙур шатлыҡлы һәм һөйөнөслө хәбәр килтергән. Улар беҙгә ҡушылып, дошманға ҡаршы һуғышырға әҙер.

Салауаттың ғәскәре аттарынан төшөп, Юлҡайҙы ҡулдарынан күтәреп алып, бөтәһенән дә яҡынан һөйләткән, ти. Маҡсатына ирешкән Юлҡай Салауат батырға: «Ваҡыт үтә бит, мин ауылға ҡайтайым инде», – тигәс, Салауат бөтә ғәскәре алдында былай тигән:

– Егет, һин ҡайтыу менән халыҡҡа әйт. Уларҙың беҙҙең менән бергә дошманға ҡаршы һуғышырға ҙур теләге булыуға бик шатбыҙ. Илебеҙҙе, ер-һыуыбыҙҙы дошманға бирмәҫкә, баярҙар, дворяндар талап алған ерҙәрҙе ҡайтарып алырға тейешбеҙ. Көс – берлектә, халыҡ туплансын!

Ошо һүҙҙәрҙән һуң Юлҡайҙы оҙатып ебәргәндәр. Бер аҙҙан ул ауылына ҡайта һәм, халыҡты йыйып, Салауат менән осрашҡанын әйтә.

– Ағайҙар! Салауат батыр мине ҙурлап ҡаршы алды. Теләгегеҙҙе ишетеп бик шатланды. «Ҡайтҡас, бөтә ауыл халҡына сәләм әйт!» – тине. Миңә ҡайҙа буласағын да аңлатты.

Ошо һөйләшеүҙән һуң ирҙәр Салауат батыр янына барырға уҡ-һаҙағын, кейем-һалымын, ризыҡ-ниғмәт әҙерләй ҙә, йөҙләгән атлы ауылдан сығып китә. Бер аҙнала улар Салауат Юлаев ғәскәренә барып ҡушылып, батша ғәскәрҙәре менән һуғышта ҡатнаша. Был һуғышта Юлҡай ҙур батырлыҡ күрһәтә. Салауат батыр ошоноң өсөн уны тағы ла нығыраҡ ихтирам итә башлай.

Ир-егеттәр илдән сығып киткәндән бирле хәбәр-хәтер булмауы Юлҡайҙың ата-әсәһен һәм башҡаларҙы ныҡ борсоп, ҡайғыға төшөрә. Бынан тыш, илдең таланыуы, халыҡтың күп ҡан-йәш түгеүе лә Бәшәрғол ҡартты ныҡлы хәүефкә һала. Зирәклеге, тормошто, донъяның барышын башҡаларға ҡарағанда күберәк белеүе һәм һүҙгә оҫталығы менән ул халыҡ алдында абруй менән файҙаланған. Бәшәрғолдо ауыл халҡы яратҡан һәм сит ауылдарҙа ла уны яҡшы белгәндәр, ти.

Улы Салауат батырға ҡатнашып киткәс, Бәшәрғол да халыҡ араһында күберәк була, башҡаларҙы ла батша ғәскәренә ҡаршы һуғышҡа барырға өндәй башлаған. Күп ваҡыттар үткәндән һуң ул, үҙ тирәһенә ышаныслы кешеләрҙе йыйып, уларға халыҡтың, ер-һыуҙың хәүеф аҫтында торғанын аңлата һәм Бугас батша менән Салауат батырға ҙур ярҙам кәрәклеге тураһында әйтә. Бәшәрғолға ауылдаштары ғына түгел, тирә-яҡтарҙан да килеп ҡушылғандар. Күпмелер дәрәжәлә халыҡ йыйылып, яу өсөн кәрәк-яраҡты барлағас, Бәшәрғол улар менән юлға сыға. Урман, тауҙар артыла, йылғалар кисә торғас, улар Салауат ғәскәренә барып ҡушылған, ти.

Салауат ғәскәрендә байтаҡ ҡына ваҡыт булып, Бәшәрғол ҡарт батша ғәскәре менән булған күп кенә һуғыштарҙа ҡатнаша. Дошман менән яғалашып йөрөгәндә, йәне кеүек күргән берҙән-бер улының үлемен ишетә. Улы өсөн бик ҡайғырған. Унһыҙ ҙа йәне көйгән Бәшәрғолдоң йөрәге ярһый, үсе нығыраҡ ҡабара. Ләкин ҡарт оҙаҡ һуғышып йөрөй алмай, һәләкәткә осрап, күп ауырлыҡ-яфалар кисергәндән һуң, бер нисә иптәше менән ауылына ҡайтып китә. Был ваҡыт халыҡ араһында Бугас батша менән Салауат батырҙың батша ғәскәрҙәре тарафынан ҡулға алыныуы тураһында һүҙ тарала. Ауылға ҡайтыу менән генә Бәшәрғолдар йорттарында йәшәй алмай, сөнки батша хөкүмәте болала ныҡ ҡатнашҡан ауылдарға үҙ кешеләрен ебәреп, гәйеплеләрҙе ҡулға алырға тотона. Бәшәрғол ҡарт иптәштәре менән Мағаш тауына ҡаса ла тау араларында туғыҙ землянка ҡаҙып йәшәргә мәжбүр була.

Уларҙың ҡайҙа йәшәгәнен ауыл халҡы белә, килгән начальниктарға Бәшәрғолдар тураһында һөйләүсе һатлыҡ йәндәр ҙә табыла. Ләкин ул әҙәмдәр, ғәскәрһеҙ булыу сәбәпле, тау араларына үҙҙәре генә барырға ҡурҡа. Ауылдың бер кешеһен ебәреп: «Ҡайтып, тәүбә итһәләр, батша хәҙрәттәре уларҙы кисерер», – тип әйтергә ҡушалар. Бәшәрғол ҡарт уларға былай яуаплаған:

– Юҡ, беҙ начальниктарға ғына түгел, хатта Әбей батшаның үҙенә лә ышанасаҡ түгелбеҙ. Әбей батша үҙе саҡырһа ла ҡайтмайбыҙ, йылы урманым һалҡын, яҫтығым ҡаты булһа ла, намыҫ менән үлербеҙ, ләкин батшаның начальниктарына баш һалмабыҙ, – тигән, ти.

Байтаҡ ваҡыт Бәшәрғол яуҙа бергә йөрөгән иптәштәре менән Мағаш тауының Йылан сағыл тигән урынында йәшәй. Туйынған аҙыҡтары еләк-емеш һәм сәтләүек була. Бындай тормош Бәшәрғол ҡартты бик йонсотҡан, интектергән. Уның башын ҡайҙа ҡуйырға белмәгән сағы күп булған. Бында йылан бик

күп булып, Бәшәрғолдарҙың землянкаларында күп ваҡыт улар мыжлап торған. Дошман ҡулына төшмәү теләген белдереп, тормошонан екһенгән Бәшәрғол былай тип йырлар булған:

*Көн яҡтылары юҡ, ҡояш төшмәй,*
*Сағылдарҙың юҡ бит яланы.*
*Әжәлдәрем етмәй үлер инем,*
*Саҡмай ҙа бит ҡара йыланы.*

Шулай йылдан артыҡ ғүмер үтеп китә. Болала ҡатнашыусыларҙы батша хөкүмәте нык эҙләгәнен ишетеп, Бәшәрғол иптәштәре менән ҡайҙалыр китеп юғала.

* * *

Салауат Юлаев – 1773 – 1775 йылдарҙа Яйыҡ казагы Емельян Пугачев етәкселегендәге ихтилал осоронда күтәрелгән тарихи шәхес. Рус ғилми тикшеренеүселәренең алдынғы ҡарашлы кешеләре XVIII быуатта уҡ Салауат Юлаевтың тарихи эше һәм ижады менән ҡыҙыҡһына, улар тураһында архивтарҙан, халыҡ араһынан күп материал туплап, хеҙмәттәр яҙа. Элекке Өфө губернаһында егерме йыллап йәшәгән Руфь Игнатьев та «Пугачев бригадиры, йырсы һәм импровизатор башҡорт Салауат Юлаев» тигән хеҙмәт ҡалдыра. Әллә ни ҙур булмаһа ла, унда Салауатҡа дөрөҫ баһа бирелгәне, уның башҡорт халҡы араһынан сыҡҡан ҡурҡыу белмәгән көслө һәм ғәйрәтле батыр итеп сағылдырылғаны күренә. Автор, «Салауат Юлаев үткән быуаттың (XVIII – **Х.Х.**) күренекле шәхестәренең береһе булып тора», тип билдәләй.

«...Салауатты башҡорттар әле лә хәтерләй. Уның көсө, ҡыйыулығы, ҡаһарманлығы тураһында күп хикәйәттәр, йырҙар йөрөй», – ти Р. Г. Игнатьев. Былар Салауат Юлаев ихтилалынан һуң йөҙ йыл үткәс, халыҡ ауыҙынан ишетеп яҙылған. Башҡорт халҡы батыр улын онотмай. Башҡорттоң ере-һыуы, халыҡтың азатлығы өсөн колонизаторҙарға ҡаршы көрәштә героик шәхестең батырлығы телдән телгә, быуындан быуынға күсеп, һаҡланып килә. Салауат районының Шағанай, Әлкә, Йонос, Силәбе өлкәһенең Муратовка ауылдарында, Красноусол районында йыйылған халыҡ хәтерен системаға һалып, тулыраҡ бирергә булдыҡ. Унда беҙ башҡорттар менән бергә Салауат районына күрше рустарҙың хәтирәләре лә бирелә.

Шағанайҙан ике генә саҡрымдағы Муратовка ауылы колхозсыһы Михаил Чернышков былай хәтерләй:

– Мин бәләкәй саҡта олатайым Салауат тураһында бик йыш һөйләй торғайны. Беҙҙең ауылдан йыраҡ түгел бер урынды әле лә «Салауат клады» тип йөрөтәләр. Шунда мине олатайым Салауат йәшергән аҡсаларҙы эҙләргә алып бара торғайны. Ләкин беҙ бер нәмә лә таба алмай ҡайта инек. Олатайымдың хәбәренә ҡарағанда, Салауат ихтилалы ваҡытында ауылыбыҙ тик һигеҙ йорттан ғына торған. Салауатҡа эйәреп, ихтилалға беҙҙең ауылдан да дүрт кеше ҡушылған.

80 йәшлек Егоров Иван һөйләй:

– Беҙ бәләкәй саҡта Салауат тураһында күп һөйләй торғайнылар. Салауат бик ҙур батыр, ғәйрәтле кеше булған. Тик уның ғәскәре Ҡатау заводын алыу өсөн һуғышҡанда ҡыйрала. Ошо һәләкәттән һуң Салауат «Сырт» тигән урында ҡасып йәшәй. Ҡыш етеү менән беҙҙең ауылдан өс саҡрымда (уны «Темный ключ» тип йөрөтәләр – **Х.Х.**) балаган ҡороп торған, тиҙәр. Ул урын әле лә «Салауат балаганы», «Салауат клады» тип атала. Бала саҡта шунда барып, эҙләнеп йөрөй торғайныҡ. Ҡайһы бер ҡарттар Салауаттың үҫеп ултырған ағасты соҡоп, эсенә

аҡса йәшереүе тураһында ла һөйләй ине,– тип дауам итә Егоров. – Әүәл беҙҙең ауыл кешеләре бысылған ағас эсенән аҡса тапҡылағандар.

Салауаттың ҡулға алыныуы иһә былай була. Батыр, имеш, Ҡалмаҡ ауылында йәшәгән бисәһе янына барып йөрөгән. Бер ваҡыт ул ҡатыны янында саҡта кольчугаһын сисеп, ҡоралдарын икенсе бүлмәлә ҡалдырып йоҡлап ятҡанда, өйҙө һалдаттар ҡамап ала ла, баҫып инеп, Салауатты тотоп ала. Ҡулында ҡоралы, өҫтөндә кольчугаһы булһа, бәлки, ул һалдаттарға бирешеп тормаҫ ине, тип һөйләй ине ҡарттар. Салауат һәләк ҙур кәүҙәле батыр ир, өҫтөндәге кольчугаһы ете ботлоҡ булған. Ә кольчуга эсенән, уҡ, һеңгө инмәһен өсөн, баҡырҙан эшләнгән күлдәк тә кейгән, имеш. Уныһының ауырлығы өс бот булған, тиҙәр, – тип һүҙен бөтөрә Иван Егоров.

Һәр хәлдә батыр ун ботлоҡ тимер кейем менән йөрөмәһә лә, халыҡ уны юғары күтәреп, уның тураһында ошондай һүҙҙәр һөйләгән һәм әле лә хәтеренән юймай. Әлкә ауылында йәшәүсе колхозсы Хәлил Ғәлиуллин (53 йәштә) легендар яҡташы тураһында түбәндәгеләрҙе һөйләй:

– Батша ғәскәренә ҡаршы һуғышта еңелгәс, Салауат батыр үҙенең ғәскәре менән бик күп ваҡыттар йәшеренеп йөрөгән, тиҙәр. Уларҙың ҡасып ятҡан ере Ҡалмаҡ ауылы эргәһендәге кеше инә алмаған һаҙлыҡ булған. Ҡыш етер алдынан Ҡалмаҡ ауылының ҡайһы бер кешеләре Салауатты күргән дә батша һалдаттары башлығына әйткән. Һалдаттар һаҙлыҡты ҡамап алғас, батыр һиҙеп ҡалып, Ҡаратау ауылына ҡаса. Юлда һалдаттар тап булып:

– Һин ниндәй кеше? – тип һорайҙар.

– Мин – һунарсы, – тип яуаплай икән Салауат.

Һалдаттар, уның ай-вайына ҡуймай, башлыҡтарына алып бара. Офицер был «һунарсы»ның Салауат икәнлеген белеп, ҡулға алған, ти. Батырҙы тотҡас, Шағанай ауылына алып барып, бағанаға бәйләгәндәр ҙә, «башҡаларға ғибрәт булһын» тип, ауыл халҡын йыйғандар.

Салауаттың бергә һуғышып йөрөгән бик яҡын иптәше лә шунда булып, халыҡ йыйылған ергә ул да килә. Салауатты күргәс, ул ғәскәр башлығына мөрәжәғәт итеп:

– Был яуыз мине лә бик интектерҙе. Унан күп зарар күрҙем. Тотолғанын ишетеп, туҡмап ҡалайым, тип килдем, – тигән.

Рөхсәт алғас, был кеше Салауатты туҡмаған булып ҡыланып, бысаҡ менән батырҙы бәйләгән бауҙы киҫә башлай. Киҫеп бөттөм тигәндә генә, быны күреп ҡалалар ҙа үҙен дә тотоп бәйләп ҡуялар.

Бына тағы бер риүәйәт. Ғәскәрҙәре таралып бөткәс, Салауат байтаҡ ваҡыт Ҡалмаҡ ауылына бисәһе янына йәшерен генә килә торған була. Батырҙы аңдып йөрөүселәр быны һиҙеп ҡалып, хәйлә ҡорған. Йәнәһе, Салауаттың бисәһе менән һөйләшеп, ул килер алдынан баҙға туғыҙ кеше ябып ҡуялар, ә өс кеше сәй эскән булып ултыра. Батыр килеп инеп, сәйгә ултырғас, әлеге кешеләр төрлө сәнскеле һүҙҙәр һөйләргә керешә. Быларҙың яман уй менән килгәнен һиҙеп, Салауат урынынан тора. Әлеге өсәү уны бәйләп ташларға маташҡас, батыр тегеләрҙе тырым-тырағай күтәреп бәрә, баштарын яра һуға. Ул арала бисәһе баҙҙы асып, унан сығып килгәндәрҙең береһе Салауатҡа атам тип, мылтыҡтан үҙҙәренең кешеһен атып үлтерә. Шунан батыр уларҙың барыһын да туҡмап, бер ергә өйөп, өйҙән сығып китә, имеш.

Дошмандарҙың күҙәтеп тороуы арҡаһында, Салауатҡа ҡатыны өйөнә йөрөү хәүефле була. Шуға күрә уның Үҙәк йылғаһының арғы ярына килеп, бисәһен йырлап саҡырыуы ғәҙәте булған, тиҙәр. Ошо ғәҙәт буйынса, әлеге ваҡиғанан өс көн үткәс, батыр Үҙәк буйына килеп йырлаған, ти. Уның тауышын ишетеп,

ҡатындың яр башына баҫыуы була, Салауат тегене уғы менән һыу аша атып та үлтергән, ти.

Ҡаратаулы ауылынан сыҡҡан Мөгөш исемле бик яҡын бер иптәше батырҙың әмерен ҙур теләк һәм ҡыйыулыҡ менән үтәгән. Шуға күрә Салауат Мөгөшкә ҙур ышаныс менән ҡараған, уны ихтирам иткән. Бер мәл Ҡатау заводы өсөн һуғышыр алдынан Салауат, дошмандың көсөн белеү уйы менән, унда Мөгөштө ебәргән. Был әмерҙе батырҙарса үтәргә һүҙ биреп, теге заводҡа киткән. Ҡатау ҡәлғәһенә барып, кескәй тәҙрәләрҙең береһенән ҡарауы була, уны пушканан атып та йығалар.

Салауат эштең былай икәнен һиҙеп, Мөгөш йығылған ергә аты менән сабып барған да, атынан төшмәйенсә, 17 бот ауырлыҡтағы иптәшен һыңар ҡулы менән күтәреп алып, үҙенең яуы торған ергә күмгән.

Бер ваҡыт яуға сыҡҡанда, ниməһендер онотоп, батыр юлдан кире борола. Юлда бүре өйөрөнә тап була һәм ҡылысы менән ун икеләп бүрене сапҡылап үлтерә. Көрәк (Эҫем заводы) урманында бер өйгә килеп юлыға, ҡартты осрата. Батыр менән һөйләшкәндән һуң уның кем икәнен, ниндәй эш менән йөрөгәнен белә лә ҡарт:

– Улым, һин миңә ҡарындаш кеше, – ти. – Мин һине беләм. Бына һиңә тип бүләктәр ҙә әҙерләп ҡуйғайным. Ләкин ҡайтып еткәнсе ҡарама.

Ҡайтыу менән бүләген асып ҡараһа, ул гел алтын булып сыҡҡан, имеш.

Малаяҙ (хәҙерге Салауат – **Х.Х.**) районының Ҡыҙырбаш ауылы кешеһе Ғарифйән менән танышып һөйләшә башлағас, ул былай тине:

– Беҙ кескәй саҡтарҙа, ҡарттар ҡымыҙ эскәндә, йыйындарҙа, һабантуйҙарында Салауаттың батырлығын маҡтап-маҡтап һөйләй, йырҙарын йырлай торғайнылар. Йәштән йырға һәләтлегем булыу, тарих менән ҡыҙыҡһыныуым арҡаһында, ҡарттарҙы йотолоп тыңлай инем. Бына шул ишеткәндәрҙе, яҙып алған йырҙарымды бирермен.

Совет власына тиклем халыҡ күп йыйылған урындарҙа түрә-ҡара Салауат тураһында һөйләргә рөхсәт итмәй, йырҙарын тыя торғайны, – тип дауам итә Ғарифйән. – Бөгөнгөләй хәтеремдә, 1890 йылда беҙҙең ауылда йыйын булды. Скрипкасы, йырсы булғаным арҡаһында, бер йыйында ла ҡатнашмай ҡалмай инем. Был юлы ла скрипкам менән төрлө уйын-көлкө көйҙәрҙе уйнап, йырлап ултырҙым да халыҡтың һорауы буйынса Салауат көйөн һыҙҙырып йырлай башланым. Бер-икеһен йырлағас, Хөснуллин тигән урядник ярҙамсыһы эргәмә килеп тә баҫты.

– Ҡайҙан сыҡҡан был йыр? Ниңә уны йырлайһың, кем һиңә йырларға ҡушты? – тип йәнемә тейә башланы.

Был ҡылыслының екеренеүе мине ҡурҡыта төштө. Аптырағас: «Был йыр, господин урядник, Салауат батыр йырҙары. Ул миңә туған булған. Шуның өсөн йырланым», – тинем.

Хөснуллин мине йыйындан алып китте лә биш тәүлеккә ябып та ҡуйҙы. Ярай әле, ағай-энеләрҙең башы етеп, Хөснуллинға ришүәт биреп, мине ҡотҡарҙылар.

* * *

Урыҫ сәнәғәтселәре башҡорт еренә Эҫем заводын ҡороп, домналар һалғас, биләмәләрен тағы ла киңәйтергә булып, йорттар төҙөй башлай. Башҡорт ерҙәрен көслөк менән алырға тотоналар. Быны күреп, башҡорт халҡы ризаһыҙлыҡ белдерә. Эш ҙурға китеп, башҡорттар менән урыҫтар араһында һуғыш сыға. Был ваҡытта Салауатҡа 16-17 йәш самаһы була. Баҫҡынсыларға ҡаршы күтәрелеп һуғыш менән барған халыҡ араһында ул да ҡатнаша. Йәш булыуына

ҡарамаҫтан, был ҡораллы бәрелештәрҙә Салауат ҙур батырлыҡ күрһәтә. Бөтә халыҡ уның ғәйрәтен, һәләтен күреп хайран ҡала.

Ҡораллы бәрелештә ҡатнашҡан бер ҡарт, урыҫ һалдаттарын ҡыуып ебәргәс, ололарҙы йыйып алған да:

– Ҡарттар, мин һеҙгә мәслихәт итәйем әле. Мин һуғышта Салауаттың батырлығын күреп хайран ҡалдым. Бына ул ир балаһы тиһәң дә ир балаһы. Ул барып һуғыша башлаған ерҙә һис кем сыҙамай бит. Аты йығылып ҡалғас та күпме яуызды ҡырҙы. Уны ил батыры яһарға кәрәк. Һеҙ ҡайтҡас та Юлай кантонға, бисәһенә, улығыҙ һуғышта үлеп ҡалды, тип әйтегеҙ. Ә мин уны изге юлға төшөрәйем, – тигән, ти.

Шунан был ҡарт Салауатты Емельян Пугачев янына алып киткән.

Уның кәңәше буйынса, һуғыштан ҡайтҡан халыҡ Юлайға ла, батырҙың бисәһенә лә, «Салауат үлеп ҡалды» тип ышандырған. Улар Салауатты ҡайтыр тип уйламаған да, ти. Тик бер ямғырлы ҡараңғы төндә берәү Юлай ҡарттың ишеген ҡаға. Салауаттың: «Атай, мин ҡайттым», – тип ҡысҡырыуына өй хужаһы ышанмаған. Шулай ҙа: «Әгәр һин Салауат булһаң, минең, әсәйеңдең, бисәңдең, туғандарыңдың исемдәрен әйтеп сыҡ!» – тигән. Салауат бөтәһен дә атап әйткән. Шунан һуң ғына атаһы улының тауышын танып, өйгә индергән. Ошо ваҡиғанан һуң оҙаҡ та үтмәй, Салауат ғәскәр йыйыу тураһында уйлана башлай. Бер кис атаһына:

– Атай, тирә-яҡта болалар бара, һин миңә ғәскәр бир, мин батша ғәскәренә ярҙамға барайым, – ти.

Атаһы улының был фекеренә ҡушылып, ғәскәр биргәс, Салауат уларҙы Пугачевҡа алып барып ҡуша.

Юлай старшинаның ейәне Килдейәр Сөләймәнов һөйләй торғайны:

– Салауат 14 йәштәрендә саҡта Хәмит, Кинйә менән өсәүләп ҡош тоторға урманға бара. Ул урын хәҙер «Салауат дворы» тип йөрөтөлгән ер булһа кәрәк. Йөрөй торғас, былар бөркөт ояһына юлыға. Ҡош үҙе ояла булмай, балалары



ғына сырылдашып ята икән. Егеттәр бөркөт балаларын менеп алырға була. Салауат менән Хәмит, ҡулдарына уҡ алып, ағас башына менеп китә, ә Кинйә инә бөркөт килһә-нитһә, атырға әҙерләнеп, уҡ-янын тотоп аҫта торған.

Салауат менән Хәмит ағас башына менеп етеп, ҡош балаларын эләктерәбеҙ тип торғанда, тырнаҡтарына һарыҡ эләктергән бөркөт килеп сыға. Туп-тура ояһына осоп килгән инә бөркөткә аҫта торған Кинйә уҡ тоҫҡап, атып ебәрә. Ләкин уҡ бөркөткә теймәй, һарыҡҡа ҡаҙала һәм теге меҫкен, бөркөт тырнағынан ысҡынып, әйләнә-әйләнә ергә ҡолай. Ҡорбанын ысҡындырған инә бөркөт, асыу менән осоп килеп, Хәмит менән Салауатты ҡанаты менән һуғып ебәргән. Ағасҡа бәйләнмәгән булһалар, егеттәр ергә йығылып төшөр ине. Бөркөттөң һуғыуы көслө генә булыуға ҡарамаҫтан, Салауат артыҡ зарар күрмәгән. Йыртҡыс ҡош яңынан осоп килеп һуғырға ынтылғанда, Салауат тиҙ генә уғы менән бөркөттө атып төшөргән. Шунан һуң аусылар ҡош балаларын төшөрөп, һарыҡты һуйып, был урында өс һыйланып, ауылға ҡайтып киткән, ти.

* * *

Тиҙ арала һабантуй көтөлөү менән бәйле Шағанай ауылының бала-сағаһы йыйылышып уҡ-һаҙаҡ яһарға ултырған. Араларында Салауат та булған. Ярыш хаҡында һүҙ сыҡҡас, Салауат:

– Был һабантуйҙа минең атым уҙышыуҙа, үҙем көрәштә еңермен, – тигән.

Ләкин Ҡалмаҡ ауылынан Саҡа мулла һабантуйҙан, дингә хилаф эш күреп, буғай, байрамды үткәрмәҫкә әмер биргән, ти. Хәбәрҙе ишеткәс, балалар бик ныҡ күңелһеҙләнгән. Ә Салауат ат менгән дә Саҡа муллаға киткән. Ҡалмаҡҡа етәрәк уға Кинйә тап булған. Салауат уға эштең ниҙә икәнен һөйләп биргәс, Кинйә:

– Хәҙер ауылыңа ҡайт та атайыңа әйт, ул халыҡтан саҙаҡа йыйып, берәй ҡарт менән Саҡа муллаға ебәрһен. Ошо уңай менән теге ҡарт мулланан һабантуй уҙғарырға рөхсәт һораһын, – тигән.

Кинйәнең кәңәшен тотоп, Салауат ҡайта ла ағаһы Сөләймәндән атаһы менән һөйләшеүен һорай. Әммә тегеһе Салауатты тыңламай, киреһенсә, уны һүгеп ташлаған. Салауаттың асыуы килеп, ағаһы менән көрмәкләшеп китә лә ергә йығып, өҫтөнә менеп ултыра. Сөләймәндең: «Үлтерәләр!» – тип ҡысҡырған тауышына өйҙән атаһы килеп сыҡҡан да: «Ниңә кеше көлдөрәһегеҙ, өйҙә ҡунаҡ барлығын белмәйһегеҙҙер шул», – тип асыуланып, икеүһен дә һуҡҡылап ебәргән. Атаһының был ҡылығына ғәрләнеп, Салауат атын менгән дә урманға ҡарай сапҡан. Ҡуйы ағаслыҡ эсенә инеп, атын тышап ебәргән дә йоҡларға ятҡан.

Төн урталарында бының айғыры ҡурҡҡан тауыш менән кешнәп ебәрә. Уны ишетеп уянған үҫмер аты янына барһа, эргәһендә ҙур айыу йөрөгәнен күрә. Оҙаҡ уйлап тормайынса, Салауат айыу менән алыша башлай. Ләкин айыу үҙен йығып һалғас, аҫта ятҡан килеш, ул бысаҡ менән өҫтөндә ятҡан айыуҙы һуя. Ҡояш сығып, көн йылынғас, был айыуҙың тиреһен нисек тунарға икән, тип торғанда урман яңғыратып кешнәгән ат тауышы ишетелә. Уға яуап итеп, Салауаттың да айғыры кешнәп ебәргән. Теге ат тауышына йүгереп барған үҫмер һыбай китеп ултырған кешене күрә. Ҡысҡырып, уны туҡтатҡан да айыуҙы тунарға булышыуын һораған. Шулай итеп, батыр ошо кеше менән бергә айыуҙың тиреһен тунап, ауылға алып ҡайтҡан. Ауылға барып ингәс, әлеге кеше аша атаһына үҙенең ҡайтҡанын белдергән дә, аттан төшөү менән, айыу тиреһен атаһына бүләк итеп биргән.

* * *

Салауат Юлаев Емельян Пугачев ғәскәрендә бригадир булып һуғышып, баярҙарҙы ҡырып йөрөгәндә, Красноуфимда бер мәрйәгә өйләнә лә, унан бер малай тыуа. Эштәр мөшкөлләнеп, кире боролорға тура килгәс, батыр шул Красноуфимдағы бисәһе янына килә. Уның иҫәбе ҡатынды үҙе менән алып китеү була. Ләкин мәрйә ниңәлер киреләнә. Ул арала Салауатты аңдып йөрөгән пристав менән урядник килеп инә лә батырҙы тотоп алмаҡ була. Быларҙың икеһен дә ике яҡҡа үлтерә һуға ла Салауат балаһын алып ҡаса. Ҡыйғыға килеп, малайҙы Нурҡылыс тигән ҡартҡа тәрбиәгә биреп китә. Үҙе туп-тура Ҡалмаҡ ауылы эргәһендәге хәҙер «Салауат дворы» тип аталған уңайлы урынға йәшенә. Уның янында Кинйә һәм башҡа иптәштәре лә була. Хәлдәренең насарлығын һиҙеп, Кинйә ҡустыһына: «Әйҙә, бөтә аҡсаларҙы алайыҡ та бөгөн үк ҡаҙаҡ яғына ҡасайыҡ. Унда тынысыраҡ, бер аҙҙан тағы ла ғәскәр йыйып, эш башларбыҙ», – тигән. Салауат үҙенең көсөнә таянып, ахыры, ашыҡмаған. Кинйәгә ҡаршы: «Мин Ҡыйғыға барып, улымды алып ҡайтам, һунарға сығып керәм, ә унан ҡарарбыҙ», – тигән дә, тиҙ генә йыйынып, китеп тә барған. Ошо сығыуынан ҡайтмаған ул, батша ғәскәрҙәре ҡулына барып эләккән.

Бер нисә йыл үткәс, Салауаттың Нурҡылыс ҡартта ҡалған улын беҙҙең Вәлиша Ҡулбәков бабай барып алған да үҙе ҡарап үҫтергән. Малайға Хәсән тип исем ҡушылған һәм ул да, атаһы һымаҡ, бик ҙур кәүҙәле, батыр булған, тип һөйләй торғайны ҡарттар. Ир урталарына етәрәк Әйле олоҫонда кантон булып та торған, ти. Ҡарттар уны, бик уҫал, асыуы килһә, түрә-ҡараны туҡмап ташлай торғайны, тип һөйләй ине.

Салауат менән атаһы Юлайҙың һәләк булыуын уларҙың араһында бысраҡ йөрәкле батша ялсылары булыуҙан күрергә тура килә. Ырысбай тигән байҙың улы Бохайыр Юлай старшинала писарь булып эшләгән сағында Юлай йортонда сыҡҡан һүҙҙәрҙе, эштәрҙе һәр ваҡыт губернаторға яҙып ятҡан икән, ти. Бохайыр-писарь хатта Салауаттың яратҡан ҡыҙы Әминәне үҙенә ҡатын итеп алырға уйлап йөрөгән икән. Ҡыҙға Салауат өйләнеп ҡуйғас, писарь һемәйгән һәм, асыуы тағы ла нығыраҡ ҡабарып, булғанды ла, булмағанды ла ошаҡлап торған. Салауатты батша ярандарына тоттороуҙа ла Бохайыр ярҙам иткән, тип һөйләй торғайнылар.

* * *

1940 йылдың йәйендә Ғарифйән бабай Солтанов Салауаттың быға тиклем билдәле булмаған йырҙарын да ебәргәйне. Ул йырҙарында батыр башҡорт халҡының ярлы көн итеүен күрһәтеү менән бергә, ир-уҙамандарҙы ҡорал күтәреп, баярҙарға, батшаға ҡаршы көрәшкә күтәрелергә саҡыра:

*Донъяла булъан бар әҙәм*
*Беҙҙең фекергә боролор,*
*Ҡасан да булһа ҡоролор,*
*Иркенлек менән торолор.*

Дүрт юллыҡ был йырҙың мәғәнәһе ифрат дәрәжәлә тәрән һәм ҙур. Тимәк, Салауат фекер байлығы яғынан үҙ заманы менән генә йәшәмәгән, ә алыҫ киләсәкте лә күрә белгән. Икенсенән, был йыр батырҙың халыҡ көсөнә ышаныуын һәм киләсәктә уның иҙеүселәр синыфын еңә аласағын күрһәтеп тора.

**Хәлил ХАММАТОВ.**

## МИЛЛӘТТЕҢ ҠАҺАРМАН УЛЫ

Айыт ауылы бормаланып-бормаланып аҡҡан йәмле Дим йылғаһына шул тиклем һыйышып, иркәләнеп ултыра, әйтерһең, егет ҡосағындағы мөхәббәтле ғашиҡ ҡыҙ. Һыу буйы зифа талдарға, мөһабәт өйәңкеләргә, суҡлы еректәргә, һутлы балан, муйылдарға күмелгән. Туғайында аллы-гөллө сәскәләр ғашиҡтарға күҙ ҡыҫып, шаталаҡланып көлә. Ошо хозурлыҡҡа йөрәк тулҡынланғандай итә һәм һине сихри ләззәт сорнап ала...

*Аҡ тирәктәр тирбәлә,*
*Йәш талдар иркәләнә,*
*Япраҡтар һөйләй беҙгә*
*Дим әкиәтен.*
*Беҙ бит йөрәкһеҙ түгел,*
*Нисек түҙһен йәш күңел,*
*Текәлә күҙҙәр күҙгә...*
*Онотолмаҫ был төн*
*Хәтфәләй йәшел сирәм,*
*Ҡосағымда Гөлсирәм,*
*Иркәләнә, йылмая,*
*Һыйына миңә...*
*Йәмле Дим тулҡынлана,*
*Мөхәббәт ялҡынлана;*
*Нурын һибә тулған ай*
*Дим туғайына.*

Был шиғри юлдарҙы башҡорт халҡының ҡаһарман улы, данлыҡлы шағир Фәтих Кәрим яҙған.

Унын тыуған төйәге Айыт ауылы бөгөн бөхтәлеккә, матурлыҡҡа төрөнгән. Һине төҙөк йорттар, ялтыр буяулы ҡоймалар, ихата эсендә сәскәләр ҡаршы ала. Эске тулҡынланыу менән ҡыҙыл кирбестән һалынған күркәм йорт алдына туҡтайбыҙ. Бында Фәтих Кәримдең мемориаль музейы урынлашҡан. Иң тәүҙә иғтибарҙы шағир бюсы йәлеп итә. Ул бөйөк ҡаҙаныштарға рухландырыусы шиғырҙарын күңеленән генә беҙгә һөйләй кеүек. Музейҙың эсе лә ыҡсым, экспозициялар зауыҡ менән эшләнгән, һәр экспонат үҙ урынында. Иң тәүҙә ауылдың тарихы, шағирҙың шәжәрәһе менән танышабыҙ. 1795 йылғы ревизия документтарында күренеүенсә, Ырымбур губернаһы Бәләбәй өйәҙе Күл иле Меңле волосы, хәҙерге Бишбүләк районы Айыт ауылында 218 башҡорт йәшәгән. Башҡа милләт вәкиле юҡ (РГАДА.Ф. 1355. Оп.1.Д.929, 935, 938, 940, 1871, 1874, 1876, 1881, 1884, 1886). 1834 йыл – Айытта 395, ә 1850 йыл 82 йортта 648 кеше теркәлгән. Бөтәһе лә башҡорттар (ЦГИД.Ф. 138.Оп.2.Д.738).

Фәтих Кәрим ошо ауылда 1909 йылдың 9 ғинуарында донъяға килгән. Уның олатаһы, 1859 йылғы ревизия документтарынан күренеүенсә, Мөхәмәткәрим Ҡорбанғәлин, башҡорт милләтенән булып, Айыт ауылында өс бисә, ун ул, бихисап туған-тыумасалары менән йәшәгән.

Беренсе бисәһе – Бибихөснийамал һәм улдары – Мөхәмәтзариф, Мөхәмәтсадиҡ, Мөхәмәтйән.

Икенсе бисәһе – Шәмсеҡәмәр. Улдары – Әхмәҙей, Әхмәтсаный, Әхмәтһаҙый, Әхмәтвәли, ҡыҙҙары – Фәғиҙә.

Өсөнсө бисәһе – Әсҡәпъямал, улдары – Әхмәтгәрәй, Мөхәмәтғариф, Әхмәҙей.

Ауыл байы Мөхәмәткәримдең икенсе бисәһе Шәмсеҡәмәрҙән тыуған кесе улы Әхмәтвәли һәм уның икенсе ҡатыны Гөлъямал Иҙрис ҡыҙы – Фәтих Кәримдең ата-әсәләре. Был ғаиләлә 12 бала булған. Иң кесеһе – Фәтих. Мөхәмәткәрим ғаиләһендә Иҙрис, Йонос, Мөхәмәтгәрәй, Ғәйниямал, Ғафифа, Фатима исемле апаһының балалары бергә йәшәүе билдәле.

Әхмәтвәли ауыл муллаһы вазифаһын башҡара, мәктәптә, мәҙрәсәлә балаларға белем бирә. Шиғыр яҙғаны, мөнәжәттәр сығарғаны, байрамдарҙа моңло итеп ҡурай тартҡаны ла билдәле. Ҡәләм тибрәткән йәштәрҙең беренсе әҫәрҙәре башлыса ата-әсәһенә бағышлана. Фәтих Кәримдең матбуғатта баҫылған иң тәүге «Хәҙер һеҙҙең менән» шиғыры ла ошо юҫыҡта.

*...Урман буйында һыҙъырҙан йырҙарымды*
*Хәҙер һеҙҙең менән йырлаймын,*
*Йырлаймын да*
*Шунда, шашып китеп,*
*Ҡурайымды һуҙып уйнаймын.*
*Ҡурай миңә атай бүләге ул,*
*Моңландырып беҙҙе йырлатҡан...*

Әхмәтвәли мулла балаларына төплө белем бирергә тырышҡан. Улы Ғабдулла Кәримов (1899 – 1936) – әҙәбиәт белгестәренә Ярлы Кәрим исеме менән таныш, һәр төрлө ҡыйынлыҡтарҙы еңеп уҡырға, белемен арттырырға ынтылған шәхес. 1916 йыл Ырымбурҙағы «Хөсәйениә» мәҙрәсәһенә урынлаша, Рәсәй батшаһын ҡолатҡан Февраль революцияһынан һуң ул мәҙрәсәнән педагогик курстарға күсә. 1917 йылдың йәйендә Шәйехзада Бабич менән таныша, дуҫлаша, уның менән ярышып шиғырҙар яҙа, Башҡортостан мөхтәриәте хәрәкәтендә ҡатнаша. Төхфәт Ченәкәй (1893 – 1958) исеме менән әҙәбиәтселәргә таныш шағир, журналист, педагогик хеҙмәткәрҙең иҫтәлектәрендә шундай юлдар бар.

«...Бер көндө иртүк миңә Ярлы Кәрим килде. Мин иртән тороп ҡына йөрөй инем.

– Әй, Ғабдулла, яҡшы килдең. Һин самауыр ҡайнағансы «мәрйә баҙары»на сығып ҡына берәй тиҫтә йомортҡа алып ин әле. Йомортҡалап сәй эсербеҙ, – тип уға аҡса бирҙем. Ул баҙарға сығып китергә торғанда ғына, Бабич килеп инде. Уның менән иҫәнләшеп, Ғабдулла:

– Ярай, мин «мәрйә баҙары»на барып киләйем дә унан һуң сәй янында һөйләшербеҙ... – тине. Бабич, Ғабдулланы сығып барған еренән туҡтатып:

– Әй, Ғабдулла, туҡта, миңә лә бер-ике мәрйә алып ҡайт! Мә аҡса! – тип кеҫәһенә ҡулын тығып аҡса сығарып, Ғабдуллаға һуҙҙы. Ғабдулла:

– Юҡ, мин алып ҡайтҡан мәрйәләрҙе яратмаҫһың, үҙең сығып һайлап алырһың, – тип сығып китте.

Был көлкөлө хәл әллә нисә йыл буйы арабыҙҙа һөйләнеп йөрөлдө...»

Ғабдулла Кәримов 1919 йылда Петроград янында Юденичты тар-мар итеүгә ҙур өлөш индергән башҡорт бригадаһында ҡыйыу, ҡурҡыу белмәҫ рота комиссары булып хеҙмәт итә. Ул Граждандар һуғышының сәбәбен аңлатып яугирҙарға ялҡынлы һүҙ ҙә әйтә, шәхси батырлыҡ та күрһәтә. Үлемесле был бәрелештә ҡаһарман егет ҡаты яралана. Оҙаҡ ҡына госпиталдә дауалана. Хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ тип табылғас, уны Стәрлетамаҡҡа Бәләкәй Башҡортостан хөкүмәте ҡарамағына эшкә ебәрәләр. Юлда бөтә документтарын юғалта. Ҡайтып бер аҙ торғас, Ғабдулла Кәримовты чекистар, ошо хәлде сәбәп итеп, ҡулға ала. Төрмәнән уны Башҡортостан мөхтәриәте хәрәкәте етәксеһе Зәки Вәлиди ҡотҡара. Белмәгән кешене, әлбиттә, бер кем дә төрмәнән сығармай. Ошо тарихи фактҡа таянып, улар бер-береһенә ышаныслы таяныс булған, тип әйтә алабыҙ.

Башҡортостан үҙәге Өфөгә күсерелгәс, Ярлы Кәрим «Башҡортостан» гәзитендә сәйәси секретарь, комиссар хеҙмәтен атҡара. Ғүмеренең һәр минутын ҡәҙерләп, мәҡәләләр, ялҡынлы шиғырҙар яҙа. Халыҡты белем алыуға өндәй, коммунстик режимдың ярлы-ялпының йәшәйешен еңеләйтеүгә йүнәлтелгән эшмәкәрлеген хуплай, үҙенең башҡорт милләтенән булыуы менән ғорурлана. Бына «Мин ҡайттым» тигән бәләкәй генә шиғыры.

*Мин үҙем бер башҡорт ауылында*
*Тыуып үҫкән бала,*
*Шуъа ла бик-бик beләм:*
*Башҡорт эсендә ни яна.*
*Эйе, мин йырлайым иҙелгән*
*Ярлы башҡорт йырҙарын,*
*Эйе, мин бер һандуъас,*
*Башҡорт – йәшел йәш бер ҡайын.*

Бына ошо ялҡынлы юлдарҙың авторы Ярлы Кәрим ҡустыһы, буласаҡ атаҡлы шағир Фәтих Кәримде тәүҙә Бәләбәй педагогия техникумы ҡаршыһындағы әҙерлек курсына урынлаштыра, унан һуң Ҡазанға алып китә. Ун биш йәшлек Фәтих бер йыл Надежда Крупская исемендәге балалар йортонда тәрбиәләнә. 1925 – 1929 йылдарҙа Ҡазан ер төҙөлөшө техникумында белем ала. Студент мәлендә үк ең һыҙғанып ижад менән шөғөлләнә, гәзит редакцияһында эшләй.

Тыуған төйәге Айытҡа бер ҡайтҡанында, күрше Туҡһанбай ауылына барып, Аҡмулланың биографияһын белеүсе кешеләр менән осраша. Аҡһаҡал, атаһы кеүек мулла Шәйхетдин Динмөхәмәт улынан бөйөк башҡорт шағиры тураһында байтаҡ мәғлүмәт яҙып ала һәм Ҡазанда «Беҙҙең юл» (1928. №6/7. 32-се б.) журналында баҫтырып сығара. Ул яҙмала шундай юлдар бар: «Аҡмулла әфәндենең башҡорт балаһы булыуы хәҙер раҫланды. Мәрҫиән Шиһабетдин китабында Аҡмулла әфәнде ҡаҙаҡ балаһы тип яҙылған. Ул дөрөҫ түгел...» Мифтахетдин Аҡмулла ижадын һәм тормошон өйрәнеүсе әҙәбиәт ғалимдары фекеренсә, был мәҡәлә – бөгөн дә ҡәҙерле ҡомартҡыларҙың береһе.

Утыҙынсы йылдар Фәтих Кәрим өсөн иң уңышлы һанала. Ул танылған әҙиптәр менән бергә СССР һәм ТАССР Яҙыусылар берлеген ойоштороуҙа ҡатнаша. Ете әҙәби китап авторы, 25 йәшлек Фәтих Кәрим буласаҡ Советтар Союзы Геройы, әҙәбиәт өлкәһендә Ленин премияһы лауреаты Муса Йәлил, шағир Һаҙи Таҡташ, яҙыусы һәм дәүләт эшмәкәре Ғәлимйән Ибраһимов, Ҡәүи Нәжми, Мирсәй Әмир, Хәсән Туфан һәм башҡалар менән ТАССР-ҙың ижтимағи, сәйәси һәм мәҙәни тормошонда ҙур роль уйнай. Танылған яҙыусы булып өлгөрә. Ләкин

уның башҡорт милләтен яҡлауы, ғәҙел һәм тура һүҙлелеге әҙәбиәт янындағы байтаҡ кешеләргә оҡшамай. Ул ижады сәскә атҡан осорҙа көнсөл әҙәмдәрҙең яла яғыуы хупланған Сталин режимының репрессияһына эләгеп, 1938 йылдың 3 ғинуарында ҡулға алына. Дүрт йылдан ашыу төрмәлә ултыра. Шағирҙың ошо ваҡиғалар тураһында шиғыры ла бар:

*...Тынсыу төрмәлә ҡаршылайым*
*Дүртенсе яҙҙы.*
*Яҙҙы һағынып был яҡҡа*
*Ҡайта ҡыр ҡаҙы...*
*Эй, ҡыр ҡаҙы, түбәнәйт тә*
*Осҡан юлыңды,*
*Бүләк итеп китсе миңә*
*Бер ҡаурыйыңды.*
*Ҡәләм яһап ҡаурыйыңдан*
*Яҙъы ялҡында,*
*Ҡаныма мансып яҙайым бер йыр*
*Һөйгән халҡыма.*
*Йырым аша белһен халҡым,*
*Айнытһын аңын,*
*Дошмандар быъаулап ҡуйъан*
*Улы мин уның.*
*Атһалар ҙа, аҫһалар ҙа,*
*Һөйгән халҡымдың*
*Мин ҡояшым итеп үләм*
*Йөрәк ялҡынын...*

Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, бер төркөм тотҡондарҙы, улар араһында Фәтих Кәрим дә була, баржаға тейәп диңгеҙ уртаһына сығарып, шартлатып батыралар. Ошо афәттән шағир бер үҙе ҡотола, мөғжизәгә ышаныусы ауылдаштары фекеренсә, уға боҙло диңгеҙҙе йөҙөп, йырып сығырға Дим йылғаһының шифалы һыуында йәштән сынығып үҫеүе һәм йөрәгендә туған халҡының тормошон матурларға, йәмләндерергә йыйылған илаһи көс ярҙам иткәндер. Был ваҡиғанан һуң, 1941 йылдың декабрендә, уның эше буйынса яңынан суд була, һәм Фәтих Кәримде ғәйепһеҙ тип табалар. Шағирҙың репрессия йылдарында шашынған ялғансы ялағайҙарға һәм яласыларға төбәлгән шиғыры ла бар.

*Ҡарбуз кеүек ҡап урталай*
*Ярыр инем дә был Ер шарын,*
*Ике ярымшарҙы бер-беренә бәреп,*
*Ҡойор инем бөтә сүп-сарын.*
*Ә һуңынан киң майҙанъа йыйып,*
*Ялаъай һәм ъәйбәтселәрҙең,*
*Үтмәҫ бысаҡ менән киҫеп алып,*
*Этк*ә *ташлар инем телдәрен.*

Бөтә ғәйепләнеүҙәрҙән аҡланып төрмәнән сыҡҡас, Фәтих Кәрим үҙ теләге менән фронтҡа китә.

Үлемесле һуғыш яланында, окопта, ул 150-гә яҡын шиғыр, биш поэма, бер

драма әҫәре («Шакир Шигаев»), ике повесть («Разведчик яҙмалары», «Яҙғы төндә») ижад итә. «Мөхәббәт һәм нәфрәт» (1943), «Моң һәм көс» (1944) тип аталған шиғырҙар йыйынтығы баҫылып сыға.

Яуҙағы ҡаһарманлығы өсөн Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән баһалана.

Ялҡынлы шағир, взвод командиры, 1945 йылдың 19 февралендә Кенигсберг округындағы Каврен ауылы янында һәләк була. Ошо алышта күрһәткән батырлығы өсөн, үлгәндән һуң, ул I дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән бүләкләнә.

Музейҙа ошо тарихи материалдарға, Фәтих Кәримдең шәжәрәһенә өҫтәп, уның ижад юлын эҙмә-эҙлекле аңлатыусы экспонаттар, төрмәгә ни өсөн ултыртылыуы, нисек ҡотолоп сығыуы, фронттан яҙған хаттары, шиғырҙарының ҡулъяҙмалары, шәхси әйберҙәре, фотолары, иллелгән китабы ҡуйылған.

Фәтих Кәримдең Айыт ауылындағы музейын экспонаттар йыйып ойоштороуҙа утыҙ йыл мәктәптә балаларға әҙәбиәт серҙәрен өйрәткән Хәтирә Сәмиғулла ҡыҙы Ғиззәтуллина ҙур өлөш индерә. Музейҙың тәүге мөдире булып Сайма Тимерғәли ҡыҙы Хәйруллина эшләй. Әле был оло яуаплы вазифа Фәтих Кәрим ижадына ғашиҡ Рәйсә ханым Хафизоваға йөкмәтелгән. Мөдир, музей менән таныштырып сыҡҡас, Фәтих Кәримдең башҡорт телендә бер генә лә китабы нәшер ителмәгәнгә үкенесен белдерҙе.

Музейҙың дөйөм майҙаны – 62,4 квадрат метр. Унда 180 берәмек төп фонд һәм 132 ярҙамсы ҡомартҡы һаҡлана. Һәр кемде һоҡландырып ҡаршы алған бюсын Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, скульптор Хәниф Хәбибрахманов ижад иткән.

Айыт ауылы халҡы, Бишбүләк районы етәкселәре данлыҡлы шағир Фәтих Кәрим менән ысын-ысындан ғорурлана, яҡты иҫтәлеген мәңгеләштереү өлкәһендә лә күп эш башҡара.

Бишбүләк район хакимиәте тарафынан Фәтих Кәрим исемендәге премия булдырылған. Лауреаттары араһында Рәсәй Федерацияһында билдәле шәхестәр ҙә бар: Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Татарстандың халыҡ рәссамы Рәшит Имашев, биология фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре Тимербәк Ниғмәтуллин, шағирҙың ҡыҙы Ләлә Кәримова, Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбай.

Айыт урта мәктәбе лә Фәтих Кәрим исемен йөрөтә.

Музей даими төрлө диспуттар, викториналар, тантаналы экскурсиялар үткәрә, шағирҙың тыуған һәм һәләк булған көндәрендә хәтер кисәләре ойоштора.

Фәтих Кәрим исемендәге Айыт урта мәктәбе директоры Илмир Шафиҡов фекеренсә, музей – балалар һәм өлкәндәр өсөн өҫтәмә уҡыу йорто.

– Беҙ, – ти Илмир Рәшит улы, – башҡорт, татар, рус әҙәбиәте һәм тарих дәрестәрен ошонда үткәрәбеҙ. Бындағы һәр ҡомартҡы уҡыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра, оло шәхестең тормош юлы, әҙәби эшмәкәрлеге, һуғыштағы ҡаһарманлығы йәш йөрәктәрҙә ғорурлыҡ уята.

Музейҙы ҡарап сыҡҡас, беҙ ҙә быға инандыҡ. Рәхим итегеҙ, хөрмәтле дуҫтар, башҡорт халҡының ҡаһарман улы, данлыҡлы шағир Фәтих Кәрим музейына!

**Фәнис ЯНЫШЕВ,**
**Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге премия лауреаты.**

* * *

Өфөнөң Конгресс-холлында «Ислам. Йәштәр. Киләсәк» темаһына республика форумы үтте. Башҡортостан Республикаһы Президенты ҡарамағындағы Дәүләт конфессия-ара мөнәсәбәттәр буйынса совет, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Рәсәй Мосолмандары үҙәк диниә назараты һәм Рәсәй Ислам университеты ойошторған сарала Республика Президенты Рөстәм Хәмитов, Рәсәй Президенты хакимиәте идаралығының дини ойошмалар менән хеҙмәттәшлек итеү департаменты етәксеһе Илья Баринов, Рәсәй Мосолмандары үҙәк диниә назараты рәйесе, юғары мөфтөй Тәлғәт Тажетдин, БР Мосолмандары диниә назараты рәйесе Нурмөхәмәт Ниғмәтуллин, Башҡортостан митрополияһы эштәре идараһыны, архимандрит Игнатий Климов, ғалимдар, ислам һәм донъяуи белем биреү учреждениелары уҡытыусылары, дин әһелдәре, мосолман йәштәре ҡатнашты.

Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов, осрашыусылар алдында сығыш яһап, форумдың ябай ваҡиға булмауын билдәләне.

– Бер нисә быуат элек беҙҙең төбәктең ерле халҡы ислам динен ҡабул иткән, – тине ул. – 200 йылдан ашыу Өфө Рәсәйҙең ислам үҙәге булып тора. Ҡалабыҙҙа Рәсәй Мосолмандарының үҙәк диниә назараты урынлашҡан, ул илдең ижтимағи-сәйәси тормошонда ҙур роль уйнай. Рәсәй Федерацияһы Президенты илебеҙҙәге был рухиәт институтына ҙур әһәмиәт бирә. Беҙҙең республикала йәшәгән 130 милләт вәкилдәре – бөтә төп традицион диндәрҙе тотоусылар. Башҡортостан Республикаһы татыу, матур йәшәү өлгөләренең береһе булып тора.

**Ижад кисәләре**

Баш ҡалабыҙҙың «Нефтсе» мәҙәниәт һарайында Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың һайланма әҫәрҙәренең V томы сығыуы уңайынан авторҙың ижад кисәһе үтте.

Зәйнәб Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте директоры Зөфәр Тимербулатов һүҙ алып, Рауил Төхвәт улына яңы китабын бүләк итте. Күренекле артистар Фәрит Бикбулатов, Редик Фәсхетдинов, Минниәхмәт Ғәйнетдинов, Азат Айытҡолов, Йәмил Әбделмәнов, Рауилә Мәсәлимова, Римма Амангилдина, Юнир Һағынбаев, Баязит Байназаров, Гөлшат Ғайсина, Фирғәт Ғарипов сағыу концерт күрһәтте. Шағирҙың ике туған ҡустыһы, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Күмертау ҡалаһының үҙәк дауаханаһы хирургы Ришат Вахитов башҡарыуында ла йырҙар яңғыраны. Сәхнәнән «Илемдә илемде һағынам» тигән фильм күрһәтелде, унда Рауил Бикбаев Шәйехзада Бабичҡа, Рәми Ғариповҡа, Мостай Кәримгә, атаһы менән әсәһенә арналған шиғырҙарын уҡыны.

Кисәлә китап сауҙаһы, автограф биреү, матбуғатҡа яҙылыу ойошторолдо. Ижад кисәһен башынан аҙағына тиклем халыҡ шағиры үҙе алып барҙы.

* * *

Учалы музыка училищеһында Мәүлит Ямалетдиндың ижади эшмәкәрлегенә 40 йыл тулыуға арналған әҙәби-музыкаль кисә ойошторолдо. Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Риф Тойғонов, Башҡортостан Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы, профессор Ишмөхәмәт Ғәләүетдинов, һәүәҫкәр композиторҙар – Белореттан Мөхәррәм Сәлимов менән Баймаҡтан Римма

Ғәлина, шағирәләр – Белореттан Әнисә Аҫылғужина, Әбйәлилдән Зөһрә Кашапова, Фәниҙә Биктимерова, Учалынан Светлана Вахитова (уларҙың һүҙҙәренә көйөн М. Ямалетдин яҙған йырҙар яңғыраны), шулай уҡ ҡала хакимиәте һәм йәмәғәтселек вәкилдәре ҡурайсы, йырауысы, шағир һәм һәүәҫкәр композитор Мәүлит Ямалетдиндың күп яҡлы талантын ихлас тәбрикләне.

* * *

БР Яҙыусылар союзы идараһының тамаша залында шағирә, йәмәғәт эшмәкәре Гүзәл Ситдиҡованың 60 йәшенә арналған ижад кисәһе уҙҙы. Юбилярҙы ижадташ дуҫтары: Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты Ф. Туғыҙбаева, Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге әҙәби премия лауреаты Г. Юнысова, шағирәләр Т. Юлдашева, Ф. Ғөбәйҙуллина, тәржемәсе Г. Хамматова, яҙыусы Р. Низамов, шулай уҡ йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре ҡотланы.

***

Күмертау ҡалаһында Рамаҙан Өмөтбаев, Жәлил Кейекбаев исемендәге әҙәби премиялар лауреаты Лира Әхмәт – Яҡшыбаева һәм шағирә Мәрйәм Күсмәева менән осрашыуҙар булды.

Үҙәк китапханала (директоры – Әлфиә Шәмиғолова) милли әҙәбиәт бүлеге мөдире Гөлназ Иркәбаева залдағыларҙы ҡунаҡтарҙың тормош һәм ижад юлы менән таныштырҙы. Лира Яҡшыбаеваның әүлиәләр тураһындағы яҙмаларын халыҡ яратып уҡый, шуға ла әңгәмә күберәк ошо китаптар тирәһендә барҙы. Үҙ фекерҙәрен яҙыусылар Кинйәғәли Абдуллин, Закир Әҡбәров, БР атҡаҙанған уҡытыусыһы Нурия Хәлилова, педагогик хеҙмәт ветераны Рәбиға Тунасовалар әйтеп үтте. Ә Мәрйәм Күсмәева көн ҡаҙағына һуҡҡан шиғырҙарын уҡыны. Осрашыу аҙағында әҙиптәр китаптарын бүләк итте, автографтар таратты.

**Йәш әҙиптәр семинары**

Башҡортостан Яҙыусылар союзы Балтаста йәш әҙиптәр семинары уҙғарҙы. Аида Хәйретдинованың повестары һәм хикәйәләре, Римма Ҡаһарман-Вәлиеваның хикәйәләре, нәҫерҙәре, хеҙмәт ветераны Ғәбделсамат Ғатиндың уймаҡ мәҡәләре (өс автор ҙа Балтас районынан), Тәтешленән Миләүшә Гәрәеваның, Борайҙан Әлиә Хәйруллинаның шиғырҙары тикшерелде. Фекер алышыуҙа Яҙыусылар союзының татар телле яҙыусылары берләшмәһе рәйесе Марис Нәзиров, өлкән әҙәби консультант Рәшит Низамов, Яңауыл яҙыусылар ойошмаһы етәксеһе Фәрит Суфияров, сатира оҫтаһы Мансаф Ғиләжев, Яҙыусылар союзының проза һәм публицистика секцияһы рәйесе Сабир Шәрипов ҡатнашты. Камиллаштырылғандан һуң, ҡулъяҙмалар «Китап» нәшриәтенә тәҡдим ителәсәк.

Семинарға килгән әҙиптәр йәш ҡәләмдәштәре менән берлектә район гәзите редакцияһында, 1-се урта мәктәптә әҙәби осрашыуҙар уҙғарҙы. Сараларҙа район хакимиәте башлығы урынбаҫары Фирҙәүес Рәхимов сығыш яһаны.

* * *

Прозаик Сабир Шәрипов менән шағир, әҙәби тәнҡитсе Фәнил Күзбәков Саҡмағош (мәғариф бүлеге методисы В.В. Дәүләтова), Баҡалы (мәғариф бүлеге етәксеһе Л.Р. Ғәлиева), Бүздәк (мәғариф бүлеге етәксеһе Р.К. Саҡаев) райондарында, шулай уҡ Ҡатай (башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Н.Ә. Ситдиҡова), Ҡаңны-Төркәй ауылы мәктәптәрендә (директоры Р.Ш. Байымов) уҡыусылар, уҡытыусылар, китапхана, почта хеҙмәткәрҙәре, әҙәбиәт һөйөүселәр менән осрашыуҙар үткәрҙе. Көн тәртибендә «Ағиҙел» журналына яҙылыу мәсьәләһе булһа ла, күҙгә-күҙ ҡарап, ихлас фекер алышыуҙар әҙәбиәт, мәҙәниәт, тел проблемаларына барып тоташты. Һөйләшеүҙәр мәлендә һорауҙарға яуаптар бирелде, баҫманы уҡымлыраҡ итеү йәһәтенән төплө кәңәштәр әйтелде.

Туймазы ҡалаһындағы (гимназия директоры А.Ф. Әхмәтова) осрашыуҙа «Ағиҙел»селәр менән бергә «Киске Өфө» гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева менән уның урынбаҫары Әхмәр Үтәбай ҙа ҡатнашты. Сараларҙа фәһемле иҫтәлектәр, хикәйәләр, шиғырҙар тыңланды.

* * *

«Бельские просторы» журналы менән БР Яҙыусылар союзы берлектә үткәргән шиғри тәржемә буйынса IV республика конкурсына йомғаҡ яһалды. Һуңғы бәйге Шәйехзада Бабичтың «Бер минут» тип аталған фәлсәфәүи шиғырын руссаға тәржемә итеүгә арналғайны. Еңеүселәрҙе тәбрикләү «Урал» картиналар галереяһында үтте. Һигеҙ финалист араһынан иң уңышлылары тип Кристина Андрианова менән Любовь Колоколова тәржемәләре табылды.

* * *

Конгресс-холлда халыҡ әкиәттәрен башҡорт телендә башҡарыусы балаларҙың III төбәк-ара конкурсы еңеүселәрен бүләкләү тантанаһы үтте. Әкиәт һөйләү бәйгеһендә 1 – 7-се синыф уҡыусылары Башҡортостан райондарынан ғына түгел, Силәбе, Ырымбур өлкәләренән дә ҡатнашты. Һайлап алыу турында 70 баланың 27-һе финалға үткәйне.

Жюри рәйесе, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ профессоры Әхмәт Сөләймәнов, «Алтынай» студияһы директоры Әлмира Ҡыуатова, Башҡортостандың халыҡ артисы Әхәт Мортазин, балалар яҙыусыһы Рәсимә Ураҡсина, БР Мәғариф министрлығының милли мәғариф бүлеге етәксеһе Рәйсә Күзбәкова, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор бүлеге мөдире Гөлнур Хөсәйенова әкиәт һөйөүселәрҙең талантын, тасуири һөйләү, импровизацияға һәләтен дә баһаланы.

Өсөнсө урын Борай районынан Әҙилә Шакирова менән Ғафуриҙан Элина Даниловаға бирелде. Икенсе урында – Баймаҡ районынан Ғайсар Рәхмәтуллин һәм Силәбе өлкәһе Магнитогорск ҡалаһынан Илгиз Шәйәхмәтов. Беренсе урынды Учалы районының Ураҙ ауылы лицейы уҡыусыһы Алһыу Мостафина менән Илеш районынан Сулпан Рөстәмханова бүлеште. Ә Гран-приҙы Ҡыйғы районының Ибрай ауылынан 5-се синыф уҡыусыһы Нурия Зәйнуллина менән Ҡырмыҫҡалы районының Түбәнге Төкөн ауылынан 4-се синыф уҡыусыһы Илмир Биҡҡужин яуланы.

Финалға сығыусылар дипломдар, сувенирҙар менән бүләкләнде, ә еңеүселәргә ноутбук тапшырылды. Конкурсты ойоштороусылар яҡын киләсәктә Рәсәй кимәленә сығып, ошондай бәйгене Мәскәүҙә лә үткәрергә ниәтләнә.

***

ТӨРКСОЙ ойошмаһы Төрөк Республикаһының Анкара ҡалаһындағы Гази университетында йәш шағирҙар һәм студенттар араһында төрөк телен өйрәнеү курстары асты. Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Татарстан һәм Хакасия вәкилдәре менән бергә унда М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының IV курс студенты Илдус Ҡаһарманов та белем ала. Йәш шағир филология факультетында уҡый һәм студенттарҙың «Тулҡын» гәзите мөхәррире вазифаһын башҡара.

Студенттарҙың төрлө мәҙәни сараларҙа ҡатнашырға мөмкинлеге бар. Яңыраҡ улар Науруз байрамы тантанаһын күрҙе, Кападокия, Анкара музейҙары буйлап сәйәхәт ҡылды.

**«Тамыр»ға – егерме йәш!**

Башҡортостан телевидениеһының «Тамыр» балалар каналы ойоштороуға егерме йыл тулыу уңайынан «Тамыр» менән бергә үҫәбеҙ» тамашаһы ойошторолдо. «Тамыр»ҙы байрамы менән ҡотларға Хөкүмәт Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов, БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова килде. Салауат Тәлғәт улы Президент Рөстәм Хәмитовтың Ҡотлау хатын уҡып ишеттергәс, «Тамыр»ҙың йәш быуынды тәрбиәләүҙә, башҡорт телен үҫтереүҙә, берҙәмлек, татыулыҡ, дуҫлыҡты нығытыуҙа ҙур ролен билдәләне. Проектҡа нигеҙ һалыусы Луиза Фархшатова, Мәскәү, Ҡазан, Астана ҡунаҡтары ла телеканалға йылы теләктәрен еткерҙе. Сарала «Тамыр»ҙа ҡанат нығытҡан танылған йырсылар һәм йәш таланттар сығыш яһаны. Бәләкәстәр тәмтом менән һыйланды, яратҡан әкиәт геройҙары менән фотоға төштө, йырлапбейеп ҡайтты.